З. Ғ. Ураҡсин

# БАШҠОРТ ТЕЛЕНЕҢ СИНОНИМДАР ҺҮҘЛЕГЕ

З. F. Ураҡсин

# БАШҠОРТ ТЕЛЕНЕҢ СИНОНИМДАР ҺҮҘЛЕГЕ

ӨФӨ — 1985

8. 12 (Баш)
У 49

**Т. М. Ғарипов редакцияһында**

**Ураҡсин З. Ғ.**

У 49 Башҡорт теленең синонимдар һүҙлеге. Т. М. Ғарипов редакцияһында.— Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1985 й.— 164 бит.

**Һүҙлеккә 600 синонимик ояға ҡараған 2420 һүҙ һәм фразеологик** берәмек алынды. Башта синонимик теҙемдәр килтерелә, унан һуң уларҙың дөйөм мәғәнәһе бирелә, һәр һүҙҙең айырымлыҡ һыҙаттары, стилистик төҫмөрҙәре, ҡулланылыш үҙенсәлектәре асыла. Матур әҙәбиәттән, халыҡ ижадынан, матбуғаттан алынған миҫалдар килтерелә.

Һүҙлек мәктәп уҡыусыларына, әсә теле уҡытыусыларына, журналистарға, яҙыусыларға тәғәйенләнә. Ул башҡорт теле менән ҡыҙыҡһынған бөтә кешеләр өсөн дә файҙалы ҡулланма булыр.

У $\frac{4602020000-113}{М121(03)-85}$ 104—85 8. 12 (Баш)

БИБЛИОТЕКА
Кумбахтинской средней школы
6018

© Башҡортостан китап нәшриәте, 1985 й.

## СИНОНИМДАР, УЛАРҘЫҢ ТӨП БИЛДӘЛӘРЕ ҺӘМ ТӨРҘӘРЕ

**Синоним** һүҙе грек теленән алынған, ул «исемдәш, бер исемдәте» тигән мәғәнәне аңлата. Синонимлыҡтың нигеҙендә ысынбарлыҡтағы бер үк күренештәрҙе, әйберҙәрҙе, эш-хәрәкәтте төрлө һүҙҙәр менән атау, бер үк төшөнсәне төрлөсә исемләү ята. Шулай итеп, эш-хәл һәм күренеш төрлө яҡлап асыла, тулыраҡ һүрәтләнә.

Синоним һүҙҙәр тураһындағы тәүге мәғлүмәт боронғо грек филологияһында уҡ бирелгән. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, хәҙерге тел ғилемендә уларҙың асылы төрлөсә билдәләнә. Улар бер төшөнсә генә аңлатамы әллә һәр һүҙе айырым төшөнсәгә эйәме; синонимик төркөмгә ингән һүҙҙәр бер-береһенә тулыһынса тап килергә тейешме, әллә ниндәйҙер айырма ла булырға тейешме — был мәсьәләләр һуңғы йылдарға тиклем бәхәс тыуҙыра килде.

Шулай ҙа совет тел ғилемендә 70-се йылдарҙа синонимдарға ҡарата түбәндәге фекер өҫтөнлөк алды, һүҙлек төҙөүселәр ҙә шунан сығып эш итә: синонимдар бер үк төшөнсәне аңлата, төп мәғәнәләре менән бер-береһенә тап килә йәки бик яҡын була, шул уҡ ваҡытта мәғәнә төҫмөрҙәре, стилистик, эмоциональ-экспрессив биҙәктәре, телмәрҙә ҡулланылыштары йәһәтенән айырмалары ла була [1].

Синонимик ояға ингән һүҙҙәр барыһы ла бер һүҙ төркөмөнән булырға тейеш. Әйтәйек, ҡылым менән исем йәки бәйләүес менән рәүеш һ. б. үҙ-ара синонимик мөнәсәбәттә була алмай.

Синонимдар телдең тарихи үҫешендә төрлө сәбәптәр нәтижәһендә барлыҡҡа килә, йәшәй, ваҡыты менән ҡайһы бер синонимик бәйләнештәр тарҡалып та китә.

---

[1] Словарь синонимов русского языка. Под ред. Евгеньевой А. П. т. I. Л., 1970, 10-сы бит; Розенталь Д. Э., Теленкова М. А. Словарь-справочник лингвистических терминов. Изд. 2. М. 1976, 384-се бит; Шмелев Д. М. Современный русский язык. Лексика. М., 1977, 196-сы бит һ. б.

Синонимлыҡ һүҙҙәрҙең күп мәғәнәлелеге менән туранан-тура бәйләнгән, мәғәнә үҫеше синонимдар рәтенең артыуына, ҡатмарланыуына килтерә. Ошо арҡала күп мәғәнәле бер үк һүҙ төрлө һүҙҙәр менән синонимик бәйләнешкә инә һәм төрлө ояға ҡарауы мөмкин. Мәҫәлән: *саф, таҙа* «сит нәмә ҡатышмаған» һәм *саф, эскерһеҙ, пак, таҙа* «күңеле, рухы матур»; *тейеү* һүҙе «нимәгә булһа ла тотоноу» мәғәнәһендә *ҡағылыу, ороноу* һүҙҙәре рәтенә инә, «ҡулға төшөү, өлөшкә элэгеү» мәғәнәһендә *тәтеү, һәбеү* менән синоним була; *шәп — тиҙ, күҙ асып йомғансы* һәм *шәп — яҡшы, һәйбәт, бына тигән* һ. б.

Тимәк, синонимик төркөмдәрҙе билдәләгәндә һүҙҙәрҙең бөтә мәғәнәләре иҫәпкә алынырға тейеш.

Синонимик рәттәр һәр телдең үҙенең эске мөмкинлектәре (мәғәнәләр үҫеше, һүҙьяһалыш һ. б.) иҫәбенә лә, сит телдәрҙән алынған һүҙҙәр менән дә тулылана бара. Хәҙерге башҡорт телендә туған телебеҙ һүҙҙәре менән бер рәттән ғәрәп һәм фарсы, рус һәм Көнбайыш Европа телдәренән алынған һүҙҙәр синонимик оялар төҙөй. Мәҫәлән: *алдынғы — прогрессив; танылған — билдәле — популяр; шиғриәт — поэзия; рәсми — официаль, ярлы — фәҡир, дөрөҫ — ысын — хаҡ* һ. б.

Мәғәнә бәйләнештәре йәһәтенән синонимдарға оҡшаш һүҙҙәр ҙә бар, ләкин төшөнсәләре төрлө булыу сәбәпле бындай һүҙҙәрҙе синоним итеп ҡарап булмай. Улар түбәндәгеләр:

1. Төрлө ижтимағи ҡоролошҡа, дәүергә ҡараған, функциялары яғынан яҡын һүҙҙәр: *милиция — полиция; һалдат — рекрут, уҡыусы — шәкерт* һ. б.

2. Бер үк күренештең, предметтың төрлө диалекттарҙағы, һөйләштәрҙәге атамалары: *әсәй — инәй — әнәй; картуф — ералма — йәбелек.*

3. Төркөм атамаһы менән шул төркөмгә ҡараған айырым һүҙҙәр: *ҡош — сәпсек, ҡарға* һ. б.; *балыҡ — шамбы, суртан, сабаҡ* һ. б.

4. Хәрәкәттең, эш-хәлдең төрлө өлөшөн белдергән һүҙҙәр: *ҡарау — күреү, тоҡаныу — яныу* һ. б.

Синонимдарҙың бер төрө төп мәғәнәһе менән бер-берейһенә тап килә, тиң була һәм һүҙбәйләнеш йәки һөйләм эсендә берен бере алыштыра ала. Бындай хәл күберәк исемдәрҙә, бигерәк тә терминдарҙа күҙәтелә. Мәҫәлән: *ҡотоп — полюс, имтихан — экзамен, йыһан — ғаләм* һ. б. Бындай һүҙҙәрҙе тел ғилемендә **абсолют синонимдар** йәки **дублеттар** тип йөрөтәләр. Ләкин телдең үҫеш, йәшәйеш процесында бындай һүҙҙәрҙең береһе пассив фондҡа күсә һәм бөтөнләй ҡулланылмай башлай, йә берәй мәғәнә төҫмөрө, стилистик биҙәк алып, ҡулланылышта айырыла. Әйтәйек, бер үк ҡошҡа *былбыл* һәм *һандуғас* атамаһын биреү тел законына ярашһыҙ кеүек, ләкин был мәғәнәләш һүҙҙәр стилистик йәһәттән айырылалар: *былбыл* — шиғри телгә хас, ғәҙәти һөйләү телендә коштоң үҙен *һандуғас* тип йөрөтәләр.

Шиғриәттә быларҙың икеһен бергә ҡулланыу осрактары ла бар. Бының менән бер үк һүҙҙе ҡабатлауҙан котолоуға ирешелә. Мәҫәлән:

Йөрәгемдә янған һағыштарҙы
Һиҙҙеңме әллә, моңло *һандуғас?*
Мин йырламай, *былбыл,* кем йырлаһын,
Йөрәк ялҡындарым ҡабынғас.

(Ш. Бабич.)

Тимәк, телдең тарихи үҫеше, үҙгәреше һүҙҙәр араһында хасил булып торған абсолют синонимлыҡты кәметә, юҡка сығара бара.

Синонимдарҙың төп функцияһы — аныҡлау, дөрөҫләү, тип яҙҙы Р. А. Будагов, һәм улар араһында булған нескә генә, саҡ-саҡ һиҙелерлек айырымлыҡтарҙы табыу, билдәләү кәрәклеген әйтте[1].

Синонимлыҡ күренеше телдең һүҙ һәм фразеологик берәмектәр системаһында, грамматик формаларында, синтаксик бәйләнештәрендә сағыла, йәғни ул телдең бөтә ҡоролошона, кимәлдәренә хас. Ошонан сығып, уларҙы төп өс төркөмгә бүләләр: л е к с и к-ф р а з е о л о г и к синонимдар, м о р ф о л о г и к синонимдар һәм с и н т а к с и к синонимдар. Һуңғы икеһе бер-береһенә яҡын тора, сөнки грамматик мәғәнә йыш ҡына морфологик һәм синтаксик саралар ҙың ҡатнашлығы менән белдерелә.

**Лексик-фразеологик синонимдар** үҙҙәре бер ояға ҡараған һүҙҙәрҙең, фразеологик берәмектәрҙең айырымлыҡ билдәләре буйынса йәнә төрҙәргә бүленә.

1. М ә ғ ә н ә т ө ҫ м ө р ҙ ә р е м е н ә н а й ы р ы м л а н ғ а н (йәки идеографик) с и н о н и м д а р. Һүҙҙәге ҡайһы бер семантик һыҙаттар үҙ аллы мәғәнә дәрәжәһенә үк күтәрелмәй, шулай ҙа нескә генә айырымлыҡты ла сағылдыра ала. Мәғәнә төҫмөрҙәре бик күп, уларҙы классификациялауы ла ауыр. Синонимдарға ҡарата шундай төркөмсәләр күрһәтеп була.

1) Мәғәнәнең тарыраҡ йәки киңерәк булыуы: *һауығыу, шәбәйеү, төҙәлеү, рәтләнеү, йүнәлеү, таҙарыу, арыуланыу.* Тәүге өс һүҙ киңерәк мәғәнәлә ҡулланыла. Ә *терелеү* бик ҡаты ауырыуҙан ҡотолоуҙы, саҡ-саҡ үлмәй ҡалыуҙы белдерә. *Рәтләнеү, арыуланыу* — бер аҙ нығыныу. Миҫалдар: Һин *һауыҡһаң* ине. Дуҫһыҙ ауыр, әҙләп килдем эсем бошҡанға (М. Кәрим). Ә *төҙәлеп,* яңынан фронтҡа киткәс тә, улар мине онотмайҙар, хаттар яҙалар, мин дә яуап яҙып торам (Һ. Дәүләтшина). Үҙем *арыуландым.* Тик хәл генә юҡ (Һ. Дәүләтшина).

Теге йәки был синонимик иштең ниндәй һүҙҙәр солғанышында ҡулланылышы ла уларҙың мәғәнә йөкмәткеһенән килә. Мәҫәлән:

---

[1] Б у д а г о в Р. А. Введение в науку о языке. М., 1955, 52-се бит.

*эҫе, ҡайнар,* төрлө шыйыҡлыҡҡа ҡарата икеһен дә ҡулланып була: *эҫе һыу, ҡайнар һыу,* ләкин *эҫе көн,* ә *ҡайнар көн* түгел; *ҡайнар мөхәббәт,* ә *эҫе мөхәббәт* түгел һ. б.

Йәнә бер миҫал: *матур* — кешегә, тәбиғәт күренештәренә ҡарата ҡулланыла (мәғәнәһе киң), *сибәр* — кешенең тышҡы күренешен белдерә, эш-хәрәкәткә, ҡылыҡҡа ҡарата ҡулланылмай: *матур атлай,* ләкин «сибәр атлай» мөмкин түгел.

2) Мәғәнәнең дөйөмөрәк йәки конкретыраҡ булыуы. Мәҫәлән: *һуғыу* дөйөм мәғәнәле, *тондороу* — ныҡ һуғыу, *сәпәү* — ус менән һуғыу һ. б.

3) Һүҙ мәғәнәһендә бирелгән билдәнең, сифаттың, эш-хәрәкәттең артығыраҡ йәки кәмерәк дәрәжәлә сағылған булыуы. Был бигерәк тә ҡылым-синонимдарҙа нығыраҡ күренә: *йүгереү — сабыу, елеү; аптырау — таң ҡалыу; ашығыу — өтәләнеү* һ. б.

2. С т и л и с т и к  с и н о н и м д а р, йәғни стилистик биҙәктәре һәм ошоға ярашлы рәүештә төрлө телмәрҙә ҡулланылыуҙары менән айырылған мәғәнәләш һүҙҙәр. Ошо йәһәттән ҡарағанда, синоним һүҙҙәр стилгә ҡарата битараф булыу йәки ниндәйҙер өҫтәлмә һыҙаты булыуы менән айырылыуы мөмкин. Ҡитап теленә, ябай һөйләү теленә, шиғри телгә генә ҡараған һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр һәм формалар була. Мәҫәлән: *ашау* — стиль йәһәтенән битараф һүҙ, *туҡланыу, аҙыҡланыу* китап теленә тарта, *тығыныу* — ябай һөйләү теленә ҡарай; *заман, замана* — шиғри телмәргә, *мал, саҡ* — һөйләү теленә хас, *ваҡыт* — битараф була һ. б.

Стилистик биҙәктәр ваҡыт төшөнсәһе менән дә бәйле, йәғни ҡайһы бер һүҙҙәр хәҙерге әҙәби тел күҙлегенән иҫкергән булып күренһә лә, айырым телмәрҙә ҡулланыла ала, шуға ундай һүҙҙәрҙе әҙәби телдән төшөп ҡалғанға һанарға ярамай. Әйтәйек: *байраҡ, флаг, әләм, тыу.* Был рәттәге һуңғы ике һүҙ иҫкергән, шулай ҙа әҙәбиәттә стиль төрләндереү маҡсатында ҡулланыла: Донъя ҡыйығында ҡыҙыл *әләм* илем данын күккә күтәрә (В. Нафиков). *Уҡытыусы — мөғәллим; врач — табиб, ҡултамға — имза* синонимик рәттәрендәге икенсе һүҙҙәр ҙә иҫкергән, ләкин айырым осраҡта улар ҙа телмәрҙә ҡулланыла.

3. Э м о ц и о н а л ь-э к с п р е с с и в  с и н о н и м д а р ниндәйҙер тойғо биҙәге булыуы менән айырылалар, былдай биҙәктәр төп мәғәнәгә үрелгән була, уны көсәйтә. Мәҫәлән: *ашау — тығыныу* (бик күп ашау, шул уҡ ваҡытта был һүҙҙә кире мөнәсәбәт, хуп күрмәү тойғоһо ла сағыла); *йөҙ, бит — томошоҡ* (кире мөнәсәбәт). Синоним һүҙҙәрҙә еңелсә һәм әсе көлөү, шаяртыу, мыҫҡыллау һ. б. тойғо биҙәктәре белдерелеүе мөмкин: *үсегеү — ҡылтайыу, кәзәһе төкөү* (былары еңелсә көлөү тойғоһон бирә). Тимәк, синонимдарҙа төрлө сифаттар буйынса һүҙҙәр бер-береһенә ҡапма-ҡаршы ҡуйыла һәм шул юл менән уларҙың айырымлыҡ билдәләре асыла.

Һаналған айырымлыҡтарҙың барыһы ла сағылған синоним парҙарҙа бар. Мәҫәлән: *матур, һылыу, күркәм, һомғол, нәфис, нәзә-*

*кәтле, зифа, гүзәл, карап туйғыһыҙ, урта бармак кеүек.* Был рәттәге *матур* һүҙе иң киң кулланылышлы, калғандарының ниндәй бул- һа ла мәғәнә биҙәге, кулланылыш үҙенсәлеге бар. *Һылыу* тышкы матурлыкты ғына билдәләй: *һылыу кыҙ, һылыу егет, һылыу кайын* тип була, ә *һылыу күңелле* тип булмай. Бында *нәфис, матур, гүзәл* һүҙҙәре генә килә ала. *Нәфис,* ғөмүмән, нескәлеккә баҫым яһай, *гүзәл* — матурлыктың иң юғары дәрәжәһен белдерә, *зифа, һомғол* кәүҙә матурлығына, төҙөклөккә, купшылыкка баҫым яһай.

Шуның өсөн дә был төркөмләүҙе ниндәйҙер дәрәжәлә шартлы һанарға кәрәк, сөнки бөтә синонимдар ҙа саф семантик йәки стилистик төргә генә карамай.

4. Контекстуаль синонимдар — айырым телмәрҙә генә үҙ-ара синонимик мөнәсәбәткә инә алған һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр. Мәҫәлән, *эт кеше* тигәндә *эт* һүҙенең «әрһеҙ, бик нықымыш» мәғәнәһен башка һүҙҙәргә лексик синоним итеп биреп булмай, ул ошо һүҙҙең контекстуаль мәғәнәһе генә булып кала. *Етен сәс* тигән эпитетты ла *сал сәс* һүҙенә лексик синоним тип һанап булмай, был да контекст эсендәге синоним дәрәжәһендә кала. *Унда эш кайғыһы юк.* Бындағы *кайғы* һүҙенә *теләк* һүҙе генә контекстуаль синоним була ала.

**Грамматик синонимдар** бер үк грамматик мәғәнәне төрлө ялғауҙар, һүҙбәйләнештәр һәм һөйләмдәр менән аңлатыуҙан ғибарәт, улар бер-береһенән үҙҙәренең төҙөлөшө, формалары һәм айырым биҙәктәре менән айырыла. Был төр телдең грамматик төҙөлөшөнөң бөтә өлөштәрендә лә сағылыш алған. Һүҙлеккә лексик һәм фразеологик синонимдар ғына алынғанға, бында улар хакында һүҙ йөрөтөп тороуҙың кәрәге булмаҫ кеүек.

Лексик синонимдар менән грамматик синонимдар араһында торған тамырҙаш һүҙҙәр хакында ғына бер аҙ фекер йөрөтөү тейештер, сөнки был төр синонимдар һүҙлектә урын аласак. Һүҙьяһалыш — ғөмүмән, телдең синонимик байлығын арттыра торған ысул. Бындай синонимдар бер үк тамырға йәки нигеҙгә төрлө ялғау кушылыуҙан хасил була һәм үҙенә бер төҫмөр алып китә. Мәҫәлән: *күкһел — күгелйем* (һуңғыһында сифат дәрәжәһе кәмерәк һымак); *ваксыл — вакһыу; телдәр — телсән, купыр — купым, һаҙмат— һаҙамык* һ. б.

Синонимдар — халык теленең һәм әҙәби телдең байлығы. Улар фекерҙең бөтә нескәлектәрен биреү, ысынбарлык күренештәрен, хәл-вакиғаларҙы, мөнәсәбәттәрҙе тулылығы менән, төрлө яклап һүрәтләү өсөн кулланылалар.

***

Башкорт теленең синонимик байлығы бөтә тулылығы менән өйрәнелеп бөтмәгән әле. Был өлкәлә айырым мәкәләләр һәм дәреслектәрҙә бирелгән бүлектәрҙән тыш тикшеренеүҙәр үткәрелгәне юк. Синонимдарҙың тәүге кыҫкаса һүҙлеге 1966 йылда баҫылып сыккай-

ны [1]. Ул һүҙлеккә 500-гә яҡын ояға ҡараған 2 мең синоним алынған. Һүҙҙәрҙе туплау, синонимик ояларҙы теүәлләү, дөрөҫләү эше дауам ителә килде, шуның өсөн дә был баҫма тәүгеһенән күләме һәм эшләнеше яғынан байтаҡ айырыла.

Һүҙлекте төҙөү осоронда рус һәм башҡа телдәр буйынса тупланған тәжрибә файҙаланылды, был өлкәлә бигерәк тә рус телселәренең уңышы ҙур. Һуңғы ике тиҫтә йыл эсендә генә рус теле синонимдарының төрлө күләмдәге өс һүҙлеге донъя күрҙе [2].

Илебеҙҙәге төрки телдәр араһында тәүге синонимик һүҙлектәр ҡаҙаҡ, татар һәм үзбәк телдәре буйынса баҫылып сыҡты [3]. Ләкин уларҙы күләме яғынан тулы, эшләнеше буйынса камил тип һанап булмай, сөнки был лексикографик ҡулланмалар милли телдәрҙең аңлатмалы һүҙлектәренән алда төҙөлдөләр һәм, нигеҙҙә, мәктәп уҡыусылары өсөн тәғәйенләнгәндәр ине. 60-сы йылдар уртаһында күп кенә төрки телдәрҙең (шул иҫәптән башҡорт теленең дә) аңлатмалы һүҙлектәре эшләнә башланы, дөйөм картотекалар тупланды. Аңлатмалы һүҙлектәр баҫылып сыҡҡас, синонимдарҙың тулы һүҙлектәрен төҙөү мөмкинлеге тыуасаҡ.

Һүҙлек өсөн материал йыйыуға автор 60-сы йылдар башында уҡ тотонғайны инде, был картотека әкренләп киңәйә, эшкәртелә торҙо һәм һүҙлектең яңы баҫмаһын әҙерләүгә мөмкинлек бирҙе.

---

[1] Ураксин З. Ғ. Башҡорт теленең синонимдар һүҙлеге. Т. М. Ғарипов редакцияһында. Өфө, 1966, 270 бит.

[2] Ҡлюева В. Н. Ҡраткий словарь синонимов русского языка. М., 1956; 2-е изд., М., 1961; Александрова З. Е. Словарь синонимов русского языка. Под ред. Л. А. Чешко. М., 1969; Словарь синонимов русского языка. Под ред. А. П. Евгеньевой, т. I, Л., 1970; т. II., Л., 1971.

[3] Болғанбаев Ә. Ҡазаҡ тилиндеги синонимдар сөздиги. Алматы, 1962; Ханбикова Ш. С. Синонимнар сүзлеге. Ҡазан, 1962; Хожиев А. Үзбек тили синонимларининг ҡисҡача луғати. Тошкент, 1963.

## ҺҮҘЛЕКТЕҢ ТӨҘӨЛӨШӨ

Һүҙлектең составын билдәләү, йәғни ниндәй һүҙҙәрҙе алыу-алмауҙы хәл итеү — төп мәсьәләләрҙең береһе. Алда әйтелгәнсә, һүҙлеккә бер йәки бер нисә мәғәнәлә тап килгән бөтә һүҙ төркөмдәре, улар менән мәғәнәләш фразеологик берәмектәр алына.

Һүҙлектең төп өлөшөн хәҙерге башҡорт әҙәби теленең лексикаһы тәшкил итә. Һүҙҙәрҙең һөйләштәрҙәге варианттары, ныҡ иҫкергән һәм Октябрь революцияһынан һуңғы әҙәбиәттә ҡулланылмаған һүҙҙәр, фәнни-техник терминдар ситтә ҡалдырылды. Уларҙың стиль төрләндереү маҡсатында ҡулланылғандары йәки ниндәйҙер бер мәғәнә төҫмөрө булғандары ғына айырым билдә менән алынды. Мәҫәлән: *байраҡ, ғәләм, тыу; тотҡон, әсир* һ. б.

Икенсе һүҙҙәр менән яңы синонимик бәйләнешкә ингән һәм өҫтәлмә мәғәнә төҫмөрө, стилистик биҙәге булған яһалма һүҙҙәр айырым оя итеп бирелә. Мәҫәлән: *исем, ат; атау, исемләү, исем ҡушыу; ҡайғы, хәсрәт, көйөк...; ҡайғырыу, хәсрәтләнеү, яныу, көйөү, әсенеү* һ. б. Әгәр яһалма һүҙҙәрҙә тамыр һүҙҙәрҙең синонимик мәғәнәһе генә ҡабатланһа, ундайҙар һүҙлек статьяһының аҙағында ғына теҙеп сығыла: *ашығыу, ҡабаланыу, өтәләнеү...— ашығыс, ҡабалан, өтәлән* һ. б.

Мәғәнәләш һүҙҙәр мәғәнәләре буйынса бер ояға берләшә. Синонимдар ояһы (йәки теҙеме) баш һүҙ (уны **доминанта** тип тә йөрөтәләр) менән асыла. Синонимик рәтте ойошторыусы һүҙ ошо оялағы башҡа һүҙҙәргә ҡарағанда дөйөмөрәк мәғәнәле, ҡулланылышы киң, стиль йәһәтенән битараф булырға тейеш. Әйтәйек, түбәндәге рәттә был талаптарға беренсе һүҙ нығыраҡ яуап бирә: **йәшәү**, тороу, көн итеү, көн күреү, ғүмер һөрөү...; **өшөү**, ҡатыу, шыҡырайыу, теш тешкә теймәү һ. б.

Фразеологик берәмектәрҙән генә торған рәттә уларҙың иң киң ҡулланылышлыһы башта ҡуйыла: **ел ҡыуыу**, эт һуғарыу, ел йотоу, йөн тибеү һ. б.

Доминанта һайлау һүҙлек төҙөүҙе еңеллләштереү, ояларҙы алфа-

вит тәртибендә урынлаштырыу өсөн генә кәрәк, күп осраҡта ул шартлы рәүештә лә алыныуы мөмкин.

Синонимик рәттең эсендәге һүҙҙәр ҙә үҙенә бер тәртип менән урынлаштырыла: мәғәнәһе яғынан доминантаға иң яҡын булған һүҙҙәр уға эргәләш тора, әҙәби телгә ҡараған һүҙҙәр ҙә диалект һүҙҙәренән алдараҡ бирелә, улар артынан күсмә мәғәнәле һүҙҙәр, төрлө стилистик биҙәкле, тар ҡулланылышлы синонимдар, шунан фразеологик берәмектәр урын ала.

Башҡорт телендә синонимик теҙемдәге һүҙҙәр һаны төрлөсә, иң аҙы, әлбиттә, ике һүҙҙән тора, тиҫтәнән артып киткәндәре лә бар.

Стилистик биҙәктәр баш һүҙҙә үк күрһәтелә: **ҡурҡыу, шөрләү, бөжләү** *һөйл.*, **шөр ебәреү** *һөйл.* һ. б.; **яҙмыш, тәҡдир** *иҫк.*

Бынан һуң синонимик рәтте берләштергән уртаҡ мәғәнә асыла, оя һайын нисә дөйөм мәғәнә булһа, улар барыһы ла цифрҙар менән айырым күрһәтелә. Мәҫәлән: **өйрәнеү, күнегеү**. 1) Эш-ҡылыҡты күп ҡабатлап, ғәҙәткә индереү. *Иртә тороп ө й р ә н е ү. Эшкә к ү н е г е ү* һ. б. 2) Нимәгәлер ылығыу, эйәләшеп, яраҡлашып китеү. *Ҡала тормошона ө й р ә н е ү. Әҫәгә к ү н е г е ү.*

**Ҡатышыу, ҡатнашыу, аралашыу**. 1) Бергә ҡушылыу, буталыу. 2) *күсм.* Яҡын дуҫ булып, бер-береңә барышып йәшәү.

Күп мәғәнәле синонимик рәттәрҙә айырым мәғәнәләргә ҡарата яңы синоним һүҙҙәрҙең дә өҫтәлеүе мөмкин. Бындай осраҡта синонимик оя ошо һүҙҙәр иҫәбенә киңәйтелеп, цифрҙар менән бирелә һәм аңлатыла.

1. **Оло, өлкән, ҙур**. Кемдәндер йәше яғынан артыҡ. *О л о ағай. Ул минән ө л к ә н.*

2. **Оло, өлкән, ҡарт**. Күп йәшәгән, олоғайған. *О л о кеше. Ө л к ә н йәштәге бабай. Ҡ а р т әбей.*

3. **Оло, өлкән, ҙур, дәрәжәле**. Тормошта тотҡан урыны, әһәмиәте буйынса юғары. *О л о ҡунаҡ. Ҙ у р түрә. Ө л к ә н эш.*

Һүҙ статьяһының эсендә һәр синонимдың мәғәнә йәһәтенән айырмаһы, тойғо биҙәктәре, телмәрҙә ҡулланылыш үҙенсәлектәре, һүҙ яһауҙа ҡатнашлығы тасуирлана, айырым осраҡтарҙа һүҙбәйләнештәр ҙә бирелә. Был белешмәләр синонимдар һүҙлеге өсөн мөһим, сөнки улар мәғәнәләш һүҙҙәрҙең нескә генә айырмаларын аса, уларҙы дөрөҫ ҡулланырға өйрәтә. Мәҫәлән: **бәреү, ырғытыу, ташлау, сөйөү, бырғау, бырғытыу, быраҡтырыу, атыу, елгәреү** *күсм.*

Ҡулдағы нәмәне көс менән үҙеңдән ситкә ебәреү. **Бәреү** — бер йүнәлештә тоҫҡап алыҫҡа ырғытыу, киң ҡулланыла. **Ырғытыу** — ауыр, тос нәмәгә ҡарата әйтелә. **Ташлау** — яҡынғараҡ ырғытыу. **Сөйөү** — һауаға ҡарап ташлау, өҫкә ҡарай осортоу. **Бырғау** — ауыр нәмәне көс менән ташлау. **Бырғытыу, быраҡтырыу** — асыу менән бәреп ебәреү. **Атыу** — көс менән үргә ҡаратып ташлау. **Елгәреү** — ҙур көс менән алып ташлау.

Ҡайһы бер осраҡтарҙа аңлатманан һуң йәйә эсендә һүҙҙең ҡулланылыш үҙенсәлеген, урынын күрһәтергә тура килә. Был аңлатманың ҡыҫҡалығы, ыҡсымлығы өсөн эшләнә: **алсайыу**, **үрәпсеү** — артҡы аяҡтарға баҫып, үрә тороу (хайуандар, күберәк ат); **ишәйеү**, **күмәгәйеү** — үрсеү нәтижәһендә артыу (йән эйәләренә ҡарата). Бындай өҫтәмәләр урыны менән ике нөктә аша ла бирелә. Мәҫәлән: **алсаҡ**, **асыҡ** киңерәк мәғәнәле: холоҡ-ҡылыҡҡа ҡарата ла әйтелә һ. б.

Төрлө һүҙ төркөмдәре функцияһын берҙәй кимәлдә башҡара алған йәки мәғәнәләрендә ниндәйҙер төҫмөр айырмаһы булған синонимдар айырым күрһәтелә, уларҙың мәғәнәләре алдынан һүҙ төркөмөнөң шартлы тамғаһы ҡуйыла. Мәҫәлән: **анһат**, **еңел**. 1. *с*. Үтәүе, башҡарыуы ауыр булмаған; 2. *р*. Ҙур көс һалмай, ҡыйынлыҡ кисермәй (башҡарыу, эшләү).

Бындай күренеш, нигеҙҙә, сифаттар менән рәүештәрҙә, исемдәр, ҡылымдар менән исемдәрҙә, рәүештәр менән бәйләүестәрҙә, ымлыҡтарҙа күҙәтелә.

Күп осраҡта теге йәки был һүҙ төркөмө икенсе һүҙ төркөмөнөң функцияһын ғына башҡара, ундай синонимдар һүҙбәйләнештәрҙә йәки һөйләм эсендә миҫал рәүешендә генә күрһәтелә: *анығ фекер, анығ әйтеү, асыҡ ишетелеү*.

Башҡарылыш формалары менән айырылған синоним ҡылымдарҙың килеш һорауы күрһәтелә: **атау**, **исемләү** *кемде*, **исем ҡушыу** *кемгә;* **атланыу** *нимәгә*, **менеү** *нимә, нимәне* һ. б.

Күренеүенсә, аңлатмалар ниндәйҙер дәрәжәлә ирекле, был синонимдар һүҙлегенең үҙенсәлегенән килә. Бында ояның дөйөм мәғәнәһен билдәләү менән бергә, һәр һүҙҙең мәғәнә нескәлеген мөмкин тиклем тулы асыу маҡсаты ҡуйыла.

Аңлатмаларҙан һуң миҫалдар бирелә. Һөйләмдәр нигеҙҙә билдәле башҡорт яҙыусыларының әҫәрҙәренән, халыҡ ижады үрнәктәренән, газета-журналдарҙан алынды. Миҫалдың аҙағында авторҙың фамилияһы йәки сығанаҡтың исеме, халыҡ ижады әҫәрҙәренең жанр төрө күрһәтелә. Иллюстратив материал биреү һүҙлек өсөн бик мөһим, һөйләм эсендә һүҙҙең мәғәнәһе, төҫмөрҙәре асыҡ күренә, ниндәй һүҙҙәр менән бәйләнешкә инеүе күҙ алдына баҫа.

Һүҙлектең аҙағында китапҡа алынған бөтә синонимдар алфавит тәртибендә бирелә. Баш һүҙҙәр ҡалын хәрефтәр менән, ә уларҙың оя эсендәге синонимдары шул баш һүҙгә тоҫҡала. Тимәк, һүҙлек эсендәге теге йәки был һүҙҙе табыу өсөн, уны баш һүҙ (доминанта) буйынса эҙләргә кәрәк.

Синонимдар һүҙлеге — аңлатмалы һүҙлектәрҙең бер төрө, ләкин бында һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен тулыһынса асыу маҡсаты ҡуйылмай, мәғәнәләш һүҙҙәрҙең бер-береһенә мөнәсәбәте, оҡшашлыҡтары һәм айырмалары ғына асыла. Телдәге бөтә һүҙҙәргә лә синоним иштәр була икән, тип аңларға ярамай. Синонимдар бигерәк тә фәнни-техник терминология өлкәһендә, төп төшөнсәләрҙе белдергән (әйтә-

йек, тән өлөштәренең атамалары, кәрҙәшлек терминдары, үсемлек, мал-тыуар исемдәрендә) һүҙҙәрҙә бик аҙ. Улар күберәк билдәне (сифат), эш-хәрәкәтте (ҡылымдар) белдергән һүҙҙәрҙә күп.

## ҠЫҪҠАРТЫУҘАР, ШАРТЛЫ ТАМҒАЛАР

*б.*— бәйләүес
*и.*— исем
*иҫк.*— иҫкергән һүҙ
*кит.*— китап теленә хас һүҙ
*күсм.*— күсмә мәғәнәле
*ҡ.*— ҡылым
*р.*— рәүеш
*с.*— сифат
*тар.*— тарихи һүҙ
*хупл.*— хуплау һүҙе
*һөйл.*— һөйләү теленә хас һүҙ
*шаяр.*— шаяртыу һүҙе
*аҡтыҡ(ҡы), уңай(лы)* — һүҙъяһалыш варианттары
*тормошҡа (бойомға) ашырыу* — фразеологик берәмектәрҙәге лексик варианттар
«*Башҡ. пионеры*» — «Башҡортостан пионеры» газетаһы
«*Совет Башҡ.*» — «Совет Башҡортостаны» газетаһы
[..] — миҫалдарҙағы ҡыҫҡартмалар
*ул* [*Тимер*] — һөйләүсе йәки персонаждың төҙөүсе тарафынан өҫтәлгән исеме

# А

**Абзац, ҡыҙыл юл.** Текст башындағы эскәрәк тартып яҙылған тәүге юл. **Ҡыҙыл юл** күберәк ҡулланыла. *Һ. Дәүләтшинаның «Ырғыҙ» романынан алынған был өҙөктә ике абзац* (К. Әхмәтйәнов). *Яңы фекерҙе абзацтан, икенсе төрлө әйткәндә, ҡыҙыл юлдан башлап яҙыу мотлаҡ* («Совет Башк.»).

**Абруй, авторитет, дәрәжә, мәртәбә.** Яҡшы эш-ҡылыҡ, белем һ. б. менән танылғанлыҡ. **Абруй, авторитет** үҙ-ара яҡынырaҡ, берен-бере алыштыра. *А б р у й ҡаҙаныу. А в т о р и т е т ҡаҙаныу. А б р у й ы үҫеү. А в т о р и т е т ы үҫеү.* һ. б. **Дәрәжә, мәртәбә** — тарыраҡ ҡулланылышлы, башлыса тотҡан урын, мал-мөлкәт арҡаһындағы танылғанлыҡ. *Д ә р ә ж ә һаҡлау. Д ә р ә ж ә н е төшөрмәү. М ә р т ә б ә артыу. М ә р т ә б ә төшөү. Быныһы инде үҙ тиңе малайҙар алдында Зиннәттең абруйын иҫ киткес юғарылыҡҡа күтәрҙе* (Ф. Иҫәнғолов). *Шәриптең эшселәр араһында ла, крәҫтиәндәр араһында ла ҙур ғына авторитеты бар...* (И. Насыри). *Эш һөйгәндең дәрәжәһе артыр, эшһеҙлек боҙоҡлоҡҡа тартыр* (мәҡәл). *Воронцовтар заводлы граф икән, Чернышев та шулай булыр. Екатерина Алексеевна ғали йәнәптәре алдында дәрәжәһе тағы артыр* (Ғ. Хөсәйенов). *Ҡиреһенсә, [байғужалар] үҙ мәртәбәләрен белеп, мыйыҡ аҫтынан ғына йылмайып ҡуялар* (Яр. Вәлиев). *Мәртәбәң бейек булһа, йортоң алыҫтан күренә* (мәҡәл).

— Абруйлы, авторитетлы, дәрәжәле, мәртәбәле.

**Ағартыу, аҡлау, аҡбурлау.** Аҡҡа буяу, аҡ төҫкә индереү. *Мейес а ғ а р т ы у. Мөрйә аҡ л а у. Соланды а ҡ б у р л а у.* **Ағартыу, аҡлау** йышыраҡ, **аҡбурлау** һирәгерәк ҡулланыла. *[Гөлйөҙөм] әсәһенә барып аҡ балсыҡ, бер күнәк эркет һыуы алып килеп, өйөнөң эсен аҡларға тотондо* (Һ. Дәүләтшина). *[Гөльямал] аҡ балсыҡ иҙеп, сыуалын, усағын һәм көлдөксәһенең алдын ағартты* (Я. Хамматов).

**Ағын, шаршы.** Йылғаның шәп аҡҡан урыны. *Йор ағынды кисеп, киткәс ары, һибәләне ләйсән ямғыры* (Й. Гәрәй). *Йоҡламаған егеттәргә ажау ҡаба шаршыла* (Р. Сафин). *Элек Емеш менән Шәүрә ошо шаршыла һыу инеүҙе ҡыҙыҡ күрә торғайнылар* (З. Биишева).

**Аҙаҡ, һуң, ахыр.** 1) Берәй хәл-ваҡиға булып үткәс; күпмелер ваҡыттан кемдеңдер (ниҙеңдер) артынан (урын-ваҡыт килештәге һүҙҙәр менән килә). *Туйҙан а ҙ а ҡ. Биш көндән һ у ң. Беҙҙән а х ы р* һ. б. **Аҙаҡ, һун** йышыраҡ ҡулланыла. *Уйын-*

*дан аҙаҡ уны оҙатырға барғанында: — Гөлбаныу, киләһеңме миңә?..— тип әйтте лә ҡалды* [*Ғәбдеян*] (Н. Мусин). *Яуҙан һуң йоҙроҡ төймәйҙәр* (мәҡәл). *Надия был һүҙҙәрҙән һуңныҡ ҡына ҡаушап ҡалды* (С. Агиш).

2) Һуңғы булып (ниҙер башҡарыу). *Иң аҙаҡ. Ахыр сиктә. Һуңғы сиктә. Һуң килеү. Һуң булыу. Иң аҙаҡ Вахиттың ҡустыһы Сабир төшөндә ағаһын күреүен, тик нисек күреүен онотҡанын һөйләне* (М. Ғафури). *Тимерҡотло менән Тамъян батыр ҡайтып килде бөтәһенән һуңлап, ахыр* («Бабсаҡ менән Ҡусәк»).— *Етteme, бабай? — тип һораны ахырҙа Мәликә унан* (Д. Исламов).

3) Берәй эш-хәлдең, ваҡиғаның бөтөп барған мәле, тамамланған осоро (ярҙамлыҡ исем булып килә). **Аҙаҡ** йышыраҡ ҡулланыла. *Йыл аҙағы. Ай аҙағы. Концерттың аҙағы. Йыл ахыры. ..Үткән быуаттың аҙаҡтарында күп кенә рәсми документтарында Ленин ,,Ульянов Владимир Ильич'' тип яҙып йөрөгән* («Башҡ. пионеры»). *Ғүмерҙең һуңы етеп килеү ҙә* [*һөнәрсене*] *ашығырға мәжбүр иткән* (З. Биишева).

**Аҙаҡҡы, һуңғы, ахырғы, аҡтыҡ(ҡы).** Бөтөп, тамамланып барғандағы, иң артҡы. *Айҙың аҙаҡҡы көнө. Аҙнаның һуңғы көнө. Ахырғы ышаныс. Аҡтыҡ көс. Аҙаҡҡы һүҙ. Һуңғы ынтылыш. Һуңғы һулыш.* **Аҙаҡҡы, һуңғы** күберәк ҡулланыла. *Был осрашыу Ныязғолдоң аҙаҡҡы өмөтөн ҡаҡшатты* (Һ. Дәүләтшина). *Йә, туғанҡай, иҫән бул — минең иртәгә ахырғы хөкөм (әкиәттән).* [*Һандуғас:*] *Беҙҙәргә был кис аҡтыҡҡы байрам, байрам иткәс тә, итәбеҙ тайран* (Д. Юлтый). *Февраль — ҡыштың һуңғы айы.*

1. **Аҙашыу, яҙлығыу, юл яҙыу.** Юлдан яңылышыу, юл юғалтыу. **Аҙашыу** киңерәк мәғәнәле: юлдан яҙып буталыу, ҡайҙа барырға белмәү. *Бында йөрөй белмәгән кеше аҙашып китә* (М. Ғафури). *Тик борсолма, поезд юл яҙлыҡмаҫ* (Ф. Иҫәнғолов). *Ул сығып ике йөҙ метрҙа китә алманы, юл яҙып, яңы ғына сәскәгә йомарланып килгән картуф һәм көнбағыш түтәлдәре араһына инеп китте* (И. Насыри).

2. **Аҙашыу, юлдан яҙыу.** Эшҡылыҡта, тормошта яңылышыу; яҙыҡ юлға баҫыу. *Күҙҙәреңә ҡарап аҙаштым, ике күҙем бергә ҡамашты* (М. Кәрим). *Донъяла бик күп аҙашыуҙар, яңылышыуҙар булып үткән* (Ф. Иҫәнғолов). *Әрәмтамаҡтар башҡаларҙы ла аҙҙыра, юлдан яҙҙыра һәм йәмғиәтебеҙгә ҙур зыян килтерә* («Совет Башҡ.»).

**Аҙғын, боҙоҡ** *кусм.*, **аҙған-туҙған, юлдан яҙған.** Әхлаҡ, тәртип йәһәтенән боҙолған, тарҡалған. **Аҙғын** киңерәк мәғәнәле, **боҙоҡ** күберәк рухи кәмселекте белдерә, **аҙған-туҙған** — аҙып, бөтөнләй эштән сыҡҡан. *Утҡа һалды бит, йөҙө ҡара, биткә ҡара яҡты бит, сусҡа бала, ике донъяла изгелек күрмәгер, аҙғын ҡыҙ!* (Һ. Дәүләтшина). *Ат аҙғыны юрға булыр; ир аҙғыны мулла булыр* (мәҡәл). *Был донъя — юлдан яҙған уҫал ҡатын..* (М. Ғафури). *Төҫө боҙоҡтоң эсе боҙоҡ* (мәҡәл). *Һаҡланырға аҙған-туҙған боҙоҡ бай улдарынан* (М. Йәлил). *Ҡарт уны боҙоҡ күңеллелектә ғәйепләй түгелме?* (Н. Мусин).

**Аҙыҡ, аҙыҡ-түлек, ашамлыҡ, аш, туйымлыҡ, аш-һыу, тамаҡ** *кусм., һөйл.* **ризыҡ, нигмәт** *иҫк.*, **продукт.** Ашарға, туҡланырға яраған бөтә нәмә. **Аҙыҡ** — киң ҡулланылышлы һүҙ, тереклектәрҙең бөтәһенә ҡарата әйтелә. *Аҙыҡ фонды. Аҙыҡ әҙерләү. Мал аҙығы.* **Аҙыҡ-түлек** — йыйылма мәғәнәле, кеше ҡуллана торған бөтә ашамлыҡ. *Аҙыҡ-түлек магазины. Аҙыҡ-түлек промышленносы. Аҙыҡ-түлек программаһы.* **Ашамлыҡ** — ашарға яра-

ған һәр нәмә. **Тамаҡ** һирәгерәк ҡулланыла. *Т а м а ҡ ҡ а бешереү. Т а м а ҡ ялы.* **Аш, ашһыу** — әҙерләнгән, бешерелгән ашау нәмәләре. *А ш яраштырыу. А ш-һ ы у ғ а хәстәрле.* **Туйымлыҡ** тар ҡулланылышлы, күберәк «тамаҡ туйҙырырҙай, ашап алырҙай нәмә» мәғәнәһен бирә. **Ризыҡ** — юғары стилгә тартым һүҙ. *Р и з ы ғ ы бөткәндер. Р и з ы ҡ яҙған.* **Ниғмәт** — һыйға әҙерләнгән тәмлетатлы аш. **Продукт** рәсми телмәргә, газета теленә хас яңы һүҙ. *Малсылыҡ п р о д у к т т а р ы. П р о д у к т етештереү. Өс көнлөк ғүмерең булһа, аҙналыҡ аҙығың булһын* (мәҡәл). *Ярай әле, өс юлсының ризыҡҡа ҡытлығы юҡ ине — аҙыҡтары аяҡ аҫтында* (Ә. Хәкимов). [*Әбей:*] *..Илгә сығып, өҫ-башыңды әҙерәк бөтәйтеп, әҙ булһа ла аҙыҡ-түлек алып ҡайтыу яйын ҡарар инең, — тигән* (әкиәттән). *Кириллов ..ғәскәр һәм чиновниктарҙы аҙыҡтүлек менән тәьмин итерлек иген сәсеүҙе күҙ уңында тотҡайны* (Ғ. Ибраһимов). *Аш эйәһе менән татлы* (мәҡәл). *Килен үҙе аш-һыу әҙерләп, туйынып, йоҡларға ятҡан, ти* (әкиәттән). *Туй ашы туйымлыҡ түгел, күңеллек* (мәҡәл).— *Юҡ инде, һыуға ҡала күрмәһен барлы-юҡлы ризыҡтан яҙып ҡалырбыҙ* (Һ. Дәүләтшина). *Ҡунаҡ үҙ ризығы менән килер* (мәҡәл). *Ҡалабыҙҙың иң оҫта ҡулдары менән әлүән-әлүән тәмле ниғмәттәрҙән һый әҙерләнде* (С. Агиш). *Ашамлыҡтар, бигерәк тә һөт, ҡаймаҡ һәм башҡа шундай продукттар, себендәр керә алмаҫлыҡ итеп һаҡланырға тейеш* («Совет Башҡ.»). *Егеттең януарҙарына тамаҡ биреп, ..үҙен өйгә индереп, ҡунаҡ итәләр* (әкиәттән).

**Азат, бойондороҡһоҙ, ирекле, хөр.** Ирке, ихтыяры бәйһеҙ, бер ни менән дә сикләнмәгән. **Азат, бойондороҡһоҙ** — башлыса политик йәһәттән үҙ аллы, ирекleккә ирешкән (рәсми телгә хас). *А з а т донъя. А з а т дәүләт. А з а т тормош. А з а т халыҡ. Б о й о н д о р о ҡ һ о ҙ ил.* **Ирекле, хөр** — тормош-көнкүрештә үҙ яйы менән йәшәгән; теләгәнсә йәшәй, уйлай алған; **хөр** һирәгерәк ҡулланыла. *И р е к л е тема. И р е к л е тормош. И р е к л е йөрөү. Х ө р йәшәү. Үҙеңде х ө р тойоу. Ул ана шуның өсөн тотҡон булып уттар йота. Һарғайып, минут һайын рәхәт, азат көндәр көтә* (Т. Йәнәби). *Малави — Африка континентындағы утыҙ дүртенсе бойондороҡһоҙ ил* («Совет Башҡ.»). *Ҡисәгенәк беҙҙең ячейкала алыҫ иптәш хатын уҡыныҡ; Беҙгә яҙа: „..Унда һеҙ ирекле, беҙҙең тормош ауыр..“* (Ғ. Сәләм). *Икеһе лә хөр фекерле, дини тойғоларҙан алыҫ был кешеләр, үҙ-ара уртаҡ тел табып, дуҫтарса йәшәй* («Совет Башҡ.»).

— Азатлыҡ, бойондороҡһоҙлоҡ, ирек, хөрриәт.

**Айбар, ажар.** Ҡурҡыныс һалып сәсрәп торған көс-ғәйрәт. *А й б а р һалыу. А й б а р ороу. А й б а р ташыу.* **Ажар** — ҙур ҡурҡыныс тыуҙырған көс-ғәйрәт. *А ж а р сәсеү. А ж а р күрһәтеү. Айбарлы ирҙәр бар сағында, баҙынмаҫ дошман илемә* (мәҡәл). *Һин ни хәлдә? Минең әле бөркөттәй ажар сағым* (А. Игебаев). *Халыҡ, ҡуп ваҡыттар үткәс, ажарҙары һил булғас, ошо Ослоташ тауы моронона йорт һалып тора башлаған.* (Б. Бикбай).

— Айбарлы, ажарлы; айбарлылыҡ, ажарлылыҡ.

**Айпашыу, айпалашыу, айҡашыу, көрмәкләшеү, яғалашыу.** Бер-берендә еңерҙән тегеләйбылай һелтәү, елтерәтешеү. **Айпашыу, айпалашыу, айҡашыу** һуғышыу, алышыу төҫмөрөн дә бирәләр; **көрмәкләшеү** көрәшеү, елтерәтешеүгә генә ҡайтып ҡала. *Үҙенең сәсенә йәбешеп уйнай башлаған туғаны менән айпашты* [*ҡыҙ*] (Һ. Дәүләтшина). *Әле Дәүрән мырҙа ҡараҡтары менән айҡашып, әле маңғыттар менән*

*өҙөшөп, ошо яҙҙа унлап яугирынан яҙҙы Юлыш* (Ә. Хәкимов). *Янғолдоң әнеһе, һуғылырға ятмаҫҡа тырышып, стражник менән айпалашҡанда, уның күҙе аша битен, маңлайын ҡамсы менән ярып ебәргәндәр* (Һ. Дәүләтшина). *Шунан ҡарт асыуланып Айыуғолаҡҡа килеп йәбешкән. Былар көрмәкләшеп алып киткәндәр* (әкиәттән).

**Айыр(ы), айырса, айырма, айырылыш, аса, сат(а).** Бөтөн, тоташ нәмәнең тармаҡланған урыны һәм тармаҡтары. **Айыры, айырса, айырма, айырылыш** күберәк урын-ергә, һыуға ҡарата әйтелә, тәүге икәүһе йышыраҡ ҡулланыла. *Юл а й ы р ы. А й ы р с а л ы үҙән. Ҡәкре а й ы р. Төҙ а й ы р.* **Аса, сат(а)** — ағас һ. б. нәмәләрҙең тармағы. *С а т а л ы һәнәк. Урам с а т ы. Юл с а т ы. С а т а бағана. Ағас с а т ы. Дүртәүе лә айырылмай, бергә йөрөп, дүрт айырылы юл башына етте инде* (әкиәттән). *Әллә уйҙарыбыҙ айырыламы, айырсалы юлдар шикелле* (А. Игебаев). *Сабып килгән йөк машинаһы, район үҙәгенә бер аҙ етмәҫтән, оло юл айырмаһында туҡтаны..* (Б. Бикбай). *Баҫып торам һаман юл сатында: ҡыйыулыҡҡа табан юл ҡайҙа?* (Ф. Рәхимғолова).

**Аҡ, сал.** Ҡар төҫө; ҡараның киреһе. **Аҡ** киң мәғәнәле, төҫтө белдергән бөтә һүҙҙәр менән ҡулланыла; **сал** күберәк сәскә, һаҡал-мыйыҡҡа ҡарата әйтелә; «боронғо, ҡарт» мәғәнәһен дә бирә. *Аҡ болот. Аҡ ҡағыҙ. Аҡ ҡайын. Аҡ сәс. Аҡ төшөү. С а л сәс. С а л кереү. С а л Урал. Аҡ йөҙлө, ҡара күҙле, зифа буйлы, оҙон сәсле болғар ҡыҙы Айһылыу ҡайҙа?* (М. Ғафури). *Сал тулҡынлы һыуымдан, икмәгемдән тәм алдым, тыуғанүҫкән яғымдан мин донъяла йәм алдым* (А. Игебаев). *Байтал бейә булғансы, башыңа сал инә* (мәҡәл).

**Аҡайыу, аҡырайыу, аҡшайыу, аҙырайыу, таҫырайыу.** Күҙҙе ҙур асып, иғтибарһыҙлыҡ, аптырау йәки асыу менән ҡарау. Яманлау һүҙҙәре. **Аҡырайыу, аҡшайыу** һүҙҙәрендә кире баһа көслөрәк. **Аҙырайыу** — күҙ ҙур булып асылыу. *..Гәрәйҙе, ярға килтереп ҡыҫылған бүре һымаҡ, аҫтан һөҙөп, аҡайып ҡарағас, барыһы таныны* (Б. Бикбай). *..Ныязғолға ырғып ташланырға әҙерләнгән кеүек, күҙҙәрен ҡыҙыл ҡан баҫҡанса аҡырайып текләп, ухылдап торҙо* (Һ. Дәүләтшина). *Аҡылы юҡтың аҙырайған күҙе бар* (Ҡ. Аралбаев). — *Бәй, караттар бит! — тип бышылданы Әлибай, күҙҙәрен таҫырайтып* (Ғ. Ибраһимов). *Ҡана, майлыҡ бир! — тине ул, бисәһенә аҡшайып ҡарап...* (Б. Бикбай).

— Аҡыш, аҡырый, аҡшайған, аҙырай, таҫырай (күҙ).

**Аҡтарыу, ҡутарыу.** 1) Төбөнән ҡупшытып, аҫтын-өҫкә әйләндереү. *Тракторҙар дүртәр төрәнле ҙур һабан менән сиҙәмде аҡтара* (А. Ҡарнай). *Дауыл ерҙәге сүп-сарҙы урынынан ҡутарып, күтәреп алды ла егеткә алып быраҡтырҙы* (И. Ғиззәтуллин).

2) Ниҙер эҙләп, болартыу, бутау. *Ҡатюшаның рөхсәт итеүен дә көтөп тормай, Гөлгөнә уның һикеһе аҫтындағы сумаҙанды ашығып аҡтара башланы* (Д. Исламов). *Бына бит, бына өҫтә генә ятҡан, ә минең ҡутармаған ерем ҡалманы* (Ғ. Байбурин).

**Аҡһаҡ, сатан, һылтыҡ.** Аяғы зәғифлектән, яранан тигеҙ атлай алмаған. **Аҡһаҡ, сатан** — тиң мәғәнәле һүҙҙәр, исем булып та йөрөйҙәр; **һылтыҡ** — аҡһабыраҡ атлаған. *Дымлы көндәрҙә ул бик өшөй, аҡһаҡ аяғы йән түҙмәҫлек һыҙлай ине* (Х. Мохтар). *Ҡөтөү боролғанда, аҡһаҡ һарыҡ алға сыға* (мәҡәл). *Сатан соҡорға баҫа* (мәҡәл). *Алға үтте шунда Татлыбай. Сулаҡ ҡулын һуҙған. Аяҡ һылтыҡ* (З. Биишева).

— Аҡһау, аҡһаҡлау, сатанлау, һылтыҡлау.

**Аҡылланыу, аҡыл инеү (кереү), аҡыл ултырыу, аҡылға ултырыу, аҡылға килеү.** Аң кимәле үҫеү, аҡыл камилға әйләнеү. **Аҡылланыу, аҡыл инеү (кереү)** — әкренләп аҡыл үҫә барыу; **аҡыл ултырыу** — билдәле бер йәшкә етеп, аҡылланыу; **аҡылға ултырыу, аҡылға килеү** — дыуамаллыҡ эшләп, аҡылһыҙланып, яңынан аҡыллыға әйләнеү. *Мин шунда уҡ аҡылландым да ҡасан күрмәгәнемде күрермен инде, тип көтә башланым* («Совет Башҡ.»). *Донъя күрмәй аҡыл инмәй ата балаларына* (халыҡ йырынан). *Ҡартайғансы һиңә лә аҡыл ултырманы. ,,Рәхимә еңгәм, Ныяҙғол ҡайнағам'' тип, ауыҙ һыуың ҡорой* (Һ. Дәүләтшина). — *Лесничествоға тапшырам, штраф түләтһендәр, әйҙә,* — *тип баяғы һүҙҙәрен ҡабатланы Шәһүрә, үҙ һүҙләнеп.— Һы.. Шунан был егет аҡылға ултыра инде?* (Н. Мусин).

**Аҡыллы, башлы, башы йомро** *һөйл., шаяр.* Фекер йөрөтөү һәләте юғары. **Аҡыллы** киң мәғәнәле: эш-ҡылыҡҡа ҡарата ла әйтелә. *Аҡыллы уй. Аҡыллы хәрәкәт.* **Башлы** дөйөм аҡыл һәләтен генә белдерә. *Бик ипле, аҡыллы бала ул Диләкәй* (Һ. Дәүләтшина). *Башлы булғас, башлы инде. Уҡыуын дауам иттерһә, Ҡатюшанан ҙур кеше сығыр ине лә бит..* (Д. Исламов). *Башлыҡ булһаң, башлы бул, йыйырылмаҫ ҡашлы бул* (мәҡәл). *Теге кешенең башы йомро. Тигенгә һорамайҙыр* (Я. Хамматов).

**Алдау, алдашыу, ялғанлау, төп башына ултыртыу, тишек кәмәгә (сүмәнгә, шыуманға) ултыртыу, кәкре ҡайынға терәтеү, төпһөҙ санаға ултыртыу.** Юҡты бар итеп, яһап һөйләп йәки эш-ҡылыҡ менән башҡаларҙы яңылыштырыу, бутау; ялған фекер тыуҙырыу. **Алдау, алдашыу, ялғанлау** киңерәк мәғәнәле: вәғәҙәне боҙоу, һүҙҙә тормауҙы ла белдерәләр. **Төп башына ултыртыу, тишек кәмәгә (сүмәнгә, шыуманға) ултыртыу, кәкре ҡайынға терәтеү, төпһөҙ санаға ултыртыу** — бик оҫта алдау; мыҫҡыллау төҫмөрө лә бар. *Ситтә ҡалыу — алдау булыр ине цехташыңды һәм дә синыфты* (Ғ. Сәләм). *Ә, донъя, шашма, юҡты алдашма: һинең хәлеңә мин бик әшнә. Алдама мине, яҙың күрһәтеп, аулама мине, ҡыҙың күрһәтеп..* (Ш. Бабич).— *Ә был бүрек һинекеме? Яҡынайыбыраҡ ҡара. Ялғанлама,* — *тине Әкбәр* (Т. Хәйбуллин). — *Бакендар ҡуям. Ҡайһы берәүҙәр төп башына ултыртмаһын өсөн,— тип көлөп яуап ҡайтарҙы ул* («Совет Башҡ.»). *Ҡыҫҡаһы, ер һатыла, наҙан, ләкин ҡырағай, хәйләкәр, ас күҙ түрәләрҙе помещик алдай, ә улар үҙ ыңғайында ҡара халыҡты төп башына ултырта* (Б. Бикбай).— *Ниғмәтулла минең ҡаным менән байыны, ҡорҙаш. Мине останы. Төпһөҙ тишек шыуманға ултыртты, ҡорҙаш* (Я. Хамматов). [*Мозой:*] *Әпкәләй ауыҙына ҡарап торһағыҙ, ул һеҙҙе кәкре ҡайынға терәтер әле!..* (Д. Юлтый). *Данығыҙ донъяға таралыр.. Таралды ана, киреһе,— яманаты сығып тора. Тишек кәмәгә ултыртты бит, берәҙәк* (Ғ. Хөсәйенов).

— Алдыҡ, ялған.

**Алдынғы, прогрессив** *кит.* Алға барған, яңылыҡҡа ынтылған. **Алдынғы** йышыраҡ ҡулланыла. *Алдынғы ҡарашлы кеше. Алдынғы ағым, йүнәлеш. Алдынғы тәжрибә. Прогрессив көстәр. Прогрессив культура. Прогрессив хәрәкәт. Прогрессив аҙым. Педколлектив ..алдынғы тәжрибәне индереү буйынса күп кенә нәмә эшләне* («Совет Башҡ.»). *..Прогрессив ҡарашлы башҡорт мәғрифәтселәре хаҡында ла.. белге килә* («Ағиҙел»).

— Алдынғылыҡ.

**Алпауыт, баяр, помещик** *тар.* Эре ер биләүсе. **Алпауыт** — иҫкерә барған һүҙ, **баяр** йышы-

БИБЛИОТЕКА
К...бахтинской средней школы
Илишевского района БАССР
6018

раҡ ҡулланыла. *..Әллә ҡайҙа ятҡан губерналарҙағы алпауыттарға ҡоллоҡҡа һатып ебәрелеүселәр ҙә күп* (Ғ. Ибраһимов). *Бер заман Строганов тигән баяр, бик күп кешеләр алып килеп, Ҡаманың һул ярында ауылдар, заводтар һалдырта башлаған* (Ғ. Хөсәйенов). *Баярҙың эше бер ай буйы эшләнмәй ятты* (риүәйәттән). *Уҙған быуат урталарында беҙҙең Бөрйән волосы башҡорттары ҙур помещик, башҡорт ерҙәрен ҡомһоҙ талаусы Тимашевҡа ерҙәрен һатҡандар* (Б. Бикбай).

**Алсайыу, үрәпсеү, салҡыу.** Артҡы аяҡтарға баҫып, үрә тороу (хайуандар, күберәк ат). *Тура юртаҡ, хужаның биләндә икәнен һиҙгәс, алсайып, ..ҡаты кешнәп ебәрҙе..* (Ә. Ихсан). *Тыу бейә үрәпсей, дулай башлағас, Ҡуҙыйкүрпәс асыуланыбыраҡ ҡороғон тартҡайны, шул саҡ теге бейәнең муйыны өҙөлдө лә ҡуйҙы, ти* (әкиәттән).

**Алсаҡ, асыҡ** *күсм.*, **көләс.** Шат күңелле, көләп-йылмайып торған, яғымлы сырайлы. **Алсаҡ, асыҡ** киңерәк мәғәнәле: ҡылыҡ-холоҡҡа ҡарата ла әйтелә. *А л с а ҡ кеше. А с ы ҡ кеше.* **Көләс** башлыса йөҙгә, тышҡы ҡиәфәткә ҡарата ҡулланыла. *Ҡатын һылыулығы өҫтөнә бик алсаҡ һәм яғымлы ине, көлгән саҡта бит остары соҡорланып ала, тигеҙ аҡ тештәре йылтырап китә* (С. Агиш). *Йырлай, бейей, оса алсаҡ ҡыҙҙар, ҡарап туймаҫлыҡ һис уларға!* (Р. Ғарипов). *Хужаның бисәһе былай ҙа асыҡ йөҙлө, етеҙ генә кеше икән* (Т. Йәнәби). *Ә Григорий һәр ваҡыттағы үҙенең яй һәм һалмаҡ һүҙе, көләс йөҙө менән Юлияның яурынына уң ҡулын һалып һөйләгән һымаҡ булды..* (Һ. Дәүләтшина).

**Алыҫ, йыраҡ, аралы, ер аяғы-ер башы, Ҡафтау арты, йәһәннәм тишеге** *һөйл.* Араһы яҡын түгел, ҙур алыҫлыҡта. **Алыҫ, йыраҡ** бик яҡын мәғәнәле, берен-бере алыштыра ала, ваҡыт төшөнсәһен дә бирә. *А л ы ҫ йылдар. Й ы р а ҡ киләсәк. А л ы ҫ бала саҡ.* **Аралы** һирәгерәк ҡулланыла. *А р а л ы ултырыу. А р а л ы булыу.* **Ер аяғы-ер башы, Ҡафтау арты, йәһәннәм тишеге** — бик алыҫ, әллә ҡайҙа. *Уйҙарым китә алыҫҡа, уйҙарым китә йыраҡ; Шоңҡарҙай әйләнеп ҡайта быуаттар иңен урап* (Ш. Бикҡол). *Алыҫ менән яҡынды юртҡан белер; асы менән татлыны татыған белер* (мәҡәл). *Бынан Ағиҙелдең үҙенә лә алыҫ ҡалмай* (Д. Исламов). *Ҡояш сыҡҡан яҡта бик йыраҡта Башҡортостан тигән ерем бар* (М. Кәрим). *Баҡыр рудаһын ер аяғы-ер башы ерҙән, Воскресенск яғынан, ташыныла*р (Ж. Кейекбаев). [*Айбулат:*] *Гөлйөҙөм, һин ҡайғырма. Улар теләһә һине Ҡафтау артына алып барып ташлаһындар, барыбер мин һине улар ҡулында ҡалдырасаҡ түгелмен* (Һ. Дәүләтшина).

**Алышыныу, алмашыныу.** Береһе урынына икенсеһе килеү; бер-бер артлы үтеп, үҙгәреп тороу. *Шау-шыулы ла, ҡанлы ла көндәр шулай бер-бер артлы алышындылар* (И. Насыри). *Әсәйемдең тәмле аштары — ҡатҡан икмәк менән бер-ике сынаяҡ сәйгә, уйнап йөрөүем — көн буйы эшләүгә алмашынды* (М. Ғафури). *Йүнәлешен һыуҙар бороп ағыр, алмашыныр елдәр иҫеүе..* (Б. Бикбай).

— Алыштырыу, алмаштырыу; алмаш.

**Анһат, еңел** 1. *с.* Үтәүе, башҡарыуы ауыр булмаған, ҙур көс талап итмәгән. *А н һ а т эш. А н һ а т мәсьәлә. Е ң е л кәсеп. Е ң е л тормош. Тауға менеүе ҡыйын, төшөүе анһат* (мәҡәл).

2. *р.* Ҙур көс һалмай, ҡыйынлыҡ кисермәй (башҡарыу, эшләү). *А н һ а т ҡ а һалышыу. А н һ а т табыу. Е ң е л йәшәү. Е ң е л ҡарау.* [*Бәлә:*] — *Юҡ инде, ағай, минән улай анһат ҡотола алмаҫһың* (әкиәттән). [*Яҡуп:*] — *Ҡуй, һыйлым,*

*ир-ат эшенә ҡыҫылма, беҙ тиҙ ҡайтырбыҙ, — тип уны еңелтынысландырҙы* (Б. Бикбай).

— Анһатлыҡ, еңеллек; еңелсә.

**Аныҡ, асыҡ** *күсм.*, **аңлайышлы.** Айышы билдәле, еңел генә төшөнөрлөк. *А н ы ҡ фекер. А с ы ҡ ниәт. А н ы ҡ әйтеү. А ң л а й ы ш л ы һөйләү. А с ы ҡ ишетелеү.* **Аңлайышлы** — аңлашылып торған, төшөнөклө. *А ң л а й ы ш л ы китап,* ләкин «асыҡ, аныҡ китап» тип булмай. *Сәлим ҡыҙының һорауына бер төрлө лә аныҡ яуап бирә алманы* (С. Агиш). *Ҡрәҫтиәндәрҙең ҡот осҡос ауыр йәшәүе әҙәбиәттә асыҡ кәүҙәләнә* («Совет Башҡ.»). *Быларҙың һуғыш тураһында барған бәхәстәре минең өсөн шул тиклем асыҡ һәм аңлайышлы ине* (Д. Юлтый).

— Аныҡлыҡ, асыҡлыҡ; аңлайышһыҙ; аныҡлау, асыҡлау.

**Аңҡыу, борхоу.** Еҫ сығып таралыу. Берен-бере алыштыра ала. **Аңҡыу** һүҙендә күсмә мәғәнә лә бар: күрер күҙгә ташланып, һиҙелеп тороу. *Беләктән көс а ң ҡ ы й. Йәшлек дәрте а ң ҡ ы й. Сәскәләрҙең еҫе борхоп тора* (Т. Баишев). *Изге тамсыларың әрәм булмаҫ, икмәк булып аңҡыр һәр өйҙә* (З. Биишева).

1. **Аңлау, төшөнөү.** Низең дә булһа асылын белеү, аңға алыу; мәғәнәләре бик яҡын. *Бәлки аҡсағыҙ булмағандыр йәки бөтөнләй кәрәк тип тә тапмағанһығыҙҙыр, ул ғәйеп түгел, быны мин дә аңлайым, Наилә лә төшөнә* (С. Агиш). *Аҡыллы аңлар, ахмаҡ тыңлар* (мәҡәл). *Ҡинйә, аңлап, баш ҡаҡты* (Ғ. Ибраһимов). *Уны һәр ике яҡ яҡшы төшөндө* (И. Насыри).

2. **Аңлау, төшөнөү, аңғарыу.** Йәшерен серҙе сисеү, уй-фекерҙе һиҙеп алыу, асыу. *Хәйләһен а ң л а у. Серенә т ө ш ө н ө ү. Тел төбөн а ң ғ а р ы у. Шул саҡта Мәскәй ҡапыл Тамыр батырҙың үңәсенә йәбешкән дә, быуа башлаған. Егет эштең ниҙә икәнен ошо ерҙә генә аңлап алған* (әкиәттән). *Шулай ҙа был хәлде күҙгә элде Тимер һәм, хикмәтен төшөнөр өсөн, бер көн бригада һарайына китте* (Б. Бикбай). *Бабай минең хәлемде һиҙҙе шикелле, баяғынан да шымараҡ тауыш менән: — Шишмәне тыңла, аңғараһыңмы берәй нәмә. Айыраһыңмы? — тип һөйләнде* (Ә. Вахитов).

**Аңра, аңыш, аңҡау, миңрәү, маҡау** *һөйл.*, **абайһыҙ.** Тиҙ генә уйлай, аңлай алмай торған, иғтибарһыҙ (әрләгәндә, хурлағанда әйтелә). *А ң р а булыу. А ң ы ш кеше. Бигерәк м а ҡ а у инде. Мин ни аҙаным да киттем. — Ҡайҙа, нимә? — тип һорайым аңра кешеләй* (Ф. Иҫәнғолов). *Мөхәббәт тигәнең кешенең телен дә аса, аңра хәлгә лә тарыта, ахырыһы* (Н. Мусин). *Гөльямал төнөн, тигән, һин булма аңҡау, бул уяу* (Ш. Бабич). — *Ул быны минең ниндәйҙер аңышлығыма ҡарата әйтте буғай, хәтеремдә юҡ* (Б. Бикбай).

**Аптырау, аптыраныу, ҡаңғырыу, баш ҡатыу, баш ҡаңғырыу.** Берәй ауыр хәлдән ҡотола алмай йәки ниҙелер хәл итә алмай яфаланыу. **Аптырау** йышыраҡ ҡулланыла, **баш ҡатыу, баш ҡаңғырыу** — ныҡ аптырау, аңҡы-тиңке булыу. *Хәйрүш, ни эшләргә лә белмәй, аптыраны ла ҡалды* (А. Ҡарнай). *Мең төрлө уй, ҡатты баш, ни эшләргә лә аптыраш..* (Ш. Бабич). *Байҙың ҡатыны үлһә, түшәге яңырыр, ярлының ҡатыны үлһә, башы ҡаңғырыр* (мәҡәл).

**Арзан, осһоҙ.** Хаҡы, баһаһы түбән. **Арзан** һүҙенең мәғәнәһе киңерәк, абстракт төшөнсәләргә ҡарата ла ҡулланыла. *А р з а н дуҫлыҡ. А р з а н мөхәббәт. А р з а н хәбәр. Ауылға килгән бәз арзан, ауыҙға килгән һүҙ арзан* (мәҡәл). *Садрый бай көтөргә бирер, иртәгә барғанда, алып ҡайтырмын, ботона бер-ике тин осһоҙ ҙа булыр..* (М. Ғафури).

— Арзанлы, арзансылыҡ, ар-

занлыҡ, арзанайыу; осһоҙланыу.

**Арҡыры, аша, үтә.** 1) Инңгә киҫеп йәки үтеп (сығыу). **Арҡыры, аша** бер-береһенә ныҡ яҡын, аша, буй киҫеп сығыуҙы ла белдерә. **Үтә, үтәләй** ниҙеңдер эсенән аша (сығыу, йөрөү). *Юл а р ҡ ы р ы. Урам а ш а. Йылға а ш а. Вагон ү т ә. Урман ү т ә. Беҙ Варшава ҡалаһы эсендәге ,,Николай II'' исемендәге ҙур күперҙән Висла арҡыры сыҡҡанда, таң яҡтырғайны* (Д. Юлтый). *Һыр йылғаһы бигерәк ағым икән, сығып ҡына булмай ҙа ашаға. Аша ғына сыҡһаҡ, етер ҙә инек Аҡмәсеткәй тигән дә ҡалаға* (халыҡ йырынан). *Тәҙрә үтә емдәр һиптем үҙем генә һөйгән бөркөткә* (халыҡ йырынан).

2) Ҡеше йәки хат, телефон һ. б. ярҙамы менән (хәбәрләшеү). Сығанаҡ килештәге исемдәр менән синонимлаша. *Ағайым а ш а (арҡыры, үтә) ебәрҙем — ағайымдан ебәрҙем. Телефон а ш а (арҡыры, үтә) һөйләштек — телефондан һөйләштек* һ.б. *Нәфисәгә сәләм нәфис ел арҡыры* (Ш. Бабич). *Яу һүрелгәндән-һүрелә бара ине. Шул мәлдәрҙә капитан Кублицкий аша күрһәтмә килде.* (Ғ. Ибраһимов).

— Арҡырылай, ашалай, үтәләй; арҡырыға, ашаға, үтәгә.

**Арлы-бирле, унан-бынан, өҫтән-мөҫтән, нисек етте шулай, минән киткәнсе, эйәһенә еткәнсе.** Асылына төшөп тормай, еренә еткермәй (башҡарыу). *А р л ы-б и р л е генә уҡыу. У н а н-б ы н а н тотоп эшләү. Ө ҫ т ә н -м ө ҫ т ә н генә үҙләштереү. Билдәле, бинт пакетын асып, һыңар ҡул менән арлы-бирле генә бәйләнем* (Д. Юлтый).

**Арнау, бағышлау.** 1) Берәй ваҡиғаға, кешегә һ. б. тәғәйенләп, исемләп ниҙер эшләү. **Арнау** шиғри телгә тартым. *Йырлаймы күктә балҡыған ҡояштың нурын? Әллә айға арнағанмы һандуғас йырын?* (С. Юлаев). *Һалдат-йырсы! Һиңә бағышлайым йырҙарымдың хәтәр минуттарҙа тыуғанын* (М. Кәрим).

2) Бер эш-хеҙмәткә бар булмышың менән бирелеү. *Ғүмерҙе Ватанға хеҙмәт итеүгә а р н а у. Ошонан һуң унда үҙенең бөтә ғүмерен балаларҙы дауалауға бағышлау уйы тыуҙы ла инде* («Совет Башҡ.»).

**Арттырыу, шапыртыу, ҡабартыу** *күсм.*, **күпертеү** *күсм.*, **аштырыу шаштырыу, шыттырыу** *күсм.*, **фәстереү** *һөйл.*, **сурытыу** *һөйл.*, **төймәләйҙе дөйәләй итеү, берҙе биш итеү.** Өҫтәп һөйләү, үҙеңдән ҡушып ҙурайтыу. **Фәстереү** — маҡтаныу төҫмөрөн дә бирә. **Шаштырыу, аштырыу** — артыҡ өҫтәү, арттырып ебәреү. **Шыттырыу, күпертеү, шапыртыу** һүҙҙәрендә мыҫҡыллау төҫмөрө көслөрәк. *Алдашһаң да арттырма, артын уйла, шаштырма* (мәҡәл). *Ул [Дункан] Александр өсөнсө заманында уҡ әле Михайловск театрында йөрәгән,— тип фәстереп ебәрҙе актер* («Совет Башҡ.»). *Улар, ҡайҙа булһалар ҙа, ошо туралағы бик күп хәбәрҙе хуплап, ҡабартып тараттылар* (Һ. Дәүләтшина). *Әлеге йәшәртеү тураһында һөйләгән Кузьма (уның исеме шулай булып сыҡты) ғәҙәтенсә аштырып һөйләргә керешә* (С. Агиш). *Аҙыраҡ эсеп алғас, Сергейҙың теле бөтөнләй сиселде. Хәбәрҙе сурыта ғына* (Н. Мусин). *Әхмәтзәки быныһын да алданы. Эрнест, кем тапшырҙы бүләктәрҙе, тип һорағас, эй, уларҙы ҡайҙан белеп бөтәһең дә, тип, исемен дә әйтә алмай ине, әле шыттыра бирә* (Р. Солтангәрәев). *Ә с а ҡ ҡына бер нәмә булдымы, төймәне дөйәләй яһап, иренә ошаҡлап бара* (Һ. Дәүләтшина). *Ул Мәғүзәләргә инһәң, сығырмын тип уйлама. Аштырырға ярата, берҙе биш итә,— тине Фатима* (Б. Бикбай). *Ташбатҡан ауылының берҙе биш итергә ярата торған бисәләренә Әхсәндең хәбәре етә ҡалды* (Ж. Ҡейекбаев). *Йыраусы,*

*берҙе бишкә әйләндереп, хандарҙың данын күпертеп ебәрә икән, уның һөнәре шул да баһа* (Ә. Хәкимов).

**Артыҡ, ашыу** *р.* Иҫәбе-һаны, күләме менән бер саманан күберәк. *Гектарҙан* а р т ы ҡ. *Йөҙҙән* а ш ы у. *Балыҡ өс биҙрәнән* а р т ы ҡ *(йәки* а ш ы у*). Ҡәрәгенән* а р т ы ҡ. *Магазинда утыҙ йылдан ашыу эшләй инде ул [Ғәбдеян]* (Н. Мусин). *Беҙгә меңдән артыҡ ғәскәр килде* (Д. Юлтый).

1. **Артылыу, ашыу, менеү, күтәрелеү, ҡалҡыу, үрләү.** Ҡалҡыу урынға, үргә менеү йәки аша төшөү. **Ашыу, менеү, күтәрелеү, үрләү** — бик бейеккә (күккә) олғашыу. *..Ҡинйә үҙенең дуҫын Наҙы буйына алып сыҡты. Үргәрәк барғас, Бүре ҡашлауына артылдылар* (Ғ. Ибраһимов). *..Берләм юлдан бик текә тауға артыла башланыҡ* («Совет Башк.»). *Бер бәләкәйерәк ҡалҡыуҙы ашҡан саҡта ул Ниғмәтте уҙып китте* (Б. Бикбай). *..Һунарға йөрөгәндә, ни тиклем арыһаң да, тырышып-тырмашып тауҙарға күтәрелергә кәрәк* (Н. Мусин). *Йыр тыңланым асфальт-таш ҡалала, тауға мендем таңдар алдынан* (Ғ. Сәләм). *Егет йырлай: — О, мин ниндәй бәхетле! ..Бәхетле — һауаға үрләгән ыласындай..* (Б. Бикбай).

2. **Артылыу, ташыу, ашыу, түгелеү.** 1) Тулып ситкә ағыу (һыу һ. б. шыйыҡ нәмәләр). *Аш* т а ш ы у. *Һөт* т а ш ы у. *Балыҡтары ҡарпыған, һыуы ярҙан артылған, Ағиҙел ята алдында* («Аҡбуҙат»). *Йылға быйыл ярынан ашты* (һөйл. теленән).

2) Күҙгә ташланып тороу (көс-ғәйрәт, дәрт һ. б.). *Бирҙеғол өндәшмәне. Башҡалар алдында ташып торған ғәйрәте тамам һүнде* (Ғ. Ибраһимов).

**Артыу, күбәйеү, өҫтәлеү, ишәйеү, күмәгәйеү.** Булған өҫтөнә ҡушылып, һан-күләм яғынан үҫеү. **Артыу, күбәйеү** — берберенә яҡын, киңерәк мәғәнәле һүҙҙәр. **Өҫтәлеү** — өҫтөнә ҡушылып тороу. **Ишәйеү, күмәгәйеү** — үрсеү нәтижәһендә артыу (йән эйәләренә ҡарата). *Көн һайын миндә бәхетһеҙлек кенә арта бара, яйһыҙ, уңайһыҙ, ҡырыйһыҙ юлына тарта бара* (Ш. Бабич). *Был ваҡыттарҙа шул яҡтарҙан ҡасып йәки төркөм-төркөм күсенеп килеүселәр күбәйгәйне* (Ғ. Ибраһимов). *Яу үткәс, батыр күбәйә* (мәҡәл). *Завод, фабрика мейестәренең ҡыҙыуына, әйтерһең, яңынан бер нисә мең градус эҫелек өҫтәлде, улар янында баҫып торорға мөмкинлек ҡалманы* (Һ. Дәүләтшина). *Бына шул арҡала халыҡ бик ишәйеп китте, ти. Шул тиклем күбәйҙе, хатта эсер һыу ҙа етмәй башланы, ти* (әкиәттән). *Айырылып киткән төрки ҡәбиләләре йән иҫәбе яғынан күмәгәйеп китеп, йәнә бер нисә ҡәбиләгә бүленгән* (Ж. Кейекбаев).

**Арынһыҙ, күндәм, тыңлаусан.** Ҡирелләнмәй, ҡарышмай торған. *Арынһыҙ малға эйә күп* (мәҡәл). *Халыҡ саруаһы ни — күндәм инде. —Ябай тоҡомдан айғыр һалып булмай,— тиҙәр ҙә затлыһына баш эйәләр* (Ғ. Ибраһимов). *Мужиктар ҙа «күндәм аттар» түгел, улар бүтән, улар башҡалар* (Б. Бикбай).

**Арыныу, ҡотолоу, бушаныу.** Ниҙеңдер тәьҫиренән, йоғонтоһонан ысҡыныу; кемдеңдер ҡул аҫтынан сығыу. *Ҡунаҡтан* а р ы н ы у. *Бәләнән* ҡ о т о л о у. *Хыялдан* б у ш а н ы у. *Ҡотолорға кәрәк был аяуһыҙ көстән. Бер ҡатлы йәшлек хыялдарынан арынырға ла, өҫтәге юл туҙанын һелкеп төшөрөп, ҡалған ғүмерҙең ҡәҙерен белеп йәшәргә* (Ә. Хәкимов).

**Арыу, талыу, талсығыу, хәлһеҙләнеү, әлһерәү, аңһығыу, хәлдән тайыу, арманһыҙ булыу, ҡара тиргә төшөү** *һөйл.*, **һыу эскеһеҙ булыу** *һөйл.*, **телде арҡыры тешләрҙәй булыу** *һөйл.*, *тупаҫ.*, **үлемесле булыу** *һөйл.*, **йән тир сығыу** *һөйл.* Көс-хәл

бөтөү, күс ҡайтыу. **Арыу** киң мәғәнәле: рухи яҡтан, аҡыл йәһәтенән хәлһеҙлекте лә белдерә. *Баш арыған.* **Талыу, талсығыу** — ауыр эштән, хәрәкәттән хәл бөтөү, ауыртыныу. *Аяҡ талыу. Ҡулдар талсығыу.* **Хәлһеҙләнеү** — тотош тән арыу, хәл китеү. **Әлһерәү** — ныҡ арыу, йә эҫелектән бәлтерәп төшөү. **Анһығыу** — эҫелектән, һыуһап хәл бөтөү. **Хәлдән тайыу, арманһыҙ булыу, ҡара тиргә төшөү**—күп көс түгеүҙән ныҡ арыу. **Һыу эскеһеҙ булыу, телде арҡыры тешләрҙәй булыу, үлемесле булыу** — бик ныҡ арыу, бөтөнләй хәл булмау. *Инә бурһыҡ тороп ҡалған. Ул арып, хәлдән тайып бөткән бер нисә сысҡанды тотоп ашаған.* (әкиәттән). *Арыу-талсығыуҙар булһа-булыр, хаҡ юлымда булмаҫ тайпылыш* (А. Игебаев). *Ҡитаптың ҡағыҙы насар һәм хәрефтәре бик асыҡ булмаһа, күҙҙәр тиҙ арый* («Совет Башҡ.»). *Тик: — арыған тимә, тән талһа ла, күҙҙәремдә бойоғоу күренмәҫ* (Ғ. Сәләм). *Йәйпәк, киң сәхрәгә өйрәнгән дәрүиштәрҙең аяҡтары, бер үрҙән икенсеһенә артылып, таштан ташҡа һикереп, яман талсыҡты* (Ә. Хәкимов). *Аяҡтарым талғас, мин ултырҙым көнгә ҡаршы ҡая ташына* (Ғ. Сәләм). *Быуындар тарҡалған һымаҡ хәлһеҙләнде* (Һ. Дәүләтшина). *Эҫенән әлһерәгән Сализ, бүлмәгә керергә тип ҡуҙғалғанда ғына, урам яҡ ҡойма башында туҙған ерән сәс күренде..* (Х. Мохтар). *Халыҡты ҡырҙан йыйып ҡайтарырға тапшырылған десятниктар, сотниктар арып, хәлдән тайҙылар* (Һ. Дәүләтшина). *Йәй буйы нисәмә малай тотоп эшләтәләр. Ҡон юҡ, төн юҡ, бахырҙар, арып, арманһыҙ булып йығылалар* (Ғ. Дәүләтшин). *Дошман ҡыҫа, ҡара тиргә, ҡанға батып — ну беҙҙең пружина бүтәнсә бер сантиметрға ла ҡыҫҡармай..* (Ғ. Әмири). *Көнө буйы ҡаҙына торғас, телеңде арҡыры тешләрҙәй булаһың* («Һәнәк»). *Быйыл ҡыш ҡалаға барғанында Ҡәҙермәт, сит илдә эшләнгән туфли һатҡан саҡтарына юлығып, магазинда ике сәғәттән артыҡ, йән тирҙәре сыҡҡансы, сиратта тороп, шуны алып ҡайтҡайны* (Н. Мусин).

**Аслыҡ, йотлоҡ, йот.** Аҙыҡ-түлеккә дөйөм ҡытлыҡ. **Йот, йотлоҡ** — ҡаты аслыҡ. *Анау бер көнө ағайың аслыҡта ире үлгән Айбикәләргә барып ингән* (Ғ. Дәүләтшин). *Бик ҡаты ҡытлыҡ, йотлоҡ, ауырыу башлана* (Ә. Вахитов). *Белемлегә йот юҡ, белемһеҙгә ҡот юҡ* (мәҡәл). *Блокаданы, аслыҡтарҙы еңдек. Эске дошман емерә алманы* (Б. Бикбай).

**Асығыу, йотоғоу, сөрләү** *һөйл.*, **ҡорһаҡ асыу** *һөйл.*, **ҡарын асыу** *һөйл.*, **билбау аҫты бушау** *һөйл.*, **эстә < ас > бүре олоу** *һөйл.* Аслыҡ кисереү, астан ыҙаланыу. **Асығыу** киңерәк мәғәнәле: ашағы килеү, астан интегеү. **Йотоғоу** — ныҡ асығыу. **Сөрләү** — астан оҙаҡ ыҙаланыу. **Ҡорһаҡ асыу, ҡарын асыу** берен-бере алыштыра ала; **билбау аҫты бушау, эстә < ас > бүре олоу** — ныҡ ашағы килеү (шаяртыу, еңелсә көлөү тойғоһон да бирә). *Фронтҡа икмәк кәрәк, ҡалала эшселәр асыға* (Һ. Дәүләтшина). *Өҫтәүенә бик асыҡтырған да ине. Шуға күрә ҡаҙҙы үҙем генә ашаным да ҡуйҙым, һеҙгә ана муйыны ғына ҡалды* (әкиәттән). *Эй киләләр ашҡынып-ашҡынып, һөртөнөп, ҡан эсәм бит, ҡан эсәм, тип йотоғоп* (Ш. Бабич). *Бар сағында бүреләй, юҡ сағында сүреләй* (мәҡәл). *Бик оҙаҡ уйнап йөрөгәс, Нурҙың ҡарыны асты, йүгереп өйгә керҙе лә шкаф тартмаһын асты* (Ф. Мөхәмәтйәнов). *Өҙөлөп-өҙөлөп ҡорһаҡ асты, ашағы килә, унан һуң йылы урында йоҡлағы, оҙаҡ итеп йоҡлағы килә* (Д. Юлтый). *Билбау аҫты бушағас, ҡарап тороу юҡ, картуф та туҡ эсәк һымаҡ тойола* (Б. Бикбай). *Тик*

*бына асыҡтырған, эстә бүреләр олой* (А. Ҡарнай).

**Асыҡ, салт, сағыу, баҙыҡ.** Балҡып торған, күҙ яуын алырлыҡ. *А с ы ҡ көн. С а л т аяҙ. С а ғ ы у нур. С а ғ ы у биҙәк. Б а ҙ ы ҡ сәскә. А с ы ҡ зәңгәр.* **Асыҡ** киңерәк ҡулланыла. *Бына күҙ яуын алырҙай сағыу биҙәкле япон шәлдәре* (Н. Мусин). *Мин күнәм бөтәһенә лә — яҡшыға, яманына, көндәрҙең салт аяҙына һәм болотло сағына* (М. Кәрим). *Ал ҡояштың баҙыҡ нурҙары еҙ батмусҭа сағылып уйнаны* (М. Тажи).

**Асыуланыу, үртәнеү, күбенеү** *күсм.*, **ҡабарыныу** *күсм.*, **асыу ҡабарыу (ташыу), талаҡ ташыу** *һөйл.*, **сикә ҡыҫылыу** *һөйл.*, **ҡан ҡайнау, ҡан ҡыҙыу, һарыу ҡайнау.** Нимәгәлер ризаһыҙ булып, ҡыҙышыу; йән үртәлеү. **Асыуланыу** киңерәк мәғәнәле: бөтә йән эйәләренә ҡарата ҡулланыла. **Үртәнеү, күбенеү, ҡабарыныу** — үҙлегенән асыу килеү, сәбәпһеҙгә асыуланыу төҫмөрө лә бар (кешеләргә ҡарата ғына әйтелә). **Асыу ҡабарыу (ташыу)** — әкренләп асыу ҡалҡыу. **Талаҡ ташыу, һарыу ҡайнау, ҡан ҡайнау, ҡан ҡыҙыу** — бик ныҡ асыуланыу; **сикә ҡыҫылыу** — асыуҙан саҡ-саҡ тыйылыу. *Шәрифә әбей орошоп та, асыуланып та, илап та ҡараны, ләкин Тимербулат быларҙың береһенә лә ҡараманы* (Һ. Дәүләтшина). *Улар ҙа, бер нәмәгә асыуланһалар: — Фариза кейәүе! — тип кенә ебәрәләр. Уның тәүге һүҙҙәре миңә артыҡ тәьҫир итмәй. Әммә һуңғыһы инде — асыуҙы ҡабарта* (Д. Юлтый). *Ул, үртәнеп, ҡағыҙҙы йыртҡылаyны һәм ҡалын ҡарағай таҡтанан эшләнгән урнаға ташланы* (Н. Мусин). *Үҙенә асыҡтан-асыҡ шундай ғәйеп ташланыуына асыуы таш[ты] старшина[ның]..* (Ғ. Ибраһимов). *Әммә уның бисәһе, талағы ташып, ҡунаҡтарға һыртын биреп ултырған да ауыҙ эсенән ниҙер мығырҙана башлаған* (әкиәттән). *Мәҡәләне иҫенә төшөргән һайын уның һарыуы ҡайнаны* (Р. Низамов). *Яратмаған кешеһен иҫкә төшөрһәң, сикәһе ҡыҫылып ала ла китә* (һөйл. теленән). *Беҙҙең был илауыбыҙ күрше яҡҡа тәьҫир итте. Уларҙың да ҡандары ҡыҙҙы* (Д. Юлтый). *Ул тағы элекке хәленә ҡайта, ҡаны ҡайнай башлай* (И. Насыри).

**Асыу тотоу (һаҡлау), теш ҡайрау** *һөйл.*, **ҡуйында таш йөрөтөү, ҡуйында йылан аҫрау.** Асыуҙы йәшереп, үс алырға ниәт тотоп йөрөү. **Теш ҡайрау** — асыу белдереп, үс алырға асыҡтан-асыҡ янау. **Ҡуйында таш йөрөтөү, ҡуйында йылан аҫрау** — алдында яҡшатланып, аҫтыртын асыу тотоу. *Егеттәр бер-береһенә асыу тота, үс һаҡлай, ә ҡайһы саҡта ыҙғышып та китә* (Ғ. Лоҡманов). *Арғы яҡтан беҙгә теш ҡайрай торған контрҙарға беҙ ниндәй ҡорал менән барырға беләбеҙ* (И. Насыри). *Әллә ҡасанғы эшкә үпкәләп, ҡуйында таш йөрөтөү ир кешегә килешкән эш түгел. Асфар Хәйбуллин әле лә ҡуйынында йылан аҫрап йөрөй, ти* («Совет Башҡ.»).

**Аҫыл, затлы, ҡиммәтле.** Хаҡы, баһаһы бик юғары булған. *А ҫ ы л кейем. А ҫ ы л таш. З а т л ы тире. Төрлө-төрлө аҫыл таштар тигәнебеҙ ана шул Урал батырҙың аҫыл һөйәктәре, ҡиммәтле һөйәктәре икән ул* («Урал батыр»). *Беҙҙең тормош юлына аҫыл келәм түшәп ҡуйғандары бар* (Б. Бикбай). *Ҡара ерлеккә эре алһыу сәскәләр төшкән, йылҡылдап торған шәльяулыкты яҙып ҡарағас, Кәримәнең иҫтәре китте. — И-һии..һы... Бигерәк затлы нәмә икән..* (Н. Мусин).

**Атаҡлы, данлы, данлыҡлы, билдәле, танылған, күренекле, шанлы, шөһрәтле, мәшһүр** *кит.* Эш-ҡылығы йәки башҡа берәй сифаты менән дан алған, шәпкә сыҡҡан. **Атаҡлы, данлы, данлыҡлы** киңерәк мәғәнәле, кешегә генә түгел, күренештәргә ҡарата ла әйтелә. *А т а ҡ-*

*лы ғалим. А т а ҡ л ы колхоз. Д а н л ы йылдар. Д а н л ы ғүмер. Д а н л ы ҡ л ы кеше.* **Билдәле, танылған** — абруйы яҡшы уҡ таралған (кешегә ҡарата ғына әйтелә). *Б и л д ә л е артист. Т а н ы л ғ а н рәссам.* **Күренекле** — дан-шөһрәте көслөрәк булған (күберәк айырым профессия кешеләренә ҡарата әйтелә), кире сифатты белдермәй. *К ү р е н е к л е ғалим.* **Шанлы, шөһрәтле** — оло данға эйә булған; **мәшһүр** — даны бик ҙур булған, бөйөккә яҡын. *Хәҙер Әхмүш өсөн рус классиктары ғына түгел, донъя әҙәбиәтенең дә атаҡлы күп яҙыусыларының әҫәрҙәре таныш* (Б. Бикбай). *Аҡсал ғына яурын, ала ҡанат — Урал ғына тауҙың бөркөтө. Бүгәсәү ҙә менән ай Салауат — Әрәсәйҙең данлы егете* (халыҡ йырынан). *Әптерәй ағай — данлыҡлы балта оҫтаһы* (Д. Юлтый). *Борон-борон заманда Асылыкүл менән Дим йылғаһы араһында Сәмәр тигән бер данлыҡлы хан йәшәгән, ти* (әкиәттән). *Ул [Килдебай] ике ауылға билдәле кеше, эште уйлап эшләй торған кеше* (Ғ. Дәүләтшин). *..Хәҙер инде уҡытыусы Баҡый, коммунист Баҡый тип танылған был кеше менән Айбулат беренсе тапҡыр яҡындан осрашты* (Һ. Дәүләтшина). *Ике йыл тигәндә Ямаев филармонияла иң күренекле артистарҙың береһе булып китте* (Б. Бикбай). *Бына шулай итеп, Күк Урҙаның тирә-яҡҡа дәһшәт һалып килгән шанлы пайтәхете йәшәүҙән туҡтаны* (Ә. Хәкимов). *Арыҫлан ..Бирҙеғолдоң яу баҫтырышып йөрөгөн дә, Петр батшаның мәшһүр ҡаһарманы Алдар батырға ҡаныҡыуын да ҡалдырманы* (Ғ. Ибраһимов).

**Атау, исемләү, исем ҡушыу.** Исем, атама биреү. **Атау** һүҙенең ҡулланылышы киңерәк, ҡушамат ҡушыуҙы ла белдерә. **Атау, исемләү** *кемде: Ә ана теге батарея янындағы өҫтәл артында ултырыусы Хәсәншаны «Әстәғфирулла ағай» тип атаныҡ* («Һәнәк»). *Минең күңелемдә һеҙгә мәғлүм булмаған бер мөхәббәт бар, мин уны әҙ тип исемләнем* (М. Ғафури). *Билдәһеҙ замандарҙан уҡ уны ауылдаштарым Ерек шишмәһе тип атаған* (Б. Бикбай). **Исем ҡушыу** *кемгә: Уға [атҡа] «Осҡон» тигән исем ҡушылды* (Ғ. Әмири). *Атаһы шунда уҡ — Алпамыша булһын! — тип исем ҡушып, ҡыуанып алып ҡайтып китә* («Алпамыша»).

— Атама, исем, ат.

**Атланыу, менеү.** **Атланыу** *нимәгә: Иртәгеһен ел етмәҫ Ерәнсәйгә атланып, был бай юлға сыға* (әкиәттән). **Менеү** *нимә, нимәне: ат м е н е ү, үгеҙ м е н е ү* һ. б. *Алпамыша Аҡколайҙы менә, аттарға бер һуғып, күмәкләп сығып китәләр* («Алпамыша»). *Урал тырышыптырмашып батҡан еренән сыҡты ла яңынан Аҡбуҙатҡа атланды, ти* (әкиәттән).

— Менге (ат).

**Ау, һунар, аң** *һөйл.* Ҡейек, йәнлек тотоу шөғөлө. *А у ғ а барыу. Һ у н а р ғ а йөрөү. Һ у н а р мылтығы. Һ у н а р эте.* **Аң** һирәгерәк ҡулланыла. *А ң ғ а барыу. А ң ғ а йөрөү. Мәсем хан ғәскәр менән ауға сыҡҡан, ау аулап, төрлө-төрлө тауға сыҡҡан* («Бабсаҡ менән Күсәк»). *[Браконьерҙар] һунар осоро башланғансы һәм тамамланғас та, ҡош-ҡорт, ҡырағай йәнлек ата, тыйылған ҡоралдар менән балыҡ тота* («Совет Башҡ.»).

— Аусы, һунарсы.

**Ауыр, һәлмәк, тос.** Ауырлығы бер саманан артыҡ булған; еңелдең киреһе. **Ауыр** киңерәк мәғәнәле. *А у ы р йөк. А у ы р бүрәнә. А у ы р кейем.* **Тос** айырым нәмәләргә ҡарата ғына ҡулланыла. *Т о с кәүҙә.* **Һәлмәк** — тотоп, күтәреп ҡарауға ауыр тойолған. *Йәйәүлегә янсыҡ та ауыр* (мәҡәл). *Туҡта, нишләп букет ауыр, эсенә нимә тулған?* (Ғ. Сәләм). *Павел Афанасьевич үҙе өйрәк-*

*тәрҙе ҡомда аунаты, үҙе һөйләнә:* — *Быныһы тос ҡына икән* («Совет Башҡ.»). *Салауат килә ғәскәр башында, ат уйнатып, Урал буйлатып, ҡалҡанҡайы һәлмәк, уғы мәргән, батша яуын ҡырҙы шаулатып* (халыҡ йырынан). *Ҡинйә ..һәлмәк кенә баҙар тоҡсайын ҙур һаҡлыҡ менән һөйрәп алып, ҡар баҙына төшөрөп ҡуя һалды* (Ф. Исәнғолов).

**Ауырлыҡ, ҡыйынлыҡ.** Тормош, йәшәйеш өсөн уңайһыҙ, яйһыҙ хәл. *А у ы р л ы ҡ менән көн итеү. Ҡ ы й ы н л ы ҡ килеү. Ҡ ы й ы н л ы ҡ т а р аша үтеү. Янһары, йөҙө ҡара ҡойолоп, өйөнә ҡайтып керә. Ҡәләше шунда уҡ аңлай уның хәлен: йәнә ауырлыҡ килгән* (әкиәттән). *Аттар шуға асыуланып, яндарында ҡатар торған бүтән ят аттарҙы тешләп ҡыуырға ынтылып, үҙҙәренә тағы ла ҡыйынлыҡ тыуҙыралар* (Һ. Дәүләтшина). *Ҡыйыулыҡтан мәхрүм кешеләрҙең тормоштары тулы ҡыйынлыҡ* (Ф. Рәхимғолова).

— Ауырлашыу, ҡыйынлашыу.

1. **Ауыртыу, һыҙлау, әрнеү.** Берәй сир, яранан тән өлөштәре һыҙланыу. **Ауыртыу** — киңерәк мәғәнәле, ғөмүмән, һыҙланыу. *Баш а у ы р т ы у. Эс а у ы р т ы у.* **Һыҙлау** — өҙлөкһөҙ һулҡылдап ауыртып тороу. *Аяҡ һ ы ҙ л а у. Теш һ ы ҙ л а у.* **Әрнеү** — әсе булып, үҙәккә үтеп һыҙлау (күберәк яранан, бешеү, өшөүҙән һ. б.). *Уның аяғы яралы икәнен, әле ауыртып, һыҙлап килгәнен яңы ғына ишеткән иптәштәре Асатайҙы ҡапыл ашыҡтырҙылар..* (Һ. Дәүләтшина). *Ә ҡайһы берәүҙәре: ҡолаҡ ҡысый, аяҡ һыҙлай, көн йонсой икән, тиҙәр* («Совет Башҡ.»). *Өсөнсө көн епшек ҡар яуа. Өсөнсө көн тоташ, өсөнсө көн әрней минең иҫке бер яра* (М. Ҡәрим).

2. **Ауыртыу, һыҙлау, әрнеү, һыҡрау.** Ауыр тойғо кисереү, әсенеү (күберәк *йөрәк, эс* һүҙҙәре менән ҡулланылалар). *Йөрәк ә р н е ү. Һ ы ҡ р а у. Эс һ ы ҙ л а у. Баланың бармағы ауыртһа, әсәнең йөрәге ауыртыр* (мәҡәл). *Ҡуйсы, ҡуйсы, уларҙы һөйләһәң, әле лә йөрәгең әрнеп китә* (Ғ. Дәүләтшин). *Йәшем ҡайғы йыуҙы. Ләкин бында йөрәк һыҡрай, күҙҙә йәшем юҡ* (Ғ. Сәләм). *Шул юлдарҙың ташын, ҡомдарын һаман аҡтара бит ошо ҡыҙҙар, ҡулдарына тотоп ломдарын... Һыҙламаймы икән ҡулдары?* (Р. Ғарипов).

**Ауырыу** *ҡ.*, **сирләү, сырхау, сырхаулау, хәл өҫтөндә ятыу (булыу).** Һаулыҡ китеү, сирле булыу. **Ауырыу, сирләү** — берберенә яҡын синонимдар, текста алмаштырып була. **Сырхау** — гел генә һыҙланып тороу, һыҙып ауырыу. **Хәл өҫтөндә ятыу** бик ҡаты ауырыу, үлем хәлендә булыу. *Берҙән-бер көндө батша ауырып китә* (әкиәттән). *Сәләмәт сағында Ҡатюшаны бик ҡараны ла бит — ауырып китте. Үпкәһе ауырта* (Д. Исламов). *Булмаһаң һин, мин һине һағынып ҡына сирләп ятам* (Ш. Бабич). *Ат тирләһен, сирләмәһен* (мәҡәл). *Аҡ кәүҙәңдең ҡәҙерен, сырхау булғас, белерһең* (мәҡәл). *Бына хәҙер Урал батыр хәл өҫтөндә ята* (әкиәттән). [*Ҡилмәк абыҙ:*]— *Йыйынға килмәгәс, сырхаулайҙыр, ахырыһы,— тип хафаға төшкәйнем* (Ғ. Ибраһимов).

**Ауырыу** *и.*, **сир, рәнйеү, киҙеү, сырхау.** Һаулыҡ юғалған, ҡаҡшаған хәл. **Ауырыу, сир** киңерәк ҡулланылышлы: кешегә, бөтә тереклектәргә ҡарата, башҡалары кешегә ҡарата ғына әйтелә. **Рәнйеү** — тән һыҙланыу; **киҙеү** — йоғошло сир, рәт ауырыуы; **сырхау** — оҙаҡ һуҙыла торған һыҙланыулы ауырыу. *Инде был ауырыу Ҡарабашҡа килеп эләккән икән* (И. Насыри). *Ауырыуын йәшергән — үлгән* (мәҡәл). *Минеңсә, һеҙҙең өлкә буйынса ла файҙалы булыр ул, сирҙе булдырмау өсөн алдан сара күреү* (Ғ. Әмири).

*Яҙлы-күҙлә кизеү ҡалҡа торған* (һөйл. теленән). *Әлегәсә һаусәләмәт, рәхәт йәшәгән Зәйнәп тә сырхауға әйләнде һәм ахырҙа үлеп китте* («Совет Башҡ.»). *Асыуын, ғәрлеген, көндән-көн ныҙыраҡ йонсотоусы сырхауын был юлы йәшерә алмауына йәне көйҙө Әмирҙең* (Ә. Хәкимов). — Ауырыу, сирле, сырхау (кеше).

**Ауыш, иңкеү, һарҡыу.** Торошо бер яҡҡа табан түбән. *А у ы ш юл. А у ы ш иҙән. И ң к е ү урын. Һ а р ҡ ы у урын.* **Ауыш** күберәк ҡулланыла. *Ҡашҡа ҡола, күп йөрөп өйрәнгән был ауыш юлға килеп төшкәс, тағы ла шәберәк юрта башланы* (Ғ. Ғүмәр). *Еләк-емеш ҡыуаҡлыҡтары өсөн тигеҙ йәки бер аҙ иңкеүерәк ерҙәр яйлы..* («Совет Башҡ.»).

**Ахмаҡ, алйот, тиле, иҫәр, йүләр, тинтәк, диуана, аҡылһыҙ, һантый, һәтәү, иҫәүән, яртаҡыл, утыҙ туғыҙлы, ҡырҡҡа берәү тулмаған, башына тай типкән, йөҙгә берәү тулмаған, аҡылға бер төрлө, аҡылға теүәл түгел.** Аҡыл йәһәтенән камил булмаған (башлыса ябай һөйләү теленә хас һүҙҙәр, әрләү, хурлау өсөн ҡулланылалар), исем дә, сифат та була алалар. **Ахмаҡ, алйот** киңерәк ҡулланыла: эш-ҡылыҡҡа ҡарата ла әйтелә. *А х м а ҡ уй. А х м а ҡ эш. А л й о т хәбәр.* **Тиле** — бөтөнләй аҡылын юғалтҡан, дыуамалға тартым; **тинтәк** — еңел аҡыллы, тилерәк. **Йүләр** иркәләү һүҙе итеп тә ҡулланыла. *Их, һин й ү л ә р е м. Й ү л ә р к ә й. Аҡыллыға ым да етә, ахмаҡҡа туҡмаҡ та аҙ* (мәҡәл). *Аҡыллының теле күңелендә, аҡылһыҙҙың күңеле телендә* (мәҡәл). *Һәр ҡасан тик тор: берәй ахмаҡ һүҙ һөйләһә, бел: уға һүҙ ҡайтарыуҙан тик тороу артыҡ таһа* (Ш. Бабич). *Алйот юлдаш булмаҫ, ишәк моңдаш булмаҫ* (мәҡәл). *Был алйот ҡына түгел, шыр тиле икән! — тиҙәр_тегеләр* (әкиәттән). *Иҫәрҙең иҫе булмаҫ, ялҡауҙың эше булмаҫ* (мәҡәл). *Йүләр йүкә һуйыр, аҡыллы тәкә һуйыр* (мәҡәл). *Ике тинтәк бергә килһә, һуғыштырған һары бал; ике һылыу бергә килһә, ҡыуандырған һары бал* (халыҡ йырынан). *Егет кенә саҡтың ҡәҙеркәйен диуана-ахмаҡ ҡына белмәйҙер* (халыҡ йырынан). — *Әҙәм ышанмаҫтай һүҙҙе ысын булһа ла һөйләмә. Кит, һантый, бында вертолет нәмәгә кәрәк,* — *тим* (И. Ғиззәтуллин). [*Ҡонҡас сәсән:*] — *Һантый тиме? Үҙе алйоттоң алйото ул. Йүнле әҙәм кеше аҫтырмай* (Ғ. Ибраһимов). *Әхмүштең асыуы онотолған, һәтәү шаярыу һүҙҙәренән, ихахайҙарҙан өй эсе гөр килә, күкле-йәшелле тауыштар менән йырлашалар* (Б. Бикбай).— *Әллә халыҡтың бөтәһе лә беҙҙең кеүек һантый тиһеңме? — тип ҡыҙа Әпләс* (Һ. Дәүләтшина). [*Ишмырҙа:*] *Йә, иҫәүән, күп лаҡылдап торма!* (Д. Юлтый). — *Кем булһын, билдәле инде, Мораташа байҙың утыҙ туғыҙлыһы* (Һ. Дәүләтшина). *Мулла ҡапыл күңелһеҙләнә. Был мине алдай, тип уйлай. Шулай ҙа асыуын һиҙҙермәй. Аҡылға бер төрлөрәктер, тип уйлай* (әкиәттән). [*Салих:*]— *Тракторҙы һиңә бушлай бирәме? Ярлы-ябағаның рәхмәтенә бирергә, хөкүмәттең башына тай типмәгән* (Й. Гәрәй).

**Ашау, туҡланыу, аҙыҡланыу, туйыныу, тамаҡланыу, тығыныу** *һөйл., тупаҫ* **ейеү** *иҫк.,* **төйөү** *күсм.,* **тойзороу** *күсм., һөйл.,* **бөгөү** *күсм., һөйл.,* **йыфырыу, йомдороу, тамаҡ ялғау, тамаҡ туйҙырыу, үҙәк ялғау.** Аҙыҡ, аш-һыу ҡабул итеү. **Ашау** киң ҡулланылышлы: кешегә, бөтә йән эйәләренә ҡарата әйтелә; **туҡланыу, аҙыҡланыу** үҫемлектәргә ҡарата ла әйтелә (биологик термин була). *Яһалма а ҙ ы ҡ л а н ы у.* **Туйыныу** — кешегә ҡарата ғына әйтелә. **Тамаҡланыу** — ашап алыу (кешегә ҡарата). **Тығыныу** — туй-

маҫтай булып, күп ашау. **Төйөү, бөгөү, йығырыу, йомдороу, тойзороу** — ашығып, ҡабалан-һоғалан бик күп итеп ашау. Был өс һүҙҙә яманлау, хурлау тойғоһо бирелә. **Тамаҡ ялғау, үҙәк ялғау** — әҙ-мәҙ ашап алыу, ашаштырыу. **Тамаҡ туйҙырыу** туйғансы, күңел булғансы ашау. *Күптән күрмәгән итте туйғансы ашау — беҙҙең өҙөлгән йөрәктәребеҙҙе ялғап ебәргән кеүек булды* (М. Ғафури). *Ер өҫтөнән аҫты артыҡ мең мәртәбә, байҙар табанын ялау менән туҡланһам!* (Т. Йәнәби). *Тик бирелгән сохари, консерва запастары менән генә туйынабыҙ* (Д. Юлтый). *Ҡыу сыбыҡҡа таянғанға, ярты-йорто туйынғанға дәүләт ҡунмаҫ тимәгеҙ* (ҡобайырҙан). *Беҙ сәй эсеп, тамаҡланып бөткәндә, ҡараңғы төшкән ине* (Д. Юлтый). *Үҙең һалдатҡа киткәс, килен, баласаған һаман беҙҙә тамаҡланды* (Һ. Дәүләтшина). *Боҫон борҡоратып өймәләмә бер табаҡ йәш һарыҡ ите алда ултыра. Гәрәй бай, күрмәҫтәй булып, тығынырға теләне бөгән* (Б. Бикбай). *Көн буйы ризыҡ еймәгән дәрүиштәр һоғаналышып ашарға тотондо* (Ә. Хәкимов). *Юл буйы тауыҡ төйөп килгән кеше лә көрәшкә сыҡҡан* («Совет Башҡ.»). *Эңер ваҡыты етһә, һәр кем ашарға ултыра инде. Моғайын, Борис-Кипарис картуф менән сайра консерваһын бөгәләр*... (Ә. Бикчәнтәев). *Төшкө сәйҙән ҡалған самауырҙағы йылы һыуға икмәк ҡушып, тамаҡ ялғарға ғына ултырғайны* [*Гөлйөҙөм*].. (Һ. Дәүләтшина). *Тамаҡ туйҙырыу өсөн берҙәнбер өмөт — балыҡ ине.* («Совет Башҡ.»). *Ат ашағансы, үҙҙәре лә үҙәк ялғап алдылар* (Ж. Кейекбаев).

**Ашҡыныу, елкенеү, талпыныу** *күсм.*, **йөрәкһеү, атлығыу, йән атыу.** Ярһыу көслө тойғо менән ынтылыу. **Ашҡыныу** — ниндәйҙер теләк менән яныу; **елкенеү** — ҡайҙалыр ынтылыу; **талпыныу** — ҡанатланыу, дәрт менән яныу. **Йөрәкһеү** — йөрәк ярһыуы менән ынтылыу; **атлығыу** — сыҙамһыҙлыҡ менән нимәгәлер ынтылыу; **йән атыу** — ныҡ ашҡыныу, бик көслө ынтылыш күрһәтеү. *Егеттең йөрәге әллә нисек ашҡынып ҡуйҙы* (Д. Исламов). *Баҫҡан юлым таш ҡына, йөрәккәйем ашҡына..* (халыҡ йырынан). *Йөрәк ашҡына тиҙәр, йөрәк ярһый тиҙәр, мин ошо тойғоларҙың барыһы менән дә танышмын инде..* (Ә. Бикчәнтәев). *Ашағанда ҡолағың һелкенһен, эшләгәндә йөрәгең елкенһен* (мәҡәл). *Ил өсөн сыҡтыҡ беҙ йәш күңелдәр ашҡынып, ярлы бәхете, яҡты тормош донъяһына талпынып* (Ғ. Амантай). *Ләкин уға ҡарап рухым талпыныуҙан, юғарыға осорға теләүҙән, мөхәббәт баҡсаһындағы гөлдәргә ҡарап һайрау теләгенән туҡтамай* (М. Ғафури). — *Разифа! — тип йөрәкһеп өндәште Тәүфиҡ, үҙе ни өсөндөр ҡыҙарынды* (Ф. Иҫәнғолов). *Йүгерек аттай йөрәкһеп, сәсән ултыра алдында..* (ҡобайырҙан). *Малайҙың да шишмә кеүек булһа икән шатлығы, ул да иртән дуҫтарына һөйләр ине атлығып* (М. Кәрим). *Кеше менән һөйләшергә йән атып тора инде ул* [*Ниғмәт*] (Ҡ. Аралбаев).

— Ашҡын(ыулы), елкенеүле, талпыныулы.

**Ашлыҡ, иген.** Орлоғонан он һәм ярма эшләнә торған башаҡлы үҫемлектәр. Һүҙбәйләнештәрҙә айырылалар. *А ш л ы ҡ сәсеү. А ш л ы ҡ урыу. А ш л ы ҡ утау. А ш л ы ҡ һуғыу. И г е н игеү. И г е н урыу. И г е н каләте. Мин колхозсы, бөгөн комбайнда ашлыҡтарын йыям ҡырымдың* (Ғ. Сәләм). *Сиңерткәнән ҡурҡҡан иген икмәҫ* (мәҡәл).

— Игенсе, игенселек, игенлек.

**Ашығыу, ҡабаланыу, өтәләнеү** *һөйл.*, **ҡыҙыулау, утҡа баҫҡан бесәйҙәй булыу** *һөйл.* Ниҙе лә булһа тиҙерәк башҡарырға, тиҙ булырға тырышыу. **Ашығыу**

дөйөмөрәк мәғәнәле; **ҡабаланыу** рәт-сиратты юғалтып, ашығыслыҡ күрһәтеү; **өтәләнеү** — ныҡ ҡабаланыу; **ҡыҙыулау** — ниҙелер тиҙерәк бөтөрөргә, тамамларға ашығыу; **утҡа баҫҡан бесәйҙәй булыу** — сыҙамһыҙланып ашығыу. *Дошманға бирмә тыныу, ашыҡма ялға. Мылтығыңды ныҒыраҡ тот, алға, дуҫ, алға* (Х. Ҡәрим). *Мең ғазап менән эске кейемдәремде ҡалай етте шулай әлгеләп бөтөргәс, ҡабаланып барып шинелгә йәбештем* (Ғ. Дәүләтшин). [*Әсәһе — Фәрзәнәгә:*] *Ҡайҙа өтәләнәһең, әҙерәк ял итеп ал, өлгөрөрһөң* (Н. Мусин). *Ярты көн «кәнсәһендә ышут һалған» килен, ҡунаҡ барын ишетеп, өтәләнеп ҡайтып инде* (Ф. Исәнғолов). *Ауылға ҡайтҡас, Ғариф староста утҡа баҫҡан бесәйҙәй.. йөрөнө* (Ж. Ҡейекбаев).

— Ашығыс, ҡабалан, өтәлән.

**Ашыҡтырыу, ҡабаландырыу, өтәләү, өтәҫләү** *күсм.*, **ҡыҙыулатыу.** Тиҙерәк башҡарырға, ҡуҙғалырға ҡыҫтау. **Ашыҡтырыу, ҡабаландырыу** үҙ-ара бик яҡын; **өтәләү, өтәҫләү** — ныҡ ашыҡтырыу; **ҡыҙыулатыу** һирәгерәк ҡулланыла. *Шулай ҙа Ҡыҙырас Юлдашты ашыҡтырҙы* (З. Биишева). *Сәғди Шәмсиәгә Сәйетте ашыҡтырырға ҡуштты* (Һ. Дәүләтшина). *Твердышев.. яңынан дәртләнеп, эште ҡыҙыулатып, хәрәкәт ҡыла башланы* (Ғ. Ибраһимов).

**Аяҡ өҫтө, аяҡ үрә.** Тиң синонимдар. *Шуны ғына көткән зал, уны күреү менән, гөж итеп шаулап китте: ҡул сабып, аяҡ өҫтө баҫып алҡышларға тотондо* (Һ. Дәүләтшина). *Башҡорт иленән килгән биш батыр ғына, был тамашаны мәрәкә иткәндәй, бер ҡырҙараҡ аяҡ өҫтө тора* (Ә. Хәкимов). *Тәмәке төтөнө.. аяҡ үрә торған өйҙәгеләр хәрәкәте менән, өйөрмәләй, бер-ике уралды ла таралды* (И. Насыри).

**Аяҡсы, күрәгәсе, табынсы, тамада.** Ҡунаҡ мәжлесен алып барыусы, табын башы. **Табынсы** һирәгерәк ҡулланыла, **аяҡсы** — иң күп ҡулланылышлы һүҙ. *Аяҡсылары ла, ашнаҡсылары ла «кейәү ҙә кейәү» тип* [*Ҡинйәнең*] *маҙаһына тейеп бөттөләр* (Ғ. Ибраһимов). [*Фәйзи:*] *Минме? Мин бөгөн бында иң баш аяҡсы* (М. Ҡәрим). *Күрәгәсе тарата, күрәгәсе йырлап торһа, мәжлес шуны ярата* (таҡмаҡтан). *Ҡунаҡ саҡырған саҡтарҙа йәшерәк хужалар гел тип әйтерлек табынсы итеп уны ҡуялар* (Б. Бикбай).

# Б

**Баҙыу, баҙыныу, ҡыйыу** *ҡ.*, **тәүәккәлләү.** Батырсылыҡ итеү, ҡыйыулыҡ күрһәтеү. **Баҙыу, баҙыныу, ҡыйыу** үҙ-ара яҡын; **тәүәккәлләү** — ҙур батырлыҡ, көс талап иткән эшкә баҙнат итеү. *Шәүәли йәш бисәне күргәс, баҙып һүҙ әйтә алмай* (Б. Бикбай). *«Башҡаны яҙғас, — тиҙәр, — һуң ник үҙеңде яҙманың? Әль-яуап: — Мин үҙ-үҙемде хас тиергә баҙманым»..* (Ш. Бабич). [*Суфиян мулла:*] — *Аҙаҡ уны үҙебеҙҙең тирәләге көмөшсөләргә биреп йөҙөк яһатырға әйтеп ҡараны, тик берәү ҙә быға баҙманы* («Совет Башҡ.»). — *Беҙҙә тау-урман яҡын, — тине ул Арыҫлан, — бынан үтергә баҙынмаҫ* (Ғ. Ибраһимов). *Бына шуға ҡыйып ҡарай алмайым. Юҡҡа үҙемде ҡыйыумын тип алдайым* (М. Ҡәрим). *Тәүәккәлләгән — таш йотҡан* (мәҡәл). *Үсе яман Ҡоломбәттең, батыр, тине, тәүәккәлләп хоҙаға тапшыр, тине* («Бабсаҡ менән Күсәк»).

**Байраҡ, тыу** *иҫк.*, **әләм** *иҫк.*, **флаг.** Берәй дәүләттең, ойошманың билдәһе рәүешендә йөрөтөлгән һапҡа беркетеүле мате-

рия кисәге. **Байраҡ** йышыраҡ ҡулланыла. *Ҡыҙыл байраҡ. Байраҡ тапшырыу.* **Әләм, тыу** — ҡулланылышы сикле һүҙҙәр; **флаг** — ябай байраҡ. *Ҡыҙыл байраҡ, ҡыҙыл ялҡын төҫлө, талғын өргән елгә елберҙәй* (Т. Йәнәби). *Әшсе халыҡ йәшәһен, һөрһөн донъя сафаһын, берлек тыуын ҡулға алып, тигеҙ юлдар яһаһын* (Ш. Бабич). [*Яугир:*] *Дәүрәндең тыуын тәү күреүем түгел.. Йылан теле һымаҡ, айыра йәпле йәшел байраҡ..* (Ә. Хәкимов). *Донъя ҡыйығында ҡыҙыл әләм илем данын күккә күтәрә* (В. Нафиков). *Бейектә елберҙәгән был флаг егәрле һауынсының хеҙмәт уңыштары тураһында һөйләй кеүек* («Совет Башҡ.»).

— Байраҡсы.

**Байтаҡ, хәтһеҙ, шаҡтай, ярайһы, талай.** Күп кенә, арыу уҡ (күләм, һан, ваҡыт төшөнсәһен белдергән һүҙҙәр менән килә). **Байтаҡ, хәтһеҙ** — күп кенә; бер аҙ, бер ни тиклем. *Байтаҡ ғүмер. Байтаҡ йылдар.* **Шаҡтай** — мәғәнә көсәйтеү өсөн дә ҡулланыла. *Шаҡтай ҙур. Шаҡтай оҙаҡ.* **Ярайһы** — етерлек кимәлдә, күләмдә. *Ярайһы ваҡыт. Ярайһы тиҙ.* **Талай** һирәгерәк ҡулланыла, башлыса халыҡ ижадында осрай. *Талай ер. Алыҫта, байтаҡ ҡына алыҫта, донъяны ҡаплап алған ап-аҡ ҡар өҫтөндә бер-ике ҡараҫҡы күренде* (Ғ. Дәүләтшин). *..Ауылда уҡып йөрөгән сағында ла балаларға байтаҡ милләтселек ағыуы таратты ул* (Н. Насыри). *Бабай хәтһеҙ туҡталып торҙо. Күрәһең, үткән көндәрҙе иҫенә төшөрөү уға үтә ауыр ине* («Совет Башҡ.»). *Омелько бер һүҙ өндәшмәйенсә, летчикка шаҡтай оҙаҡ ҡарап торҙо* (Х. Мохтар). *Инде һынсыллыҡҡа ярайһы күнегеп алған Рауилдың күҙҙәре шунда уҡ самалап алды: бауға эленгән керҙәр араһында ирҙәр кейеме күренмәй ине* (Б. Бикбай). *Был дүрт батыр дүртәүе лә китте инде, арала талай көндәр үтте инде* (әкиәттән). *Матур йөҙлө, аҫыл һөйәк Күсәк бейгә талай ҡыҙҙар ғашиҡ булып бораңлаған* («Бабсаҡ менән Күсәк»).

**Бала, бәпес, сабый.** Бәләкәй ҡыҙ йәки малай. **Бала** — күп мәғәнәле, киң ҡулланылышлы һүҙ. *Бала табыу. Бала булыу. Бала ҡарау. Бала тәрбиәләү. Бала-саға. Имсәк бала.* **Бәпес** — иркәләү тойғоһон белдерә. *Бәпесте биләү. Бәпес бәүетеү.* **Сабый** һүҙендә «саф, гөнаһһыҙ» төҫмөрө лә бар. *Иламаған балаға имсәк бирмәйҙәр* (мәҡәл). *Бал татлы, балдан бала татлы* (мәҡәл). *Үҙҙәре тыуҙырған ҡәҙерле бәпес кеүек һаҡлап, яратып, Советтарҙың ғәҙәттән тыш съезына тапшырҙы* (Һ. Дәүләтшина). *Үләндәрҙә, сабый күҙ йәшеләй, ялтырап ята ысыҡ бөртөгө* (Ф Мөхәмәтйәнов). — *Күтәреп ултырт! — ти теге ҡарт. — Сабый түгелһең бит, ултыр, — ти Айыуғолаҡ* (әкиәттән).

— Балалыҡ, сабыйлыҡ.

**Барлау, теүәлләү.** Барлығынюҡлығын, теүәллеген тикшереү. *..Ябыу аҫтында ятҡан ҡаҙҙар, әллә урын килештерә алмай, әллә бер-береһен барлап, өҙлөкһөҙ ҡаҡылдаша* («Совет Башҡ.»). *Унан, мал бәрәсләп, ташлап йөрөмәһен. Малыңды теүәлләгәнең бармы?* (Т. Хәйбуллин).

**Бар(ыһы), барса(һы), бөтә(һе), тотош(о), көллө(һө), һәммә(һе), барлыҡ.** Бар булғаны, тулыһы менән. **Бары(һы), барса(һы)** һүҙҙәрендә айырма һиҙелмәй. Бөтә(һе), тотош(о) — берҙәмлек төҫмөрөн бирәләр. *Бөтә халыҡ. Тотош ил.* **Көллө(һө), һәммә(һе)** — айырым-айырым нәмәләр йыйылмаһы. *Тыңлаусылар барыһы бер юлы «ах» итеп аптыраштылар* (Һ. Дәүләтшина). *Уларҙың бөтәһе лә көндөҙгөгә ҡарағанда матурыраҡ кейенгәндәр* (С. Агиш). *Мин китер саҡта ғына һөйкөмлө күренә һәммә*

*шәй, барсаһы шат, барыһы яҡты, барыһы нурлы, мисле ай?* (Ш. Бабич). *Тотош аҡтан кейенеп, билен көмөшлө ҡәмәр менән быуып ебәргән Аҙнағол, ҡоласын киң йәйеп, кәмәлә аяҡ үрә баҫып килә* (З. Биишева). *Донъя малы өсөн ҡайғырмайым, көллө ағзаларым һау булғас* (халыҡ йырынан). *Ҡопәкөндөҙ детдомдың көллө мөлкәтен һыҙырып тейәп, балаларҙы алдылар ҙа илттеләр* (Ф. Исәнғолов).*Һәммәһе ҡороһон, етер, күкрәккә уттар таммаһын...* (Ш. Бабич). *Бүләк булһын һиңә ошо шиғыр, мин бит уға теләп ҡушып бирәм барлыҡ мөхәббәтен халкымдың* (Б. Бикбай).

**Батыр, ҡаһарман, ҡыйыус., тәүәккәл, баҙнатлы, баҙнатсыл, баҙымсаҡ, йөрәкле, ҡуш йөрәк(ле), арыҫлан йөрәк(ле).** Ҡурҡыу белмәгән, ҡыйыулығы менән танылған. **Батыр, ҡаһарман** — үтә ҡыйыу, көсө ташып торған. Исем функцияһында ла ҡулланылалар. **Ҡыйыу** — ҡурҡыуҙың ни икәнен белмәгән (эш-ҡылыҡҡа ҡарата ла әйтелә). *Ҡыйыу аҙым. Ҡыйыу егет.* **Тәүәккәл, баҙнатсыл, баҙнатлы, баҙымсаҡ** — һәр эшкә ҡыйыу тотоноусан, ҡурҡмаҫ (кеше). **Йөрәкле** — бик ҡыйыу. *Ҡыҙҙың һылыуын һайлаған, тыуған ерен һаклаған, ир намыҫын һатмаған батыры бар был илдең* (ҡобайырҙан). *Съезд.. һиңә бөгөн йыйылғандар был ерҙәрҙең батыр улдары* (Ғ. Сәләм). *Бер-бер артлы теҙелешкән, ҡалын урманлы Ҡырҡты тауҙары йылы тунға төрөнгән ҡаһарманды хәтерләтә* («Совет Башҡ.»). *Татар халҡының ҡаһарман улы Муса Йәлил тураһындағы әҫәрҙәрҙе тулҡынланмайынса уҡыу мөмкин түгел* («Ағиҙел»). *Диңгеҙҙә балыҡ кеүек йөҙгән, елкәнле кәмәләрҙә балыҡ аулап, яҡын араны арҡыры-буй айҡап сыҡҡан ҡыйыу, көләмәс егет Юламанды һағынып хәтерләйме ул?* (З. Биишева). *Тәүәккәл дә булып йөрөр булһаң, исемкәйең ҡалыр илеңдә* (халыҡ йырынан). *Буденовканы кейеп алһам, мин үҙемде көслөрәк тә, баҙнатсыл да тоям* (Т. Ҡилмөхәмәтов). *Бүре ҡанлы әҙәмдәрҙән айырылырға ғүмер буйы үҙендә көс тапмаған йөрәкле кеше бына шулай, ҡараңғы төндә, буш юл өҫтөндә, япа-яңғыҙ һәләк була* (Б. Бикбай).

**Бау, бәй.** Беркетеп, быуып ҡуйыу өсөн ҡулланылған ишеүле йәки үреүле еп. **Бау** ғәҙәттә оҙон, йыуанырак епкә ҡарата, **бәй** нәҙегерәгенә әйтелә. *Бауҙың оҙоно, һүҙҙең ҡыҫҡаһы яҡшы* (мәҡәл). *Улар атышып уйнаған арала Урал эргәләге бер ҡарама ботағына бау менән ат башы хәтле бер таш аҫып ҡуйҙы ла үҙе, ҡасып-боҫоп ҡына, дейеү йәшәгән мәмерйә алдына үтеп китте, ти* (әкиәттән). *Булыр ҡолон бәйҙә уйнар* (мәҡәл).

— Баулы, бәйле; баулау, бәйләү.

**Баһалау, нарыҡлау.** Хаҡ-киммәтен билдәләү, баһа биреү. **Нарыҡлау** һирәгерәк ҡулланыла. [*Тәкбиров:*] — *Иптәш Ғәлиева, беренсенән, беҙҙең эште идаралыҡ отчетыбыҙҙың ни тиклем ентекләп яҙылыуына ҡарап баһалаясаҡ* (Н. Мусин). *Сюжеттың мауыҡтырғыс булыуы, драматиклығы йыш ҡына хикәйәне уңышлы тип нарыҡлауға килтерә* («Совет Башҡ.»).

**Башҡа, бүтән.** 1) *с.* Икенсе төрлө, был түгел. *Үҙ ҡанатым булып осмай торһам, миңә башҡа ҡанат кем бирер?* (М. Ғафури). *Минең уйымса, улар өсөн башҡа кеше булырға тейеш түгел* (С. Агиш). *Донъяла тик бүтән сик — тегендә улар, был яҡта беҙ, унда әле төн, беҙҙә көндөҙ* (М. Кәрим).

2) *р.* Икенсегә, ҡабат. *Ҡарт уны бер генә һоғонған да: — Тағы бир! — тигән.— Бүтән бирә алмайым: минең алты иптәшем бар..— тигән Ертыңлар батыр* (әкиәттән). *Шунан башҡа*

*уҡырға йөрөмәнем* (Ғ. Әмири). *Утын тейәп алып ҡайтҡансы, улар араһында бүтәнсә һүҙ булманы тиерлек* (Н. Мусин).

— Башҡаса, бүтәнсә.

3) *и*. Икенсе кешеләр. *Сәғәт ундарҙа, бүтәндәр эшкә китеп бөткәнлектән, Ҡасим яңғыҙы ғына ятҡан бүлмәгә бер ҡыҙ килеп инде* (Н. Мусин). *Ас та булмағандар, туҡ та булмағандар, өйрәнгәс, бошоноп та ҡалмағандар, башҡалар кеүек йәшәй биргәндәр, ти* (әкиәттән).

4) *б*. Сығанаҡ килештәге исемдәр менән эш-хәлдең кемдән йәки нимәнән айырым икәнен белдерә. *Күҙем төшһә, күңелем төшмәй һинән башҡа бүтәнгә* (халыҡ йырынан). *Һеҙҙән бүтән был ерҙә доға ҡылыр кешем юҡ, һеҙҙән бүтән был ерҙә рәхим ҡылыр кешем юҡ* (эпостан).

**Башкиҫәр, палач.** Үлем хөкөмөн атҡара, яза бирә торған кеше. *Һуңғы йырым палач балтаһына башты тотҡан килеш яҙыла* (М. Йәлил).

**Башҡарыу, үтәү, атҡарыу, еренә еткереү, тормошҡа (бойомға, ғәмәлгә) ашырыу, бойомға атҡарыу.** Эште, бурысты тормошҡа үткәреү, ғәмәлләштереү. **Башҡарыу** — киңерәк мәғәнәле. *Роль б а ш ҡ а р ы у. Вазифаны б а ш ҡ а р ы у.* **Үтәү** теләк-хыялға ҡарата ла әйтелә. **Атҡарыу** — өҫтөңә төшкәнде үтәү, **еренә еткереү** — тейешле кимәлгә еткереп, яҡшы итеп башҡарыу. *Иҫәп-хисап эштәрен ул [Әхнәф], ғәҙәттә, төндә, кешеләр ял иткәндә, башҡарҙы* (Д. Исламов). *Шунан һуң мин уның йыуаш, хәрәкәтһеҙ йөҙөнә ҡарап алам да шул кешенән шундай эштәрҙең башҡарылыуына ғәжәпләнәм* (Д. Юлтый). *Ирназаров инде үҙенең өҫтөнә төшкән бурысты үтәне.* (И. Насыри). *Ҡыҫҡаһы, типһән өҫтөндәге ҡошҡорттар кеүек, һәр береһе үҙенә тапшырылған бер эште атҡара* (Ғ. Дәүләтшин). *Тауҙай эштәр атҡармаһаң, тауҙай бәхет килмәй* (С. Ғәбиҙуллин). *Шаулап-гөрләп үткән уҙған йылда бик күп мөһим эштәр атҡарҙыҡ* (Б. Вәлид). *Хөкүмәттең теләген еренә еткербеҙ* (Һ. Дәүләтшина). [*Батша:*] — *Мин ҡыҙымды өс шартымды еренә еткереп үтәүсе кешегә бирәм* (әкиәттән). *Һыу сығанаҡтарының таҙалығын күҙәтеү — уның бурысы. Ләкин, ҡыҙғаныска ҡаршы, былар ғәмәлгә ашырылмай. Был мөһим бурысты кем башҡарырға һәм тормошҡа ашырырға тейеш?* («Октябрь байрағы»). ..*Егеттәр, был эштән былай уңай ҡотолғас, еңеләйеп киттеләр ҙә Волгин менән һөйләшеп ҡайтҡан эштәрен бойомға ашырырға ашыҡтылар* (Һ. Дәүләтшина). *Операция планы отряд штабында ентекләп төҙөлдө һәм раҫланды. Уны ғәмәлгә ашырыу беҙҙең разведчиктарҙың ҙур булмаған бер төркөмөнә йөкмәтелде* («Совет Башҡ.»).

— Башҡарылыш, үтәлеш; башҡарма (комитет).

**Башлау, керешеү, тотоноу.** Берәй эш-шөғөлдө ғәмәлләштереп алып китеү. **Башлау** *нимәне? нимәнән?* киңерәк мәғәнәле. *Дәрес б а ш л а у. Һүҙ б а ш л а у. Эшкә б а ш л а у.* **Керешеү, тотоноу** *нимәгә?* [*Зәлифә:*] — *Бәй, эшләй белһәң, быны эшкә ашырыуы ни, ике тин бер аҡса. Ҡайтабыҙ ҙа эште башлайбыҙ, уның ни нәмәһе. Эште иң тәүҙә ячейканан башлайбыҙ* (Ғ. Дәүләтшин). *Ҡурҡып, кәфен һымаҡ ағарған хәлфә бил быуып эшкә кереште* (И. Насыри). *Ҡыҙыл армеецтар бер-береһенә ҡарашып алдылар ҙа ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына уйындарына тотондолар* (И. Насыри).

— Башланғыс, башланмыш.

**Башта, тәү(ҙә), алда, әүәл, элек, элгәре, борон.** Беренсе сиратта, иң тәүге, алдын булып. **Башта, тәүҙә** — тәүге мәлдә. **Алда, әүәл, элек, элгәре** күберәк сығанаҡ килеш исемдәрҙән һуң ҡулланылалар;

**борон, элек, элгәре** һүҙҙәре -*маҫ* / -*мәҫ* ялғаулы сифат ҡылым менән дә килә. *Тормаҫ б о р о н. Ҡилмәҫ э л е к. Күрмәҫ э л г ә р е. Артыҡ һағынғас, күрешеү башта яманһыу ҙа, ятта тойолор* (М. Кәрим). *Трактор боҙ өҫтөнә төштө. Арыу ғына килде ул башта.* (Б. Бикбай). *Иң тәү мин иҫке хужаларҙың кире ҡайтыуына бик шикләнеп ҡарай башланым, сөнки большевиктар барған һайын тәрәнәйҙеләр* (И. Насыри). *Ғәҙәттә, бөтәһенән алда Сәғиҙә торҙо* (Ш. Янбаев). *Әүәл әйт дуҫыңды, әйтермен кемлегеңде* (мәҡәл). *Элек сығып, тирә-яҡты ҡараштырырға кәрәк* (А. Таһиров). *Иң элек туғайҙа һыу баҫа торған ерҙәрҙә ултырған бесән кәбәндәре бергә яҡка ташып алынды* (Б. Бикбай). *Ә бынан өс-дүрт көн элгәре, Ҡасимдар ошо сәфәргә әҙерләнеп йөрөгән саҡтарында, ҡыҙ геология идаралығына үҙе килеп инде* (Н. Мусин). *Туйға барһаң борон бар, борон барһаң, урын бар* (мәҡәл). *Беҙҙең полкты ла улар туҡтаған урынға етмәҫ борон туҡтаттылар* (А. Таһиров).

---

**Баш тартыу, ваз кисеү.** Бер эште, бурысты үтәүҙән кире сигеү; уй-теләктән ҡайтауыллау. **Ваз кисеү** — бөтөнләй ныҡ кире ҡайтыу. *Ядро ҡоралын ҡулланыуҙан баш тартыу хаҡында халыҡ-ара килешеү төҙөү ошондай сараларҙың береһе булаҫаҡ* («Совет Башҡ.»).. *Стәрлетамаҡҡа юлды Илсе аша һайлауҙан баш тарта алманы* [*Садрислам*] (Ф. Иҫәнғолов). *Ҡарабаш, аттарға ултырып, сығып китеүҙән ваз кисте* (И. Насыри).

1. **Белдереү** *ҡ.*, **белгертеү, аңғартыу, һиҙҙереү, әшкәртеү.** Ҡешегә еткереү, билдәле итеү. **Белдереү** киңерәк мәғәнәле: төрлө юл менән төшөндөрөү. *Асыу б е л д е р е ү. Ризаһыҙлыҡ б е л д е р е ү. Рәхмәт б е л д е р е ү.* **Белгертеү** — йәшерен рәүештә төшөндөрөү. *Уйҙы б е л г е р т м ә ү.* **Аңғартыу** —иҫкәртеү, иҫкә төшөрөп ҡуйыу (күберәк кинәйә, ишара менән). **Һиҙҙереү** — һиҙерлек итеү. **Әшкәртеү** — йәшерен рәүештә хәбәр биреү, ни тураһындалыр төшөндөрөү. *Самауыр ҙа, килгән ҡунаҡтарҙы һыйлауға ихласлығын белдергән һымаҡ, шаулап, боҫо борҡорап килеп алға ултырҙы* (Ғ. Дәүләтшин). *Шунан апаһы һеңлеһенә:— Бөгөн дә Мәскәй килер, иллә-мәгәр мин өйҙә икәнде белгертмә..— ти* (әкиәттән). *Иртә, заводтарҙың гудоктары яңғырай, эш миҙгелен аңғарта* (Д. Юлтый). [*Хәҙрәт:*] *Аллаһы тәғәләнең әшкәртеүенә бинаән, һинең бар ҡылмышыңдан хәбәрҙармын* (Ә. Хәкимов).

2. **Белдереү** *ҡ.*, **иғлан итеү.** Нимә тураһында булһа ла асыҡтан-асыҡ хәбәр итеү. *Икенсе көндө Буләр хандың сапҡындары был хәлде бөтә тирәяҡҡа белдереп ҡайтты, ти* (әкиәттән). *Ҡамбоджа делегацияһы был айҡанлы белдереү иғлан итте* («Совет Башҡ.»).

**Белдереү** *и.*, **иғлан, белдермә.** Берәй эш-хәл, ваҡиға тураһында яҙма хәбәр. **Белдереү** — активыраҡ, **иғлан, белдермә** һирәгерәк ҡулланыла. *Ҡапҡа эргәһендәге таҡтаға төрлө белдереүҙәр ҡуйылған* (С. Агиш). *Бер ҡатын ҙур ғына банка менән иҙелгән крахмал күтәреп инде һәм Әмирхановтан иғландарҙы алып сығып китте* (С. Агиш). *Бандиттар бында ҡуна ҡалһа, Сусаҡ тауҙың төньяҡ һарҡыуына ут яғырға. Өҫтәлмә белдермәләрҙе Истебай таң менән һыйыр көтөүен йыйырға килгәндә алып килер* (Һ. Дәүләтшина).

**Белем, ғилем, аң-белем.** Ысынбарлыҡ тураһындағы мәғлүмәттәр йыйылмаһы һәм шуны өйрәнгән фән. **Белем, ғилем** термин буларак та ҡулланылалар. *Б е л е м биреү. Ғ и л е м алыу. Б е л е м г ә һыуһау. Тәбиғәт*

*б е л е м е. Тел ғ и л е м е.* **Аңбелем** — ғөмүмән, уҡыу, һәр төрлө ғилем. *А ң-б е л е м г ә ынтылыу. Белем алыу — энә менән ҡоҙоҡ ҡаҙыу* (мәҡәл). *Әйҙә, ни бар ғилемде, ни бар белемде алып ҡалығыҙ, балам* (Һ. Дәүләтшина). *Ғилем — ҡош, аҡыл — ҡанат* (мәҡәл). *Эшлә, уҡы! Уҡып, аң-белем ал, янып торған эшсән кеше бул!* (М. Ғафури).

— Ғилми (ойошма); белемле, ғилемле.

1. **Бешеү, өлгөрөү, етешеү, етеү, етлегеү.** Үҫеп етеп, орлоҡ биреү (үҫемлектәргә ҡарата). **Бешеү** йышыраҡ, **етешеү, етеү, етлегеү** һирәгерәк ҡулланыла. *Көньяғында мандариндар бешә, пальма үҫә, дөгө өлгөрә, төньяғында мәңге иремәй торған тауҙай боҙҙар ағып йөрөйҙәр* (Р. Ниғмәти). *Күп тә үтмәне, арыштар ҙа йыйылып бөттө, уның артынан бойҙай бешергә әҙерләнеп ултыра* (Ғ. Дәүләтшин). *Ә һин, әйтсе, ҡайҙан? — Колхозға машина алдым, игендәр етешкән* (Ғ. Сәләм). *Тик ашыҡманы ҡыҙ ғына: — Алма өлгөрһөн инде, әле ҡайнар яратһаң да, бәлки һүнерһең? — тине* (Б. Бикбай).

2. **Бешеү, өлгөрөү.** Әҙер булыу, ашарлыҡ хәлгә етеү (ашһыуға, ризыҡҡа ҡарата). **Бешеү** күберәк ҡулланыла. *Ит бешеп тә сыға, ә ҡуян менән бесәй юҡ та юҡ* (әкиәттән). *Иртә барһаң, ит бешер, һуңға ҡалһаң, бит бешер* (мәҡәл). *Йә, Айыуғолаҡ, ашың өлгөрҙөмө? — тип былар уға ҡарап шырҡ-шырҡ көләләр, ти* (әкиәттән).

1. **Биҙеү, һыуыныу** *күсм.*, **күңел һүрелеү.** Берәй кешегә, нәмәгә ҡарата кире мөнәсәбәт тыуыу, күңелгә оҡшамау. **Биҙеү** йышыраҡ ҡулланыла. *Күңел б и ҙ е ү. Ирҙән б и ҙ е ү.* **Һыуыныу** — хис-тойғо бөтөү. *Бына ошондай эшләп тә эш хаҡыңды бирмәгән һатлыҡ ҡуяндарға нисек күңелең ирер, нисек күңелең ятыр. Хәҙер бит бөтә халыҡ биҙеп бөттө* (Т. Хәйбуллин). *Үҙем дә белмәйем, ниңәлер һыуындым мин унан, сит кешеләр кеүекбеҙ* (һөйл. теленән). *Мал бит — йән бит, күңел һүрелеү шул малдар арҡаһында килеп сыҡты ла инде* (Б. Бикбай).

2. **Биҙеү, биҙерәү, ялҡыу, туйыу** *күсм.*, **еләү, йөҙәү.** Күнеккән эш-хәлде бөтөнләй оҡшатмау; яратҡан, өйрәнгән кешене ҡабат күрмәҫтәй булыу. **Биҙеү, биҙерәү** киңерәк мәғәнәле. **Ялҡыу, туйыу, еләү** — бик ныҡ биҙеү; **йөҙәү** — ҡабат-ҡабат килеүҙән, кешенең әрһеҙлегенән туйыу.— *Әхмәтзәки ағай, мин хәҙер был яҡҡа йыш йөрөйәсәкмен, икенсе килгәндә төшөрмөн. Әле минән биҙеп бөтөрһөгөҙ,— тине Эрнест* (Р. Солтангәрәев). *Тауыҡ ҡайғыға һабышты, ти. Аптырағас-йөҙәгәс, ул, йылдың-йылында гел генә ҡабатланып торған был бәләнән ҡотолор өсөн, төйлөгәнгә муйынсаһын ҡайтарып бирмәк була* (әкиәттән). [*Старшина Шәрип Мерәков*] ..*Алдаҡсы, взяточник. Ҡанһыҙ әҙәм. Бөтәһе йөҙәп бөткән унан* (Ғ. Ибраһимов). *Ауырлыҡтар ҙа күрелде, биҙмәнем тик донъянан* (Б. Бикбай).

3. **Биҙеү, бүгеү, кәйегеү, ереү.** Берәй төрлө ашамлыҡтан ныҡ туйып, бөтөнләй ашағы, күргe килмәй башлау. **Биҙеү** йышыраҡ ҡулланыла, **бүгеү** — күп ашап туйыу, **кәйегеү** һирәгерәк ҡулланыла. *Малай бер саҡ ашауҙан биҙҙе лә ҡуйҙы* (Ҡ. Мәргән). *Шәкәре юҡ сәйҙән биҙә, хәйере юҡ байҙан биҙә* (мәҡәл). *Был аштан бөтөнләй бүкте ул* [*Фатима*], *еҫе танауға бәрелеү менән үк күңеле болғана башланы.* (Б. Бикбай).

**Биҙрә, күнәк.** Шыйыҡ йәки онтаҡ нәмәләрҙе һалып йөрөтә, һаҡлай торған ҡылыслы һауыт. *Гөлсөм өй эргәһендәге ҡайын ботағында элеүле торған биҙрәне алды ла әрәмәлеккә ҡарай йүгерҙе* (Н. Мусин).

*Сәлихтең һүҙҙәренә ҡарағанда, Васька һал аҫтында биш биҙрә самаһы һыу йотоп өлгөргән* (Х. Мохтар). *Ҡем һуң был? Әллә айҙағы Зөһрә ҡыҙ, ҡалдырып пар ҡунәген, шәлгә төрөп бүләген, төшкәнме ергә, ирекҡә, эҙләп һөйгән сибәрен* (М. Ҡәрим).

1. **Биҙәнеү, төҙәнеү, яһаныу, һыланыу, һыйпаныу.** Йөҙ матурлығын көсәйтеү өсөн буяныу. **Биҙәнеү** киңерәк мәғәнәле; **һыланыу, һыйпаныу** кире баһа белдерә. Парлашып килә алалар. *Бикә биҙәнеп бөткәнсе туй бөткән* (әйтем). *Әйтәйек, минең әсәйем өсөн ул,— бөтәһенән элек, бай ир, һыйлы өҫтәл, йыһазлы квартира, төҙәнеп-биҙәнеп, эшләмәй генә йәшәү* (З. Биишева). *Әлеге хур егеттәре, ..һыланып-һыйпанып Һылыуҙың алдына килеп баҫтылар* (Т. Йәнәби). *Үҙ матурлығың булмаһа, яһанып ҡына һылыу күренеп булмай инде* (һөйл. теленән).

2. **Биҙәнеү, төҙәнеү, яһаныу.** Матурлыҡ өсөн аҫыл кейемдәр кейеү, биҙәүестәр тағыу. *Һылыу ҡыҙҙай биҙәнеп, дошман күҙен ҡыҙҙырып яу аҫтырған Уралым* (ҡобайырҙан). *Әй, айкәйем, һин уның матурлығын күрһәң ине! Бигерәк тә эштән һуң, кейенеп-яһанып институтҡа китеп барған сағында күрһәң..* (З. Биишева).

**Бик, үтә, ифрат, хатта, хайран, зәһәр, ғәйәт, уғата, һәләк** *һөйл.*, **шөйлә** *һөйл.*, **харап.** Ғәҙәттән тыш; саманан, сиктән артыҡ (көсәйтеү киҫәксәләре). Берен-бере алыштыра ла алалар. **Бик** киң ҡулланылышлы. **Үтә, һәләк, ифрат, зәһәр** һүҙҙәрендә көсәйтеү мәғәнәһе ҙурыраҡ. **Уғата, шөйлә** — уның һайын; тар ҡулланылышлы. *Ул былай булған икән: совет бик яҡшы эшләп ята* (Һ. Дәүләтшина). *Бик күптәр, күп миллиондар менән бергә был хәбәр Баязитты ла ҡалтыратты* (Р. Ниғмәти). *Үтә ҡыҙыл тиҙ уңа* (мәҡәл). [*Атайым:*]—*Йыйыҡҡа саҡлы ҡояш сығарһағыҙ, аръяғына үтә йыраҡ түгел, шул төшкө тамаҡҡа етерһегеҙ,— тип Мөхәммәт ағайҙың һүҙен ҡеуәтләп ҡуйҙы* («Совет Башҡ.»). *Һалдат уйлана, бойоҡҡан, иленән ул айырылған. Ҡанаттары ҡайырылған ҡошҡа оҡшап йөрөй хайран* (бәйеттән). *Тормош менән ифрат күпте һорай, эҙәрләй ул һәр бер аҙымды, күккә ашҡан шатлығымды һорай, һорай йөҙгә сыҡҡан ҡайғымды* (М. Ильбаев). *Бәхет бар ул, валлаһи, булһа ла күк һоро, болотло. Ҡилһә лә көҙ һәләк холоҡһоҙ* (Ҡ. Ҡинйәбулатова). *Нимфочка ла шаярыуҙың сигенә етте, зәһәр ҡылана башланы* (Ә. Бикчәнтәев). *Елдәр иҫкән һайын, ҡайындарҙа япраҡ ҡәмей шөйлә* (М. Ҡәрим). *Сәғәт ярым тирәһе аҙаплана торғас, шөйлә арыу уҡ балыҡ эләктерҙеләр* (Р. Низамов).— *Ғәзиз ирем! Минең был сәғәттә йәнем ғәйәт ҡыҫылды* (М. Ғафури). *Батшаның ауырыуы уғата көсәйеп киткән* (әкиәттән). *Зөләйха, көн һайын хат яҙып, күңелде күтәрә. Күргән саҡта өндәшмәй генә ултырһа ла, хат менән һөйләшеүгә харап шәп* (Т. Йәнәби). [*Мәхмүт ҡарт:*]— ..*Мин һеҙгә уғата ла оло, бигерәк изге бер эш менән килеп төштөм бит әле* (Н. Мусин).

1. **Билдә, билге.** Берәй эш-хәл, күренеш, кеше һ. б. һәм уларҙың торошо тураһында хәбәр иткән сифат, сигнал. *Һағыныу б и л д ә һ е. Һөйөү б и л г е һ е. Ауырыу б и л д ә һ е.* **Билдә** киңерәк ҡулланылышлы. *Быны изге билдә, тиҙәр, шуға ышаныр инем,— ҡыш уҡ шулай хәбәр итә, йәйен иген уңасаҡ* (М. Ҡәрим). *Урал аръяғындағы башҡорттар һабантуйҙың билгеһе рәүешендә ҡурай менән ситекте сатраш итеп ҡуя торған булғандар* (Ҡ. Әхмәтйәнов). *Аттар ҡолаҡтарын шымартып, утҡа яҡынлашып, бышҡырып ашауҙарынан туҡтанылар: был инде яҡын ти-*

*рәлә айыу булыуҙың билгеһе* (М. Ғафури).

2. **Билдә, билге, тамға, ин, инәү, келәймә.** Башҡаларҙан айырыу өсөн баҫылған йәки ҡырҡып һалынған шартлы таныҡлыҡ. **Билдә, билге** киңерәк ҡулланылышлы. *Билдә ҡуйыу. Билге һалыу.* **Ин, инәү** — хайуандарға, ҡош-ҡортҡа һуғыла торған билдә. *Ин һалыу.* **Тамға** күберәк әйбергә ҡарата әйтелә. *Тамға һуғыу.* **Келәймә** — ҡыҙҙырып баҫыла торған тамға (гәҙиттә, малға). *Келәймә баҫыу. [Яҡуп] Был атыуҙарҙың кемгәлер бирелгән шартлы билдә икәнлеген белә ине..* (Б. Бикбай). *Билге лә генә сәнстем ай биләнгә, Шәүрә килен киләм дә тигәнгә* (халыҡ йырынан). *Ирек менән типкән йөрәктәргә ҡәһәр тамғалары киртелгәс,— ҡара төндөң ҡараңғы күгендә кескәй генә осҡон күренде* (Т. Йәнәби). *Һыртымды ярып, хур иттең, ти, ҡолағым ярып, ин иттең, ти, инле ҡолаҡ, ярыҡ һырт менән, ти, йөрөп тә булмай, буй бирҙем* (халыҡ йырынан). *Айғырҙың ботона келәймә һуғылған* (һөйл. теленән).

— Билдәләү, билгеләү, тамғалау, инәүләү, келәймәләү.

**Билдәле, билгеле, мәғлүм.** Күренеп, беленеп торған, аптасыҡ. **Билдәле** киңерәк ҡулланылышлы. *Билдәле хәл. Билдәле эш.* **Мәғлүм** — иҫкерә барған һүҙ, күберәк әҙәбиәттә һөйләмдең хәбәре итеп ҡулланыла, юҡлыҡ формаһын ҡабул итмәй. *Бөтә ҡарауылды ҡоралһыҙландырғандар. Уларҙың тормошо билдәле түгел* (И. Насыри). *Көтөүселәрҙең эше һәр кемгә билдәле, бик еңелдән түгел* («Совет Башҡ.»). *Төлкө эҙе бик билгеле яңы яуған ҡарҙарҙа* (халыҡ йырынан). *Фәтхетдин ҡарт элек фашистарға ҡаршы десантсы булып һуғышып йөрөгән.. Өс ордены, дүрт миҙалы барлығы ла мәғлүм* (Р. Низамов).

**Билдәһеҙ, аңлайышһыҙ, томанлы** *күсм.* Асыҡ булмаған, аныҡ түгел. **Билдәһеҙ** киңерәк ҡулланыла. *Билдәһеҙ хәл. Билдәһеҙ яҙмыш.* **Аңлайышһыҙ** күберәк уй-фекер менән бәйләнгән. *Аңлайышһыҙ мәсьәлә.* **Томанлы** тарыраҡ ҡулланылышлы. *Томанлы уй. Ә әсәһенең ул дәһшәтле төндә нимә уйнағанын хәтеренә төшөрөргә тырышып, Катюша күптән бирле ғазаплана — юҡ, алыҫ, бик алыҫ, томанлы..* (Д. Исламов).

**Бирелеү, мөкиббән китеү.** Бөтә күңел менән мауығыу. **Бирелеү** киңерәк ҡулланыла: хис-тойғоға сумыуҙы ла белдерә. *Эшкә бирелеү. Уйға бирелеү. Хыялға бирелеү.* **Мөкиббән китеү** — ниМенәндер ихлас мауығыу. *Эшкә мөкиббән китеү. Улар юл буйына һөйләшмәй, үҙ уйҙарына бирелеп, тын барҙылар* (Б. Бикбай). *Түрә тинеләрме, мөкиббән китәбеҙ ҙә ҡуябыҙ. Һый, хөрмәт итәбеҙ* (И. Насыри).

**Бирән, мәсекәй, убыр, һоҡһор** *һөйл.*, **аскернә** *һөйл.*, **ғуж** *һөйл.*, **ҡомағай, ас күҙ, туймаҫ күҙ, туймаҫ тамаҡ, таш ҡорһаҡ** *һөйл.*, **ҡап ҡорһаҡ** *һөйл.* Самаһыҙ күп ашап та туя белмәгән. Яманлау һүҙҙәре. **Мәсекәй, убыр** — халыҡ ижадындағы күп ашай торған яуыз заттар, кешегә ҡарата «туймаҫ тамаҡ, күп ашаусы» мәғәнәһендә әйтелә. **Аскернә, ғуж, ҡомағай** — ни тиклем ашаһа ла, асҡаҡланып тик торған (кеше). *Бур байыҡмаҫ, бирән туймаҫ* (мәҡәл). *Убыр китте, урыны ҡалды* (мәҡәл). *Убыр ҡәйнә тағы ырылдап ҡысҡырҙы, ти* (әкиәттән). *Уғыры байыҡмаҫ, һоҡһор һимермәҫ* (мәҡәл). *Был тиклем аскернә әҙәмде күргәнем юҡ ине, былай ҙа күп ашар икән, һай, һай. Ғөмүмән, йыуан әҙәм заты ғуж, убыр була, быны медицина фәне лә дөрөҫләй,— тип өҫтәне [Орлов]* (С. Ҡулибай). *Был һүҙҙе ишеткәс тә, Ҡобора ҡул таҫтамалы килтерер-*

*гә тороп китмәне, сөнки ул ирененң нимә һорағанын белә: туймаҫ тамаҡҡа аш үтмәй, араҡы кәрәк* (Б. Бикбай). [*Камилә:*] *Бына ас күҙ, ғүмерҙә туймаҫтай ҡыланғайның, туйҙырған бит үҙеңде сүпрәң* (Ғ. Ғүмәр). *Шәхми ыҡ-мыҡ итте, ҡыҙарынды, бүртенде. «Был ҡәһәр һуҡҡан бигерәк туймаҫ күҙ икән, бөтә майҙан яҙҙыра яҙҙы бит инде», тип уйланы буғай* (Т. Йәнәби).

**Бирәсәк, бирәһе, көтәсәк, үтес, бурыс.** Ҡире ҡайтарыу шарты менән кешенән алған йомош. **Бирәсәк** йышыраҡ ҡулланыла. *Б и р ә с ә к к ә алыу. Б и р ә с ә к т е түләү.* **Көтәсәк** — оҙағыраҡҡа алып торған йомош; **үтес** күберәк әйбергә ҡарата әйтелә. *Ү т е с к ә алыу. Ү т е с т е түләү.* **Бурыс:** *б у р ы с ҡ а батыу, б у р ы с т а н сыҡмау, б у р ы с ҡ а биреү. Бай бирәсәген мал менән, ярлы тир менән түләр* (мәҡәл). *Бөлгән предприятиелар һаны ла, уларҙың бирәсәге лә үткән йылдағыға ҡарағанда ике тапҡырҙан да күберәккә артты* («Совет Башҡ.»). *Тулыбай Ҡыныҡ ҡарттан үтескә тип барлығы ун ҡаҙаҡ он һораны* (Ғ. Дәүләтшин). *Бурысын йәшергән бөлөр, ауырыуын йәшергән үлер* (мәҡәл). *Бирәһең булһа, күңел тыныс түгел* (һөйл. теленән).

**Бишек, сәңгелдәк, бәллеү** *һөйл.* Йәш баланы бәүетеп йоҡлатыу өсөн эшләнгән аҫмалы нәмә. **Бишек** шиғри телмәргә тартымыраҡ. *Бишектәге бала бишкә төрләнә* (мәҡәл). *Бишектәге бала биш төрләнеп, ат атланып сапмаҫ, тимәгеҙ* (Р. Ғарипов). *Шул саҡта ул нәҙек кенә күк ебәккә урап сәңгелдәгенә һалған сабый балаға оҡшай* (И. Насыри). *Ҡәмәрҙең (шулай ине ҡыҙ) бәллеүе булған тулҡын, диңгеҙ ярһыу күңел биргән, һәм ҡояш биргән ялҡын* (М. Кәрим).

**Бойоғоу, болоҡһоу, күңелһеҙләнеү, яманһыулау, моңайыу, һумпайыу** *һөйл.*, **күңел төшөү, танау төшөү** *һөйл.* Рух төшөнкөлөгө кисереү, ауыр уйға төшөү. **Бойоғоу** киңерәк ҡулланыла; **болоҡһоу, күңелһеҙләнеү** — бер аҙ бойоғобораҡ тороу; **яманһыулау** — эстән ныҡ кисереү. **Моңайыу** — күберәк һағыштан күңелһеҙләнеү; **һумпайыу** — бойоҡлоҡто йөҙгә сығарыу, бөтөрөнөү. **Күңел төшөү** — ныҡ күңелһеҙләнеү. **Танау төшөү** — уңышһыҙлыҡтан ныҡ бойоғоу. *Юҡ, бойоҡма, күңел, бирелмә һин, бирелмә һин ауыр уйҙарға. Маруся Вася киткәне бирле ныҡ бойоҡто.* (Һ. Дәүләтшина). *Әлибай дуҫын оҙатҡас, Кинйә бөтөнләй болоҡһоп ҡалды* (Ғ. Ибраһимов). *Тик бөтә эске болоҡһоуҙы күрһәткән биттәге сөм ҡыҙылдар ғына тәҙрәнән төшкән ҡояш сыуағына нурланды* (Һ. Дәүләтшина). *Тик Ҡадир ни өсөндөр бөгөн күңелһеҙләнеберәк ҡайтҡан* (Б. Бикбай). *Заятүләктең шулай көйөп-янып, яманһыулап ултырыуын күреп, Асылыкүл батшаһы: — Былай һағышланып, һарыға һабышаһың бит һин! — ти* («Заятүләк менән Һыуһылыу»). *Маянһылыу, Ҡуҙыйкүрпәстең ҡайҙалығын белмәй, асыҡ тәҙрә алдында моңайып ултыра ине, ти* («Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу»). *Һиңә ни булды, һумпайып йөрөйһөң, йөҙөң ослайып киткән* (һөйл. теленән). *Харис минең танау төшкәнде һиҙҙе, күрәһең* (Н. Мусин).

**Бойоҡ, болоҡһоу, моңһоу, бошонҡо, күңелһеҙ, балтаһы һыуға төшкән** *кемдең,* **мороно һуҙылған** *кемдең һөйл.* Күңеле төшөнкө, кәйефе насар. **Бойоҡ** — ныҡ төшөнкөлөккә бирелгән; **күңелһеҙ, моңһоу, болоҡһоу** — шат түгел, төшөнкөлөктә йөрөгән. **Балтаһы һыуға төшкән, мороно һуҙылған** — мыҫҡыллау тойғоһо менән әйтелә. *Байбулатҡа йыйылып тулалар, ә ул инде — бойоҡ күңелдәргә ҡояштан да*

*йылы уй һала* (Б. Бикбай). — *Ни эшләһендәр инде, бахырҙар, ти дядя Гриша, үҙе моңһоу уйлана* (Һ. Дәүләтшина). *Сөнгәт бөгөн, ауырыған кеше кеүек, күңелһеҙ ине* (Ғ. Дәүләтшин).— *Һин ни эшләп, балтаһы һыуға төшкән кеше кеүек йөрөйһөң?* (М. Ғафури). *Ҡисә бик ҡуҡырайып йөрөй ине, бөгөн егеттең мороно һуҙылған* (һөйл. теленән). ..*Ҡәримә уның эргәһенә юрғалап килде, яман хәбәр ишетеүҙән ҡурҡҡан һымағыраҡ һораны: — Ниңә улай бошонҡо күренәһең, ҡыҙым* (Н. Мусин).

**Бойороҡ, әмер, фарман** *иҫк.*, **приказ.** Үтәлеүе мәжбүри һаналған ҡәтғи йомош. **Бойороҡ** киң ҡулланылышлы. **Әмер, фарман** башлыса фольклорҙа, әҙәби әҫәрҙәрҙә осрай. **Приказ** күберәк рәсми телмәрҙә, газеталарҙа ҡулланыла. *Директорҙың п р и к а з ы. П р и к а з д ы үтәү. Бойороҡто ишетеү менән килде Бабсаҡ, хан янында Ҡоломбәтте күрҙе шул саҡ* («Бабсаҡ менән Күсәк»). *Байҙың эше фарман менән, ярлының эше дарман менән* (мәҡәл). *Бынан һуңғы мөмкин була торған эштәр әмерегеҙҙә буйһонғандыр* (М. Ғафури). *Ҡәрәкмәй суртан әмере, кәрәкмәй тылсым ҡулы, зәңгәр поезд асып ҡуя йөҙ ишеген бер юлы* (Р. Ғарипов). *Икенсе көн рота приказ алды, «эйәрләргә» оло таш юлды..* (Б. Бикбай). *Башыңды һалһаң, һал, Чапай! Ленин приказын үтә!* (Х. Ғиләжев).

**Бойороу, ҡушыу, әмер биреү.** Үтәлешен мәжбүри итеп, ҡәтғи йомош әйтеү. **Ҡушыу** — ваҡтөйәк эш-йомошҡа ҡарата әйтелә. **Бойороу, әмер биреү** көслө ҡәтғилекте белдерә. *Бай Ҡыҙрасҡа ошо ишәкте йөҙҙөрөп, ерҙә аунатмайынса алып ҡайтырға бойорған* (әкиәттән). *Атлығып та осҡан ракетаның, кеше ҡушһа, юлы үҙгәрер..* (Р. Бикбаев).

**Болартыу, туҙҙырыу, аҫтын-өҫкә килтереү, быран-заран килтереү.** Рәт-сиратын ебәреү, тәртибен юҡҡа сығарыу. **Болартыу** — бола хәленә килтереү. *Өйҙө б о л а р т ы у.* **Аҫтын-өҫкә килтереү** — ныҡ болартыу, тәртипһеҙ хәлгә килтереү. **Быран-заран килтереү** — тырым-тыраҡай туҙҙырып ташлау. *Бала-сағаға ҡалдырып китһәң, өйҙө туҙҙырып бөтөрөрҙәр* (Ғ. Дәүләтшин). *Ҡарғалай ҡалҡмаған баланы биреп ашайым тип, бөтә өйҙөң аҫтын-өҫкә килтерәһең* (Һ. Дәүләтшина). *Урал батыр быға бик көйөндө, ти. Шулай ҙа уның дейеүҙәрҙе, аждаһа-йыландарҙы быран-заран килтереп, ҡырып ташлауы файҙаһыҙ булманы* (әкиәттән).

**Борсолоу, тыныcһыҙланыу, хәүефләнеү, хафаланыу.** Күңел тыныслығын юғалтыу. **Борсолоу** — ныҡ тыныcһыҙланыу; кем йәки нимәне ҡайғыртыу. **Тыныcһыҙланыу** — тынғыһыҙлыҡ кисереү. **Хафаланыу, хәүефләнеү** — ниҙәндер шикләнеп шомланыу, ҡурҡып борсолоу. *Саниәның, үҙе лә һиҙмәҫтән, ҡаштары йыйырылды, йөҙөнә борсолоу билдәләре сыҡты* («Совет Башҡ.»). *Яуап оҙаҡ килмәй торҙо. Хәтип тыныcһыҙлана башлағайны инде, әммә бер көндө уға зәңгәрһыу конверт килтереп бирҙеләр* (Ғ. Лоҡманов). *Һинең урының бына беҙ тоторбоҙ, хафаланма беҙ бар сағында!* (М. Ғафури). *Береһенән-береһе шомлораҡ хәбәрҙәр йөрөп торғанға кешеләр хәүефләнәләр* (Ғ. Ибраһимов).

**Борсоу, мaҙаһыҙлау, тыныcһыҙлау, бимазалау, мaҙаны боҙоу, мaҙаға тейеү, мaҙаны алыу, эсте ҡырыу** *һөйл.* Тыныслығын боҙоу, тынғы бирмәү. **Борсоу** киңерәк мәғәнәле: кешенең күңел торошон да белдерә. *Выждан б о р с о у. Ҡайғы б о р с о у.* **Тыныcһыҙлау, мaҙаһыҙлау, бимазалау** — кемгәлер тынғы бирмәү. **Маҙаны алыу** — йәнгә ныҡ тейеү. **Эсте**

**ҡырыу** — эстән борсоп, күңел тыныслығын алыу. *Яу уларҙың да [йәштәрҙең] күңелдәрен борсой* (Ғ. Ибраһимов). *Хәҙер инде көндөҙгө томра, себен, бөгәләк, күгәүендәрҙең маҙаһыҙлауы бөткән* (Ғ. Дәүләтшин). *Атайыңдың йоҡоһон бүлеп, тынысһыҙлап йөрөмәгеҙ* (һөйл. теленән).— *Ғәфү итегеҙ, Гөлсара Булатовна, эш ваҡытында кешене бимазалап йөрөйөм,— тип уңайһыҙланып ҡалды ул* (Ф. Исәнғолов). *Маҙаға тейгән ләпәкәйҙәр һыпырып алғандай юҡ булды* (Б. Бикбай). *Оҙаҡ йырлашҡандан һуң, ҡыҙҙар йыуа йыйырға таралды. Әлеге һағыҙаҡтар бында ла арттан ҡалмай, маҙаны боҙа инде* (Б. Бикбай). *Мал ҡәҙерен белмәҫ байға ҡаза бирер яҙаһын, ҡаза бирер яҙаһын да ауырыу алыр маҙаһын* (ҡобайырҙан). *Тик бына Йәмғиҙең сама белмәүе эсте ҡыра* (Х. Ғиләжев).

**Боҫ, быу, пар.** Йылылыҡ тәьҫирендә барлыҡҡа килгән газ. **Боҫ, быу** һыуҙан, дымдан күтәрелгәнгә, **пар** башҡа шыйыҡлыҡтарҙан хасил булған газға ҡарата ла әйтелә, физик термин итеп тә ҡулланыла. *Бензин п а р ы. П а р ҡаҙаны. П а р көсө. П а р машинаһы* һ. б. *Урал тауын боҫтар ҡаплағанда, техникалар алтын өргәндә, паровоздар өҫтән тапағанда, хеҙмәт йыры хөкөм һөргәндә* (Д. Юлтый). *Һәр ҡасан ҡыҙҙырһа көн, диңгеҙ йөҙөн ҡайнарлатып, быу булып күккә оса ла, һыу булып ергә төшә* (Ш. Бабич). *Айбулат ҡаҙан быуы, самауыр боҫо менән йылынған өйөндә гимнастеркаһының иҙеүен ысҡындырып, бәләкәй ҡыҙын тубығына таяндырып, түрҙә аяҡ салып, семьяһы менән ыумас эсеп ултыра ине* (Һ. Дәүләтшина). *Мин уларҙың ут менән, көслө пар менән һулыш алыуҙарын яратам* (Д. Юлтый).

**Бөгөл, бөгөлөш, бөгөм, боролма, боролош, борма.** Ниҙең дә булһа йүнәлеше, торалығы үҙгәргән урын. **Бөгөл, бөгөлөш** — башлыса йылғаның ағышы үҙгәргән урын. **Бөгөм** ҡаты нәмәләргә ҡарата ла әйтелә. **Боролма, боролош, борма** күберәк юл, һуҡмаҡ һ. б. тураһында. **Боролош** һүҙенең күсмә мәғәнәһе лә бар: хәл-ваҡиғаның һынылышы, тормоштоң киҫкен үҙгәреше. *Йылға үҙенең буйраҡ тулҡындарында алыҫҡа, Ырымбур далаһының әрем еҫе томраһын быуландырып аҡҡан Һаҡмар ҡосағына ашыҡҡан бүрәнәләрҙе бөгөлө һайын ҡороға сығарып өйөп киткән* (Ш. Янбаев). [*Һаҡмар*].. *Тәрән үҙәндәр һалып, ҡаялыҡтарҙы йырып, ҡырылмаһа ҡырҡ төрлө бөгөлөштәр яһап, көнсығышҡа ҡарай борола башлай* («Совет Башҡ.»). *Ҡиң ялан уртаһынан һуҙылған ҡарлы юлдан бер йәйәүле атлай. Ҡашлаҡтағы боролмаға еткәс, ул артына әйләнеп ҡараны* (Ғ. Лоҡманов). *Оҙаҡ та үтмәй, ылауҙар юлдың боролошона инеп юғалды* (Н. Мусин).

1. **Бөгөлөү, һығылыу, эйелеү, иңкәйеү.** Торошто үҙгәртеү, туралыҡты юғалтыу. **Бөгөлөү, һығылыу** — төрлө яҡҡа ҡарап торошто үҙгәртеү. **Эйелеү** — бик түбән бөгөлөү. **Иңкәйеү** — алға эйелеү (кешегә ҡарата ғына әйтелә). *Бөгөлөп кенә, һығылып үҫә икән һыу буйҡайҙарының талдары. Хәжегәле китеп, артыр микән Ильяс байҙың йылҡы малдары* (халыҡ йырынан). *Беҙ өйгә индек. Әлбиттә, өйгә бөгөлөп кенә инергә мөмкин* (Н. Крашенинников). *Мин, ағастар кеүек, эйелмәмен, бөгөлмәмен поста торғанда* (Б. Вәлид). *Арыш урғанда ҡамыштай ҡамылды ҡыҫып тотам, иңкәйеп урам тип, бит-ҡул ҡалмай ярылып бөттө* (Ғ. Дәүләтшин).

2. **Бөгөлөү, һығылыу, эйелеү.** Куштанлыҡ күрһәтеү, ярамһаҡланыу. *Магазин мөдире — ғүмер буйы лавка тирәһен-*

*дә ышҡылып, шымарып бөткән.. күҫә ағай, тағы тикшерә килде, тип уйланы буғай, бөгөлә-һығыла: «Әйҙүк, редактор иптәш, рәхим итегеҙ!» — тип ҡаршы алды..* (Б. Бикбай). [*Рәхимә:*] — *Ағайыңдың ҡылығын беләһең бит. Уға бер ҙә ҡаршы килергә ярамай. Ул, үҙенең ыңғайына тороп, үҙенә эйелеп килгәндәрҙе ярата шул* (Һ. Дәүләтшина).

**Бөкө, тығын, пробка.** Шешә, мискә кеүек һауыттың ауыҙын ҡаплай, тыға торған нәмә. *Мискә б ө к ө һ ө. Шешә т ы ғ ы н ы. Уҡты үҙенең яртыһы оҙонлоғондағы ағастан эшләнгән сәп көпшәһенән тура үткәреп, артындағы еңелсә генә тығылған бөкөһөн төрттөрөп төшөрөргә кәрәк* (Ғ. Ибраһимов). *Сиректең тығыны төшөп китте* (һөйл. теленән).

**Бөркөү, тынсыу, томра.** Артыҡ эҫе, дымлы (һауа). **Бөркөү, тынсыу** киңерәк мәғәнәле: эҫелектән, төрлө еҫтән һ. б. **Томра** ғәҙәттә эҫе, елһеҙ (һауа). *Бөркөү өйҙән еләҫ ишек алдына сыҡҡас, Тәүфиҡ ҡомһоҙланып һуланы* (Ф. Иҫәнғолов). *Һауа бөркөү уға, һулыш ауыр, күкрәгендә ауырыу ялҡыны, янар уттай ҡыҙыу бар тәнкәйе, ярҙам итмәй һыуҙың һалҡыны* (Д. Юлтый). *Яҙғы ҡырау япраҡтарын бөргәс, ҡапыл ғына.. иҫкелектең тынсыу һауаһында тыны бөтөп үлде йәш егет* (М. Кәрим). *Ләкин бында ла томра, сбруй, дегет, тиреҫ еҫтәре аңҡып тора* (Х. Мохтар). *Томра көндәрҙә күлдәрҙең еле иҫмәй, тирәге һелкенмәй* (А. Игебаев).

1. **Бөтөнләй, тамам.** Тотошо менән, тулыһынса. *Бара-бара бөтөнләй хәлдән тайҙым* (һөйл. теленән). *Бер аҙнанан Фатима тамам төҙәлде, ләкин ул ауылға ҡайтманы* (Б. Бикбай).

— Бөтөнләйгә.

2. **Бөтөнләй, төптө, һис, шыпа** *һөйл.* Бер генә лә, саҡ ҡына ла. **Бөтөнләй, төптө** үҙ-ара яҡын; **һис** ваҡыт төшөнсәһен дә бирә. *Уның тальянына кәйеф-сафа моңо бөтөнләй ят* (Ҡ. Әхмәтйәнов). *Бара торғас, былар төптө әҙәм аяҡ баҫмаған, ҡоштар ғына осоп килә торған бер ҡараңғы урманға килеп еткәләр* (әкиәттән). *Иртә уңмаған кис уңмаҫ, кис уңмаған һис уңмаҫ* (мәҡәл). *Бығаса һис татымаған ауыр тойғо кисерҙе ул* (Б. Бикбай).

3. **Бөтөнләй, шыпа, тома, дөм.** Сифаттың мәғәнәһен көсәйтеүсе киҫәксәләр. **Бөтөнләй, шыпа** киңерәк ҡулланылышлы; **тома, дөм** айырым һүҙҙәргә ҡарата ғына әйтелә. *Т о м а наҙан. Т о м а һуҡыр. Д ө м ҡараңғы. Тома һуҡыр булып ҡалған аталары кинйә ул тураһында һорашҡан* (әкиәттән). *Шыпа белемһеҙ кеше түгел икән әле ул* (һөйл. теленән).

**Бөтөрөү, туҙҙырыу, тәләфләү, әрәм-шәрәм итеү, елгә осороу, юҡҡа сығарыу, исраф итеү.** Булғанды юҡ итеү, тотоноп бөтөү. **Бөтөрөү** киң ҡулланылышлы. *Аҡсаны б ө т ө р ө ү. Ризыҡты б ө т ө р ө ү.* **Туҙҙырыу, тәләфләү, әрәм-шәрәм итеү** — бушҡа ебәреү (хуп күрмәүҙе белдерә). **Елгә осороу** — мал-мөлкәтте бөтөнләй әрәмгә ебәреү. **Юҡҡа сығарыу** — бар булғанды бушҡараҡ бөтөрөү. *Ҡалайтып бөтөрәһең уны [игенде].. йөҙ егерме бот бит ул* (Ғ. Дәүләтшин). *Илле-алтмыш, ҡайһы берҙәре йөҙ йыл үҫмәй тороп, етлекмәй бит урман. Шуға ла уның һәр бер бөртөгөн иҫәпләп ҡырҡырға кәрәк. Ә һин, Сафа, шуны үҙең тәләфләйһең* (Н. Мусин). *Ваҡыт үтә, аҡса расходлана. Ә бына ошо әрәм-шәрәм итеүҙәр өсөн бер кем дә яуаплылыҡ һиҙмәй* («Совет Башҡ.»). *Атайҙан ҡалған малды туҙҙырыуы еңел ул, үҙең тапһаң ғына ҡәҙерле* (һөйл. теленән). *Брак эшләгән өсөн, материалдарҙы әрәм-шәрәм иткән, юҡ-бар средствоны туҙҙырған өсөн кешеләр яуапҡа тарттырыла* («Совет Башҡ.»). *Ә инде кем, йәшлектең тәүге*

*ауыҙлыҡһыҙ ялҡынын тырымтыраҡай туҙҙырып, елгә осороп бөтә, ул кеше бик иртә буш сүлмәк һымаҡ шыңғырап ҡала торғандыр* (З. Биишева). *Ҡурмәгәндәй, малды исраф итә башлар, бара торғас, бәхет-дәүләт китә башлар* (М. Ғафури). *Сәскә төҫлө күкрәп үҫкән, иң ҡәҙерле саҡтарым, бер ҙә юҡҡа алданып, тик исраф иткән бәндә мин* (Ш. Бабич).

1. **Буйһоноу, баш һалыу, баш эйеү.** Бер-берәүҙең ихтыярына бирелеү, иркендә бәйләү. **Буйһоноу** киңерәк ҡулланылышлы: тыңлау, йоғонтоға бирелеү, бәйле хәлгә төшөү төҫмөрҙәрен дә бирә. *Приказға б у й һ о н о у. Уҡытыусыға б у й һ о н о у* һ. б. **Баш һалыу, баш эйеү** — ололоғон, өҫтөнлөгөн танып, ҡәнәғәтлек күрһәтеү, тыңлау. *Мәңгенән бирле әкрен, ләкин мөһабәт, тәртипле аға торған Ағиҙелдең һыуы.. ни нәмәгәлер буйһонған* (М. Ғафури). *Әгәр үҙебеҙгә ил булып, ҡырыҫланмай, баш һалып килһә, ағаһы ла ситкә ҡаҡмаҫ* (Һ. Дәүләтшина).

2. **Буйһоноу, баш һалыу, баш эйеү, баш ороу** *иҫк.*, **теҙ сүгеү** *күсм.* Ҡемдеңдер хакимлығына бирелеү, политик йәһәттән бәйле хәлгә төшөү. *Вице-губернаторҙың аңлауынса, быларға һәр эште һәйбәтләп төшөндөрһәң, ҡан ҡойоу туҡтар, сыуалыш бөтөр, батшаға ҡол булып буйһонорҙар, зыян урынына илгә ҙур файҙа килер һымаҡ ине* (Ғ. Ибраһимов). *Ҡолтүбә, вәзир булып алғас, халыҡтан ҡан-йәш түктереп, ҡартын-йәшен теҙ сүктереп, зар илатып хөкөм йөрөтә башлаған, ти* (әкиәттән). [*Арыҫлан:*]..— *Ҡыр-ҡаҙаҡтар Рәсәйгә баш орҙолар* (Ғ. Ибраһимов).

**Буталсыҡ, сыуалсыҡ, болғансыҡ** *күсм.*, **бола.** Тәртипһеҙ хәлдә булған, боларған. **Буталсыҡ** киңерәк ҡулланылышлы. *Б у т а л с ы ҡ. эш. Б у т а л с ы ҡ тормош.* **Сыуалсыҡ** — сыуалған, рәт-сиратын аңларлыҡ түгел. *Ул был ҡәҙәр халыҡ араһынан, был саҡлы буталсыҡ ерҙән Ғарифты табыуына ышанмай башланы* (М. Ғафури). *Валсыҡ-валсыҡ, сыуалсыҡ, асыҡ-тишек, буталсыҡ, тылсым-тылсым, мәтәлсек, булһын-булһын болғансыҡ* (Ш. Бабич). *Уйҙар, төн кеүек, болғансыҡ, уйҙар, төн һымаҡ, ҡуйы* (М. Ҡәрим).
— Буталыу, сыуалыу, болғаныу; буталыш, сыуалыш.

**Бушаныу, бушау, арыныу** *кит.*, **айныу** *күсм.*, **ҡотолоу.** Эш-мәшәҡәттән, уй-хистәрҙән азат булыу, йырылып сығыу. **Бушаныу** — бер аҙ йырылып тороу. **Арыныу, айныу** — тотошо менән бушау. **Ҡотолоу** — уйтойғонан, эштән, ауыр хәлдән сығыу. [*Ҡарағол:*] *Хәҙер күкрәгем ул ауыр үс утынан бушанды* (Д. Юлтый). *Зөһрә атын юрттырып үҙе тәңгәленән үтеп барғанда ғына, ул, был уйҙарынан арынып, иҫенә килде* (Н. Мусин). *Гөлйөҙөм үҙенең тынысһыҙ тойғоһонан айный алманы* (Һ. Дәүләтшина.) *Белгән мең бәләнән ҡотолған* (мәҡәл). *Эй, суҡынған баш, бәхетһеҙ икәнһең, бынан ҡотола алмаҫһың инде* (А. Таһиров). *Борсоу, ҡайғыларҙан тиҙерәк арынып, тәпәш өйөбөҙгә ҡайтайым* (Б. Бикбай). *Йоҡлағанда ла көндөҙгө сәйер тойғоларынан ҡотола алманы Шәһүрә* (Н. Мусин).

**Бушҡа, бушалағайымға, тиккә, тигенгә, тикмәгә, тиктәҫкә, алъюҫыҡҡа, тиктомалға, әрәм(гә), зая(ға), юҡҡа.** Бер ниндәй нәтижәһеҙ, файҙаһыҙ (эш менән булыу, ваҡыт үткәреү); сәбәпһеҙгә (берәй эш ҡылыу). **Бушҡа** киңерәк ҡулланылышлы: эш-ҡылыҡҡа, ваҡытҡа һ. б. ҡарата әйтелә. *Б у ш ҡ а йөрөү. Б у ш ҡ а тырышыу. Б у ш ҡ а китеү.* **Алъюҫыҡҡа** — кәрәкһеҙгә, тиккә. **Әрәм(гә), зая(ға)** — файҙаһыҙға (ваҡыт уҙғарыуға ҡарата ғына әйтелә). **Тигенгә, тикмәгә, тиктәҫкә** һирәгерәк ҡулланыла. *Бына тағы бер көндө һәләк иттем, һиҙ-*

*мәй ҡалдым бушҡа үткәнен* (Р. Ғарипов). *Өмөтбайҙы ошаҡсы, насар итеп халыҡҡа күрһәтергә тырышыуым бушҡа ғына ине, тип беләһеңме әллә* (Ғ. Дәүләтшин). *Уҡыу менән бик тиҙ үтер был оҙон ҡыш, уйнап-көлөп бушҡа йөрөмә, балам, тырыш* (М. Ғафури). *Бушалағайымға эшһеҙ һәлпәндәп йөрөмә* (Ф. Иҫәнғолов). *Маянһылыу был хәлдең тиккә булмауын һиҙенеп: «Ҡем шулай шаярта икән?» — тип, абайлабыраҡ ҡараһа — уның алдында Ҡуҙыйкүрпәс баҫып тора ине* («Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу»). *Ҡайтам! Таң да ата, ай ҙа бата.. Тиккә арытмаған, күрәһең..* (Р. Ғарипов). *Был саңдың тигенгә күтәрелмәгәнен һиҙеп, барыһы ла өйҙәренә таралышып, урам тағы ла буш ҡалды* (Һ. Дәүләтшина). *Ординарец тикмәгә пакет килтермәгәндер..* (А. Таһиров). [*Ҡотлобай:*] *Һай, ошо Ҡунаҡбикә еңгәм, әйттем бит, ул тиктәҫкә генә саҡырмаҫ тип* (Д. Юлтый).— *Һай, ул тәрәндән уйлай торған ҡарт. Ул алъюсыҡҡа ғына инмәҫ* (Д. Юлтый). *Механиктың йырын тыңлап, үтте әрәмгә кисем. Бейетергә ине уны бик шәп йырлаған өсөн* (Т. Арслан). *Рәхмәт, дуҫтар, мине әрләгәнгә, һүҙ китмәне һеҙҙең әрәмгә* (Ғ. Рамазанов). *Халҡымдың киң күңелендә урын алһа йырҙарым, тимәк, юҡҡа түгелмәгән моңдарым, йырҙарым* (Б. Бикбай). *Туйҙан әлегерәк үткән аҡһаҡалдар йыйынын юҡҡа ғына йыймағайны Бирҙеғол* (Ғ. Ибраһимов). *Егет кенә саҡтың ҡәҙерен бел, йәш ғүмерең заяға уҙмаһын* (халыҡ йырынан). *Әйткәндәй, ысынлап та, зая уҙа ла баһа Зөлхизәнең йәш ғүмере* (З. Биишева).

**Бушлай, буш, бушҡа, хаҡһыҙ, тигенгә, тиккә.** Хаҡ түләмәй, түләүһеҙ генә (алыу, биреү һ. б.). **Бушлай, буш** йышыраҡ ҡулланыла. *Б у ш л а й уҡытыу. Б у ш эшләтеү. Әярлылар — ерһеҙ, һыуһыҙ ҡалып, байға ҡоллоҡ итте бушхаҡһыҙ* (Б. Бикбай). [*Арыҫлан:*] *Бөтөнләй буш бирергә әллә уны кәбеҫтә башы тип беләһеңме?.. Кәбеҫтәне лә тигенгә бирмәйҙәр* (С. Ҡудаш).

**Буялыу, яғылыу, йоғолоу.** Һөртөлөп, тейеп бысратыу, тап, эҙ ҡалдырыу. **Буялыу** *нимәгә* йышыраҡ ҡулланыла. *Бысраҡҡа б у я л ы у. Майға б у я л ы у.* **Яғылыу, йоғолоу** — тейеп, ҡағылып бер аҙ бысратыу. *Алма тирһәң, тир алдыңа, алма тиргән ҡулҡайың буялһын* (халыҡ йырынан). *Егеттең ике ҡулына ла эзбиз, аҡбур яғылды* (Ф. Иҫәнғолов).

**Бүлешеү, уртаҡлашыу.** Үҙара өләшеп алыу, өлөшләп таратыу. **Бүлешеү** тигеҙ өлөштәргә бүлеүҙе лә белдерә. **Уртаҡлашыу, уртаҡлау** абстракт төшөнсәләргә ҡарата ла әйтелә. *Фекер у р т а ҡ л а ш ы у.* *Бүреләр теге эт ауыҙындағы һөйәкте тартып алалар ҙа бүлешә башлайҙар* (әкиәттән). *Ул баяр яланынан бик күп хазина тапҡан икән дә, шуны баяр менән уртаҡлашҡан икән* (Д. Юлтый). *Сырыш быны яҡшы белә, мәгәр, уйлауынса, әлеге осраҡта яуаплылыҡты уртаҡлашыу ҡулайыраҡ ине* (Ә. Хәкимов).

**Бүрек, кәпәс, малахай** *иҫк.*, **ҡолаҡсын.** Йылы баш кейеме. **Бүрек** киңерәк ҡулланыла. *Ҡама б ү р е к. Ҡырма б ү р е к. Ҡолаҡсын б ү р е к.* **Кәпәс, малахай, ҡолаҡсын** тарыраҡ ҡулланылышлы, ябайыраҡ баш кейемен белдерә. *Ҡараҡтың бүрке яна* (мәҡәл). *Уҙып ҡына киткән был ғүмергә бүрек кенәмде алып һыҙғырҙым* (Һ. Дәүләтшина). *Таҙ ҙа, кәпәсен кейеп, бының артынан барҙы, ти* (әкиәттән). *Үҫте, ямғыр һуғарғанда игенле ҡырҙы, иҙеү сисеп, бураҙнала кәпәсһеҙ торҙо* (М. Кәрим).

**Былтыр, уҙған (үткән) йыл.** Быйылдан алда ғына булған йыл. **Былтыр** йышыраҡ ҡул-

ланыла. *Былтыр ҡыҫҡанға быйыл ҡыҫҡырмайҙар* (мәҡәл). *Уҙған йыл уҡ, йәйге каникул ваҡытында, ҡаҙаҡтар араһында булып, үҙенә дуҫ-иш, йылы урын табып ҡайтҡайны ул* (Б. Бикбай). *Үткән йыл был дәртле коллектив «Аҡ ҡалпаҡ» постановкаһы менән Баймаҡ, Зианчура, Хәйбулла, Учалы райондарында булып ҡайтҡайны* («Совет Башҡ.»).

**Быҫрау, быҫраныу, ҡаҡашыу, керләнеү, ҡатыу** *күсм.* Таҙалыкты юғалтыу, кер, быҫраҡ ҡуныу. **Быҫрау, быҫраныу** киңерәк ҡулланылышлы: өҫ-баш, бит, тән, ер-һыу һ. б. *Һыу б ы ҫ р а у. Аяҡ аҫты б ы ҫ р а н ы у. Иҙән б ы ҫ р а у.* **Ҡаҡашыу, ҡатыу** — бик ныҡ быҫрау (күберәк өҫ-башҡа ҡарата). **Керләнеү** — оҙаҡ йыуынмауҙан кергә ҡатыу. *Тән к е р л ә н е ү. Күлдәк к е р л ә н е ү. Таҙа ғына йөрө, быҫранма! Олатайҙар килә! — тине әсәһе Тимербулатҡа* (Һ. Дәүләтшина). *Ҡилеп ингән егет, ни әйтергә белмәй, берсә өҫ-баштары ҡаҡашып бөткән, саңтуҙан эсендә йөрөгән курсанттарға, берсә быҫранған ҡулына ҡарап торҙо..* (Ф. Иҫәнғолов). *Гөлйөҙөм уны йәлләп ҡуйҙы. Яғаһы ла керләнгән* (Һ. Дәүләтшина). *Керләнгән халат кейеү врачлыҡ эшендә һис ярамай.* (Ә. Вәли). *Күлдәк һәҙәптәре төшкән, ҡатҡан яға еңдәре, йәшкелт тутыҡҡа ҡапланған ҡайышының еҙҙәре.* (Т. Арслан).

— Быҫраҡ; быҫраҡлыҡ; керле.

**Быуат, ғасыр.** Йөҙ йыл. **Ғасыр** — китап теленә тартым һүҙ. *Әллә нисәмә быуаттар буйынса тарихи ҡыҫымдарҙы үҙ елкәләрендә үткәреү сәбәпле бөкһөп ярлыланған халыҡ күпселеген ҡуҙғатып булырмы?* (Ғ. Дәүләтшин). *Ҡалай итеп, әллә ниндәй ҡырағай йолаларҙың ғасырҙар төпкөлөнән килгән шомло өнөнә ҡолаҡ һалһын ул [Зөлхизә]?* (З. Биишева).

**Быуыу, һығыу.** Ҡул йә бау менән ныҡ итеп ҡыҫыу. *Шул саҡта Мәскәй ҡапыл Тамыр батырҙың үңәсенә йәбешкән дә быуа башлаған* (әкиәттән). *Фатима ҡапыл уның алҡымынан һығып алып, ергә йыҡты ла аяуһыҙ быуа башланы* (Б. Бикбай).

**Бәйләнеш, элемтә.** 1) Ике аралағы яҡын мөнәсәбәт. *Б ә й л ә н е ш булдырыу. Э л е м т ә урынлаштырыу. Б ә й л ә н е ш т е өҙөү. Ауыл менән ҡала б ә й л ә н е ш е. ..Шунда старателдәр менән элемтә яһау ҙа күҙҙә тотолғайны* (И. Насыри).

2) Хәбәр алыш, хәбәрләнеш. **Бәйләнеш** һирәгерәк ҡулланыла; **элемтә** һүҙенең терминологик мәғәнәһе бар. *Э л е м т ә бүлеге. Э л е м т ә тотоу. Э л е м т ә бүлеге начальнигы. Хат менән б ә й л ә н е ш тотоу. Э л е м т ә өҙөлөү.*

**Бәлә, ҡаза, бәлә-ҡаза.** Ҡайғы килтергән ауыр хәл, бәхетһеҙлек. **Бәлә** йышыраҡ ҡулланыла. *Б ә л ә г ә тарыу. Б ә л ә һалыу. Башҡа б ә л ә төшөү.* **Ҡаза** — ҙур зыян килтергән ауыр хәл, афәт. *Аҡ эттең бәләһе ҡара эткә* (мәҡәл). *Бәлә — баш өҫтөндә, ҡаза — ҡаш аҫтында* (әйтем). *Хәҙрәт тә «Аллаһы тәғәлә ярҙам итә, үҙенең ярандарын бәлә-ҡазанан һаҡлай ул» тигән йөҙ менән: — Алдашмайынса булмай ул,— ти* (И. Насыри).

**Бәләкәй, бәләкәс, кескәй, осоҡ** *һөйл.* 1) Күләме, дәүмәле ҙур булмаған. **Бәләкәй** киң ҡулланылышлы. *Б ә л ә к ә й ауыл. Б ә л ә к ә й сана.* **Бәләкәс, кескәй** — бик бәләкәй (кесерәйтеү һүҙҙәре). **Осоҡ** — бөтөнләй бәләкәй (әйберҙәргә ҡарата ғына әйтелә). *Уларҙың алдындағы бәләкәй генә ҡыҙыл флагтар, ҡояш яҡтыһында тағы ла ҡыҙылыраҡ булып, елберҙәп баралар* (Һ. Дәүләтшина). *Ул «ҡаланы һаҡлау, халыҡ армияһының ҡалалағы бүлеген көсәйтеү» тураһында*

*кескәй генә йыйылыш булып алды* (И. Насыри). *Ҡайҙалыр сырылдап алған ҡоштар ғына шул тыныслыҡты бәләкәс кенә итеп семетеп алалар* (С. Агиш). *Әтәс, тибенә торғас, бер осточ ҡына тары бөртөгө табып ала* (әкиәттән).

2) Йәше менән ҙур түгел, кесе. Исем ролендә лә ҡулланылалар. *Ҡ е с к ә й ҙ ә р өсөн уйынсыҡтар. Б ә л ә к ә с е м минең.* **Остоҡ** был мәғәнәлә һирәк ҡулланыла. [*Ғәффә:*] — *Бәләкәйҙәремдең яңы башлы-күҙле булғандарын күреп торам,ниңә ҡартайырға!* (С. Агиш). *Ул әсәһен, бәләкәс сағындағы һымаҡ, ысын ихласлыҡ менән татлы итеп үпте* (Б. Бикбай).

**Бәрелеү, һуғылыу, ҡағылыу, төртөлөү, төкәлеү.** Хәрәкәт иткән ыңғайға барып тейеү. **Бәрелеү, һуғылыу** — көс менән, нык тейеү; яҡын мәғәнәле һүҙәр. **Ҡағылыу** — әҙ генә тейеп үтеү, еңелсә һуғылыу. **Төкәлеү, төртөлөү** — нимәгәлер барып тейеп, туҡтап ҡалыу. *Сәлих кемгәлер бәрелде, шунда уҡ ҡаты һүгенеү ишетелде* (Х. Мохтар). *Халыҡ инә, сыға — иҫәбен алырға мөмкин түгел. Бер-береһенә ҡағыла, төртөлә, ашыға, ҡабаланалар* (С. Агиш). *Машина, сигә торғас, ҡоймаға төкәлде* (һөйл. теленән). *Салт аяҙ көндө ҡола ялан уртаһындағы юл менән бара ятҡанда, ул ғәләмәт ҙур бер ташҡа килеп төртөлгән* (әкиәттән).

**Бәреү, ырғытыу, ташлау, сөйөү, бырғау, бырғытыу, быраҡтырыу, олаҡтырыу, атыу, ороу.** Ҡулдағы нәмәне һелтәп ысҡындырып ебәреү. **Бәреү** киң ҡулланылышлы: туралап, тоҫҡап ырғытыуҙы ла белдерә. **Ырғытыу** башлыса ауыр, һәлмәк нәмәләргә ҡайтып ҡала. **Ташлау** — йүнәлешһеҙ, тоҫҡамай ғына ырғытыу. **Сөйөү** — күккә ҡарай көс менән атыу, һауалатыу. **Бырғау, бырғытыу, быраҡтырыу** — асыу менән атып бәреү. **Олаҡтырыу** — асыу менән ҡырғараҡ ташлау. **Атыу, ороу** — ҙур көс менән бәреп ебәреү. *Нәсимә ҡаршы сыҡҡайны, иренең таяҡ бәргәнен күреп, көлөп ебәрҙе* (Һ. Дәүләтшина). *Тамсың атып, ташты бәреү менән таштан һиңә юлдар ярылмаҫ* (Д. Юлтый). [*Соколов*] *бөтәһенән алда ташланып, дошманға граната ырғытты* («Совет Башҡ.»). *Ирек дошмандарын еңер өсөн, ергә йығыр өсөн йөҙ түбән,— һәр бер һүҙем, бомба итеп мин ырғытам шулар өҫтөнә* (Х. Ҡәрим). *Ташларға өлгөрмәне ул, янъяҡҡа туҙҙы букет* (Ғ. Сәләм). *Ҡыҙ алманы икенсе тапҡыр сөйә, тағы Ҡыҙрас итәгенә барып төшә* (әкиәттән). *Тик йондоҙҙар бейеклектә берсә янып, берсә тона — гүйә, кемдер йондоҙҙарҙы бер-бер артлы сөйөп тора* (М. Ҡәрим). *Халтуриндар бомба бырғанылар батша тәгәрмәсе аҫтына* (Р. Ниғмәти). *Килен, аптырап, бер бармағын өҙөп алды ла артҡа табан бырғытты, ти* (әкиәттән). *Рәнйетһә лә ауырыу.. ҡотолормон, ул бырғытмаҡ була упҡындан!* (А. Игебаев). *Ғәлимдең ни өсөндөр асыуы килде, майланып, тиргә ҡатып бөткән гимнастеркаһын сисеп, мейес артына быраҡтырҙы, умывальниктың һемәген нык шылтыратып йыуына башланы* (Н. Мусин). *Арбала Әптерҙең таяғы онотолоп ҡалған икән, ул уны алып ҡарап торҙо ла, бөтә асыуын таяҡтан күргәндәй, бер башынан тотоп, кәртә мөйөшөнә олаҡтырҙы, үҙе ауыҙ эсенән яман һүгенеп ҡуйҙы* (Һ. Дәүләтшина). *Донъяла шундай йөрәктәрҙең барын асһаң ине; бер тимер шешкә тағып, эт ауыҙына атһаң ине* (Д. Юлтый).

**Бәүетеү, тирбәтеү.** Йоҡлатырға йәки тынысландырырға итеп, бер тигеҙ генә һелкетеү, бәүелдереү. *Баланы б ә ү е т е ү. Сәңгелдәктә т и р б ә т е ү. Итәккә һалып б ә ү е т е ү. Батша быларҙы шатла-*

* нып ҡаршы ала. Вазифаңды үтәнең тип, мәскәйгә ҙур сәңгелдәк эшләтә, ике ялсы уны һәр ваҡыт тәрбиәләп, бәүетеп кенә торалар* (әкиәттән). *Тулҡындарҙа бәүетәләр моңдо Ағиҙелкәй менән Ашҡаҙар* (Ғ. Рамазанов). *Аҡбуҙ атҡайыңды тирләтмә, аҡ сергекәйҙәр тирбәтмә. Башҡайыма ҡайғы төштө тип, йәш йөрәкәйеңде сирләтмә* (халыҡ йырынан).

**Бәхет, ырыҫ, ҡот.** Тормоштағы етешлек, теүәллек. **Бәхет** киңерәк мәғәнәле: рухи донъяға ҡарата ла әйтелә. *Б ә х е т асылыу. Б ә х е т теләү. Б ә х е т к ә ҡаршы.* **Ырыҫ** — ғәҙәттә өлөшкә төшкән уңыш, етешлек. **Ҡот** — бөтмәҫ-төкәнмәҫ, хатта тылсымлы бәхет. *Ҡ о т китеү. Ҡ о т о н ебәреү. Ҡ о т теләү. Ҡ о т ҡасыу. Шунан һуң бабай: — Беҙҙең үҙ бәхетебеҙҙе һынап тораһы юҡ инде, балаларҙыҡын белергә кәрәк ине,— тип әйтте, ти* (әкиәттән). *Һөрт йәшеңде! Ана, бөтә бәхет, ырыҫтарың ҡайтҡан, ишләнгән* (Д. Юлтый). *Китап — белем аҙығы, белем — ырыҫ ҡаҙығы* (мәҡәл). *Яҡшы һүҙ — ярты ырыҫ* (мәҡәл). *Ҡот килгән өйҙән йот китә* (мәҡәл). *Боронғолар әйтмешләй, ҡауғалы йортта ҡот булмай бит* («Совет Башҡ.»).

— Бәхетле, ырыҫлы; бәхетһеҙ, ырыҫһыҙ.

**Бәхәсләшеү, һүҙ көрәштереү.** Үҙ һүҙеңде өҫкә сығарырға тырышып, бәхәс алып барыу. **Һүҙ көрәштереү** — ныҡ бәхәсләшеү, һүҙеңде бирмәү. *Унда ул әллә ни ҡәҙәр бәхәстәр ятлап, ҡыҫҡырышыу һәм бәхәсләшеү юлдарын өйрәнде* (М. Ғафури). *Ниғмәт, бында һүҙ көрәштереп тороуҙың стенаға борсаҡ һибеү менән бер икәнлегенә төшөнөп, урынына ултырҙы* (Ҡ. Аралбаев). [*Байғужаға*] *..бераү ҙә ауыр һүҙ әйтмәй, уның менән бераү ҙә һүҙ көрәштермәй* (Д. Юлтый).

# В

**Ваҡлау, турау, тураҡлау, бүлгеләү.** Ваҡ-ваҡ киҫәктәргә ватҡылау. **Ваҡлау** дөйөмөрәк мәғәнәле. *Таш в а ҡ л а у. Ҡаҫ в а ҡ л а у.* **Турау** — телеп тигеҙ киҫәктәр яһау. *Ит т у р а у. Утын т у р а у.* **Тураҡлау** — теләһә ҡайһылай сапҡылап ташлау. **Бүлгеләү** — һындырып ваҡ-ваҡ итеү. [*Ҡадир*] *Күп итеп утын ярҙы, ит ваҡланы* (Б. Бикбай). *Ит турауы табыштыр, ара-тирә ҡабыштыр* (әйтем). *Шунда Аҡъял батыр ҡылысын ҡынынан һурып ала һалып, аждаһаны тураҡлап ташлаған* (әкиәттән). *Ул* [*Йәнбикә*] *урындыҡҡа ашъяулыҡ йәйеп, сәй әҙерләне. Сөсө күмәс бүлгеләп һалды* (Һ. Дәүләтшина).

1. **Ваҡыт, мәл, саҡ, осор, миҙгел, дәүер, заман.** 1) Дауамлы хәл-ваҡиғаның, тәүлектең, йылдың һ. б. бер өҙөгө. **Ваҡыт** күберәк ҡулланыла. *Иртәнге в а ҡ ы т. Төш в а ҡ ы т ы. Һуғыш в а ҡ ы т ы. Бер в а ҡ ы т.* **Мәл** — ҡыҫҡараҡ ваҡыт араһы. *Эңер м ә л е.* **Осор** — дауамлыраҡ ваҡыт өҙөгө. **Миҙгел** «мәл, саҡ» һүҙҙәренә яҡын. **Дәүер, заман** был мәғәнәлә һирәк ҡулланыла. *Ҡала больницаһында Ниғмәткә операция яһауға ике аҙна ваҡыт үтеп тә китте* (Ҡ. Аралбаев). *Зиннәткә ары-бире иҫ кергәндә, ил өҫтөндә ҡаты һуғыш барған мәл ине* (Ф. Иҫәнғолов). *Нығыраҡ арбай тормоштоң һәр мәле, көнө, айы* (Р. Бикбаев). *Улайһа бик шәп саҡ булғандыр ул — «Һуғышҡа ҡәҙәре!»* (Ф. Иҫәнғолов). *Ошондай уҡ йылғалар шаулашҡан мәл, йөрәктәрҙе елкендереп ҡоштар ҡайтҡан саҡ ине* (Р. Низамов). *Осорҙар үтеп,*

*ғүмер иткән саҡта ниндәй генә хәлдәр булмай һуң?* (Т. Йәнәби). *Немецтар менән Россия батшаһы араһындағы һуғыштың иң ҡыҙған миҙгелдәре ине* (Д. Юлтый).

2) Кеше ғүмеренең билдәле бер өҙөгө. Һүҙбәйләнештәрҙә айырылалар. Был мәғәнәлә **саҡ** күберәк; **мәл, миҙгел** һирәгерәк ҡулланыла; **осор, дәүер** оҙонораҡ, дауамлыраҡ араны белдерә. *Йәшлек в а ҡ ы т. Ғүмерҙең бер м ә л е. Бала с а ҡ. Йәшлек с а ҡ. Йәшлек д ә ү е р е. Бала саҡтан күлдәгемде әсәй йыуа ине кәрәк мәлдә* (Н. Нәжми).

— Ваҡытлыса, ваҡытлы, ваҡыт-ваҡыт, ваҡытлы-ваҡытһыҙ, ваҡытында.

2. **Ваҡыт, дәүер, заман(а), эпоха** *кит.* Тормоштоң, кешелектең дауамлы йәшәйеш араһы. **Ваҡыт, дәүер** — киңерәк ҡулланылышлы һүҙҙәр. *Беҙҙең д ә ү е р. Таш быуат д ә ү е р е.* **Заман(а)** — шиғри һүҙ. *Бер з а м а н. Хәҙерге з а м а н.* **Эпоха** — бик оҙайлы ваҡыт. *Ҡоллоҡ э п о х а һ ы. Тәүтормош э п о х а һ ы. Беҙ төҙөгән социализм дәүере башта бер төш булып күренгән. Сен-Симон һәм Фурье әкиәт итеп һөйләгәндәр уның турында* (Р. Ниғмәти). *Борон-борон заманда бер бабай менән әбей булған, ти* (әкиәттән). *Ҡымшанмай ҙа мәғрур тора тауҙар, кире ҡағып заман яуҙарын* (Р. Ғарипов).

— Заманса, замандаш.

1. **Ватыу, ҡыйратыу, боҙоу, емереү.** Төҙөк нәмәне эштән сығарыу. **Ватыу** күберәк быяла нәмәгә, һауыт-һабаға ҡарата; **ҡыйратыу, емереү** ҙурыраҡ әйберҙәргә ҡарата әйтелә һәм бөтөнләй төҙәтмәҫлек хәлгә килтереүҙе белдерә. **Боҙоу** — машина кеүек нәмәләрҙе эштән сығарыу. *Әй, онотоп барам, ҡыҙҙар бүлмәһендәге оло көҙгө менән бәләкәй түңәрәк өҫтәлде үҙең һаклап ҡына алып кил. Асатайҙы ебәрһәк, ул ватып ҡуйыр, алабарман нәмә* (Һ. Дәүләтшина). *Ҡушҡанды илке-һалҡы үтәй, колхоз малына, колхоз милкенә төкөрөп ҡарай [Гәрәй]: вата, емерә, ҡыйрата..* (Б. Бикбай). *Унда шәшкеләр ватып, бында урындыҡтар ватып, тәҙрәне селпәрәмә килтереүҙәр бар ине* (Ш. Бабич). [*Председатель:*] *«Боҙҙом, ҡустым, һин төҙәт инде», — ти* («Совет Башҡ.»).

— Ватыҡ, емерек; ватыҡлыҡ, емереклек.

2. **Ватыу, емереү, селпәрәмә килтереү, вайран итеү.** Аҫтын-өҫкә килтереп, туҙҙырып, онтап ташлау (тау-таш, ҡоролмаларға ҡарата). **Селпәрәмә килтереү** — ныҡ емереү, онтап бөтөү. **Вайран итеү** — бөтөнләй емерек хәлгә килтереү (бина, йорт һ. б.). *Япундар туп аталар, Порт-Артурҙы ваталар, ҡайһы аяҡһыҙ, ҡайһы ҡулһыҙ, тилмерешеп яталар* (халыҡ йырынан). *Аҡ яллы бейек тулҡындар, ярҙы ауҙарырға, уның ҡаяларын селпәрәмә килтереп, емереп ташларға теләгәндәй, ғәйәт ҙур көс менән килеп бәреләләр* (Ғ. Әмири). *..Ауыл ерҙәрендә янғындарҙың ауылдарҙы вайран итеүе лә шулай уҡ кәмене* (Йыйынтыҡ «Совет Башҡортостанының ун йылы»). *Атаң йыйған изге малды вайран итһәң, халҡың тарихына төкөрөп байрам итһәң — башың һиңә ихтирамын һис күрһәтмәҫ...* (М. Аҡмулла).

**Врач, табиб** *иҫк.* Ауырыуҙарҙы дауалаусы белгес. *Ябай бер ҡатынға профессор килә! Ниндәй бәхет! Ниндәй ҡәҙерләү! Элек бында, врач төҫө күрмәй, кемдәр үлмәй ине мәлһеҙ ҙә?!* (Б. Бикбай). *Ғәфәр ҡарындашын Аҡҡолайға һала ла табибҡа алып китә. Ул ваҡытта шәһәрҙә табиб булған* («Алпамыша»).

**Вәғәҙәләшеү, һүҙ ҡуйышыу, һүҙ бирешеү, һүҙ беркетеү.** Уртаҡ бер фекергә килеп, шарт ҡуйып килешеү. **Вәғәҙәләшеү** — вәғәҙә бирешеп, килешеү. **Һүҙ**

**бирешеү** — ныҡлап вәғәҙәләшеү. *Мәңге бергә булырға вәғәҙәләштек* (һөйл. теленән). *Ҡыҙ менән Аҡмырҙа, һүҙ ҡуйышып, дейеүҙе үлтермәксе булғандар* (әкиәттән). *Үҙегеҙгә билдәле, Биктимер Фәйрүзәне алырға тип йөрөй, һүҙ ҙә ҡуйышҡандар ине* (И. Насыри). *Шуның өҫтөнә ул ваҡытта әле бәләкәй булған Нисаларын да, ҙурая биргәс, ҡалаға илтеп уҡытырға һүҙ беркетеп ҡуйҙылар* (И. Насыри).

# Г

**Гел, гелән, мәңге, һәр ваҡыт, һәр саҡ, әйләнгән һайын.** Өҙлөкһөҙ йәки әлдән-әле (дауам иткән эш-хәл, ваҡиға, күренеш һ. б. тураһында). **Гел** йышыраҡ ҡулланыла. **Мәңге** — оҙаҡ, дауамлы (эш-хәл). **Әйләнгән һайын** — йыш-йыш, әлдән-әле ҡабатланған (эш-хәл), күберәк һөйләү телендә ҡулланыла. *..Бабай һунарға гел генә бер ҡалаҡ йыртҡыс йәнлек ҡаны эсеп китә икән* (әкиәттән). *Донъялар гел былай булмаҫ әле* (Һ. Дәүләтшина). *Тубыҡланмам мәкер дошман алдында, уға гелән нәфрәт ҡайнай ҡанымда* (А. Игебаев). *Ай һәр ваҡыт тулып тормай, соҡор һәр саҡ һыулы булмай* (мәҡәл). *Һәр ваҡыт кил — иртә тимә, һуң тимә, ишегемдең шығырҙауы йырҙай миңә* (Р. Ғамзатов). *Әсәйем әйләнгән һайын һине һорашып ҡына тора* (Б. Бикбай).

**Гөлйемеш, әлморон.** Алһыу сәскә ата торған, емеше ҡыҙыл, сәнскәкле ҡыуаҡ. Ағасы ла, емеше лә бер исем менән атала. *Өфө витамин заводы йыл да 100 тоннанан ашыу гөлйемеш тотона* («Совет Башҡ.»). *Күлдәрҙең ярҙары таллыҡтар, ҡарама, хуш еҫле әлморон ағастары менән уратып алынған* (Н. Крашенинников).

**Гөлләмә, букет.** Сәскәләр бәйләме. Күңел һөйөнөсө мәғәнәһен дә бирәләр. *Лев Куклин, Владимир Торопыгин халыҡҡа ысын гөлләмә бүләк итте — һәр кем яратып тыңларлыҡ шиғырҙар уҡыны* («Совет Башҡ.»). *Сәскәләрҙең бөтә төрҙәренән һин йыйғанһың икән гөлләмә, быҡың өсөн һин һуң ғәйепләме? Үҙ-үҙеңдән мине көнләмә* (Р. Ғарипов). *Бына ул штабҡа етте. Ал букет тотҡан бала* (Ғ. Сәләм).

**Гүйә, әйтерһең.** Сағыштырыу, оҡшатыуҙы белдергәндә ҡулланылған инеш һүҙҙәр, күберәк шиғри телгә хас. *Диңгеҙ буйлап йүгерә бер малай. Ялан тәпәй. Беҙҙең нәҫелдән. Эҙҙәрендә йым-йым итә ваҡ таш, гүйә, ергә йондоҙ сәселгән* (М. Кәрим). *Гүйә, донъя сират тороп уҡый һәм өйрәнә Ленин аҡылын* (Р. Бикбаев). *Әй, шауланы диңгеҙ, дуланы, әйтерһең, ул үкереп иланы* (Н. Нәжми).

# Ғ

**Ғаилә, семья, өй эсе.**

1) Ирле-ҡатынлы булып бергә йәшәгән кешеләр. **Ғаилә** күберәк ҡулланыла; **өй эсе** һөйләү теленә хас. *Ө й э с е г е ҙ менән ҡунаҡҡа килегеҙ. Бөтә ғаиләнең күңелен тулҡынландырған, йөрәктәрен ҡытыҡлаған келәт асылды* (Ғ. Дәүләтшин). *Тоймағандыр Әхмәт һағынып көткән Миңьяныҡың тағы ла килеүен.— Былай булғас, семьям асыҡмаҫ, — тип, бөтәйткән ул үҙенең күңелен*

(Ғ. Сәләм). *Тағы бер ҡабат һорап ҡарайым, өй эсе асыға, тип әйтеп ҡарайым* (Ғ. Дәүләтшин).

2) *күсм.* Мәнфәғәттәре, теләк-маҡсаттары бер булған кешеләр йәки халыҡтар төркөмө. Был мәғәнәлә **ғаилә** һәм **семья** һүҙҙәре генә ҡулланыла. *Социалистик илдәр с е м ь я һ ы. Беҙҙең хәҙер ишле генә яҙыусыларыбыҙ ғаиләһендә ошондай ҙур талантҡа, ошондай сәнғәткә эйә булған һүҙ оҫталарыбыҙҙың иң күренеклеһе Мостай Кәрим тип, һис икеләнмәй әйтергә мөмкин* («Совет Башҡ.»).

**Ғашиҡ булыу, күҙ төшөү, күңел төшөү.** Ярата, һөйә башлау, мөхәббәт уяныу. **Ғашиҡ булыу** — ныҡлап һөйә башлау, мөхәббәт тоҡаныу (кешегә, эшкә һ. б.). **Күҙ төшөү** — күреп оҡшатыу. **Күңел төшөү** — күңел менән, эске тойғо менән ярата башлау. *Бына, мин шул ауылда ла яндым, ауылда ла ғашиҡ булып йөрөнөм* (М. Ғафури). *..Ныязғол бер күреү менән ғашиҡ булып, әллә ни тиклем мал түгеп алған икән дә һуңынан ҡушылғас — ҡараһа, ошо ямаҡ Ғәзимә булып сыҡҡан, тиҙәр* (Һ. Дәүләтшина). *Ҡис булдиһә, һыуҙар һибә Мөғлифә түтәлдәргә. Күҙем төшһә, күңелем төшмәй шул ҡыҙҙан бүтәндәргә* (халыҡ йырынан).

**Ғорур, мәғрур.** 1) Үҙ дәрәжәһен белеп эш итә торған. **Ғорур** йышыраҡ ҡулланыла. *Ғ о р у р ҡараш. Ғ о р у р ҡиәфәт. ..Уның сырайында бер үҙгәреш тә юҡ. Һүҙҙәрендә ғорур асыу* (Һ. Дәүләтшина).

2) Торошо, ҡиәфәте бик мөһабәт, олпатлы. **Мәғрур** ошо мәғәнәне көслөрәк бирә. *М ә ғ р у р ҡаялар. Күңелемде ғ о р у р ҡыуаныс солғап ала* (З. Бишева). *Һәм ҡалҡынды күлдә мәғрур аҡҡош, үҙ күләгәһенә һоҡланып* (Х. Ҡунаҡбай).

— Ғорурлыҡ, матурлыҡ.

**Ғүмер, тормош.** Кешенең йәшәү дәүере. **Ғүмер** киңерәк мәғәнәле (бар тереклектәргә ҡарата ла әйтелә). *Сәскә ғ ү м е р е. Оҙон ғ ү м е р. Ҡыҫҡа ғ ү м е р. Ғүмеребеҙҙең уртаһына баҫтыҡ, тормош үҙәгенә атланыҡ* (Р. Бикбаев). *Мин теләйем, ярҙарынан ташып сыҡһын беҙҙең ғүмер юлдары* (Н. Нәжми). *Чан Жи — ярлы ҡытай улы, ҡыҫҡа уның тормош юлы* (Ғ. Сәләм).

**Ғәжәп, ғәжәйеп, аптырарлыҡ, сәйер, ҡыҙыҡ, әкәмәт** *һөйл.*, **ғәҙәттән тыш, парадоксаль.** Ғәҙәти булмаған, күнеккән төшөнсәгә һыймаған (эш-хәл, ҡылыҡ һ. б.). **Ғәжәп** был мәғәнәне көслөрәк бирә, күберәк ҡулланыла. **Ғәжәйеп** китап теленә хас. **Сәйер, ҡыҙыҡ** — ғәжәпкә ҡалырлыҡ. *Ғәжәп һеҙҙең халыҡ! Бигерәк ҡәнәғәтһеҙ вә бик ҡомһоҙ* (М. Ғафури). *[Петров] Бына хәҙер үҙе килгән. Ҡалай эҙләп табыуы сәйер түгел — Бикметовтарҙан һорашҡандыр.* (Ғ. Ибраһимов). *Бөтә хайуандарҙың да тиерлек һәм кешенең парадоксаль йоҡо стадияһы бар* («Башҡ. пионеры»).

**Ғәжәпләнеү, аптырау, хайран ҡалыу, таң ҡалыу, иҫ китеү, шаҡ ҡатыу, ике күҙ (күҙҙәр) дүрт булыу.** Ғәҙәттән тыш эш-хәлдән ҙур тәьҫир алыу, аптырашта ҡалыу. **Ғәжәпләнеү, аптырау** — үҙ-ара яҡын, киң ҡулланылышлы һүҙҙәр. **Хайран ҡалыу** — ныҡ аптырау. **Таң ҡалыу** — һоҡланыу төҫмөрөн дә белдерә. **Иҫ китеү, шаҡ ҡатыу** — аптырауҙан юғалып ҡалыу, ни эшләргә белмәй тороу. **Ике күҙ (күҙҙәр) дүрт булыу** — күргәндән, тәьҫирҙән ғәжәпкә ҡалыу. *[Вахит] ..Хәҙрәттең, был юлы шуларға хеҙмәт ҡылырға ант иттереү өсөн, ҡорьән тотоп ултырыуына ғәжәпләнде лә башын түбән эйҙе* (М. Ғафури). *Бына, бер егет, бер ҡыҙ парлашып, етәкләшеп түңәрәк булып теҙелә башланылар. Мин, был ниндәй әкәмәт икән, тип аптырап ҡарап торам* (Т. Йәнәби). *Бер таңда, күләгә булып, артынан*

*барҙым һәм, шундай ғәжәп хәл күреп, мин хайран ҡалдым* (Б. Бикбай). *Ҡаруан кешеләре, Әминбәкте күргәс, таң ҡалғандар, был ҡалай сыҡты икән, тип аптырағандар* (әкиәттән). *Ташла әле шул ғәҙәтеңде, бер ҙә юҡҡа иҫең китә икән һинең,— тигән була* (С. Агиш). *Залдағы халыҡ шаҡ ҡатты* (И. Насыри). *Ғинди ҡаланан ҡайтҡанда, ауыл ҡыҙҙарының күҙҙәре дүрт була торғайны* (Д. Юлтый).

**Ғәскәр, армия, сиреү** *иҫк.* Берәй дәүләттең ҡораллы көстәре йәки уның айырым өлөшө, төрө. **Ғәскәр** күберәк ҡулланыла. *Атлы ғ ә с к ә р. Сик буйы ғ ә с к ә р ҙ ә р е.* **Армия** терминологик төҫ алған, хәрби хеҙмәт мәғәнәһен дә бирә. *А р м и я һәм флот. Совет А р м и я һ ы. А р м и я ғ а барыу. А р м и я ғ а алыныу. Ҡыҙыл ғәскәр ғәйрәтенән ҡан ҡалтырай колчактар, йәшәһен, йәшәһен шанлы ҡыҙыл ғәскәрҙәр* (Һ. Дәүләтшина). *Армияла тулы демократиялаштырыу үткәреп, һалдат хоҡуҡтарын яҡлар* (Һ. Дәүләтшина). *Сапҡындар Һаҡмар үҙәнен ҡаплаған ҡуйы таллыҡҡа инеп юғалыр-юғалмаҫ, дала иңләп килгән дошман сиреүе күренде* (Ә. Хәкимов).

# Д

**Дан, шөһрәт, атаҡ.** 1) Ниндәйҙер ҙур ҡаҙаныш, эш-хеҙмәт һөҙөмтәһендә тыуған билдәлелек. **Дан** киң ҡулланылышлы, **шөһрәт, атаҡ** — ҡулланылышы сиклерәк һүҙҙәр. *Батыр күрке дан менән* (мәҡәл). *Егет үлһә, аты ҡайтыр, аты үлһә, даны ҡайтыр* (мәҡәл). *Һеҙҙе өлгө итеп ҡуйып, исемегеҙгә дан һәм мәртәбә йырланылыр* («Совет Башҡ.»). *Ул өлкәлә бик тиҙлек менән исем һәм шөһрәт табасаҡ* (М. Ғафури). *Ҡурайсының атағы нык таралған ине* (һөйл. теленән).

2) Халыҡ араһына таралған хәбәр, дөйөм фекер. **Дан** — яҡшы һәм яман хәбәр. *Д а н сығыу. Д а н алыу. Д а н таратыу.* **Шөһрәт** — яҡшы хәбәр. **Атаҡ** — башлыса яман һүҙ, яманат. *А т а ғ ы сығыу. Күптән инде ерҙә даны йөрөгән матурлыҡтың тиңһеҙ аллаһын — күргәнем бар минең Венераны һәм Египет пирамидаларын* (С. Хәким). *Йығылып үлһәң дә, ҡоҙаларҙы әҙәм араһында дан итерлек итеп һыйларға кәрәк* (Һ. Дәүләтшина). *Йәшәүемдең оло маҡсаты түгел мөлкәт, түгел шөһрәт тә. Бына минең бөтә байлығым тибеп торған кескәй йөрәктә* (М. Сөндөклө). *Эреҫ еңгә, ҡуй, былай итеп атағыңды сығарып йөрөгәнсе, мосолман кеше, ташла һин. Яҡшы түгел* (Ғ. Дәүләтшин). — Данлау.

**Дарыу, дауа.** 1) Ауырыуға ҡаршы ҡулланылған нәмәләр. **Дарыу** йышыраҡ ҡулланыла, термин булып та йөрөй. *Д а р ы у үләндәре. Д а р ы у биреү.* **Дауа** күберәк һөйләү телендә ҡулланыла. *Әжәлгә дарыу юҡ* (мәҡәл). *Аптеканан күп кенә дарыуҙар алып ҡайтырмын* (Һ. Дәүләтшина). *Һәр сирҙең дауаһы булған кеүек, милләттең дә дауаһы — ғалимлыҡтыр* (М. Ғафури).

2) *күсм.* Эш-хәлде рәткә килтереү юлы, сараһы. *Һеҙ минең тәнемдә дарыулайһығыҙ, ә минең дуҫым, беләһегеҙме, минең унар йылдар һыҙлаған йәнемә дарыу бирҙе* (Һ. Дәүләтшина). *Дәртһеҙгә дауа юҡ* (мәҡәл). *Барһынһылыу еңгәһенә: «..Ҡолағымдағы теш әҙкәйен юйсы, еңгәм, юйсы еңгәм. Йөрәгемә дауа бирсе, еңгәм»* («Алпамыша»).

— Дарыулау, дауалау; дарыухана.

**Дөрөҫ, раҫ, ысын, хаҡ.** Ялған түгел. **Дөрөҫ** киңерәк мәғәнәле, «ярай, килешле» төҫмөрө менән **ысын** һүҙенә яҡын, хәбәргә, һүҙгә ҡарата әйтелгәндә, **раҫҡа** тап килә; **ысын** хәбәрҙең, һүҙҙең ялған булмауын белдерә. *Ысынға сығыу. Ысынға һанау.* **Хаҡ** һүҙендә ғәҙел төҫмөрө бар, дөрөҫкә яҡын. *Дуҫың дуҫ булһын, иҫәбең дөрөҫ булһын* (мәҡәл). «*Беҙҙең никах дөрөҫ буламы?*»— *тип һорай егет* (әкиәттән). *Дөрөҫ һүҙҙең яты юҡ, аҫыл һүҙҙең аты юҡ* (мәҡәл). *Тәфтишселәр ҡайтып, Ертыңлар батырҙың һүҙҙәре раҫ булыуын әйткәндәр* (әкиәттән). *Ир-егеткәй ҡайҙа йөрөһә лә, ҡылған эше уның хаҡ булыр* (халыҡ йырынан). *Шуғалырмы, һүҙең хаҡ булһа ла, телең һинең татлы булманы* (М. Кәрим). *Ысын һүҙме һуң ул, ни эшләп улай итеп атайың биргән ергә бармайым тигән хәбәр сығараһың?* (Һ. Дәүләтшина).

— Дөрөҫләү, раҫлау.

**Дөрөҫлөк, хаҡлыҡ, хәҡикәт.** Ғәмәлдәгегә тап килгән эш-хәл, хәбәр һ. б.; ялғандың киреһе. **Дөрөҫлөк** йышыраҡ ҡулланыла. **Хаҡлыҡ, хәҡикәт** башлыса китап теленә хас. [*Оло инәй:*] — *Һәр ҡайһыбыҙҙың үҙ хәҡикәте, үҙ иманы, Вазифа. Беҙ икебеҙ бер дөрөҫлөк менән йәшәй алмайбыҙ* (М. Кәрим). *Ялған, мәкер еңә алмаҫ,— хаҡлыҡ көслө* (Ҡ. Даян). *Ҡотмәгәндә мин дошманың булдым: дөрөҫлөктө әйттем һиңә..* (Р. Ғарипов).

## Ҙ

1. **Ҙур, эре, дәү, оло, өлкән, уҫлаптай** *һөйл.*, **әзмәүерҙәй.** Күләме, дәүмәле менән ғәҙәттәгенән артыҡ; бәләкәйҙең киреһе. **Ҙур** киң мәғәнәле. *Ҙур ҡала. Ҙур йорт. Ҙур кәүҙә.* **Эре** бер төрлөрәк нәмәләргә ҡарата әйтелә, ҙурға яҡын. **Дәү** — бик ҙур. **Оло, өлкән** сағыштырмаса һирәгерәк ҡулланыла. **Уҫлаптай, әзмәүерҙәй** — ҙур кәүҙәле (кешегә ҡарата), тәүгеһендә хуп күрмәү төҫмөрө лә бар. *Беҙҙең янда ике шишмә бар. Уның береһе ҙур, икенсеһе бәләкәй генә* (Н. Нәжми). *Һандуғас та ҡошҡай ай ҙур түгел, ултырған да урыны киң түгел, әҙәмдәрҙән әҙәм ай кәм түгел, тик бәхеткәйҙәре тиң түгел* (халыҡ йырынан). *Был ..СССР-ҙа ғына түгел, ә Европала иң эре предприятиеларҙың береһе булып тора* («Совет Башк.»). *Йәшә мәңге, яңы ҡыҙыл шәреҡ, елберҙәһен ҡыҙыл дәү әләм* (Д. Юлтый). *Әле лә ҡулымды тығыуым булды, дәү генә ике өрөк усыма килеп тә эләкте* (М. Кәрим). *Быйыл яҙ тураһында фекер алышып бөтөүгә, ҡаршыбыҙҙағы эскәмйәгә ҡара күҙлекле әйәк осонда ғына һаҡал үҫтергән, оло ғына кәүҙәле бер кеше килеп ултырҙы* (С. Агиш). *Иҙәндең уртаһында тиерлек кирбесте йәлләмәй һалынған өлкән мейес* (Н. Мусин). *Битеңде йыу тим, уҫлаптай башың менән йоҡондан илап тороп ни!* (Һ. Дәүләтшина). *Ҡәмәнән йәһәт кенә әзмәүерҙәй өс ир төштө* (Т. Ҡилмөхәмәтов).

— Ҙурайыу, эреләнеү, дәүәйеү; ҙурлыҡ, эрелек.

2. **Ҙур, оло, өлкән.** Әһәмиәте булған, баһаһы юғары һаналған. **Ҙур, оло** йышыраҡ ҡулланыла, «дәрәжәле» төҫмөрөн дә бирә. *Ҙур маҡсат. Оло бәхет. Оло бурыс. Оло шатлыҡ. Ҙур дан.* — *Ҡилен, сәйеңде ашыҡтыр. Бик ҙур ҡунаҡ килгән* (Һ. Дәүләтшина). *Зильский, әллә ниндәй өлкән эш башҡарған кеше һымаҡ,*

*тауыштарын күрәйтеңкерәп, начальниктар тауышы менән.. ҡысҡырып ебәрҙе* (Ғ. Дәүләтшин). *Саҡырғандың исеме оло, ас ҡайтһаң да һөйләмә* (мәҡәл). *Был яҡта, ул заманда, күрәһең, ошонан да ҙурыраҡ һөнәр булмағанға, «һөнәрсе» һүҙе иң оло һәм хөрмәтле һүҙ булған* (З. Биишева).

3. **Ҙур, оло, өлкән.** Йәш яғынан кемдәндер артыҡ; кеҫенең киреһе. Исем функцияһында ла ҡулланыла. *Ҙурҙар. Оло-лар. Өлкәндәр.* **Ҙур** күберәк бәләкәйгә ҡаршы ҡуйыр өсөн ҡулланыла. *Ҙ у р булыу. Ҙ у р түгел.* **Оло, өлкән** үҙ-ара бик яҡындар. *О л о ул. Ө л к ә н ҡыҙ. Үҫә-үҫә ҡыҙ бала ҙур була. Һөйгәненә бара алмай хур була* (халыҡ йырынан). *Ағай оло, мин ҙур* (әйтем). *Мәүлет байҙың өлкән бисәһе Йәнбикә олоғайған күҙҙәренә йоҡо төйөлмәгәнгәме, ҡарты янында мыштырҙай ине* (Ғ. Дәүләтшин).

— Ҙурайыу, олоғайыу, өлкәнәйеү; ололоҡ, өлкәнлек.

**Ҙурлау, ололау, ололоҡлау, арҙаҡлау.** Юғары баһалап, оло ихтирам күрһәтеү. **Ҙурлау** күберәк ҡулланыла. **Ололау, ололоҡлау** кеселеклелек күрһәтеп ихтирамлау. **Арҙаҡлау** — ололап күтәрмәләү, маҡтау. *Эйе, компартияның сафында мин ағза ла булып тормайым, әммә уның хеҙмәттәрен ихтирамлап, ҙурлап йырлайым* (Б. Вәлид). *Әсәһен бик ололай, бик ярата ине ул* (Ғ. Әмири). *Ололарҙы ололау — яҡшылыҡтың билдәһе, кеселәрҙе кеселәү — кешелектең билдәһе* (әйтем). *Берәүҙең бер арҙаҡлап ҡына йөрөгән балаһылыр әле* (һөйл. теленән).

# Е

**Ек, ярыҡ, тишек.** Уйылып, ярылып торған асыҡ урын. **Ек** — бәләкәй генә аралыҡ. *Иҙән е г е.* **Ярыҡ** — оҙонсаланып асылып торған урын. *Бүрәнә я р ы ғ ы. Ер я р ы ғ ы.* **Тишек** киңерәк мәғәнәле. *Ер т и ш е г е. Тау т и ш е г е. Үпкәнән өрөлгән тын шул ектән иркен сыға* (Ж. Кейекбаев). *..Ағас ҡыуышлыҡтарында йәки төҙөлөш ярыҡтарында ҡышлаусы кесерткән күбәләктәренең һәм серәкәйҙәрҙең осоуы ғәжәп түгелме ни?* («Башҡ. пионеры»). *Энә күҙәүендәй тишек булһа, шунда инеп китер инем* (Ғ. Дәүләтшин). *Ҡара ҡаҙ тишек ситенә ҡунып, бер генә аҡ ҡауырһынын төшөрә* («Алпамыша»).

**Екереү, екеренеү, изерәйеү, ажғырыу.** Асыу менән әрләп һүҙ әйтеү. **Екереү, екеренеү** — тауышты күтәреп һүҙ әйтеү. **Изерәйеү** — күберәк ҡаршы һүҙ әйтеп ҡысҡырыныу, тыңламау. **Ажғырыу** — ҡурҡытырға тырышып, бик ҡаты итеп екереү. *Үкереп үгеҙ булмаҫһың, екереп түрә булмаҫһың* (мәҡәл). *Бай күпме генә ҡысҡырынмаһын, ни саҡлы ғына екеренмәһен, уның тауышын ишеткән кеше лә булмаған, ти* (әкиәттән). *Ул, хужаларҙың ҡайһы берәүҙәре килеп изерәйә башлаһалар ҙа, аптырап торманы, яуапһыҙ ҡалманы* (Һ. Дәүләтшина). *Староста Абдул бик ныҡ теш ҡайрап йөрөй. Ныяҙғол да бер-ике ажғырып алды* (Һ. Дәүләтшина).

**Ел ҡыуыу, ел йотоу, эт һуғарыу, урам тапау, йөн тибеү, ҡомдан арҡан ишеү, иләк менән һыу ташыу, юҡты бушҡа (бушты бушҡа) ауҙарыу.** Ваҡытты тиккә уҙғарыу; кәрәкһеҙ, файҙаһыҙ эш менән булыу (һөйләү теленә хас яманлау һүҙҙәре). **Ел йотоу** — ирекһеҙҙән буш йөрөү. **Ҡомдан арҡан ишеү, иләк менән һыу ташыу** — халыҡ ижадына хас фразеологик берәмектәр. *Ел ҡыуып, күккә ҡарап, үткән ғүмерҙе белмә-*

*нем, иркә сактар үттеләр, яңғыҙ тороуҙы белмәнем* (Ш. Бабич). *Һөт-ҡатыҡ табып ашатмағас, минең бында ел йотоп йөрөүемдән ни файҙа?* (Ш. Янбаев). *Иртә торғоң ҡилгәс, иртәрәк ятырға кәрәк. Төнө буйы эт һуғарып, йырлап йөрөгәнһеңдер әле* (Һ. Дәүләтшина). *Беҙҙең Мәхмүҙә эшкә тотонорға бер ҙә уйламай. Биҙәнептөҙәнеп ала ла урам тапай* (Д. Исламов). [*Сағит Вәлигә:*] — *Нишләп бында ятаһың, һаман ҡомдан арҡан ишеп, күлде ҡуккә асырға әҙерләнәһеңме?* (А. Таһиров). *Председатель Ишбулды ағай ҙур өмөт бағлаған һунарсылар бригадаһы ла колхозға рәтле файҙа килтерә алманы, юкты бушҡа ауҙарыуҙан уҙманы* (А. Таһиров).

— Елғыуар.

**Емереклек, хараба** *иҫк.* Ватып, ҡыйратып ташлаған урын, ауыл-ҡала. *Күҙҙәрем күпме ер күрә ала — барлыҡ урында ла емереклек, емереклек-харабалар* (Ғ. Әмири). *Эреле-ваҡлы ҡалаларҙың көлө осоп ята. Сарай-ж-Җәдид урынында харабалар өйөмө* (Ә. Хәкимов).

**Емтек, үләкһә.** 1) Үлгән хайуан кәүҙәһе. *Юлдың буйы консерва ҡалайҙары, сылғау киҫәктәре, ат емтектәре менән тулған* (А. Таһиров). *Аһ, ҡара! Унда үләкһә! Нимә һырыған өҫтәрен?* (Д. Юлтый).

2) *кусм., һөйл., әрл.* Үлем хәленә етеп йөрөгән кешегә, арыҡ малға, ҡош-ҡортҡа ҡарата яманлап әйтелә. ..*Ҡаты ямғыр булыр, ахыры,— тине атаһы.— Шул емтекте ҡураға ҡайтарып ҡуйырға кәрәк, йә бүре-маҙар алыр, йә күшегеп аяғын һуҙыр.* (Б. Бикбай). *Уҡъюнар үләкһә ҡарсығаһын батшаға килтереп биргән* (әкиәттән).

**Еңмеш, сәркәш** *күсм., һөйл.,* **терәпес** *һөйл.,* **үҙ һүҙле.** Үҙ һүҙен бирмәй торған, ныҡымыш. **Еңмеш** — бик ныҡыш. *Иллә еңмеш кеше икән был. Ошо ҡағыҙы менән козырҙы ҡулдан һуғып төшөрҙө бит* («Совет Башҡ.»). *Сауҙагәрҙең Усман исемле тупаҫ, сәркәш малайы Сәлихкә көн күрһәтмәй* (Х. Мохтар.) *Былай ҙа терәпес булырһың икән, йәнгә тейеп бөттөң* (һөйл. теленән). *Ләкин әле күңеленең әллә ни ерендә тоҡанып киткән ошо үҙ һүҙле кешене еңергә теләү тойғоһо уны был аҙымдан тыйып ҡалды* (Н. Мусин).

— Еңмешләнеү, еңмешлек, үҙ һүҙлелек.

**Ерле, урындағы.** 1) Билдәле бер ерҙә элек-электән йәшәп килгән (халыҡ).— *Граждандар! Беҙ ерле халыҡ! Бына ошо хәл иткес һуғышта беҙ ҙә ҡатнашырға, ҡаһарман ҡыҙыл армеецтарға хәлебеҙҙән килгәнсе ярҙам итергә тейешбеҙ* (Б. Хәсән). *Әминевтың ошо аҙ һүҙҙәренән дә Саҡай үҙе өсөн күп һөҙөмтә сығарҙы: тимәк, урындағы кешеләргә яҡшыраҡ күренә, урында сараһын күрергә кәрәк* (Б. Бикбай).

2) Башҡа ергә таралмаған, билдәле урында ғына булған. *Ерле һөйләш. Урындағы ваҡыт. Урындағы промышленность. Урындағы власть. Шунда ғына Солтанов уның ҡаланан ҡайтҡанға күрә генә әллә кем булып ҡыланмай, ә урындағы Совет власының буласаҡ бер вәкиле сифатында сығыш яһай икәнлеген аңланы* (Б. Бикбай).

**Ерләү, күмеү, ҡуйыу** *кусм.* Мәйетте ҡәбергә урынлаштырыу. **Ерләү, күмеү** яҡын мәғәнәле; **ҡуйыу** күмеүҙең мәғәнәһен бер аҙ йомшарта. *Йомағужа ҡартты ерләгәс, бик һуңлап ҡына Таллыға ҡайтып китте ул* (Ә. Вәли). *Яраһынан үлгән дуҫты күмдек, үҙәк өҙгөс һалҡын ҡыш ине..* (Б. Бикбай). *Әммә тағы көнө бөткәндәрҙе алып килеп һиңә [зыяратҡа] ҡуялар* (Ҡ. Аралбаев). *Мең-мең халыҡ йыназа уҡып, ҡуйҙылар ҙурлап күмеп; сит ҡалаларҙан килделәр Туҡайҙы яҡын күреп*

(бәйеттән). *Эй, алла, ике ай эсендә ни хәтле кеше ҡуйҙыҡ* (Һ. Дәүләтшина).

**Ерәнеү, сирҡаныу, сикәнеү, ытырғаныу.** Бысраҡтан, әшәкенән тартыныу. **Ерәнеү** киңерәк мәғәнәле; **сирҡаныу** — тотонорға, тейергә күңел тартмау; **ытырғаныу** — ныҡ ерәнеү. *Емтектән ҡоҙғон ерәнмәҫ* (мәҡәл). *Улар аяҡтарына баҫып тора алмайҙар, ауыҙҙарынан һаҫыҡ араҡы еҫе аңҡый. Тимер, сирҡаныр, артҡа тайшанды* (Б. Бикбай).

— Ерәнгес, ерәнес, сирҡаныс; ерәнерлек, сирҡанырлыҡ.

**Етеҙ, йылғыр, йылдам, теремек, осҡор, өлгөр(өм), сапсан; сапыҡ, тилбер, еңел һөйәкле** *ҡусм*. Осоп-төшөп торған, хәрәкәтле; һәлкәүҙең киреһе. **Етеҙ, йылғыр, йылдам, тилбер** эш-хәрәкәтте белдерәләр; **теремек** күберәк дөйөм сифатты күрһәтә. **Осҡор** — бик етеҙ. *О с ҡ о р аҡыл.* **Сапсан, сапыҡ, өлгөр(өм)** — эштә етеҙ. **Еңел һөйәкле** кешегә ҡарата ғына әйтелә, башҡалары хайуандарҙы һүрәтләгәндә лә ҡулланыла. *Беҙ етеҙ тип ҡоштар маҡтанмаһын,—уларҙан да шәберәк осабыҙ* (М. Кәрим). *Зөһрә һылыу кәүҙәһен килешле, етеҙ хәрәкәтләндереп, һомғол атлап ары китте* (Ф. Исәнғолов). *Бик йылғыр бала, етешмәгән ере юҡ* (М. Тажи). *Йылдам ғына йыйынған да ул өйҙән сыҡҡан* (әкиәттән).— *Ҡайһылай теремек малай. Бик булдыҡлы,*— *тип йылмайҙы ул* (Һ. Дәүләтшина). *Малай саҡтар уҙғас елдәй елеп йыл йөрөгән осҡор тайҙарҙа, егет тупһаһына баҫҡан мәлдә оло һынау үтәм тауҙарҙа* (М. Ишбулатов). *Кинйә улдары Сәлмән эшкә өлгөр, йомошҡа тилбер, һүҙгә тапҡыр, уйға отҡор булған* (әкиәттән). *Сапсан бул, килен. Ҡайның үҙе ҡуҙғала күрмәһен, оят булыр* (Һ. Дәүләтшина). *Колхозсылар эшкә берҙәм сыға, тилбер эшләй* (Б. Бикбай). *Һүҙгә әүәҫ, еңел һөйәкле инәйҙең һөйләүенән мин шуны аңланым: ҡыҙы уҡытыусы икән* (Н. Мусин).

**Етер-етмәҫ, таҡы-тоҡо.** Тейешле күләмдән күпкә кәм. [*Байраҫ:*] *Ҡыш оҙон. Был иген таҡы-тоҡо ғына булып ҡалыр әле* (З. Биишева).

**Етеү, етлегеү, етешеү, өлгөрөү** *ҡусм*. Бала йәшенән сығып, балиғ булыу. **Өлгөрөү, етешеү** һирәгерәк ҡулланыла. *Хәким хәҙер еткән егет* (һөйл. теленән). *Аҡъял, тирә-яҡты таң ҡалдырып, ай үҫәһен көн үҫкән, йыл үҫәһен ай үҫкән, ете йәшендә батыр булып етешкән* (әкиәттән). *Мин хәҙер тик шуны ғына беләм, кеше ғүмерендә шундай минуттар ҙа була, ул бына шулай ҡапыл өлгөрөү һәм бәхет кисерә* (Н. Ғәлимов).

**Етешеү, тейешеү.** Ашай башлау, ашарға тотоноу.— *Ҡунаҡтар, ҡоймағынан етешегеҙ* (һөйл. теленән). *Табынды түңәрәкләп ултырған был бай бисәләр.. ашҡа тейеште* (Т. Хәйбуллин).

**Еүешләү, сылатыу, мансыу, дымлау, һыулау.** Һыу тейҙереү. **Еүешләү** киңерәк мәғәнәле; **сылатыу, дымлау** — әҙ генә епшетеү, бер аҙ ғына һыу тейҙереү. **Мансыу** — ныҡ еүешләү (ғәҙәттә манып һыулау). **Һыулау** — ныҡ еүеш итеү (һыуҙы ағыҙып, ҡойоп һ. б.). *Яҙар, ҡурайын алып, тишектәрен теле менән еүешләп, еңел генә бер-ике өрөп ебәрҙе* (Б. Ишемғолов). *Әсәй әүәлгесә ҡайғыһын да, шатлығын да йәшкә сылата* (М. Кәрим). *Көҙгө бысраҡ көндәр, ел-ямғырҙар иңләп һибә һалҡын тамсылар; ярлыларҙың, үкһеҙ етемдәрҙең йоҡа кейемдәрен мансыйҙар* (Д. Юлтый). *Иртәнсәк яуып үткән ямғыр ерҙе бер аҙ дымланы* («Совет Башҡ.»).

# З

**Зарар, зыян.** Нимәгә булһа ла кире тәьҫир иткән насар шауҡым йәки ҡаза; файҙаның киреһе. *З а р а р к ү р е ү. З ы я н булыу.— Һис зарар юҡ, ал, тине ай, ал да нур сәс халҡына; мин дә бит төн хаҡына алдым ҡояштың нурҙарын* (Ш. Бабич). *Зыян күргән ерҙән файҙа көтмә* (мәҡәл). *Биш тинлек ҡуян, ун тинлек зыян* (мәҡәл).

— Зарарлы, зыянлы.

**Зирәк, отҡор, зиһенле.** Тиҙ аңлап алыусан, үткер аҡыллы. **Зиһенле** был мәғәнәлә һирәгерәк ҡулланыла. *Үткер з и һ е н л е. Бер йылда ижек танып, сүрә белгәс, «Был бала зирәк!» — тине ауыл халҡы* (М. Ғафури). *Был тырыш, отҡор егет эшкә тиҙ өйрәнде* («Совет Башҡ.»).

— Зирәклек, отҡорлоҡ, зиһенлелек.

**Зыярат, кәберлек.** Үлгән кешеләрҙе күмеү урыны. *Ишан: «Был зина эше — бик ҡаты гәнаһ, илдән бәрәкәт китер, ямғыр яумаҫ, иген үҫмәҫ»,— тип, уны зыяраттың тышына ла ҡуйҙырмаған, ти* (Һ. Дәүләтшина). *Шунан ғына ул тауыштың алыҫ түгел ҡәберлектән килгәнен төшөндө* (И. Насыри).

1. **Зәғиф, ғәрип.** 1) Һау-сәләмәт булмаған, берәй ағзаһы камил түгел. **Ғәрип** — күберәк тыумыштан кәмселекле булған. *Мулланың бармағы тыумыштан зәғиф — үҙенә табан кәкре* (мәҡәл). *Тыумыштан ғәрип бала ул. Ике аяғының да бәкәле эскә табан кәкрәйеп, табаны юғары, йөҙлөгө аҫҡа ҡарап торған бахырҙың* (Н. Ҡәрип). *Ғәрип һалдат күрһәгеҙ, беҙҙе иҫкә алығыҙ* (бәйеттән).

2) *күсм.* Әхлаҡи йәһәттән түбән, насар. *Ул ваҡытта ғәрип күренештәргә урын ҡалмаҫ ине* («Совет Башҡ.»).

— Зәғифлек, ғәриплек; зәғифләнеү, ғәрипләнеү.

2. **Зәғиф, хәлһеҙ.** Эш-тормошҡа яраҡлығы түбән, көсһөҙ. **Зәғиф** күберәк ҡулланыла. *З ә ғ и ф ағас. З ә ғ и ф үлән. Ләкин тасуир өсөн ҡәләмем бар, ҡәләмкәйем зәғиф, көсһөҙ ул. Йәш сағында өҫтөн баҫҡан уттар, үткер түгел, шуға осһоҙ ул* (Д. Юлтый). *Аҡлы-ҡаралы күбек һымаҡ болоттар уның [айҙың] хәлһеҙ нурын ҡаплайҙар ҙа иғтибарһыҙ ғына алға үтәләр* (Һ. Дәүләтшина).

— Зәғифлек, хәлһеҙлек; зәғифләнеү, хәлһеҙләнеү.

# И

1. **Иғтибар, диҡҡәт.** Уй-фекерҙең, һиҙеү, тойоу һәләтенең бер нәмәгә төбәлеше. **Иғтибар** активыраҡ ҡулланыла. *И ғ т и б а р биреү. И ғ т и б а р ғ а алыу. И ғ т и б а р күрһәтеү. И ғ т и б а р итеү. И ғ т и б а р үҙәгендә булыу. Д и ҡ ҡ ә т итеү. Д и ҡ ҡ ә т күрһәтеү. Йәмиләнең бөтә иғтибары ҡуйынындағы нәмәләрҙә булғанға күрә, битен ышҡырға онотоп, туңдырған ине* (М. Ғафури). *Сәскес артында баҫып барыусы Александр Агапов орлоҡтарҙың нисек төшөүен диҡҡәт менән күҙәтеп бара* («Совет Башҡ.»). *Гәрсә бите ҡапланған булһа ла, уның матур ҡыланыштары, һыны, тығыҙ аҡ beләктәре, ҡара янып торған сәсе кенәздең диҡҡәтен йәлеп итә* (И. Насыри).

— Иғтибарлы, диҡҡәтле.

2. **Иғтибар, илтифат.** Ихтирамлы мөнәсәбәт. *Тәрән иғ-*

*тибар. Илтифат итеү. Илтифат күтәреү. Дуҫының арттырып-шаштырып һөйләүен иғтибар итмәй генә тыңланы Ҡинйә* (Ғ. Ибраһимов). *Мин, бындай әһәмиәтһеҙ ваҡ нәмәгә әһәмиәт биргем килмәгәнгә, уның һүҙен илтифатҡа алмайынса, көләмһерәп кенә яуап бирә инем* (М. Ғафури).

**Икмәк, эпәй** *һөйл.* Ҡамырҙан бешерелгән аҙыҡ. **Икмәк** киң ҡулланылышлы, термин булып та йөрөй. *Әсе икмәк. Сөсө икмәк. Икмәк бешереүсе. Икмәк заводы. Икмәк магазины. Икмәк һалыу* һ. б.- *Сәй булмағас, самауыр ҡуйыуҙа ни файҙа бар? Икмәк тә юҡ, он да бөттө* (М. Ғафури). *Һин беҙҙе ризыҡландыр, ризығыбыҙ—икмәк-нандыр* (Ш. Бабич). *Йыландың тәпәйен, мулланың эпәйен күрмәҫһең* (әйтем). *Ҡиндер күлдәк, үлән сәй, әсе ҡатыҡ, ҡаты эпәй менән генә көн күргән, ти килен* (әкиәттән).

— Икмәкле, икмәклек; икмәк-тоҙ; эпәйле.

**Икһеҙ-сикһеҙ, осһоҙ-ҡырыйһыҙ.** Бик киң һәм оҙон, игесиге булмаған, йәйрәп ятҡан. *Икһеҙ-сикһеҙ дала. Ә аҫта, бик тәрәндә, икһеҙ-сикһеҙ диңгеҙ күгәреп ята.* (З. Биишева). [*Сәғиҙә*] *үҙенең киләсәге хаҡындағы хыялы, өмөтө ҡосағында, бәхет ҡошо булып, икһеҙ-сикһеҙ бер бушлыҡта осто ла осто.* (М. Тажи). *Осһоҙ-ҡырыйһыҙ киң матур ялан, ул йомшаҡ ҡарҙан юрған ябынған.* (Н. Иҙелбай).

**Илау, һыҡтау, һулҡылдау, үкһеү, буҙлау, иңрәү, йәш түгеү, йәш ағыҙыу, күҙ һытыу** *һөйл.*, **балауыҙ һығыу.** Ҡайғыхәсрәттән, ауыр кисерештән йәки ауыртыу, һыҙланыуҙан күҙҙән йәш сығарыу. **Илау** киң ҡулланылышлы. **Һыҡтау** — әсенеп, өҙгөләнеп илау. **Һулҡылдау** — туктай алмай оҙаҡ илау. **Үкһеү** — ярһып илау. **Буҙлау** — туҡтауһыҙ һуҙып, ҡысҡырып илау (хуп күрмәгәнде белдерә). **Иңрәү** — ауыр кисерештән өнһөҙ илау. **Йәш түгеү, йәш ағыҙыу** — шым ғына оҙаҡ илау. **Күҙ һытыу** — юҡҡа-барға илау (яманлау һүҙе). **Балауыҙ һығыу** — һуҙып шым ғына илау (мыҫҡыллау, еңелсә көлөүҙе белдерә). *Ҡәләм алһам, төшөп китә ҡулдарымдан, илайым мин яҙырмын тип моңдарымдан* (Н. Нәжми). *Иламаған балаға имсәк бирмәйҙәр* (мәҡәл). *Ботағынан ҡайырылған гөлдәй һынып ҡалдығыҙ, әсәһенән айырылған балалай һыҡтап ҡалдығыҙ* (бәйеттән). *Аҡылдан шашҡан йәки үлемгә хөкөм ителгән кешеләрҙең илауы кеүек, эстән һулҡылдап әсе йөрәк тауышы сыға* (Д. Юлтый). *Зөлхәбирә һылыу үкһеп илай, хур булдым, тип кеше ҡаршында* (халыҡ йырынан). *Йырҙар аҡтыҡҡы бәхилләшеү һымаҡ, оҙатыусыларҙың йөрәген һыҙлатты. Улар тағы ла ныҒыраҡ үкһенеләр* (Һ. Дәүләтшина). *Тегендә ҡоҙалар һурпа көтә, һеҙ нимә эшләп бында буҙлашып ултыраһығыҙ?* (Һ. Дәүләтшина). *Ике ағам үлгән фронттарҙа, улар өсөн әсәм иңрәгән, төндәр илап үткән, күҙҙәрендә йәш кипмәгән* (Д. Юлтый). *Таштар иңрәп ирегән беҙҙең яҙмыш әсегә* (Ғ. Сәләм). *Өйөбөҙ янды беҙҙең, иланым мин, атай үлде минең — йәш түктем* (Ғ. Сәләм). *Ил күҙенән ҡанлы йәш ағыҙған Ҡолой кантон менән Ермолай* (халыҡ йырынан). *Тик уның бисәһе генә өлкән улы тураһында күберәк ҡайғырта, күберәк балауыҙ һыға* (Һ. Дәүләтшина).

— Илаҡ, илаулау, иламһырау; илаш, һыҡташ, иңрәш; буҙлаҡ.

**Илһам, дәрт.** Күңел, рух күтәренкелеге. **Илһам** — ҙур дәрт. *Илһам алыу. Илһам биреү. Илһам килеү.* **Дәрт** — ваҡыт-ваҡыт килеп торған рух күтәренкелеге. *Дәрт итеү. Дәрт ҡайтыу. Дәрт*

*ташыу. Д ә р т һүнеү. Тыуған ерем, тормош шишмәһе һин, теләр инем һиндә ҡалырға. Тик мин ҡайҙа ғына йөрөһәм дә, ҡайтам һиңә илһам алырға* (Ф. Рәхимғолова). *Шуны ғына йырлап эш өҫтөндә эш улдары дәрттәр табырҙар.*

— Илһамлы, дәртле.

**Имгәкләү, мүкәйләү, дүрт аяҡлау.** Йөгөнөкләп, ҡул-аяҡ-ҡа таянып хәрәкәт итеү. *Әсәһе менән бергә тороп, әллә ниҙәр бытылдап һөйләнә-һөйләнә имгәкләп килгән ҡара малайҙы Айбулат, ҡулына алып, һикертеп-һикертеп һөйҙө* (Һ. Дәүләтшина). *Тәрән шахтаның ҡыҫыҡ забойында йә мүкәйләп, йә ергә ятып алтын ҡомдары аҡтарам, ә үҙемде киң, зәңгәр күктә ҡанат ҡағып осам кеүек тоям* (Ғ. Әмири). *Зәки дүрт аяҡлап, разбой һалып, ишеккә ҡарай сапты* (А. Таһиров).

1. **Инеү, кереү, аяҡ баҫыу.** 1) Атлап эскә үтеү. **Инеү** күберәк ҡулланыла. *Ул арала звонок булды. Яңынан залға инделәр* (И. Насыри). *Ул арала булманы, ах-вах итеп, Биби әбей килеп керҙе* (М. Ғафури). *Янғантауы, Янғантауы үҙе генә ни тора! Янғантауға аяҡ баҫһа, ятҡан тороп ултыра* (Р. Ғарипов).

2) Билдәле бер сиккә барып етеү (күберәк ваҡытҡа, йәшкә ҡарата әйтелә). *Һигеҙенсе тиҫтәгә и н е ү. Иллегә а я ҡ б а-ҫ ы у. Бына ошондай еңеү һәм шатлыҡ менән ферма эшселәре 1965 йылға аяҡ баҫты* («Совет Башҡ.»). *Ил иркен итеп, күкрәк киреп тын алды, алдағы тыныс, матур тормошҡа аяҡ баҫты* (Һ. Дәүләтшина).

2. **Инеү, кереү.** 1) Нимәгәләр ҡарау, өлөшө итеп һаналыу. *Һөтимәрҙәр төркөмөнә күп төрлө хайуандар инә. Колхозға туғандар, колхозға! Бер төптән ағылып керәйек* (Б. Бикбай).

2) Өҫтәлеп тороу, артыу. *Аҡыл и н е ү. Көс и н е ү. Хәл к е-р е ү. Йылдар бер төрлө арыуланып алғас, ул, үҙенең артыҡ-бортоҡтарын ҡымтыштырып ҡуйып, ҡәҙимге крәҫтиән хәленә инеп алды* (Ғ. Дәүләтшин). *Пожарком ята торғас, тәмәкене ата торғас, кереп китте дәрт уға [Һиҙиәтҡә].* (Р. Ғарипов).

**Инәлеү, үтенеү, ялыныу, ялбарыу, аяҡҡа йығылыу** *көсм.* Үтенес менән һорау. **Үтенеү** — кеселек менән инәлеү. *Ү т е-н е п һорау.* **Ялыныу, ялбарыу** — нык инәлеү. **Аяҡҡа йығылыу** — түбәнселек менән ниҙер һорау. *Үҙ дәрәжәһен онотоп, ишек артынан «булмаҫ, оялмайынса...» тип маташҡан Шәмсиәгә балалар һымаҡ инәлергә, ялбарырға тотондо* (И. Насыри). *Рәхимә уға яҡын килеп: «Знаком, Ныязғол старшинаны был эштән ҡотҡар инде»,— тип үтенә...* (Һ. Дәүләтшина). *Дуҫ дуҫҡа ялынһа, дуҫтың күңеле алына* (мәҡәл). *Ҡупме генә ялынмаһын, ялбармаһын, Заятүләк һыу ҡыҙын ебәрмәй* («Заятүләк менән Һыуһылыу»). *Незнайка был юлы ялынып, ялбарып бер хөрт кенә ишәк ала* (әкиәттән). *Батшаның башы ҡырҡылыр ваҡыт еткәндә генә, уның өсөнсө ҡыҙы ҡан-йәш түгеп: «Атайымды, зинһар, үлтермә, минең өсөн генә ҡалдырһана!» — тип Ҡыҙрастың аяғына йығыла* (әкиәттән).

— Үтенес, ялыныс.

**Иркә, наҙлы.** 1) Нескә тойғоло, һөйөлөп кенә тороуҙы яратҡан. **Наҙлы** — бик нәфис, нескә тойғоло. *Зәлифә тәбиғәттең иркә, саф һауаһы, матур күренештәре аҫтында күҙҙәрен алыҫҡа, бик алыҫҡа төбәгән дә тәрән уй эсендә бара* (Ғ. Дәүләтшин). *Күҙ нурымдай ҡыҙым, Миңлеязам, үкенескә икән, иркә ине* (халыҡ йырынан). *Мин өс кескәй шыршы ултырттым. Ҡаҙ бәпкәһе төҫлө йәшкелт улар, ҡаҙ бәпкәһе кеүек наҙлылар* (Р. Ғарипов). *Ярар, ярар.. Тып-тын,*

*иркә, наҙлы ғына булырмын, тип, толомдарын ҡағып йымылдаған диңгеҙ* (З. Биишева).

2) Артыҡ иркәләүҙән боҙолған, көйһөҙгә әйләнгән (кире сифат). *Иркә бала итәк бысрата* (мәҡәл). *Бына шунда наҙлы ҡаҙаҡ ҡыҙы ҡаҙан яҡтан кинәт күренде* (Т. Йәнәби).

— Иркәлек, наҙлылыҡ; иркәләү, наҙлау; иркәләтеү, иркәләүсән, иркәм.

**Иҫеү, өрөү.** Һауа хәрәкәткә килеү (ғәҙәттә, талғын ел). *Ваҡыты менән өҙлөкһөҙ эҫе елдәр иҫә* (Д. Исламов). *Ел өрмәй, ағас һелкенмәй* (мәҡәл).

**Иҫкәртеү, киҫәтеү.** 1) Алдан әйтеп ҡуйыу, хәбәр биреү. **Киҫәтеү** — ҡат-ҡат әйтеп ныҡ иҫкәртеү. *Юҡты һөйләмә, Сафа. Һин әле йәш кешеһең. Муса ағай дөрөҫ иҫкәртә. Уның кәңәшен һин түгел, мин дә тыңлайым* (Н. Мусин). *Ҡара, һаҡ бул, ҡапҡанға йә тәпегә эләгеп ҡуйма,— тип киҫәткән айыу балаһын* (әкиәттән).

2) Ҡабатлап иҫкә төшөрөү, хәтерҙә яңыртыу. **Иҫкәртеү** — ситләтеп иҫкә төшөрөү. **Киҫәтеү** — ҡаты итеп әйтеү. *Был турала тетя Даша уларҙы әллә нисә ҡабат иҫкәртте* (Һ. Дәүләтшина). *Күрәһең, аңламағанды киҫәтеү генә етмәй* («Совет Башҡ.»).

**Иҫтәлек, хәтирә.** Уйҙа, хәтерҙә һаҡланғандарҙың кәүҙәләнеше. **Иҫтәлек** күп мәғәнәле һәм киңерәк ҡулланылышлы. *Балалыҡ* *и ҫ т ә л е к т ә р е. И ҫ т ә л е к итеп биреү. И ҫ т ә л е к дәфтәре. И ҫ т ә л е к яҙыу.* **Хәтирә** — иҫтә ҡалған эш-хәл, ваҡиға һ. б. *Йәшлек х ә т и р ә һ е. Был күптәнге иҫтәлектәр, бик тиҙ арала баштан үтеп, Тимергә ул кешене яҡынайтҡандай булдылар* (Б. Бикбай). *Ҡарт һалдаттар араһында һәр ваҡыт булғанса, һуғыш тураһындағы хәтирәләр бере артынан икенсеһе ағылдылар* (Ғ. Әмири). *Зөһрә, уның йөрәгендә ниндәйҙер хәтирәне уятыуын аңлап, уйламай һөйләнеүе өсөн үҙен-үҙе әрләне* (Н. Мусин).

— Иҫтәлекле.

**Иҫәңгерәү, һеңгәҙәү, иҫтән яҙыу, иҫ китеү, иҫтән тайыу, һуштан яҙыу, һуш китеү, һуш алыныу, иҫ(те) юғалтыу, иҫтән ауыу, аң(ды) юғалтыу, аң(ды) юйыу.** Тирә-йүнде тоймаҫлыҡ хәлгә килеү, аңлау, тойоу һәләтен юғалтыу. **Иҫәңгерәү, һеңгәҙәү** — иҫте йыйып ала алмау, аптырап ҡалыу. **Иҫтән яҙыу, иҫ китеү, иҫтән тайыу, иҫ(те) юғалтыу, иҫтән ауыу** — бөтөнләй иҫ-аңһыҙ ҡалыу. **Һуштан яҙыу** — иҫ тойоу һәләтен юғалтыу. **Һуш китеү** — аптырап ҡалыуҙы ла белдерә. **Аң(ды) юғалтыу, аң(ды) юйыу** — фекер йөрөтөү, тирә-йүнде аңлау һәләтен юғалтыу. *Тайновты алдылар. Был тәүҙә ҡаты ғына удар булып алһа ла, йәштәр иҫәңгерәүҙе еңел үткәрҙеләр* (И. Насыри). *Был тауыш Айбулатты һеңгәҙәгән хәленән айнытты* (Һ. Дәүләтшина). *«Ғәбдерахман һыуға китеп үлде» тигән хәбәрҙе ишеткәс, ул иҫенән яҙған* (М. Ғафури). *Икегеҙ ҙә бына әлеге һымаҡ, иҫегеҙ китеп, хәлһеҙләнеп яттығыҙ* (әкиәттән). *Төн урталарында ҡарт иҫенән тайҙы* (Д. Юлтый). *Түҙемғол шул саҡ ағас төбөндә етенсе көн инде үлем көтөп ята икән. Ул хәҙер бөтөнләй хәлһеҙ, иҫен юғалтҡан, ирендәре кипкән, күҙҙәре йомоҡ, тауыш-тыны юҡ икән, ти* (әкиәттән). *...Һулаҡай ҡул менән тап яңаҡ һөйәккә биргәндә, Ҡолморҙа старшина иҫтән ауа, ул ерҙә аунай* (Т. Хәйбуллин). *Әйе, әйе, төндә бит минең эргәлә ауыр снаряд ярылды, тимәк, мин һуштан яҙғанмын* (Д. Юлтый). *Һеҙ, туғандар, иҫкә төшһә, һушым китеп торам мин* (халыҡ йырынан).

**Итәк, сабыу.** Өҫ кейеменең билдән түбән өлөшө. **Итәк** — киң ҡулланылышлы. *Итәк-ең, итәк-салғый, итәк-сабыу.* **Сабыу** — алдан икегә айырылып торған кейем итәге. *Шәүрә ки-*

*лен кейгән еләндең итәк осҡайҙары мунсаҡлы* (халыҡ йырынан). *Тик торғансы тун сабыуың ыуа тор* (әйтем).

— Итәкләү.

**Ихлас, әүәҫ.** Ысын күңелдән эшләнгән, ҙур теләк менән башҡарылған. **Ихлас** киңерәк ҡулланыла. *И х л а с кеше. И х л а с күңел. И х л а с тотоноу. И х л а с йөрөү.* **Әүәҫ** — эш-ҡылыҡҡа бик теләп тотоноусан. *Йырға ә ү ә ҫ. Эшкә ә ү ә ҫ. Һүҙгә ә ү ә ҫ. Унан тағы ихлас күңел, шат йөҙ менән ҡармағын емләп, диңгеҙгә ташлар [ҡарт]* (З. Биишева). *«Хәҙер ҡушма һөйләм булды»,— тине Йомабикә, әүәҫ кенә* (Ф. Иҫәнғолов). *«Бер эшкә тотондоммо — ҡыра һуғырға ятатам»,— тип әйтергә әүәҫ ул* («Совет Башҡ.»).

— Ихласлыҡ, әүәҫлек.

# Й

**Йоғонто, тәьҫир, шауҡым, шойҡан.** Нимәнеңдер икенсе бер нәмәгә ҡағылышлы мөнәсәбәте. **Йоғонто** киң ҡулланылышлы: туранан-тура һәм ситләтелгән тәьҫир. *Ололар й о ғ о н т о һ о. Й о ғ о н т о яһау. Й о ғ о н т о һ о булыу. Й о ғ о н т о һ о тейеү.* **Тәьҫир** — туранан-тура яһалған мөнәсәбәт. *Т ә ь ҫ и р итеү. Т ә ь ҫ и р е булыу. Т ә ь ҫ и р е тейеү. Т ә ь ҫ и р г ә бирелеү.* **Шауҡым** — үҙенән-үҙе килеп сыҡҡан йоғонто. *Ш а у ҡ ы м ы тейеү. Ш а у ҡ ы м ғ а бирелеү.* **Шойҡан** һирәгерәк ҡулланыла. *Ш о й ҡ а н ы тейеү. ...Хөкөм ҡарары халыҡта тәьҫир тыуҙырһын һәм хәл иткес политик йоғонто яһаһын өсөн, ул крәҫтиән массаларының был енәйәткә ҡарата булған фекеренән ныҡ айырылып торорға тейеш түгел* (Ғ. Әмири). *Тик ул минең баштағы тәьҫиремде үҙгәртте лә ҡуйҙы* (Ф. Иҫәнғолов). *Трибуна артына сал сәсле, ләкин йылдар шауҡымына артыҡ бирешмәгән кеше сығып баҫа* («Совет Башҡ.»). *Тап бына шулай килә ҡорбан байрамы. Үҙе әле ары — шауҡымы инде бында* (М. Ҡәрим). *Иң тәүҙә сәй эстеләр, ләкин күршеләрҙәге ҡырҡыу еҫле спирт быларҙың тамаҡтарын ҡытыҡланы, әллә ниндәй урындарын ҡымырйытты ла үҙ шойҡаны аҫтына ала башланы* (Ғ. Дәүләтшин).

— Йоғонтоло, тәьҫирле, шауҡымлы, шойҡанлы.

**Йоҡлау, йоҡоға китеү, йоҡоға талыу (сумыу), әүен баҙарына китеү.** Еңелсә көлөү, мыҫҡыллау тойғоһо белдерә. *[Батша] Ҡаҡ иҙәндә аунай ҙа таш түпһаға башын ҡуйып йоҡлай* (әкиәттән). *Өйҙәгеләр йоҡланы, шаулап йөрөүсе бөттө. Луиза менән Альберт та арып йоҡоға китте* (Ғ. Сәләм). *Ул [Константин] бер нисә сәғәттәр йөрөп ҡайтыуға, арып талынған Сурағол ҡаты йоҡоға сума* (Т. Хәйбуллин). *Был урмандың иң өлкән, иң көслө, иң иҫәр йыртҡысы булған айыу ҙа әллә ҡасан уҡ ҡышҡы йоҡоға талған да, табанының майын һурып, тамаҡланып ята* (Ғ. Дәүләтшин). *Айбулат, әсәһенең йырын тыңлағандай итеп, бер аҙ ятҡас, әүен баҙарына китеп тә барҙы* (Т. Ҡилмөхәмәтов).

— Йоҡосо, йоҡлаусан.

**Йоҡомһорау, ҡалғыу, ойоу** *күсм.*, **серем итеү.** Еңелсә генә йоҡоға бирелеү, йоҡлар-йоҡламаҫ хәлдә булыу. **Йоҡомһорау** — йоҡо килеү, еңелсә йоҡлау. **Ҡалғыу** — ултырған йәки торған көйө йоҡлау. **Ойоу** — йоҡо баҫыу. **Серем итеү** — саҡ-саҡ ҡына, әҙ генә ваҡытҡа йоҡоға китеү. *Йоҡомһорап ултырғансы ятып ҡына йоҡлаһаң ни була* (һөйл. теленән). *Алешка башын уң яҡҡа ҡарай әйгән*

*хәлендә ҡалғып барыуында булды* (Ғ. Дәүләтшин). «*Йә хоҙа, мосолмандарыңды гөнаһтарҙан үҙең арала!..» — тигән дә, күҙҙәрен йомоп, ойоп киткән күрәҙә* (Б. Бикбай). *Аттың барышы менән йөктәге арышты ваҡ-ҡына сәңгелдәткәнгә, Аҡназар тәүҙә ҡалғып, һуңғараҡ ойоп китте* (Ғ. Дәүләтшин). *Яр буйҙары йәй башындағы ҡыҫҡа төндөң шыйыҡ ҡарағусҡыл зәңгәр япмаһын бөркәнеп серем итә* (Ф. Исәнғолов).

**Йола, ғөрөф, ғәҙәт, ғөрөф-ғәҙәт.** Халыҡтың тормошонда борондан туплана килгән тәртип ҡағиҙәләре. **Йола, ғөрөф, ғөрөф-ғәҙәт** —бик борондан килгән тәртип, ҡылыҡтар нормаһы. *Ата-баба й о л а һ ы. Дини й о л а. Туй й о л а һ ы. Й о л а йырҙары.* **Ғәҙәт** күп мәғәнәле, һүҙьяһалышта актив ҡулланыла. *Йола буйынса, йыртҡыс кейекте үҙ ҡулы менән үлтергән кешегә генә уның ҡанын татып ҡарарға яраған* (әкиәттән). *Иренеңә әсә баллы майҙар яға алманы (боҙҙо йоланы)* (М. Кәрим). *Ул ваҡыттағы ғөрөф буйынса, ҙур урынға кеше алғанда, ул кеше хөкүмәт кешеһенең аяғын үбергә тейешле була* («Совет Башҡ.»). *Новалихин башҡорт түрәләренә күп ҡатнашҡан. Күп мәжлестә булған. Был аймаҡтың бөтә ғәҙәтен, йолаһын белә* (Т. Хәйбуллин). *Шул замандың ғәҙәте буйынса, миңә бәхет теләп, доға ҡылырға ултырҙылар* (М. Ғафури). *Йәш килененең килгән көндән үк белекле рәүештә ғөрөф-ғәҙәтте һаҡлауына, бигерәк тә уларҙың һүҙен тыңлап ҡасып килеүенә Йомай әбейҙең күңеле бөттө* (Һ. Дәүләтшина).

— Ғәҙәти, ғәҙәттәге, ғәҙәтләнеү, ғәҙәтһеҙ, ғәҙәттә, ғәҙәттәгесә; йоласа, ғөрөфсә.

**Йомортҡа, күкәй** *һөйл.* **Йомортҡа** күберәк ҡулланыла, термин булып та йөрөй. *Й о м о р т ҡ а етештереү. Й о м о р т ҡ а һарыһы. Бер ваҡыт, шулай ҡош йомортҡаһы алып ҡайтып килә ятҡанда, быға бер дейеү тап булған* (әкиәттән). *Күкәй һалмаҫ тауыҡ көн әлгәре ҡытаҡлай* (әйтем). *Күкәй тауыҡты өйрәтмәй* (мәҡәл).

— Йомортҡалыҡ, күкәйлек.

**Йөҙ, бит, сырай.** Баштың алғы яғы. **Йөҙ** киң мәғәнәле: эске торош-хәлде лә белдерә һәм **сырай** һүҙенә яҡын, ләкин һуңғыһы сағыштырмаса тарыраҡ ҡулланыла. *Асыҡ й ө ҙ. Яҡты с ы р а й. Ҡараңғы с ы р а й. Й ө ҙ асылыу. С ы р а й һытылыу. Көләс й ө ҙ* һ. б. **Бит** йөҙҙөң төҙөлөшөн, төҫөн һ. б. белдерә. *Быжыр б и т. Тулы б и т. Түңәрәк б и т. Яҫы б и т. Ҡыҙ йөҙөн күрһәтмәй генә тора* (әкиәттән). *Уларҙың шатлыҡлы тауыштарына ирҙәренең дә йөҙҙәре асыла биреп ҡуйҙы* (И. Насыри). *Уның аҡыллы йөҙө тағы ла йыйырсыҡлана төшкәйне. Һағыш та, моң да, һыҙланыу ҙа, ярһыу ҙа бар ине был сырайҙа* (Ә. Вахитов). *Алма бит, алма биттәр ҡала бит, алма биттәр ҡалмаҫ ине, батша беҙҙе ала бит* (халыҡ йырынан). *Әле лә, һөйләй башлауҙан элек, уның сырайы етдиләнде, күҙ ҡараштары һороланды, ялбыр ҡаштарын бергә ҡушылдырып, маңлайын сырыштырҙы* (Н. Мусин).

**Йөҙөк, балдаҡ.** Бармаҡҡа кейә торған биҙәүес. **Йөҙөк** ҡашлы ла була. *Б а л д а ҡ һуғыу. Алтын б а л д а ҡ. Й ө ҙ ө к ҡашы. Көмөш й ө ҙ ө к. Семәрле й ө ҙ ө к. Ҡыҙҙар, ҡыҙҙар, ҡарағыҙсы, ниндәй йөҙөк ҡаштары! Ғүмер буйы һайлағандыр аҫыл Урал таштарын* (халыҡ йырынан). *Икенселәй еңгә тип әйтмәҫһеңме, балдаҡ һорамаҫһыңмы, тип ныҡыша ла шунан, һорамайым, тиһәң генә, аяҡ-ҡулды сисә* (Һ. Дәүләтшина).

**Йөҙәтеү, еләтеү, ялҡытыу, туйҙырыу** *күсм.*, **тәкәтте ҡоротоу, теңкәгә тейеү, йәнгә тейеү, теңкәне ҡоротоу, үҙәккә**

**үтеү, быуынға төшөү, елкәгә тейеү.** Бер үк нәмәне тызып йәки оҡшамаған эш-ҡылыҡ менән йонсотоу, тәмһеҙләп ташлау. **Йөҙәтеү** киңерәк ҡулланыла. **Еләтеү** — нығыраҡ ялҡытыу. Фразеологик берәмектәр «бик ныҡ йөҙәтеү» мәғәнәһен бирәләр. *Тамам йөҙәттеләр мине, күҙҙе асып булмай, әллә юрый шаярталар, әллә ысынлап шулай* (Б. Бикбай). *Төндәрҙә төшөнә лә инеп йөҙәтеп бөтөрҙө* (И. Насыри). *Ҡылдарың назлы, наҙың мәғсүм ауазды аңҡыта. Ҡанса тыңлап та туя алмайым, башҡалар нык ялҡыта?* (Ш. Бабич). *Мине лә был тимерселек эше еләтте. Эшме ни ул* (Һ. Дәүләтшина). *Һис кенә лә форсат бирмәйҙәр, теңкәгә тейҙеләр инде* (Р. Низамов). *Был Хисбулла, күрмәйһеңме, йәндәренә нығырак тейһәм, берәйһенән салдырырҙар әле, тип нықышып ултыра ла баһа* (З. Бишева). *Ул тамам теңкәмде ҡоротто* (Ә. Бикчәнтәев). *Йәйен генә муйыл сәскә ҡоя, һандуғастар инде китһен тип, һыңар күҙенәһен ҡыҫып үтә, үҙәгенә, ахыры, үтһен тип* (халыҡ йырынан). *Ныязғолдо ана шулай, көн дә быуынына төшөп, әрләйҙәр* (Һ. Дәүләтшина). *Новиков көлә: «Күрәһең, тағы ла килмәҫкә уйлай. Һуғыш елкәгә тейә ул»,— ти* (Д. Юлтый).

**Йөкмәтке, эстәлек.** Төп фекерҙең ҡыҫҡаса бирелеше; китаптың бүлектәре, главалары исемлеге. **Йөкмәтке** йышыраҡ ҡулланыла. *Әҫәрҙең идея й ө к м ә т к е һ е. Й ө к м ә т к е һ е н һөйләү. Тәрән й ө к м ә т к е л е. Уҡығанды бик яҡты хәтерләй, ә һуңынан әҫәрҙең йөкмәткеһен ата-әсәһенә, ҡуштан саҡтарҙа бабайға ла кинәнеп һөйләп бирә* (Х. Мохтар). *Был тынлыкта ул моңһоҙ көйҙөң эстәлеге миңә тулыһы менән килеп етә* (Ҡ. Мәргән).

**Йөкмәү, артмаҡлау, арҡалау.** Яурын аша һалып күтәреү, арҡаға аҫыу. **Йөкмәү** киңерәк ҡулланылышлы. *Тоҡ й ө к м ә ү. Бала й ө к м ә ү.* **Артмаҡлау** — баулап аҫыу. **Арҡалау** — арҡаға аҫыу (күберәк бик ауыр нәмәләргә ҡарата). *Йәнлектәрҙең ҡайһыһын елкәһенә йөкмәп, ҡайһыһын ҡултығына ҡыҫтырып, ҡайһыһын күтәреп, ҡайһыһын һөйрәтеп ҡайтырға сыҡҡан, ти был* (әкиәттән). *Аҙаҡ, ауылдан ҡайһылай сығып киткән булһалар — шулай, тоҡсай артмаҡлап, кире ҡайтып төшәләр* (Б. Бикбай). *Ул [Иблис] шулай мендәр-фәләндәр арҡалап, алды ожмахтан шәрабтар тартмалап* (Ш. Бабич).

**Йөпләү, ыңғайына тороу, көйөнә тороу, ыңғайына һыпырыу (һыйпау).** Ярарға тырышып, кешенең эш-ҡылығын, һүҙен хуплап ҡына тороу. **Йөпләү** күберәк һүҙ кеүәтләүҙе белдерә. **Көйөнә тороу, ыңғайына тороу** — эш-ҡылығын хуплау, ҡаршы килмәй, көйләп кенә тороу. **Ыңғайына һыпырыу (һыйпау)** — хәйлә менән хуплаған булыу. *Ауылдың «ауыҙын асһа, үпкәһе күренә» торған иң ярлыһы, кем әйтһә, шуның һүҙен йөпләй торған бәләкәй кәүҙәле, кәкре аяҡлы, һыңар күҙле Әбләй ҙә шулар тирәһенә һырыҡҡан* (Ғ. Дәүләтшин). *Шулай ҙа арҡыры төшмәнем, ыңғайына торҙом* (Ә. Бикчәнтәев). *Баланың гел көйөнә торорға ярамай* (һөйл. теленән). *Ныязғолға был турала бик күп уйларға, бик күп эштәр тураһында халыҡтың ыңғайына һыпырырға кәрәк ине* (Һ. Дәүләтшина).

**Йүнәтеү, төҙәтеү, рәтләү.** Боҙолғанды төҙөк хәлгә килтереү, рәткә һалыу. *Машинаны й ү н ә т е ү. Ҡранды т ө ҙ ә т е ү.* **Рәтләү** — емерелгәнде, туҙғанды тәртипкә килтереү, төҙәтеп ҡуйыу. *Өйҙө р ә т л ә ү. Сәсте р ә т л ә ү. Нисек кенә булмаһын, бөгөн һалды йүнәтеп бөтөргә һәм иртәгә таҡта яра башларға кәрәк*

(Н. Мусин). *Бына машинаны төҙәтеп, ходҡа ебәргәс, эштән һуң ҡалып, мин һиңә бөтәһен дә өйрәтермен* (Н. Мусин). *Төнгө ҡарауылсы Ғарифулла ағай менән көтөүсе Шәрәфи ташландыҡ землянканы рәтләп керҙеләр* (Д. Исламов).

**Йыбаныу, иренеү, ялҡауланыу.** Эшләге килмәү, эш-хәрәкәткә ихласлыҡ булмау. **Йыбаныу, иренеү** үҙ-ара яҡын; **ялҡауланыу** — эшкә барым булмау. *Беҙ көн-төн йоҡламайынса, һыйырҙарҙы ашатырға тырышабыҙ. Ә һауынсылар булған һөттө һауырға ла йыбана* («Совет Башҡ.»). *Иренгән ике эшләр* (мәҡәл). *Таң атҡансы шунда яттыҡ, ҡуҙғалырға ирендек* (Д. Юлтый). *Ялҡауланһаң — ауырырһың, тырышһаң — һауығырһың* (мәҡәл).

**Йыйылыу, йыйналыу, өйкөлөү, эркелеү, тупланыу.** Төркөм булып бер урында ойошоу. **Йыйылыу** киңерәк ҡулланылышлы. *Сәғәт эсендә тейешле кешеләр йыйналып бөттө* (Я. Хамматов). *Һалдаттар сәғәт алтыла ғына казармаға йыйналып бөттөләр* (Д. Юлтый). *Бригадирҙар йыйыла, йәштәр килә* (Б. Бикбай). *Ҡыуыш тирәһендә аш-һыу ҡалдыҡтарына ҡара себендәр.. йыйылған* (Ғ. Дәүләтшин). *Көндөҙ тауҙар зәңгәр монарҙа йөҙә, төн булһа, хәс йәйге һымаҡ, уяҙҙарға ап-аҡ томан эркелә. Ә һарыҡтар ыҙғышмайҙар, дуҫ йәшәйҙәр, исмаһам. Бергә өйкөлөп болонда йөрөй улар һәр ҡасан* (Ф. Рәхимғолова).

**Йырғанаҡ, йырын, йыраҡа** *һөйл.*, **йырынты.** Һыу йыуып яһаған ярлаулы үҙән. **Йырғанаҡ** киңерәк йырынға әйтелә, башҡалары бер самараҡ. *Дошман танкыһы ғәйрәтләнеп йырғанаҡҡа төштө лә ҡаршы яҡтың текәлегенә килеп терәлде* (Н. Ҡәрип). *Өҫтөн һылап, тип-тигеҙ булып ятҡан йырынға батып, алды менән текә ярға төртөлөп туҡтаған икән трактор* (Ф. Иҫәнголов). *Ауыл кешеләре һыуҙы аҫта, бик тәрәндә, ҡая таш итәгендәге йыраҡанан сығып ятҡан кескәй генә шишмәнән ташып эскән* (З. Биишева). *Сәйфелмөлөк кескәй йылға ярында, ямғыр һыуы өңөүҙән хасил булған тау йырынтыһына төшөп, ҡоро-һары йәйеп, өҫтөнә һуҙылып ятырятмаҫтан йоҡоға китте* (Ә. Хәкимов).

**Йыуатыу, тынысландырыу, әүрәтеү.** Ҡешенең күңелен баҫыу, хафаһын бөтөрөү. **Йыуатыу** — ауыр кисерештән сығарыу, йыуаныс биреү. **Тынысландырыу** — ярһыуҙы баҫыу, тыныс хәлгә ҡайтарыу, **әүрәтеү** күберәк бала-сағаға ҡарата әйтелә. *Улар шул, төш күреүҙәрен яҡшылыҡҡа юрауҙар, хәйер-саҙаҡа биреүҙәр менән һәм төрлөсә нәҫерҙәр әйтеү менән үҙҙәрен йыуатып, теләктәренә ирешеү хыялында йөрөнөләр* (М. Ғафури). [*Яҡуп:*] — *Ҡуй, һыйлым, ир-ат эшенә ҡыҫылма, беҙ тиҙ ҡайтырбыҙ,— тип уны еңел тынысландырҙы* (Б. Бикбай).

**Йыуаш, баҫалҡы, баҫынҡы, баҫымсаҡ, һапалы** *һөйл.*, **һалҡын ҡанлы** *күсм., кит.* Тыныс тәбиғәтле, юҡҡа-барға ҡыҙып бармай торған. **Йыуаш** киң ҡулланылышлы: хайуандарға ҡарата ла әйтелә. *Й ы у а ш ат. Й ы у а ш эт.* **Баҫалҡы, баҫынҡы, баҫымсаҡ** — тыныс холоҡло, тотанаҡлы (кешегә ҡарата ғына). **Һапалы** — бик тыныс, йәманыраҡ. **Йыуаш, баҫалҡы, баҫымсаҡ** һүҙҙәре артыҡ ҡыйыуһыҙ, йомшаҡ төҫмөрөн дә бирә. *Ғәйни апай үҙе былай йыуаш кеше ине* (Т. Йәнәби). *Ә. Дилмөхәмәтова Фәйрүзәне саф күңелле, баҫалҡы бер ҡыҙ итеп уйнай* («Совет Башҡ.»). *Ғариф бик баҫынҡы булһа ла, был йырға ул да тәьҫирләнде* (М. Ғафури). *Баҫалҡы булһаң, баҫырҙар, уҫал булһаң, аҫырҙар, урта булһаң, ил ағаһы яһарҙар* (мәҡәл). *Яңы председатель һапалы кешегә оҡшай, тегеһе кеүек яндырай түгел* (һөйл.

теленән). [*Николай*] *..Развед-каға барғанда шул тиклем ба-ҫынҡы, һалҡын ҡанлы булып китә* (М. Ҡәрим).

— Йыуашыу, йыуашайтыу, йыуашланыу; баҫалҡыланыу, баҫымсаҡланыу; баҫымсаҡлау, һапалыланыу.

**Йыһан, ғаләм, донъя, космос** *кит*. Билдәле булған бөтә донъялыҡтар системаһы, планеталар. **Йыһан** йышыраҡ ҡулланыла. *Й ы һ а н карабы. Й ы һ а н ғ а осоу. Й ы һ а н д ы үҙләштереү*. **Ғаләм, донъя** бер сама ҡулланыла. **Космос** матбуғат телендә, китаптарҙа ҡулланыла, һүҙьяһалышта актив. *Осор сәғәте иртәнгене һуҡты ғаләм көмбәҙенең аҫтында. Йыһан... Ваҡыт... Улар тороп торһон! Мин һөйләйем ҡулдар хаҡында* (М. Ҡәрим). *Ул китер башҡа ғаләмгә, ер йөҙө айһыҙ ҡалыр* (М. Ғафури). *Донъя менән диңгеҙҙең төбө юҡ* (мәҡәл). *Төҙөүселәрҙең массовый забастовка иғлан итеүе һөҙөмтәһендә, тип хәбәр итә Америка агентстволары, бөгөн бында космос программаһы буйынса эштәр туҡтатылған* («Совет Башҡ.»).

— Ҡосмонавт, космодром.

**Йәберләү, рәнйетеү.** Яман һүҙ йәки ҡылыҡ менән әрнетеү. **Йәберләү** киңерәк мәғәнәле. *Бушҡа й ә б е р л ә ү. Нахаҡҡа р ә н й е т е ү. Был һүҙҙәр нисек кенә йәберләмәһен, Айсыуаҡ түҙҙе* (Ш. Янбаев). *Ҡрасновтың был һүҙе мине бик нык йәберләне* (Ә. Вәли). *..Йәштән тол ҡалған ҡатынды рәнйетер өсөн күпме генә кәрәк* (Ф. Исәнғолов).

1. **Йәбешеү, тотоноу**. 1) Алыу ниәте менән ҡул һалыу. *Ҡылысҡа й ә б е ш е ү. Һәнәккә т о т о н о у. Ҡәләмгә т о т о н о у.* 2) Ныҡ итеп эләктереп алыу. *Й ә б е ш е п ултырыу. Т о т о н о п барыу. Тәгәрмәскә й ә б е ш е ү. Сәскә й ә б е ш е ү. Беҙ, бер-беребеҙгә йәбешеп, йә көрмәкләшеп китәбеҙ, йә ыҫҡынып, аяуһыҙ йөҙрөҡтар яуҙырырға керешәбеҙ* (М. Ҡәрим). *Буҙансы батыр арҡан осона тотоноп алған..* (экиәттән).

3) *күсм*. Ихласлыҡ менән керешеү. *Эшкә й ә б е ш е ү. Уйынға т о т о н о у. Ҡөрәшкә т о т о н о у.* [*Бирҙеғол тархан*] *Алдар батырҙы ла, Сәйетте лә аҫтырҙы. Хәҙер беҙгә йәбешкән* (Ғ. Ибраһимов).

2. **Йәбешеү, һыланыу, йоғоу** *күсм*. Яғылып тороу. **Йәбешеү** күберәк ҡулланыла. *Балсыҡ й ә б е ш ә. Тиҙәк һ ы л а н ғ а н. Буяу ҡулға й о ғ о п бара.*

**Йәйғор, салауат күпере.** Ямғырҙан һуң күк йөҙөндә дуғаланып тора торған төрлө төҫтәге таҫма. *Йылы ямғыр үткәс, йәйғор ҡалҡҡас, хуш еҫ бәреп инде бүлмәгә* (С. Ҡулибай). *Ҡитер өсөн килмәй ямғыр ҙа, ҡырауы ла, ҡар ҙа, йәйғор ҙа* (М. Басыров). *Ямғырҙан һуң салауат күпере һымаҡ, биҙәп уның фекерен, уйын; тәүге һөйөү ҡалҡҡан, осратҡан бәхет менән ул һөйгән ҡыҙын* (М. Хәй).

1. **Йәйелеү, йәйрәү.** Ҡиң булып таралып ятыу. **Йәйрәү** — сикһеҙлеккә ынтылып, киң булып ятыу (күберәк тәбиғәт күренештәре тураһында). *Алыҫ Аҡтүбәгә саҡлы диңгеҙ йәйелгән* (Ғ. Әмири). *Йәп-йәшел булып йәйелеп ятҡан сәхрәнең аҙ ғына ҡалҡыу булып күтәрелеп күккә тоташҡан һымаҡ күренгән горизонтынан өс ат еккән, өҫтө ябыҡ ҡара повозка ҡалҡты* (Һ. Дәүләтшина). *Алыҫтарға йәйрәп ялан ята, үҙе океан төҫлө сикһеҙ киң, унда уңыш хәбәрсеһе булған колхоз ужымдарын күрәм мин* (А. Игебаев).

2. **Йәйелеү, таралыу.** Тотош солғап алыу. *Ҡараңғылыҡ й ә й е л е ү. Моң т а р а л ы у. Еҫ т а р а л ы у. Йәйелә ситкә алһыу нурҙар, йәм һирпелә* (Д. Юлтый). *Ай йөҙ түбән ятып ерҙе күҙләй, урамдарға тынлыҡ тарала* (М. Ҡәрим).

**Йәлләү, ҡыҙғаныу, аяу.** 1) Мәр-

хәмәтлелек күрһәтеп, хәленә инеү. Тиң синонимдар. *Бай ҡулында наҙлы көндәремде, йылдарымды йәлләп, хисаплап, бурыл аттар егеп, утын ташып, түңгәк, түмәрсәләр ҡосаҡлап, көрәп кәртә, зифа ағастарҙан бөгөп тәртә, ғүмер һөрҙөм мин* (М. Кәрим). *Тау башынан бер аҙ ҡарап торҙом, мәхлуккайҙы аяп, ҡыҙғанып* (Ш. Бабич). *Тик баш эймәм һай холоҡло һыуға, булыр әле ташты аяған* (Р. Ғарипов).

2) Тәләф итке, тотонғо килмәү. *Ул приказ: «Пуляны йәлләмәҫкә, бер кемде лә аямаҫҡа», тигән һүҙҙәрҙән генә тора ине* («Совет Башҡ.»). *Ботинкаларын ҡыҙғанып, бейемәй ултыралар* (таҡмаҡтан). *Аямаған йәнен, ҡойған ҡанын, һис бирмәгән башҡорт Уралын* (халыҡ йырынан). *Ерҙә тыныслыҡ, хаҡлыҡ хаҡына аямам ҡаным хатта тамсы ла* (Б. Бикбай).

**Йән, рух. Рух** юғары стилгә тартым *Й ә н һәм тән. Й ә н биреү. Й ә н сығыу. Р у х биреү.* [*Апаһы — Кәбиргә:*] *Бына бөгөн мулла саҡырып, еҙнәңдең рухы өсөн ҡөрьән уҡытырға йыйынам* (С. Агиш).

**Йәнәш(ә), ҡатар, рәттән.** Бер-береһенә яҡын, эргәләш (урынлашыу). **Йәнәш** йышыраҡ ҡулланыла. **Рәттән** — рәт булып, рәткә теҙелеп. *Бына улар йәнәш баҫып тора, Демид урта буйлы бер эшсе* (Ғ. Сәләм). *Ете йәштә ине ул аҡ ҡайын, апа инем уға ун йәшкә; иптәш булһын, тип, йәш имәнгә,— ултырттым мин уны йәнәшә* (Ҡ. Даян). *Һаман бергә шулай ҡатар атлап, үтһәк ине ғүмер юлдарын* (М. Кәрим). *Барыбыҙ рәттән тороп йыуындыҡ* (һөйл. теленән).

**Йәштәш, тиңдәш, тиҫтер, ҡорҙаш, тиң, тиң-тош.** Бер йәштәге, йәштәре менән тигеҙ (кешеләр). Сифат та, исем дә булып йөрөйҙәр. **Йәштәш, тиңдәш** киңерәк мәғәнәле: төрлө быуын кешеләренә ҡарата ла әйтелә; **тиҫтер** күберәк йәштәр, балаларға, **ҡорҙаш** ололарға (ғәҙәттә ирҙәргә) ҡарата ҡулланыла. **Тиң, тиң-тош** күберәк йәштәргә әйтелә. *Иң оло улдары, Миңнулла исемлеһе, минең менән йәштәш ине* (Ҡ. Мәргән). *Яҡшы һүҙ — йән аҙығы, тигән шикелле, Бирғәли тиңдәштең яғымлы һүҙҙәре минеге лә иретеп, дәртләндереп ебәрҙе* («Совет Башҡ.»). *Берәй тиҫтере менән саҡ ҡына сәкәләшеп алһа, тегенеһе аҙна буйынса унан: «Үҙе кәкәй, танаһы сәкәй!» — тип көлә* (Х. Мохтар).— *Өйгә ҡайтайыҡ тиме әллә, Ҡолмәт ҡорҙаш? Колхоз председателе Ярулла ағай арғы арбала килгән кешене ошо һүҙ менән ҡаршыланы* (Ҡ. Мәргән). *Зәлифә йәш яғынан үҙенә тиң еңгәһен яҡын дуҫ күрҙе* (Һ. Дәүләтшина). *Ҡинйә менән Усман бер-береһенә ҡарашып алдылар. Улар тиңтоштар* (Ғ. Ибраһимов).

**Йәшәү, тороу, көн итеү, көн күреү, ғүмер һөрөү, ғүмер кисереү.** Тереклек итеү, донъялыҡта бар булыу; үлеүҙең киреһе. **Йәшәү** киң мәғәнәле: бөтә йән эйәләренә, үҫемлектәргә ҡарата әйтелә. *Бергә й ә ш ә ү. Оҙаҡ й ә ш ә ү. Маймылдар йылы яҡта й ә ш ә й.* **Тороу** кешегә ҡарата ғына әйтелә. *Айырым т о р о у. Утыҙ йыл т о р о у* һ. б. **Көн итеү, көн күреү** — ауырлыҡ менән йәшәү. **Ғүмер итеү, ғүмер һөрөү, ғүмер кисереү** — бер сама менән оҙайлы йәшәү (юғары стилгә хас). *Борон-борон заманда, илдә батшалар хөкөм һөргән ваҡытта, бер ауылда Йәләл исемле бер ҡарт бабай йәшәгән* (әкиәттән). *Бер ҙә алама өй түгел, байҙарса тораһығыҙ икән* (Б. Бикбай). *Алты балаһы булған ул бабайҙың. Бабай бик ҡыйынлыҡта көн иткән* (С. Агиш). *Ғариф яңғыҙ һәм дә ярлы булған, ауыр тормош менән көн күргән* (Ғ. Сәләм). *Мөмкин түгел ине ҡол булырға төп хужаһы көйө хеҙмәттең, иҫәп етмәҫ байлыҡ*

*тыуҙырып та, үҙең ғүмер итеү икмәкһеҙ* (Р. Нигмәти). *Фәҡир генә булһаң да, тигеҙ генә ғүмер һөрһәң, шул бик яҡшы икән* (М. Ғафури). *Шулай ғүмер һөрә торғас, етте көндөң башҡаһы — ағыуланған иген ашап, үлеп ҡуйҙы ҡашҡаһы* (Р. Ғарипов). [*Айыуғолоҡ*] *оло ҡыҙға өйләнеп, тегеләре менән дуҫлашып, бик күп йылдар ғүмер кисерҙе, ти* (әкиәттән).

**Ҡейек, януар.** Ҡырағай йәнлек. **Ҡейек** киңерәк ҡулланыла: ҡырағай хайуандарҙың барыһына ҡарата ла әйтелә. *Ҡ е й е к аулау. К е й е к ҡыуыу* һ. б. **Януар** — күберәк йыртҡыс хайуан. *Бөркөт тигәнең, тау түбәһенә ҡунып, ҡояшты оҙатып ҡалалыр, ә кейектәр, киске ауға сығып, ҡырсынташ һибелгән яр буйына һыу эсергә килеп еткәндәрҙер инде* (Ә. Бикчәнтәев). *Ул ваҡыттарҙа Балҡан тауында төрлө януар, йәғни ҡыр кейектәре бар ине* (М. Ғафури). *Урман кейекһеҙ булмай* (мәҡәл). *Был януар үҙенең ағарып-тоноп бөткән күҙҙәре менән миңә төбәлгәйне* («Совет Башҡ.»).
— Ҡейексе.

**Ҡейем, кейем-һалым, өҫ-баш.** Тәнде ҡаплау һәм йылылыҡ өсөн туҡыма, йөн, тиренән һ. б. тегелгән нәмәләр. **Ҡейем** дөйөмөрәк мәғәнәле: кейемдең төрҙәрен дә белдерә. *Аяҡ к е й е м е. Баш к е й е м е. Өҫ к е й е м е. Ҡышҡы к е й е м. Эске к е й е м* һ. б. **Ҡейем-һалым** — төрлө кейем йыйылмаһы. *Ҡ е й е м-һ а л ы м магазины. Ҡейем-һалымға мохтажлыҡ.* **Өҫбаш** — бер кат кейем (күберәк һөйләү телендә ҡулланыла). *Ө ҫ-б а ш ҡ а алыу. Кейемеңә ҡарап ҡаршы алырҙар, аҡылыңа ҡарап оҙатырҙар* (мәҡәл). *Ҡыҙҙың кейем-һалымы тауышалып, лыҫтырап бөткән икән* (әкиәттән). *Өҫ-башҡа күршетирәң бирмәһә, барырһың, бармай ни* (Һ. Дәүләтшина).
— Ҡейендереү, кейенеү; кейемлек, кейем-һалымлыҡ, өҫбашлыҡ.

# К

1. **Ҡеүек, һымаҡ, шикелле, төҫлө, ише** *һөйл.* Оҡшатыуҙы, сағыштырыуҙы белдергәндә ҡулланылған бәйләүестәр; *-дай / -дәй, -тай / -тәй, -ҙай / -ҙәй, -лай / -ләй* ялғаулы һүҙҙәрҙе алыштыра алалар. **Ише** һирәгерәк ҡулланыла, башҡалары үҙ-ара бик яҡын. *Күктәге ярты ай, нимәнелер ҡыуып торорға тырышҡан кеүек, ашығып, болоттарға ҡаршы йөҙә. Аҡлы-һарылы һымаҡ болоттар уның хәлһеҙ нурын ҡаплайҙарҙа, иғтибарһыҙ шыуып, алға үтәләр* (Һ. Дәүләтшина). *Тауҙарҙың бейек түбәләре һымаҡ ғорур, Һаҡмар буйы далалары киңлеге төҫлө сикһеҙ, яҡты күлдәй тәрән йыр башланып китте* (Б. Бикбай). *Сәғиҙәнең бер ҡайғыһы ла ҡалмаған шикелле, шатлығы шундай көслө булды* (Һ. Дәүләтшина). *Был ҡыш ише ҡыштың булғаны юҡ, зәңгәр йырға тулып торғаны* (Г. Әхмәтҡужина).

2. **Ҡеүек, һымаҡ, шикелле, төҫлө, буғай.** Ниҙендер дөрөҫлөгөнә шикләнгәндә, икеләнгәндә ҡулланыла. Был мәғәнәлә **төҫлө** һирәгерәк йөрөй. Беренбере алыштыра ла алалар. *Атайым килер һ ы м а ҡ (шикелле, кеүек). Ҡөн йылы булыр к е ү е к (шикелле, һымаҡ, төҫлө). Күрше-тирә ырыуҙарҙан берәүһенең дә, яман эш менән килеп, Арыҫлан батырҙың ҡаты ҡулына тарырға баҙнат итмәҫ төҫлө* (Ғ. Ибраһимов). *Баттал буғай, кемдер күренде* (Б. Бикбай). *..Был самауырҙы баҫырға берәй нәмә табып бир әле, еҫе бар буғай* (И. Насыри).

**Ҡеше, әҙәм, бәндә, инсан** *иҫк.*

Аңы, фекерләү һәм хеҙмәт һәләте булған, һөйләшә белгән йән эйәһе. Берен-бере алыштыра ала. **Кеше** киң ҡулланылышлы, стиль йәһәтенән битараф. *Ир к е ш е. Ҡатын к е ш е. К е ш е булыу. Ауыл к е ш е һ е. Ят к е ш е* һ. б. **Әҙәм** «кеше» һүҙенә яҡын, айырым баҫым яһап әйткәндә, күберәк кире мөнәсәбәтте белдерә. *Ә ҙ ә м аҡтығы. Ә ҙ ә м балаһы. Ә ҙ ә м көлкөһө. Ә ҙ ә м мәсхәрәһе. Ә ҙ ә м булыу* һ. б. **Бәндә** — бик юғары баһа биргәндә йә кәмһетеп әйткәндә ҡулланыла. *Алла б ә н д ә һ е.* **Инсан** элекке әҙәбиәттә генә осрай. *Хыял кешегә йәшәү көсө өҫтәй..* (Н. Мусин). *Ергә тыуған һәр бер кеше ҡаса алмай үлемдән..* (Б. Бикбай). *Ул ҡара быжыр битле, оҙон мыйыҡлы, ауыр ҡарашлы бер әҙәм* (Һ. Дәүләтшина). *Ниңә шулай икән ул— байрам осоронда әҙәмдәр бер-береһен шөйлә рәнйетә* (М. Кәрим). *Ә бына йылтыр машина хужаһы Хисаметдин — төлкө ҡиәфәтле бәндә—хуш күңелле, алсаҡ кеше булып ҡылана* («Совет Башҡ.»). *Инсан яуыз, нахаҡ олаҡтыра бесәйҙе, тип, тиргәйем кешене* (Ш. Бабич).

— Кешелек, кешеләрсә, кешелекле, кешелекһеҙ, кеше-ҡара; әҙәмдәрсә.

1. **Кибеү, короу, елләү, һурығыу, ҡорғаҡһыу, ҡаҡланыу.** Һыуы, дымы бөтөү (ер, төрлө нәмәләр). **Кибеү** киңерәк мәғәнәле: һыуы бөтөү, дымы осоу. *Күл к и б е ү. Кейем к и б е ү. Тамаҡ к и б е ү* һ. б. **Короу** — һыуы бөтөү. *Йылға к о р о у.* **Елләү** — елгә осоп кибеү. *Тупраҡ е л л ә ү.* **Һурығыу** — бер аҙ кибеү, елләү (ергә ҡарата). **Ҡорғаҡһыу** — ныҡ кибеү (ағас нәмәләр; тупраҡҡа ҡарата ла әйтелә). *Ул [Урал], атаһы кеүек, һуңарға йөрөй башлаған мәлдә генә тирә-яҡты үлем ҡурҡынысы солғаған: күлдәр, йылғалар ҡороған, үләндәр ҡыуарған, ағас япраҡтары һарғайып бөткән, тын алыуы ауырлашҡан экиәттән). Юрғаның тире кипмәҫ, иркәнең йәше кипмәҫ* (мәҡәл). *Бер нисә көндән һуң тағы ҡояш күренде. Ер елләне* («Совет Башҡ.»). *Ер асылһа тиҙерәк, ер һурыҡһа, тракторҙар сығыр ярышҡа* (Б. Вәлид). *Тәгәрмәс ҡорғаҡһыған* (М. Тажи).

2. **Кибеү, ҡороу, ҡыуарыу, быжыу, көйөү, ҡурышыу.** Дымы, һыуы бөтөп, тереклек итеүҙән туҡтау (үҫемлектәргә ҡарата). **Кибеү, ҡороу** берен-бере алыштыра. **Ҡыуарыу** — кибеп төҫө үҙгәреү, һарғайыу. **Быжыу** кибеп сурышыу (йәшелсәләргә ҡарата). *Ҡыяр б ы ж ы ғ а н.* **Көйөү** — эҫелә яныу, көйрәү (үлән, иген). *Иген кипкән — шиңгәндер, яуһаңсы бер, яу, ямғыр* (Ш. Бабич). *Баҫҡан әҙҙәре соҡорайып, үләндәре ҡороп ҡала икән, ти* (И. Насыри). *Ҡом сахраһы төҫлө ҡыуарған, йәшеллеге кипкән ер ине..* (Т. Йәнәби). *Бойҙай емгә туйына алмай көйҙө* (һөйл. теленән).

1. **Килешеү, ярашыу, уртаҡ тел табыу.** Һөйләшеп аңлашыу, дуҫлашыу. **Килешеү** киң мәғәнәле һәм күп ҡулланыла. **Ярашыу** — дошманлыҡты бөтөрөп, дуҫлашыу. **Уртаҡ тел табыу** — һөйләшеп ярашыу, бер фекергә килеү. *Мин бер ни ҙә аңламайым, ләкин инженерҙар үҙ-ара килешәләр, уртаҡ тел табалар, бер-береһен шунда уҡ аңлайҙар* (Ә. Бикчәнтәев). *Бар яраштыра, юҡ талаштыра* (мәҡәл). *«Иптәш председатель, ашыҡма әле,— тип урынынан торҙо начальник.— Уртаҡ тел табырбыҙ, моғайын»* (Н. Мусин).

2. **Килешеү, барыу** *күсм.* 1) Кәүҙәгә ятышлы, төҫкә килешле булыу (кейем-һалым хаҡында). **Килешеү** йышыраҡ ҡулланыла. *Күлдәгең бигерәк килешә, үлсәп теккән кеүек* (һөйл. теленән). *Был бүрек һиңә бармай.*

2) Урынлы булыу, ярап тороу (эш-хәл, һүҙ хаҡында).— *Йә, йә, Арҡыры баш, ҡуй, һинең һынлы баһадирға илау килешмәй,— тип мин уның сәсен*

*һыйпаным* (М. Ҡәрим). *Ни ҡыланһа ла килешә өйләнмәгән егеткә* (халыҡ йырынан). *Былай бер ҙә бармай, яҡшы түгел* (һөйл. теленән).

**Ҡимереү, мөнйөү.** 1) Ҡаты нәмәне теш менән ваҡлау; ҡырып ашау. **Ҡимереү** киңерәк мәғәнәле: кешегә, хайуандарға ла ҡарата әйтелә. *Ағас к и м е р е ү. Таш к и м е р е ү. Һөйәк к и м е р е ү.* **Мөнйөү** — һөйәкте матурлап кимереп ашау (кешегә ҡарата). *Имә белһәң — имек, кимерә белһәң — кимек* (мәҡәл). *Әпәш йоҡлай, аттар тора улаҡ төбө кимереп төн буйы* (Д. Юлтый). [*Аптыраҡ һөйәкте*] ..*үҙе мөнйөргә әҙер торғандай, телдәрен йәлмәләп, уңға-һулға ҡаранды* (Ғ. Ибраһимов).

2) *күсм.* Ваҡ-төйәк менән бәйләнеп, теңкәгә тейеү. **Ҡимереү** күберәк ҡулланыла. *Мейене к и м е р е ү. Һарылып мәлғүндәр муйыныңа, башыңды мөнйөрҙәр аҡыртып* (Ш. Бабич).

— Ҡимек, кимереүсе.

**Ҡиндер, тарма.** Һабағынан сүс, орлоғонан май алына торған үсемлек. **Ҡиндер** орлоғона ла, һабаҡтағы үсемлегенә лә әйтелә. *Ҡ и н д е р һуғыу. Ҡ и н д е р майы. Шәмсиҡәмәрҙәр кис киндер туҡмарға сығалар* (Н. Ҡәрип). *Ҡолой кантондың да буйҙары буйға үҫкән тармалай* (халыҡ йырынан).

— Ҡиндерселек.

**Ҡинәнес, рәхәтлек, хозурлыҡ, ләззәт, ирәүәнлек.** Бик күңелле кисереш, ҡәнәғәтлек. **Ҡинәнес, рәхәтлек** үҙ-ара яҡын. **Ләззәт** — юғары дәрәжәләге рәхәтлек. **Хозурлыҡ, ирәүәнлек** — күңел рәхәтлеге, күслө ҡәнәғәтлек. *Иген эше кинәнес, эшләй белеп эшләһәң, игән эше көйөнөс, ялҡауланып йоҡлаһаң* (мәҡәл). *Мин матур нәмәне ҡарағанда, былай рәхәтлек алған кешене күргәнем юҡ ине* (Ә. Вахитов). «..*Йәш бер ҡыҙҙың йөрәк ялҡыны» кеүек поэтик һөйләмдәр булһалар ҙа, улар ғына әле уҡыусыла хозурлыҡ уята алмайҙар* (Ғ. Хөсәйенов). *Уның бөтә йөҙө бәхетле йылмайыу, бөтә килбәте еңеүҙән килгән ләззәт менән ҡапланған, күҙҙәрен әрелек һөҙгән* (Һ. Дәүләтшина). *Бер тутәрәм икмәк хаҡында ниңә шулай ирәүәнлек менән һөйләргә кәрәште һуң әле был..* («Совет Башҡ.»).

1. **Ҡиң, яҫы, иңле.** Арҡыраһы оҙон булған; тарҙың киреһе. **Ҡиң** йыш ҡулланыла: аралыҡ төшөнсәһен дә белдерә, әйберҙәргә ҡарата ла әйтелә. *Ҡ и ң итәк. Ҡ и ң урам. Ҡ и ң юл. Ҡ и ң йылға.* **Яҫы** күберәк әйбергә ҡарата ҡулланыла. **Иңле** — арҡыры киҫеме оҙон (күберәк туҡыма тураһында). *И ң л е итәк. И ң л е ситса. Беҙ ужымдар елберҙәп ултырған киң баҫыу юлынан барабыҙ* (Ә. Вахитов). *Иң һөйөклө киң ауыл һәм тын ауылды мин генә ташланым; ник ташламайым, башҡа тулғас ҡом ғына* (Ш. Бабич). *Ул яҫы усын Фәйзуллаға һуҙҙы* (Ғ. Ғүмәр). *Магазинда ситса һатыла, үҙе иңле, үҙе биҙәкле* (һөйл. теленән).

— Ҡиңәйтеү, яҫырыу; яҫмыҡ.

2. **Ҡиң, иркен.** Ҙур майҙанға йәйелгән, һыйышлы. **Иркен**— тығыҙ түгел. *И р к е н кейем. И р к е н ҡыр. Ҡилер ерең киң булһын* (мәҡәл). *Шулай уҡ унда колхозсылар өсөн таҡтанан киң, яҡты вагон эшләнеләр* (Б. Бикбай.) *Өй иркен, беҙҙә лә урын етер* (Н. Мусин).

— Ҡиңлек, иркенлек.

1. **Ҡире, тиҫкәре.** Бер йүнәлешкә ҡапма-ҡаршы булған. **Ҡире** киңерәк мәғәнәле. *Ҡ и р е яҡ. Ҡ и р е юл. Ҡ и р е барыу. Ҡ и р е ҡайтыу* һ. б. *Т и ҫ к ә р е барыу. Т и ҫ к ә р е г ә әйләнеү. Т и ҫ к ә р е юл. Урал тупраҡтары кире тарта Таштуғайҙы ташлап ҡайтырға* (халыҡ йырынан). *Таубатыр, ҡобараһы осоп, уҡты бөтөнләй тиҫкәре яҡҡа атып ебәрҙе, ти* (әкиәттән).

2. *күсм.* **Ҡире, тиҫкәре, арҡыры.** Кеше һүҙен тыңламай,

яйға килмәй торған, үҙ һүҙле. **Кире** киңерәк мәғәнәле. *К и р е образ. К и р е сифат. К и р е мөнәсәбәт. Хатта һинең күҙеңә күренерлек кире яҡтары бар. Шулай ҙа ул файҙалы* (С. Агиш). *Ҡаршы кеше уйын боҙор, тиҫкәре кеше йыйын боҙор* (мәҡәл). *Бигерәк тә арҡырыһың инде, һис тыңламайһың* (һөйл. теленән).

Ҡирелек, тиҫкәрелек; кирәләнеү, тиҫкәреләнеү.

**Ҡире ҡағыу, таныу, инкар итеү.** Нимәнелер ҡабул итмәй, баш тартыу. **Кире ҡағыу** *ниҙе* (тәҡдимде, ғәйепте һ. б.). **Таныу** *ниҙән* (әйткән һүҙҙән, эшҡылыҡтан һ. б.). **Инкар итеү** *нимәне* — ныҡ кире ҡағыу. *Шунан, һис кире ҡағыу йәки шик аҫтына ҡуйыу мөмкин түгеллекте аңлатҡан ышаныслы һәм йор тауыш менән һүҙ башланы* (Ғ. Әмири). *Таныпторaһы юҡ, бигерәк тә сусҡасылыҡ менән эш насар ине* («Совет Башҡ.»). *..Енәйәттәре асылған. Һәр икәүһе восстаниеның етәкселәре икәне күрһәтелгән, хатта ҡайһы бер енәйәттәрен үҙҙәре лә инкар итмәйҙәр* (И. Насыри).

1. **Ҡисереү, ярлыҡау, ғәфү итеү.** Бер-берәүҙең ғәйебен язаһыҙ ҡалдырыу, эҙһеҙ үткәреү. **Ҡисереү** киңерәк ҡулланыла. **Ярлыҡау** — күберәк гөнаһты кисереүҙе һорап өндәшкәндә әйтелә. **Ғәфү итеү** — ваҡ-төйәк ғәйепте үткәреп ебәреү, үтенес формаһында ла ҡулланыла. *Ғәфү итегеҙ! Һеҙ инде ҡарт кешене кисерегеҙ, һеҙҙең кеүек изге күңелле ҡыҙға хоҙайым оҙон ғүмер бирһен!* (Ғ. Әмири). *Дошманға халҡым белмәһен кисереү, аяуҙы!* (Б. Бикбай).— *Әстәғфирулла, әстәғфирулла, үҙең ярлыҡа, раббым,— тип шыбырҙап, ҡартын теге донъя утынан ҡотҡарырға ашыҡты әбей* (Һ. Дәүләтшина).— *Зимфира,— тине ул ялбарыулы тауыш менән,— ғәфү ит мине. Зинһар, ғәфү ит. Ҡисер мине, иркәм* (Ғ. Лоҡманов).

2. **Ҡисереү, күреү** *күсм.*, **баштан үткәреү.** Яҙмышҡа төшөү, татып ҡарау (ҡайғы, шатлыҡ, бәхетһеҙлек һ. б.). **Ҡисереү** йышыраҡ ҡулланыла. *Ғүмер булғас, барын кисерәһең — әсеһен дә, бөтмәҫ тәмен дә..* (Б. Бикбай). *Ҡайғыны күп күрҙек, бала-саға күрмәһен инде* (һөйл. теленән). *Мәхмүт ағай һуңғы биш йыл эсендә башҡорт ауылындағы һәр яңылыҡ һәм үҙгәреште үҙ башынан үткәргән* («Совет Башҡ.»).

**Ҡисләү, кисегеү, кисәүләү.** 1) Көн кискә ауышыу, кис етеү. Тиң синонимдар. *Көн кисләне* (И. Насыри). *Уғаса, көн кисегеп, күҙ бәйләнә лә башлағайны* (Ғ. Әмири). *Көн кисәүләне. Ҡыҙыулыҡ һүрелде* (Һ. Дәүләтшина).

2) Ҡискә ҡалыу, һуңлап китеү. *К и с л ә п ҡайтыу. Бесәнселәр йәнә кисәүләне.*

**Көйөнсә, көйгә, көйө(нә), килеш, хәлдә.** Торошто, хәлде, рәүеште белдергәндә ҡулланылған бәйләүестәр. **Көйөнсә** ҡулланылышы киңерәк. *Йәш көйөнсә. Ялан аяҡ к ө й ө н с ә. Тотош к ө й ө н с ә.* Үҙ-ара яҡындар; **хәлдә** бәйләүесе генә һүҙбәйләнештәрҙә айырыла: *ауыр х ә л д ә, ҡайғылы х ә л д ә, насар х ә л д ә. Йырҙың һүҙҙәре аңлашылмаһа ла, Юлия мөйөштә баҫып торған көйө тыңлай башланы* (Һ. Дәүләтшина). *Аҙаҡ, илай-илай хәлдән тайғас, өшөүен дә, асығыуын да һиҙмәй, атын ҡосаҡлаған көйгә, дымлы ерҙә йоҡлап китте* (Б. Бикбай). *Гөлйөҙөм, түңәрәк мейес эргәһендә ултырған килеш, башын сумаҙан өҫтөнә ҡуйып, ойоп киткәндәй булды* (Р. Низамов). *Һин был көндә матур ҡыҙҙар ҡулында, зәңгәр сәскә менән бергә беркетелгән хәлдә, һатыла башлаһың* (М. Ғафури).

**Көлөү, иһаһайлау** *һөйл.*, **ауыҙ йырыу** *һөйл.* Йөҙҙә шатлыҡ билдәһе менән күңелле ауаз сығарыу. **Көлөү** киңерәк

мәғәнәле, төрлө һүҙҙәр менән ҡулланыла. *Шатланып к ө л ө ү. Мәсхәрәле к ө л ө ү. Шарҡылдап к ө л ө ү. Ҡешенән к ө л ө ү* һ. б. **Иһаһайлау** — ҡысҡырып, әҙәпһеҙ итеп көлөү. **Ауыҙ йырыу** — юҡ-бушҡа көлөү йәки мыҫҡыл менән көлөү (хуп күрмәүҙе белдерә). *Ул бүлмә аша: «Бына, тетя Маруся, әләктең»,— тип көлдө* (Һ. Дәүләтшина).— *Ни өсөн минән көләһегеҙ! Һеҙгә кәңәш бирәләр, ә һеҙ ауыҙ йыраһығыҙ* (Н. Мусин). *Ә атаһы уларға: — Ауыҙығыҙҙы йырып көлмәгеҙ төптө юҡҡа, ҡылы булһа, аты үҙе килер! — тип, кинйә улының арҡаһынан ҡаҡты, ти* (әкиәттән).

— Көлкө, көлкөлө, көләмһөрәү.

1. **Көнләшеү, көнләү, ҡыҙғаныу, ҡомалаҡ ҡыштырҙау** *күсм., һөйл.,* **ҡытыҡ килеү** *күсм., һөйл.* Берәй кешенең тоғролоғона шик белдереп асыуланыу (ғәҙәттә ир менән ҡатын, егет менән ҡыҙ мөнәсәбәте тураһында). **Көнләшеү, көнләү** — үҙ-ара яҡын, **ҡыҙғаныу** — көнләшкәнде күрһәтеү. **Ҡомалаҡ ҡыштырҙау, ҡытыҡ килеү** — көнләшә биреп ҡуйыу, эстән көнләшеү. *Ҡыҙҙар менән һөйләшкән сағында Моталлапты әҙерәк көнләштем дә* (Ф. Иҫәнғолов). *Елдәр генә һине һөйә тиеп, елдәр генә үбә, наҙлай тиеп, көнләмәйем һине елдәрҙән* (З. Ғәзизов). *Уйын һүҙҙе лә күтәрә алмай, бисәһен ҡыҙғанып бара.*

— Көнсөл, ҡыҙғаныусан.

2. **Көнләшеү, эс көтөрҙәү** *күсм., һөйл.* Кешенең уңышын, эшен күрә алмау. **Эс көтөрҙәү** — көнсөлөктән көйөнөү. *Тегенең айғырына һоҡланмаған кеше ҡалмаған, ти, бик яман көнләшә башланылар, ти, бынан* (әкиәттән). *Күрше күршеһенән күреп көнләшә* (мәҡәл). *Әйҙә, нисек ҡунаҡ иткәнде ишетеп, эсе көтөрҙәһен бер, кешене намыҫландырһаң, шулай була ул* (Б. Бикбай).

**Көрәшеү, алышыу, билләшеү.** Бер-берене йығырға тырышыу. **Көрәшеү** күберәк ҡулланыла. *Туй башланды, ти, бер заман. Аттар саптырылды, көрәшселәр көрәште, йүгеректәр йүгереште, ти* (әкиәттән). *Көслө менән алышыу ауыр, хәйләнең ҡеүәте ҙурыраҡ* (Ғ. Ибраһимов). *Егеттәр билләшеп алып китте.*

— Көрәшсе.

1. **Көс, хәл, ҡеүәт, ҡөҙрәт, ҡарыу, ғәйрәт, дарман.** Йән эйәләренең эшкә, хәрәкәткә һәләте. **Көс** йыш ҡулланыла. *К ө с йыйыу. К ө с түгеү. К ө с һалыу. К ө с биреү* һ. б. **Хәл** — эш-хәрәкәткә ғәҙәти мөмкинлек. *Х ә л бөтөү. Х ә л йыйыу. Х ә л д ә н килеү.* **Ҡеүәт, ҡарыу** көс менән яҡын. *Ҡ е ү ә т бөтөү. Ҡ а р ы у ҡайтыу.* **Ҡөҙрәт** — күберәк тәңре биргән ҙур көс. **Ғәйрәт** — ташып торған көс. *Ғ ә й р ә т сәсеү. Ғ ә й р ә т күрһәтеү.* **Дарман** — ғәҙәти көс. — *Ни өсөн кешеләр көсө еткәнгә көсөктәй, ни өсөн көсө еткәнде шул тиклем кәһәрләйҙәр?* (М. Басыров). *Ҡулдары ла тыңлап етмәне, йыш-йыш ҡына туҡтап хәл йыйҙы* (Р. Низамов). *Ҡырҙар — минең тәпәй баҫҡан ерҙәр — хыялдарҙан иркен киңлеге! Ниндәй һуң көс, ғәйрәт һулай бында..* (Н. Нәжми). *Ул сит ҡатын әсә булыу мәғәнәһе менән генә Зәйнәпкә баш түгел, бәлки көс, ҡеүәт менән дә баш булды* (М. Ғафури). *Ул яғымдан терәргә, һул яғымдан терәргә бары ла алла ҡөҙрәте* (М. Ғафури).— *Улым, инде ир етеп киләһең. Һөнарға йөрөргә минең ҡарыуым бөттө* (С. Ҡулибай). *Ҡыҙыл ғәскәр ғәйрәтенән ҡан ҡалтырай колчактар* (Һ. Дәүләтшина). *Дәрт бар, дарман юҡ* (мәҡәл). *Байҙыҡы фарман менән, ярлыныҡы дарман менән* (мәҡәл).

— Көсләү, көсәнеү, көсәйеү, көслөк, көсәйткес; ҡеүәтләнеү, ғәйрәтләнеү.

2. **Көс, ғәйрәт, дарман, ҡеүәт.** Кешенең рух һәм аҡыл һә-

ләтлеге. **Көс** актив ҡулланыла. *К ө с биреү. К ө с һалыу. — Ҡуйсәле, Фәхри, шул икеләнеүеңде, күкрәгеңдә көс ташып торған һиндәй ир арыҫланына килешмәй ул,— тине Гәрәй..* (Б. Бикбай). *Түҙемлебеҙ батыр Салауаттай, күкрәк ғәйрәт менән тулғанда* (Ш. Бабич). *Ай эсенән күңелемә дарман булырлыҡ йән ҡарайым* (Ш. Бабич).

3. **Көс, ҡеүәт.** 1) Ниҙең дә булһа эш башҡарыу һәләте, энергияһы (машина, тәбиғәт күренештәре). *Елдең к ө с ө. Йылғаның к ө с ө. Машинаның ҡ е ү ә т е. Электр станцияһының ҡ е ү ә т е. Был Новалихин байҙың яңы һалдырған фабрикаһы торбаһынан сыҡҡан пар көсөнөң тауышы ине* (Т. Хәйбуллин).

2) Материаль йәһәттән күтәрелеш, байлыҡ, ныҡлыҡ. *Уны яңы көс-ҡеүәт йыйып килгән колхоз үҫеше лә аҙ ҡыҙыҡһындыра* («Совет Башҡ.»). *Ил ҡеүәте — игендә* (әйтем).

1. **Көслө, ғәйрәтле, ғәйәр, типһә тимер өҙөрлөк.** Физик көскә эйә булған, көсө бар. **Көслө, ғәйрәтле** киңерәк ҡулланылышлы: бөтә йән эйәләренә ҡарата ла әйтелә. **Ғәйәр** — бик көслө (кешегә ҡарата әйтелә). **Типһә тимер өҙөрлөк** — бик көслө һәм таҙа, ғәйрәте сәсрәп торған (хуп күрмәү төҫмөрө лә бар). *Был хаҡта беҙҙең көслө, ғәйрәтле булған януарҙар нимә әйтерҙәр тағы? — тип һүҙен тамам итә төлкө* (М. Ғафури). *Ҡаһарман кантон ғәйәр ир, штатский оҡшамай, Петербурға үҙе барған штатлыҡҡа ышанмай* (халыҡ йырынан). *Типһә тимер өҙөрлөк, тап-таҙа егет, йәш кенә ҡатынын ташлап, әллә ҡайҙа тик йөрөгәнсе, эшләп бергә-бергә тамаҡ туйҙырып торһа ни була икән инде..* (М. Ғафури).

2. **Көслө, күҙ асҡыһыҙ.** Ныҡ, ҡаты (буран, томан, төтөн һ. б.). **Көслө** киңерәк мәғәнәле. *К ө с л ө дауыл. К ө с л ө буран. Былар тирәк төбөнә килеп туҡтағас, көслө ел-дауыл күтәрелеп китә* (әкиәттән). *Улар ҡайтырға сыҡҡанда, күҙ асҡыһыҙ әсе буран донъяны ҡаплап алғайны* (Һ. Дәүләтшина).

**Көтөүлек, утлау(ыҡ), үреш.** Мал йөрөтә торған ялан. **Көтөүлек** күберәк ҡулланыла. *Таулы райондарҙа урман көтөүлектәре күп* («Совет Башҡ.»). *Йәйрәп ятҡан утлауға өйөр-өйөр йылҡы тулыр* (ҡобайырҙан). *[Ат].. әрем һәм ҡамғаҡ еҫтәре килеп торған үрешкә, ауылдан ситкәрәк, дүмәләс башына һалынған ел тирмәне аръяғындағы типһәнгә ҡарай ыңғайланы* (И. Ҡөҫәпҡол).

**Күҙгәнәк, өлгө.** Тәҙрәнең рам менән бүленгән өлөшө. **Күҙгәнәк** күберәк ҡулланыла. *Ватыҡ к ү ҙ г ә н ә к. Эре к ү ҙ г ә н ә к. К ү ҙ г ә н ә к ҡуйыу. Ҡәкре-бөкрә, эреле-ваҡлы хәрефтәр яҙып, тәҙрәнең өҫкө күҙгәнәгғн сыбарлап бөттөк* (Б. Бикбай). *Асыҡ өлгөнән ҡаршылағы таш келәткә оҙаҡ ҡараны* (Һ. Дәүләтшина).

**Күк, асман** *иҫк.* Ерҙе уратҡан көмбәҙ кеүек һауа һәм аралыҡ. **Күк** киң ҡулланылышлы. *К ү к йөҙө. К ү к к ә осоу. К ү к т ә н төшөү. Сулпан да, күрәһең, еремә йотлоғоп ҡарауҙан туймаған: ашыҡмай байырға, яй ғына асмандан иң аҙаҡ юғала* (Б. Бикбай).

**Күндәм, тыңлаулы, тыңлаусан, итәғәтле, ауан.** Еңел генә ыңғайға килә, әйткәнде тиҙ тыңлай торған. **Күндәм** кешегә лә, хайуандарға ла әйтелә. **Тыңлаулы, тыңлаусан** — ҡушҡанды, әйткәнде үтәргә әүәҫ (күберәк кеше). **Итәғәтле** — буйһоноусан (кеше). **Ауан** — еңел генә тынлай торған. *Ризалығыңды һорап торманым. Сөнки ҡарышмаҫыңды, күндәм кеше булыуыңды беләм бит инде мин һинең* (Н. Мусин). *Ишек төбөндә үк бәйләүһеҙниһеҙ күндәм ат тора ине* (Б. Бикбай). *Ҡыҙыл армеец-*

*тарға тыңлаусан һәм тәртип һаҡлаусан булырға өйрәткәндә лә, ниндәйҙер сәнскеле сыбыҡ йөрәк итен тырнап торҙо* (И. Насыри). *Тыңлаулы балаға оҡшай ул. Уларҙың бөтәһен дә тәрбиәләргә, итәғәтле булырға өйрәтергә, яңылыш юлға кереп китеүҙәренән һаҡларға тейеш* (Ғ. Әмири).— *Был эштә инде, Фатима, мин ауан кеше, ул яғын үҙең ҡарарһың* (Б. Бикбай).

**Күнеү, ризалашыу, риза булыу.** Ыңғай мөнәсәбәт белдереү, ризалыҡ биреү. **Күнеү** *нимәгә* өгөтләүҙән һуң ризалашыу төҫмөрөн бирә. **Ризалашыу, риза булыу** *нимәгә, нимә менән* — килешеү, уртаҡ фекергә килеү. *Хәл юҡ, беҙгә быға күнергә тура килде* (Ғ. Ғүмәр). *Мин күнәм бөтәһенә: яҡшыға, яманына, көндәрҙең салт аяҙына һәм болотло сағына* (М. Кәрим). *«Эйе, беҙҙең район»,— тип ризалашам, әлбиттә* (Ә. Бикчәнтәев). *Алты батыр шунда барырға риза булғандар* (әкиәттән).

**Күп, бөткөһөҙ, һанһыҙ, быуа быуырлыҡ, һанап бөткөһөҙ, итәк тулы** *күсм., һөйл.,* **бөтмәҫ-төкәнмәҫ, иҫәпһеҙ-хисапһыҙ, тауыҡ сүпләһә лә бөтөрлөк түгел** *һөйл.* Иҫәбе-һаны яғынан ҙур; аҙҙың киреһе. **Күп** киң мәғәнәле: һанала торған нәмәләр, абстракт төшөнсәле һүҙҙәр менән ҡулланыла. *Бик күп. Күп тапҡыр. Күп уй. Күп алыу. Күп йөрөү.* һ. б. **Бөткөһөҙ, бөтмәҫ-төкәнмәҫ** — бик күп. *Бөткөһөҙ бәхет. Бөтмәҫ-төкәнмәҫ шатлыҡ.* **Быуа быуырлыҡ** — бик күп (кеше һанына ҡарата әйтелә). **Итәк тулы** — бик күп (ғәҙәттә ғаиләләге бала-саға тураһында). **Тауыҡ сүпләһә лә бөтөрлөк түгел** (эш-шөғөл тураһында). *Фермаға эшкә килгәндең тәүге көндәрендә Гөлсара Бикбаева күп ваҡыт артҡа ҡалды* («Совет Башҡ.»). *Колхоз булғас, күп булырға тейеш. Ингәндә бит беҙҙе барыһы ла мул буласаҡ тип индерҙеләр* (И. Насыри). *Ҡеше тыуған ҡалаһында ..киләсәктә үргә табан йәнә һикерештәр яһар өсөн үҙе һалған йорттарҙан тағы ла бөткөһөҙ илһам ала* («Совет Башҡ.»). [*Ишбулды:*] — *Ирҙәр етмәһә, беҙҙә бисәләр быуа быуырлыҡ,— тине* (Ғ. Әмири). *Ғилаждың тәүге ҡатынынан балалары итәк тулы булды* (Ж. Ҡейекбаев). *Байҙың хужалығында эш тауыҡ сүпләһә лә бөтөрлөк түгел* (Я. Хамматов).

1. **Күпме, ҡанса нисә(ү).** Иҫәбе, миҡдары ниндәй һанда (һорау алмаштары). **Күпме** дөйөм күләмде, һанды билдәләгәндә әйтелә. **Ҡанса** берәмләп һанағанды билдәләгәндә әйтелә. **Нисә(ү)** конкрет һанды белергә теләгәндә ҡулланыла. *Әй ағаскай, йәшең күпме, түгелгән емешең күпме, минеңдәй һағышың күпме? — тип һорайым ағастарҙан* (эпостан). *Ике батыр ғәжәпһенеп ҡарап торҙо, ашығып бәйге атындай ярһып торҙо. Алыҫты яҡын итер күҙе менән ҡанса әҙәм бар икәнен һанап торҙо* («Бабсаҡ менән Күсәк»). *Күрәгәһе йәмле, ҡымыҙы тәмле, нисәү икән һауған бейәһе? Теләһә нисәү булһын бейәһе, иҫән булһын һауған эйәһе* (халыҡ йырынан).

— Күпмелек, күпменән; ҡансанан, нисәүлек.

2. **Күпме, нисә, нисәмә.** Һаны, күләме бик күп (рәүеш мәғәнәһендә). Бер-береһен алыштыра алалар. **Күпме** дөйөмөрәк мәғәнәле. *Шәриғәт, әй, тире кеүек икән: күпме тартһаң да һуҙыла* (әйтем). *Күпме йылдар инде һине йөрөтәмен йөрәгемдә* (М. Кәрим). *Был йәш батша күрше батшаның ҡыҙына әллә нисә тапҡыр яусы ебәреп ҡараһа ла, ҡыҙ риза булмағайны, ти* (әкиәттән). *Йәй буйына нисәмә малай тотоп эшләттеләр* (Ғ. Дәүләтшин). *Уның менән (нисәмә йыл)*

*атай сапҡан, һаптарына ҡулдарының тире ҡатҡан* (Н. Нәжми).

**Күпте күргән, донъяның әсеһен-сөсөһөн татыған, ут-һыу кискән (үткән.)** Ҡайғыны ла, шатлыҡты ла башынан күп үткәргән, тормош тәжрибәһе ҙур булған (кеше). **Күпте күргән** киң ҡулланылышлы: кешегә лә, тәбиғәт күренештәренә лә әйтелә. **Ут-һыу кискән** — ҙур һынауҙар үткән. Һуңғы икәүһе кешегә ҡарата ғына әйтелә. *Һай, Уралтау, Уралтау — күпте күргән Уралтау* (ҡобайырҙан). *Ишек асыусы Фәррәх ағай күпте күргән, донъяның әсеһен-сөсөһөн татыған, бөтә Рәсәйҙе, Ҡытайҙы арҡырыға-буйға үлсәп бөткән* (И. Насыри). *Полк командиры өлкән генә икән, ут-һыу кискән кешегә оҡшап тора* (һөйл. теленән).

**Күренеү, күҙгә салыныу, күҙгә ташланыу. Күренеү** киңерәк мәғәнәле. **Күҙгә салыныу** — күренеп ҡалыу. **Күҙгә ташланыу** — ап-асыҡ булып күренеп, күҙгә бәрелеп тороу. *Һарыҡтың йығылғаны ла күренмәй, дөйәнең һөрөнгәне лә күренә* (әйтем). *Алыҫта ғына ай күренгән Юшатырҡай башы Аҡбейек* (халыҡ йырынан). *Хәҙер инде күп кенә баҫыуҙарҙа мәктәп дәфтәрендәге һымаҡ йәпйәшел тигеҙ шаҡмаҡтар күҙгә салынып ҡала* («Совет Башҡ.»). *Ошо ижади көрәштең формалары көндән-көн арта һәм төрләнә, коммунизм һыҙаттары торған һайын нығыраҡ күҙгә ташлана* («Совет Башҡ.»).

**Күреүсе, күҙәтсе, тамашасы, шаһит.** Күреп, ҡарап торған кеше. **Күреүсе** дөйөмөрәк ҡулланылышлы. **Күҙәтсе** — берәй маҡсат менән ҡарап тороусы. **Тамашасы** — тамаша ҡараған кеше (театр, кино һ. б.). **Шаһит** — ирекһеҙҙән ҡарарға, күрергә мәжбүр булған кеше. *Шунан ҡара айғыр сабып, Ағиҙел буйҙарына барып сыҡҡан да күҙҙән юғалған. Уның тураһында ишетеүсе лә, күреүсе лә булмаған* (әкиәттән). *Күҙәтсе бәйләүәнебеҙ китә икән тип, күҙҙәренән бөртөк йәштәр ҡойолдо, ти. Күҙәтселәр хәбәр бирҙе: «Саң күрҙек, тип, саң эсендә бер талай йән күрҙек, тип»* («Бабсаҡ менән Күсәк»).. *Уның [Хәсәндең] күп кенә башҡа бейеүҙәрен дә тамашасылар яратып ҡарай* («Совет Башҡ.»). *Тимеркәй, быларҙың барыһына ла шаһит булып, ауыҙына бармағын тығып, ситтән генә ҡарап торҙо* (Д. Юлтый).

**Күрәҙә, бағымсы.** Күрәҙәлек иткән кеше. **Бағымсы (бағыусы)** һирәгерәк ҡулланыла, «имтом менән булыусы» төҫмөрөн дә бирә. *Йыбанмаған оҫта булыр, оялмаған күрәҙә булыр* (мәҡәл). *Бағымсыға барма, башыңа ҡайғы алма* (мәҡәл). *Бер йыл үткән. Әбей менән бабай, теге күкәйҙе тотоп, йәнә бағыусыға барғандар* (әкиәттән).

**Күрәләтә, күрә-бағ.** Ҡарап тороп, күрә тора (ниҙер эшләү). **Күрәләтә** йышыраҡ ҡулланыла. *Кемдең күрәләтә насар пьеса яҙғыһы килһен?!* (Н. Нәжми). *Күрә-бағ быҫраҡҡа төшөп баттың* (Һ. Дәүләтшина).

**Күрә алмау, ене һөймәү** *һөйл.* Кемделер ныҡ яратмау, насар мөнәсәбәттә булыу. **Ене һөймәү** — һөйһөнмәү, сит күреү. *Ферманың өлкән мал ҡараусыһы Байназар Ҡылысбаевты һис күрә алмай Фәхри* (Б. Бикбай). *Йәшереп тороп булмай инде, йәмшек танаулы ҡыҙҙарҙы енем һөймәй, ә бына Нимфочканың танауы кеүек ҡылыс танауҙар һирәк осрай..* (Ә. Бикчәнтәев).

1. **Күтәрелеү, ҡалҡыу, тороу.** Аяҡҡа баҫыу (ятҡан, ултырған ерҙән). **Күтәрелеү** «күмәкләп бер юлы ҡуҙғалыу» төҫмөрөн дә белдерә. *1942 йылдың 9 июлендә атакаға күтәрелдек* («Совет Башҡ.»). *Күтәрелде рота ишетеп, «Ватан өсөн!» тигән тауышты* (Н. Нәжми). *Үмәр ҡарт менән Садрый ҡарт та урындарынан ҡалҡтылар* (Һ. Дәү-

лəтшина). *Егет атылып торҙо һəм, айғыр абайлап өлгөргəнсе элмəкләнгəн нескə ҡыл арҡанды уның башына сөйҙө* (Ғ. Əмири).

2. **Күтəрелеү, ҡалҡыу.** Ҡилеп сығыу, күренеү (тəбиғəт күренештəре). *Ҡояш к у т ə р е л е ү. Ай ҡ а л ҡ ы у. Болот ҡ а л ҡ ы у. Улар артынан, көндөҙгө кеүек, тағы ла саң томаны күтəрелде, ай яҡтыһын тонофайтты* (Һ. Дəүлəтшина). *Əкиəттəге алтын табаҡ — ай тауҙан ҡалҡып килə яртылаш* (Б. Бикбай).

**Ҡəкре, бөкрө, көмрө.** Тура булмаған, бөгөлгəн йəки борош. **Ҡəкре** киң ҡулланылышлы: төҙ булмаған һəр нəмəгə əйтелə. *Ҡ ə к р е аяҡ. Ҡ ə к р е таяҡ. Ҡ ə к р е һыҙыҡ. Ҡ ə к р е урам. Ҡ ə к р е-б ө к р ө* һ. б. **Бөкрө** күберəк кешенең кəүҙəһенə ҡарата əйтелə. **Көмрө** — дуға кеүек булып торған. *К ө м р ө күпер. К ө м р ө кеше. Ҡəкре ҡайында ҡар тормаç, алама кешелə һүҙ тормаç* (мəҡəл). *Үҙенекен итте көмрө Ҡолмəт — һуйылаһы мал һуйылды* (Т. Йəнəби). *Оҙон буйлы көмрө арҡалы бер кеше, ҡойма башына тотоноп тартылды ла, ишек алдына күҙ һалғас, ҡысҡырып ебəрҙе..* (Х. Мохтар).

— Ҡəкрəйеү, кəкерсəк; бөкрəйеү, көмрəйеү.

**Кəм, ҡайтыш.** Билдəле бер кимəлдəн, сифаттан түбəн; артыҡтың киреһе. **Кəм** киңерəк ҡулланылышлы. *Мин башҡаларҙан кəм дə, артыҡ та булырға яратмайым* (С. Агиш). *Улар Аҡһаҡ Тимер барластарынан һис тə ҡайтыш түгелдəр* (Ə. Хəкимов).

— Кəмселек, ҡайтышлыҡ.

**Кəмеү, аҙайыу, бүҫкəреү.** Күлəм, һан йəһəтенəн кесерəйеү; артыуҙың киреһе. **Кəмеү, аҙайыу** үҙ-ара яҡын, абстракт төшөнсəлəргə ҡарата ла əйтелəлəр. *Бəхет к ə м е ү. Дəрт а ҙ а й ы у. Дан к ə м е ү. Көс а ҙ а й ы у. Ваҡыт к ə м е ү.* һ. б. **Бүҫкəреү** — күлəме аҙайыу (күберəк һауыттағы нəмəгə ҡарата əйтелə). *Һөт б ү ҫ к ə р г ə н. Малдар йылдан-йыл кəмей.* (Б. Бикбай). *Лəкин уға [мышарға] яҡтылыҡ һəм йылылыҡ күберəк кəрəк. Күлəгəле ерҙəрҙə уның урожайы аҙая* («Совет Башҡ.»). *Ярға ҡаҙып ултыртылған ҡаҙандағы аш тиҙ бүҫкəрə* (Ш. Янбаев). *Аллаяр һарайындағы аттарҙың яртыһы самаһы яңыра ла ҡуя. Артмай ҙа, кəмемəй ҙə, тик яңыра ғына* (Ф. Исəнғолов).

— Кəмлек, аҙлыҡ, аҙсылыҡ.

**Кəмһетеү, түбəнһетеү.** Кешене кəм һанап, көлөү, мыҫҡыл итеү. *Һине ашаған кешелəргə: «Улар арыш ҡына ашап торалар»,— тип, түбəн күҙ менəн ҡаранылар, һине кəмһеттелəр* (М. Ғафури). *Асыуы эсенə һыймаған Байморат (ул үҙен аҙ ғына түбəнһетеүгə лə түҙмəй торған бик ғəрсел, үтə үҙ һүҙле егет ине), саҡ ҡына уйлап торҙо ла бер һикереүҙə уның эргəһендə булды* (Н. Мусин).

**Кəртəлəү, ҡамау.** 1) Урынерҙе ҡойма һ. б. нəмə менəн уратып алыу, ихаталау. **Кəртəлəү** йышыраҡ ҡулланыла. *Һəр йорттоң алды йə ҡара талдан үрелгəн ситəн, йə таҡта менəн кəртəлəп алынған* (М. Тажи). *[Булат:] — Теге һеҙ ултыртҡан ҡайындарҙы, яҙ булғас та, кəртəлəп ҡуям..* (Ҡ. Кинйəбулатова). *Ишек алдын быйыл ғына ҡаманыҡ* (һөйл. теленəн).

2) *күсм.* Эш-хəрəкəткə тотҡарлыҡ яһау, кəртə булыу. *Алдыңда көтмəгəндə генə ҡая таш үҫеп сыға ла һинең барыр юлыңды кəртəлəй* (Н. Мусин). *Халыҡ тамам ҡыҙыша башлап, ишекте ҡамап торған урядник, стражниктарҙы этеклəп, правление эсенə инə башланы* (Т. Хəйбуллин).

**Кəүҙə, буй, һын, буй-һын.** Тəндең торош формаһы. **Кəүҙə** киңерəк ҡулланылышлы: тəндең дөйөм күренеше. *Еңел*

*к ә ү ҙ ә. Ауыр к ә ү ҙ ә. Ныҡлы к ә ү ҙ ә. Тулы к ә ү ҙ ә.* **Буй** кәүҙәнең оҙонлоғона баҫым яһай. *Б у й ғ а үҫеү. Зифа б у й. Ҡыҫҡа б у й.* **Һын** һирәгерәк ҡулланыла. **Буй-һын** дөйөм мәғәнәле: килеш-килбәт, кәүҙә. *Унда ике кеше ултыра: береһе ҡолғалай нәҙек оҙон буйлы, ас яңаҡлы, ә икенсеһе тәпәш кенә кәүҙәле тыңҡыш әҙәм* («Совет Башҡ.»). *Буй тиһәң, буйы юҡ. Ылаҡ һымаҡ саҡ ерҙән ҡалҡҡан* (И. Насыри). *Ботағы алтын алҡалай, япрағы көмөш тәңкәләй, һыны һылыу егеттәй, тамыры ташҡа ереккән ҡарағай, имән, ҡайыны — бары ла һөйгән Уралтау* (ҡобайырҙан). *Уның бар һыны шишмәгә табан ынтылып, көсөргәнешле бер хәрәкәттә ҡатып ҡалды* (Ә. Вахитов). *Айбулат ағайым һымаҡ, буйыһыны булһа икән, исмаһам* (Һ.Дәүләтшина).

# Ҡ

1. **Ҡабарыу, күбеү, күбенеү, күпереү, күпсеү.** Ҡайнап, әсеп күтәрелеү. **Ҡабарыу** күберәк ҡулланыла. *Ҡамыр ҡ а б а р ы у. Бал ҡ а б а р ы у. Ҡатыҡ к ү п с е ү. Һөт ҡ а б а р ы у. Ҡеүәҫ к ү п е р е ү. Күбеп, ҡабарып бешкән бауырһаҡтар ашъяулыҡтың ситтәренә уратып һибелгән* (Т. Хәйбуллин). *Матур ғына, ыҡсым ғына аҡ мендәрҙәр ҡорһаҡтары күпсеп яталар* (Ғ. Дәүләтшин). *Сәғиҙә уны [Ғималетдинды] ҡолас ташлаған һайын бер уңға, бер һулға күпсеп бүлтәйгән зәңгәр күлдәгенән таныны* (Ш. Янбаев).

— Ҡабарынҡы, күбек, күперек, күпкәк.

2. **Ҡабарыу, күбеү, шешенеү.** Тотош тән йәки уның берәй урыны ниҙәндер тәьҫиренән ҡалҡып сығыу. **Ҡабарыу** (бешеү, өйкәлеүҙән һ. б.). *Аяҡ ҡ а б а р ы у.* **Күбеү** (һыуыҙан). *Маңлай к ү б е ү.* **Шешенеү** (ауырыуҙан һ. б.).— *Атлап булмай, бармаҡтарым ҡабарған,— ти. Рюкзагым да артҡа һөйрәй, ҡаҙалған, ти* (Т. Арслан). [*Шахтала*] *Ике араны бер нисә рәт әйләнгәнсе, минең баш бер нисә ерҙән күбеп сыҡты* (М. Ғафури).

3. **Ҡабарыу, күбенеү, шешекеү, бүртеү.** Һыу һеңеп киңәйеү. *Һыуҙан сыҡҡас сыланып һәм күбенеп, китте ҡайыш йомшарып һәм һуҙылып* (М. Өмөтбаев). *Ботинкалар күбенгән килеш таң атҡансы шунда ята бирәләр* (Б. Бикбай). *Ҡабыҡты һыуға һалып шешендергән дә унан һалабаш һуйған, шунан оҙон итеп арҡан ишергә тотонған* (әкиәттән). *Тәҙрә төбөндә ятҡан борсаҡ, дым тартып бүртеп киткән.*

4. **Ҡабарыу, кәпәйеү** *һөйл.*, **өрөлөү** *һөйл.* Артыҡ һимереп, йыуанайып китеү. Барыһы ла күсмә мәғәнәлә ҡулланыла. **Кәпәйеү** — тупайып алға сығып тороу (ҡорһаҡ тураһында), яманлап әйтелә. **Өрөлөү** — йомро булып йыуанайыу. *Ни өсөн бирәүҙәр ҡорһаҡ кирәләр, ҡабаралар?* (Ғ. Туҡай). *Тултырған тауыҡ кеүек өрөлөп киткән бынау Шәүәли, танырлыҡ та түгел.*

1. **Ҡағыу, ситләтеү, ҡыйырһытыу, үгәйһетеү, ятһытыу, тибеү** *күсм.*, **ситкә тибеү (тибәреү).** Сит күреп рәнйетеү, ҡыҫырыҡлау. **Ҡағыу** күберәк ҡулланыла. **Ҡыйырһытыу, ситләтеү** — үҙ күрмәй йәбер итеү. *Илем ҡаға, ер ерәнә минән, хатта бер туғаным Аҡмырҙа ла аҡтыҡ һулышымда миңә килмәй!* (Б.Бикбай).— *Ситләтмәйем, өйрәтәм, ә ул мине, атаһы әйткәнде тыңламай,— тип дауам итә ҡарт* (Н. Мусин). *Бер көндө Алпамыша атаһына әйтә: — ..Миңә дуҫтар*

*кәрәк, юкһа минең бер үҙемде ситләтерҙәр* («Алпамыша»). *Николай уларҙы ҡағыу түгел, минән дә ҡыйырһыттырмай, үҙ балалары кеүек күреп, уҡыуҙары менән ҡыҙыҡһынып бара* («Совет Башҡ.»). *Быға тиклем малайҙар ҡушаматымды әйтеп үсекләүҙән тыш мине ерле юкҡа ҡыйырһытманы* (М. Кәрим). *Ас көндәрҙә, беҙҙе үгәйһетмәй, ярҙам итте ҡулдан килгәнсә* (Д. Юлтый). *Ҡотоу типкән мал булһа, уны сайҙа бүре алыр* (ҡобайырҙан). *Ятһытып ҡаҡһаң да ситкә, мин киләм, мин үҙһенәм* (Д. Юлтый). *Һуңғы ваҡыттарҙа ул үҙенең йәшлек дуҫы хаҡында бик ныҡ уйлана башланы, теге ваҡытта уны ситкә тибеүенә үкенә бирәп тә ҡуйҙы* («Совет Башҡ.»).

2. **Ҡағыу, шаҡыу, шаҡылдатыу.** Ҡат-ҡат еңелсә һуғыу, бәрелеү (тәҙрәгә, ишеккә һ. б.). *Аҡлан буйлап һалҡын ел йүгерә, тәҙрә ҡаға ямғыр бөртөгө* (М. Ишбулатов). *Әҙәпле кеше ишек шаҡып инә.*

**Ҡаҙыу, соҡоу.** Ерҙе йәки башҡа нәмәне актарып сығарып, соҡор яһау. **Ҡаҙыу** киңерәк ҡулланылышлы. *Мөгәрәп ҡ а ҙ ы у. Окоп ҡ а ҙ ы у* һ. б. **Соҡоу** — бәләкәй генә итеп өңөү (күберәк ҡаты нәмәләрҙе). *Белем алыу — энә менән ҡоҙоҡ ҡаҙыу* (мәҡәл). *Ер ҡаҙыным — йорттар нигеҙе өсөн, йөрәк менән көрәк бер булды* (Р. Әхтәров). *Уға уҡытыусының исеме, фамилияһы һәм тыуыуүлеү йылдары соҡоп яҙылған* (Ғ. Әмири).

— Ҡаҙынды, ҡаҙылдыҡ, ҡаҙылма.

1. **Ҡайғы, хәсрәт, көйөк, көйөнөс, ҡайғы-хәсрәт, аһ-зар, ғәм.** Ауыр кисереш, рухи ғазап; шатлыҡтың киреһе. **Ҡайғы, хәсрәт** — тиң синонимдар. *Ҙур ҡ а й ғ ы. Тәрән ҡ а й ғ ы. Ауыр х ә с р ә т. Ҡ а й ғ ы килеү. Х ә с р ә т төшөү* һ. б. **Көйөк, көйөнөс** — ҙур булмаған ҡайғы. *Йән к ө й ө г ө. К ө й ө н ө с булыу.* **Аһзар** — бик ауыр рухи ғазап, оло ҡайғы. **Ғәм** һирәгерәк ҡулланыла. *Халҡымдың ҡаны йылғалап аҡты, бөтә ғүмерҙе ҡайғы оҙатты* (М. Хәй). *Ҡайғы менән шатлыҡ ҡауышҡанға, ғазап аша тыуа шиғырҙар* (М. Кәрим). *Быға тиклем хәсрәт менән түгелгән әсе күҙ йәштәре әҙенән шатлыҡ менән тәгәрәп йәш тамсылары ялтырай* (Һ. Дәүләтшина). *Был донъя яңғыҙ үгәй балаларҙы ғына хәсрәт һәм ҡайғыға ҡалдырмай, бәлки уларға төрлө яҙалар күрһәтеүсе Латифаларға ла ҡайғы-хәсрәт күрһәтеп ала* (М. Ғафури). *Буранбай ҙа китте, иле ҡалды, илкәйенә булды ҙур көйөк* (халыҡ йырынан). *Эшләй белеп эшләгәнгә иген эше кинәнес, эшләй белмәй эшләгәнгә иген эше көйөнөс* (мәҡәл). *Бер кеше башҡалар ҡулында еңелеп ҡалһа, һәр ваҡыт иҙелеп, көндәрен аһ-зар менән уҙғарырға тура килә* (М. Ғафури). *Моңланып күҙҙәр бөгөн күңелемдәге ғәмде уҡый* (Ш. Бабич).

— Ҡайғылы, хәсрәтле, көйөклө,көйөнөслө, аһ-зарлы, ғәмле.

2. **Ҡайғы, хәсрәт, ғәм.** Ниҙәлер башҡарыу мәшәҡәте, хәсрәте. *Ҡеше ҡайғыһы төштән һуң* (мәҡәл).

**Ҡайғырыу, хәсрәтләнеү, бошоу, бошоноу, әсенеү, көйөү** *күсм.*, **көйөнөү, көйәләнеү, бөтөрөнөү, яныу** *күсм.*, **өҙгөләнеү** *күсм.*, **күңел һыҙлау, эс бошоу, йән әсеү, йән көйөү, йөрәк өҙөлөү (өҙгөләнеү), эс-бауыр (бәгер) өҙгөләнеү, ут йотоу.** Ҡайғы-хәсрәт кисереү. **Ҡайғырыу, хәсрәтләнеү** актив ҡулланыла. **Бошоу, бошоноу** — бер аҙ ҡайғырыу. **Әсенеү** — нимәгәлер үкенес белдереп көйөү. **Бөтөрөнөү, өҙгөләнеү** — нык ҡайғырыу, артыҡ ғазапланыу. **Яныу, көйөү, көйөнөү** — тәрән ҡайғы кисереү. **Көйәләнеү** — тиҙ генә янып-көйөп барыу. **Йән әсеү** — үкенес менән көйөү. **Ут йотоу** —

бик ныҡ ҡайғырыу. *Шатлыҡтарым юҡта — мин шатландым, ҡайғыларым юҡта — ҡайғырҙым* (Н. Нәжми). *Ҡайғырмайыҡ, дуҫтар, юҡ мал өсөн, баш һау булһа, малдар табыла* (халыҡ йырынан). *Ҡул дә юҡ, ҡош-ҡорт та юҡ, тик иптәшем хәсрәтләнә, күктә өйрәктәр күренгәс, хәлләнә дуҫ, рәтләнә* (Ш. Бабич). *Әгәр алдай икән тормош, асыуланма, бошма һин, ҡайғылы көн менән килеш, шат көн килер, ышан һин* (Б. Бикбай). *Айбулаттың ҡайтырға әҙерләнеүен күргәс, ул [Маруся] тағы ла нығыраҡ бошондо* (Һ. Дәүләтшина). *Ҡараҡоломбәт быға әсенә, йөрәге яна* («Бабсаҡ менән Күсәк»). *Сараның әсәһе үлеүгә лә, йорт яныып китеүгә лә бер аҙ көйҙөк тә туҡтаныҡ* (И. Насыри). *Яҙалар хат, тынғыһыҙлыҡ һаҡлап көйәһең тип, минең турымда..* (Б. Бикбай).— *Юҡ, әсәй, һис бер һүҙем юҡ. Ниңә инде улай бөтөрөнәһең?* (Ф. Исәнғолов). *Ул яна, тын ҡайғырып янмай, яна шатлыҡ менән, ул яна был донъяны күрмәк булып аҡлыҡ менән* (Ш. Бабич). *Фәйрүзә нишләй икән һуң инде. Бисараң өҙгөләнә торғандыр бит?..* (И. Насыри).— *Харап иткәнһең бит колхоз нәмәһен,— тине Мәғрифә әбей, көйәләнеп.— Бына үҙеңә һүҙ-маҙар тейеп торһа, ни эшләрһең?* (Б. Бикбай). *Остолар моңдар һауаға, йырлашып ҡаҙҙар менән, мин тороп ҡалдым көйөп, әрнеп, күңел һыҙлау менән* (Ш. Бабич). *Ғимай, килеп етмәҫ борон бәрелешеүенә эсе бошоп, үҙен-үҙе сәйнәргә етешеп, урам буйлап китеп бара ине* (И. Насыри). *Йөрәгем һурылып бара. Күҙем күрмәһә, әллә, бәлки, улай булмаҫ та ине. Күҙ күргәс, йән әсей бит* (Ғ. Дәүләтшин). *Француз күлдәк теккәнһең, итәге ергә тейһен, тип. Мин саҡырҙым, һин килмәнең, ахыры, йәне көйһөн, тип* (халыҡ йырынан). *Ағиҙелкәй һыуын ай буйлатып, ҡыр ҡаҙҙары оса теҙелеп. Егет кенә йыры тәсбих түгел, егет йырлай йөрәге өҙөлөп* (халыҡ йырынан). *Янып-көйөп, бәгерем өҙгөләнеп, ләғнәт уҡыйым, кемгә — белмәйем..* (Ш. Бабич). *Ғәрлегемдән тешемде ҡыҫтым. Ут йоттом — төтөнөн тышҡа сығарманым, Мәстүрәкәйем!* (Ф. Исәнғолов).

**Ҡайғыртыу, хәстәр(лек) күреү.** 1) *Кем тураһында? Кемдә?* Бер-берәүгә иғтибар күрһәтеү, ярҙам итеү. *Улы әсәһен ныҡ ҡ а й ғ ы р т а. Миңә тимәгәйе аяғы өҙөлөп ятһын, уны ҡайғырта торған бер кем дә буласаҡ түгел* (Т. Хәйбуллин). *Уны кейендерә, уға түләй. Уның тураһында хәстәр күрә* (Д. Юлтый).

2) *Нимә тураһында?* Ниҙер хәстәрләргә, булдырырға тырышыу. *Киләсәк тураһында ҡ а й ғ ы р т ы у. Юл х ә с т ә р е н к ү р е ү. Ризыҡ тураһында х ә с т ә р л е к к ү р е ү. [Аксаковтың] Халыҡ менән аралашып, ниндәйҙер хәстәрлек күрергә маташыуын [Неплюев] үҙенә һабаҡ итеп тә алған төҫлө* (Ғ. Ибраһимов).

**Ҡайырыу, шаҡарыу.** 1) Көс менән бороу (ҡул, аяҡ һ. б. ағзаларҙы). *Күҙҙәрен ҡан баҫҡан аҡтар, егеттең ҡулын артҡа ҡайырып, тирәккә ҡуша бәйләне* («Совет Башҡ.»). *Михаилға бер юлы ике һалдат килеп йәбеште. Ҡулын шаҡарҙылар* (Я. Хамматов).

2) *Күсм.* Үҙ мәнфәғәтеңде генә ҡарау, үҙ файҙаңа тартыу. *Ә еңел кәсеп яратыусылар, мылтыҡ шартлатмай-нитмәй генә, ошо саҡта ҡышлыҡ ит әҙерләп ҡалыу яғын ҡайыра* (Н. Мусин). *Был кеше гел үҙ яғын ғына шаҡара, бик хәйләле күренә.*

**Ҡаҡ, таҡыр, яланғас, шәрә.** 1) Үҫемлек ҡапламаған (ер өҫтө). **Ҡаҡ** — бер нәмә лә үҫмәгән. *Ҡ а ҡ түбә. Ҡ а ҡ дала.* **Таҡыр** — үләне тапалып, кибеп шымарған, яланғасланған.

*Т а ҡ ы р юл. Т а ҡ ы р ялан.* **Яланғас, шәрә** — буш, тап-таҡыр. *Юламан ҡарт, күҙҙәрен сырт йомоп, ҡаҡ тау башындағы сал ҡылған шикелле, бәүелеп ултырҙы* (З. Биишева). *«Ҡашҡа тау»ҙың (йәғни үлән үҫмәгән) өҫтө, Заятүләктең аты кимереп торғанға күрә, һаман үлән үҫмәйенсә, таҡыр, яланғас булып яталыр, тиҙәр* (М. Ғафури). *Бөркөт ултырған яланғас ҡая аҫтында, тау итәгендә, ҙур түңәрәк күл ялтырап ята* (Ф. Әсәнов). *Тәнҡә ҡарҙар шәрә ерҙе биләп ҡуйҙы мамыҡ юрғанға* (М. Ишбулатов).

2) Әйбер йәйелмәгән, ҡапланмаған, асыҡ (урын). **Ҡаҡ, таҡыр** — бер ни түшәлмәгән, ҡаты (урын). *К а ҡ иҙән. Т а ҡ ы р урындыҡ.* **Яланғас, шәрә** — кейемһеҙ (тән). *Ш ы р я л а н ғ а с. Ш ә р ә килеш. Ш ә р ә йөрөү* һ. б. *Улар күптән ҡаҡ һикелә ятып өйрәнгәнгә күрә, улар өсөн ятыу бер ҙә ауыр түгел ине* (М. Ғафури). *Бәс, сапан, таж, сәлләһен һалдырҙылар, меҫкенемде шәп-шәрә ҡалдырҙылар* (Ш. Бабич). ..*Икенсе офицер тыума шыр яланғас, аяҡтарын диван аҫтына тыҡҡан көйөнсә, танауын сыйылдатып һыҙғырып ята* (А. Таһиров).

3) Төк-сәс үҫмәгән йә ҡойолоп бөткән (баш). *Ҡ а ҡ баш. Т а ҡ ы р баш. Я л а н ғ а с баш.*

**Ҡалтырау, дерелдәү, тетрәү.** Өшөүҙән, ҡурҡыуҙан һ. б. дер-дер килеү. **Ҡалтырау** киңерәк ҡулланылышлы. *Ҡул ҡ а л т ы р а у. Тән ҡ а л т ы р а у.* **Дерелдәү** — дер-дер килеү (күберәк өшөүҙән). **Тетрәү** — ныҡ ҡалтырау, көслө тулҡынланыу. *Эфисәрҙәр ҡысҡырғанда, көллө тәнем ҡалтырай* (халыҡ йырынан). *Ҡупшы өшөмәҫ, ҡалтырар* (мәҡәл). *Борон нәсәлниктәр килерҙәр ине. Дерелдәп торор инек* (Н. Ҡәрип). *Николай батша арҡаһында китте беҙҙең был баштар. Ҡараҡаршы атышҡанда, тетрәйҙәр тау-таштар* (бәйеттән). *Мин үҙем, өҫтөмә аллы-артлы танкылар килгәндә, бөтә йөрәгем менән тетрәнем, сөнки ҡурҡыныс үтә дәһшәтле ине* (Ғ. Әмири).

— Ҡалтыраныу, ҡалтырауыҡлы, ҡалтыраныулы; тетрәнеү, тетрәнеүле, тетрәткес.

**Ҡамасау, оронсоҡ** *иҫк.* Эшкә, тормошҡа ҡыйынлыҡ килтереп торған, артыҡ мәшәҡәт тыуҙырған хәл. *Башҡорт мәркәзе яңы ғына күскәнлектән, ойоштороу эшендә күп кенә ҡамасауҙар бар ине* (Д. Юлтый). *Оронсоҡ яһайһың да йөрөйһөң инде һин.*

**Ҡамасаулау, оронсоҡлау** *иҫк.*, **тотҡарлау, арҡыры тороу (төшөү), аяҡ салыу, тәгәрмәскә тая̌ҡ тығыу** *һөйл., күсм.* Эшхәлдең үтәлешенә ҡаршылыҡ күрһәтеү, юл бирмәү. **Ҡамасаулау** киңерәк ҡулланылышлы. *Йәшәргә ҡ а м а с а у л а у. Үҫергә ҡ а м а с а у л а у.* **Тотҡарлау** — айырым эш-хәлдең үтәлешен ҡыйынлаштырыу, кәртә булыу. **Арҡыры тороу (төшөү)** — эшкә, ниәткә ҡырҡа ҡаршы килеү. **Аяҡ салыу** — эшкә тотҡарлыҡ, зыян яһау. **Тәгәрмәскә тая̌ҡ тығыу** — эшкә ҡамасау яһау, тотҡарлау. *Дошман тылында, уның иҫәбенсә, тәмәке тартыу — эшкә ҡамасаулай* (Ғ. Әмири). *Һеҙ миңә ҡамасауламай ғына, һыйығыҙ барҙа мәктәптән сығып китегеҙ* (Ғ. Дәүләтшин). *Уҡыйым тигәс, уҡыһын инде, тотҡарламайыҡ. Үткән һайлауҙа мин старшина булып еткән ерҙә генә, киҫә арҡыры төшөп, бөтә эште боҙҙо бит* (Һ. Дәүләтшина). *Институтҡа инергә экзамен биргәндә, ошо математика уға аяҡ салды* (Ф. Иҫәнғолов). *Дошмандар тыҡһа ла таяҡтар, тәгәрмәс туҡтамаҫ, гел елер, тарихтың аҙымы алдында яуыздың һөйәге иҙелер* (Б. Бикбай).

**Ҡаныҡыу, ҡаҙалыу** *күсм.* Берәй кешегә өҙлөкһөҙ бәйләнеү, үсләшеп йөҙәтеү.— *Бисәң дә*

*шул орсоҡтай балаға ҡаныҡҡан. Ниткән туҡмау ул гел генә? — тине өләсәй* (Ғ. Ғүмәр). *Әллә ниміһенә миңә ҡаҙалды ла ҡалды, бәйләнеп кенә тик йөрөй* (һөйл. теленән). *Асыҡҡан яман түгел, ҡаныҡҡан яман* (мәҡәл).

1. **Ҡаплау, ябыу, бөркәү.** Бер нәмә өҫтөнә икенсеһен йәйеү, түшәү. **Ҡаплау** киң мәғәнәле: йәйеү, өҫтөн һырыу. *Ҡар ҡ а п л а у. Саң ҡ а п л а у.* **Ябыу** — һыу һ. б. үтмәҫлек итеп көпләү һәм ябындырыу. *Өй башын я б ы у.* **Бөркәү** — тығыҙлап ябыу, томалап ҡуйыу. *Уларын ҡарағура, алабута, кесерткән һәм башҡа үләндәр ҡаплаған* (Ғ. Дәүләтшин). *Ҡыш түгел был.. Боҙҙар тик бөгөнгә ҡаплап тора кеүек күл өҫтөн* (Н. Нәжми). *Ҡара төндәй толомоңа һинең йондоҙ шәлен таңдың ябырмын* (Р. Ғарипов). *Аҡмырҙа теге ҡыҙ биргән тирене бабай өҫтөнә ябып киткән, ти* (әкиәттән). *Бөркәү һәйбәт булды, игенгә һыу үтерлек түгел* (М. Тажи).

— Ҡаплаулы,ҡаплауыс;ябыулы, япҡыс, япма, ябыҡ; бөркәүле.

2. **Ҡаплау, ябыу, ышыҡлау.** Күрһәтмәү, томалау. **Ҡаплау** күберәк ҡулланыла. *Ләкин һин ҡошсоҡ шул бер ситлектә, алһыу йөҙөң пәрҙә ҡаплаған* (Д. Юлтый). *Буран ҡарҙарҙы өйөрә, томалап күкте ҡаплай* (А. Пушкин). *Тау итәктәрен ҡуйы томан япты* (Д. Исламов). *Болот япһа айҙы, бер асыла, Мәҙинәкәйем, гөлкәйем, елдәр иҫеп, болот ҡуҙғалһа* (халыҡ йырынан). *Уларҙы ағастар ышыҡланы, тауыштары алыҫайҙы* (Һ. Дәүләтшина).

3. **Ҡаплау, түңкәреү.** Аҫтын өҫкә әйләндереп ҡуйыу (һауытһабаны һ. б.). *Уҡ, йүгерек батырҙың башына ҡаплаған сүлмәккә барып тейеп, селпәрәмә килтергән* (әкиәттән). *Сәй эсеп туйып, сынаяғымды түңкәргәйнем, Зөләйха һүҙ башланы* (Н. Мусин).

— Ҡапландырыу.

**Ҡапыл, кинәт, шунда уҡ, шул ике арала, һә тигәнсе, күҙ асып йомғансы, керпек ҡаҡҡансы.** Бик тиҙ, ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә. **Ҡапыл** киң ҡулланылышлы. «Көтмәгәндә, иҫкәрмәҫтән» төҫмөрөн дә бирә. **Кинәт** көтмәгәндә, иҫкәрмәҫтән булған хәлгә баҫым яһай. Башҡалары «бик тиҙ, тиҙ арала» мәғәнәһендә ҡулланыла. *Арала һүҙ өҙөлдө. Новиков та ҡапыл үҙгәрҙе* (Д. Юлтый). *Ҡешеләр ҡапыл ғына ..йүгерешә башланылар* (М. Ғафури). *Ул алға атланы, кинәт шул саҡ дары шартланы* (Ғ. Сәләм).— ..*Мә, һиңә Айбулат бирҙе,— тип күҙ асып йомғансы уның ҡулына бер бәләкәй генә төйөнсөк тотторҙо ла шунда уҡ, йәнле күләгә кеүек, келәт артына китеп тә юғалды* (Һ. Дәүләтшина). *Шул ике арала толпаның бер өлөшө баҙар майҙанына ябырылды* (Д. Юлтый). *«Нухтың килене Фатима һыуға батҡан икән». Был хәбәр Туйралы ауылында һә тигәнсе таралып китте* (Ж. Ҡейекбаев). *Үтә ғүмер керпек ҡаҡҡансы* (халыҡ йырынан).

**Ҡараңғыланыу, ҡараңғы төшөү, күҙ бәйләнеү** *күсм.* Ҡис булып, ҡараңғылыҡ йәйелеү. **Ҡараңғыланыу** киңерәк мәғәнәле: томалап ҡараңғылатыуҙы ла белдерә. **Ҡараңғы төшөү** — кис етеп ҡараңғыланыу. **Күҙ бәйләнеү** — кис етеп, күҙгә күренмәй башлау. *Төштән һуң уҡыған балалар мәктәптән, көн ҡараңғыланғас, ҡайталар* (М. Тажи). *Тышта бөтөнләй ҡараңғы төшкәйне инде* (Б. Бикбай). *Ҡеше күҙенә күренергә оялып, Ҡәмән менән Сәмән үҙ ауылдарына күҙ бәйләнгәс кенә ҡайтып инделәр* (әкиәттән).

1. **Ҡарау, бағыу** *шиғр.*, **күҙ һалыу, күҙ төшөрөү, күҙ һирпеү, күҙ ташлау, күҙ тегеү, ҡараш ташлау.** Ҡүҙ ҡарашын нимәгә булһа ла йүнәлтеп, күреп

алыу. **Ҡарау** киңерәк ҡулланылышлы. **Бағыу** — һоҡланып ҡарау. **Күҙ һалыу** — йәшерен генә ҡарап алыу. **Күҙ төшөрөү, күҙ һирпеү** — тиҙ генә ҡарап алыу. **Күҙ тегеү** — алыҫҡа ҡарап тороу. **Ҡараш ташлау** — бер аҙ ҡарап алыу. *Бер ҡараһам һиңә, күңелем була, бер йылмайып ҡуйһаң да ни була* (халыҡ йырынан). *Ҡаяға баҫҡан ҡыҙҙарға ҡараным ҡыйып, ниндәй ҡөҙрәт — буй-һындарын ҡуйғандар ҡойоп* (Р. Бикбаев). *Ә беҙ осрашҡан минутта саҡ ҡына өнһөҙ торайыҡ, күҙҙәргә бағып ҡына* (А. Игебаев). *Күҙҙәреңә бағып туя алманым, әйтә алманым әйтер һүҙемде* (Н. Нәжми). *Көндөҙҙәрен баҡһа, көн ояла, төндәрендә йондоҙ нур ала* (халыҡ йырынан). *Боролоп, собраниелағы халыҡҡа күҙ төшөрҙө ул* (Һ. Дәүләтшина). *Күҙ ташлайым ҡабат: Иҙел буйлап колхоз ауылдары тартылған* (Ғ. Сәләм). *Шәмсиә, Юлияның үҙенә ҡарап торғанын абайлап, уға көлөмһөрәп күҙ һирпте..* (Һ. Дәүләтшина). *Таянып эйәккә, күҙ тегеп йыраҡҡа, ултырам уйланып бер үҙем бер яҡта* (Ш. Бабич). *Был кешенең руссаны таҙа, иркен һөйләүе лә, үҙен ҡалалағы эшселәр кеүек тотоуы ла Юлияны уға һынаулы ҡараш ташларға мәжбүр итте* (Һ. Дәүләтшина).

— Ҡараш, бағыусы.

2. **Ҡарау, байҡау, күҙәтеү, текләү, төбәлеү, күҙ йүгертеү, күҙҙән үткәреү, күҙ йөрөтөү, күҙҙән кисереү, тамаша ҡылыу.** Оҙаҡ итеп, иғтибар менән ҡарау. **Ҡарау** киңерәк ҡулланылышлы. *Китап к а р а у. Һүрәт к а р а у.* **Байҡау** — оҙаҡ итеп өҫтән, бейектән ҡарау (шиғри телмәргә тартым). **Күҙәтеү** — ентекләп ҡарау (йыш ҡулланыла). **Текләү** — күҙҙе алмай ҡарап тороу. **Төбәлеү** — иғтибар менән оҙаҡ ҡарап тороу. **Күҙ йүгертеү** — тиҙ-тиҙ ҡарап сығыу. **Күҙҙән үткәреү, күҙҙән кисереү** — иғтибар менән берәмләп ҡарап сығыу. **Тамаша ҡылыу** — ҡарап тороу (китап теленә тартым һүҙ). *Ҡарайым да һиңә хайран ҡалам, беҙ ниндәй дуҫ, ниндәй яҡындар* (Н. Нәжми). *Тағы бөгөн тауға мендем. Алтын көҙ. Ҡояш балҡый. Һоҡланып туя алмай байҡайым тирә-яҡты* (Б. Бикбай). *Мин күңел күҙем менән Волховтан алып Братск ГЭС-ына тиклем булған араны байҡап үтәм* («Совет Башҡ.»). *Әгәр ҙә доктор артынан күҙәтеп барһа, Сәлих тағы ла нығыраҡ ғәжәпләнгән булыр ине* (Х. Мохтар). *Серле йылмаялар бик йыш ҡына ҡарайҙар ҙа текләп йөҙөмә* (Ф. Рәхимғолова). *Китапты уҡырға ваҡыт булманы, күҙ йүгертеп кенә сыҡтым. Телгә оҫта кеше автобустың эсен күҙҙән үткәрҙе лә һүҙ башланы..* («Совет Башҡ.»). *Ҡаҙаҡ телендә сыға торған китаптарҙы күҙҙән кисергән һәм газета-журналдарҙы күҙәтеп барған* («Совет Башҡ.»). *Иғтибар итегеҙ, иптәштәр, майҙанға барып еткәнгә тиклем беҙгә шиғриәтте бер нисә урында тамаша ҡылып уҙып китергә тура киләсәк* (К. Әхмәтйәнов). *Һәр сәскәгә туҡтап сәләм бирәм, һәр бер ҡошто ҡылам тамаша* (Р. Ғарипов).

— Күҙәтсе, күҙәтеүсән.

**Ҡарсыҡ, әбей, ҡортҡа** *һөйл.* Оло йәштәге, ҡартайған ҡатынҡыҙ. **Ҡарсыҡ, әбей** йышыраҡ ҡулланыла, ҡатын-ҡыҙҙың исеменә ҡушып та әйтелә, өндәшеү һүҙе булып та килә. *Ғәлимә к а р с ы ҡ. Ғәйниямал ә б е й. Ҡарсыҡ, бара торғас, ни өсөн килгәнен дә әйтә башлағас, Зәйнәп, аулаҡ ергә сығып, үкһергә кереште* (М. Ғафури). *Тимерсе Миңнеғәли ҡарт, ҡортҡаһының тәбиғәтенә ҡапма-ҡаршы булараҡ, күп һөйләүсән* (Х. Ғиләжев). *Шуны ғына көтөп ултырған Йомай әбей уны ҡапыл ҡыҙҙырып алып китте* (Һ. Дәүләтшина).

— Ҡарсыҡ-ҡорсоҡ, әбей-һәбей, әбекәй.

**Ҡартайыу, олоғайыу, өлкәнәйеү.** Оло йәшкә етеү. *Яҡшыға төшкән ярпайған, яманға төшкән ҡартайған* (мәҡәл). *Юлдыбай өлкәнәйгәс кенә, ҡарттың ҡулынан эш төштө* (Һ. Дәүләтшина).

**Ҡарышыу, киреләнеү, сығынсылау, кәзәләнеү** *һөйл.* Ҡушылғанды үтәүҙән баш тартыу, тыңламау, ипкә килмәү. **Ҡарышыу, киреләнеү** үҙ-ара яҡын. **Сығынсылау** — тыңламай ҡаршылашыу. **Кәзәләнеү** — йәмһеҙ ҡыланып, ныҡ ҡарышыу. *Пристав тағы: «Һин ҡарышмаһаң, һинең улың ҡарыша. Ул һине ҡоторта,»..— тип һүгенде* (М. Ғафури). *Башҡалар ҙа: «Дөрөҫ, һин машинаны яҡшы беләһең, киреләнмә»,— тинеләр* (Н. Мусин).— *Миңә ҡыҙым белмәй һөйләмәҫ, нимә сығынсылап ултыраһың инде, һалырға тигәс, һалырға..* («Совет Башҡ.»). *Инде ашарға тиһәң, кәзәләнә бер талай* (Д. Юлтый). [*Мәликә:*] — *Донбасстан отпускыға ҡайтҡан бер бик һәйбәт егет 48-се йылда уҡ һораткайны ла бит, үҙем кәзәләндем* (Д. Исламов).

**Ҡасыу, тайыу** *күсм.*, **һыҙыу, шылыу** *күсм.*, **тоҡойоу, һыпыртыу, ысҡыныу** *күсм.*, **шылтайыу** *һөйл.*, **эрәүеү** *һөйл.*, **үксә күтәреү** *һөйл.*, **табан ялтыратыу** *һөйл.*, **ҡойроҡто төрөү** *һөйл.*, **ҡойроҡто һыртҡа һалыу** *һөйл.* Торған урындан ашығыс рәүештә китеү (ғәҙәттә, йәшеренеп китеү). **Ҡасыу** киңерәк мәғәнәле: күҙ алдынан юғалыу, һиҙҙермәй, йәшеренеп кенә китеү, шәп итеп йүгереү һ. б. **Тайыу, һыҙыу, шылыу** — йәшеренеп ҡасыу (мыҫҡыллау тойғоһо менән әйтелә). **Һыпыртыу, тоҡойоу** — шәп итеп ҡасып китеү. **Шылтайыу, эрәүеү** — шым ғына йәшерен китеү. **Үксә күтәреү** һ. б. берәмектәрҙә мыҫҡыллау, еңелсә көлөү белдерелә. [*Әбелхәйер*] *..Хива түрәләренең үҙенә ҡаршы енәйәт йөрөтөүҙәрен күргән дә, ҡасып киткән* (Ғ. Ибраһимов). *Эттән ҡапыл тороп ҡасырға ярамауын, уның, һис шикһеҙ, аяҡтан эләктереп аласағын ул үҙенең ҙур тәжрибәһенән белә ине* (Х. Мохтар). *Ул ауылға ҡайтырға ашыҡты, сөнки бүреләр ҡуҙғала башлағансы, урмандан тайыу хәйерлерәк ине* (Ғ. Әмири). *Бесәй, уны йәһәт кенә ауыҙына ҡабып алып, эт менән икәү һарайҙан сығып та һыҙған* (әкиәттән). *Малайҙар күҙ асып йомғансы бүлмәнән сығып шылдылар* (Н. Мусин). *Иҫенә килгән Даниә, кеше-маҙар күренгәнсе тип, тиҙерәк сығып шылыу яғын ҡараны* («Совет Башҡ.»). *Татар абзый, ошо һүҙҙән һуң аттарын борҙо ла, һин күр ҙә мин күр, тоҡойоп сығып китте* (Б. Бикбай). *Гриша.. тегенең мылтыҡ ватыҡтарын алыҫҡа, соҡор эсенә быраҡтырҙы. Енәйәтсе тиҙ һыпыртты* («Совет Башҡ.»). *Ҡис менән, кеше аяғы һил булғас та, ысҡынырһың. Ҡара уны, башҡа ат менән ҡайтып етә алмаҫһың,— тигән* [*Зөлхизә әбей*] (Ә. Вахитов). *Ҡараҡтар: «Әйҙәгеҙ, был ерҙән ысҡынайыҡ, башыбыҙға етерҙәр»,— тинеләр ҙә ҡуйыраҡ урман эҙләп киттеләр, ти* (әкиәттән). *Тиҙ генә эрәү, күрмәһен берәү* (шаяртыу һүҙе). *Беҙҙең рота кире боролдо ла түбән ҡарай әйҙә үксә күтәрергә* (А. Таһиров).— *Ярар, әйтермен. Ә хәҙер табаныңды ялтырат* (Х. Мохтар). [*Ишдәүләт*] *..Ат алыштырам, тип ҡайтып киткәйне, шунан бирле күргәнем юҡ, ҡойроҡто һыртҡа һалды булырға кәрәк,— тине Тулыбай ағай* (Д. Юлтый).

**Ҡатлам, ҡатлау.** Ҡат-ҡат булып ятҡан нәмәнең бер ҡаты. **Ҡатлам** күберәк ҡулланыла. *Боҙ ҡ а т л а м ы. Таш ҡ а т л а м ы. Ҡар ҡ а т л а у ы. Ер ҡ а т л а у ы. Ҡалын ҡ а т л а м.*

— Ҡатламлы, ҡатлаулы, ҡатлауланыу.

**Ҡатын, бисә, кәләш, йәмәғәт,**

ефет *иҫк.* Ирҙең ғаилә иптәше; ирҙә булған ҡатын-ҡыҙ. **Ҡатын, бисә** йышыраҡ ҡулланыла, **бисә** — тупаҫыраҡ һүҙ, күберәк һөйләү теленә хас. *Ҡ а т ы н л ы ҡ ҡ а алыу. Б и с ә л е к к ә килеү.* **Йәмәғәт** — ирле ҡатын, китап теленә йәки уҡымышлы кешеләр теленә хас. **Ҡәләш** — йәш ҡатын. *Ирҙе ир иткән дә ҡатын, ер иткән дә ҡатын* (мәҡәл). *Эсенән: «Был кем кәләше икән? Һай, һай, аҫыл һөйәк, һылыу ҡатын», тип һоҡланды. Бер аҙҙан тирмәнән килеп сыҡҡан Ғәзимәнән: «Апай, бынау «йәш килен» тигәнегеҙ кемдең йәмәғәте ул?» — тип һораны* (Һ. Дәүләтшина). *Сирайҙың бисәһе имсәк балаһын күтәреп килгән* (Һ. Дәүләтшина). *Бисә-сәсәләр ҙә бала-саға ла күп, ти. Тимәк, тотош ауылы менән ҡайҙалыр күсеп баралар* (Ғ. Ибраһимов).

**Ҡатынҡы, ҡатҡыл.** Бер самараҡ ҡаты, ҡатыраҡ. *Ҡ а т ы н ҡ ы ер. Ҡ а т ҡ ы л балсыҡ.* **Ҡатынҡы** һүҙендә «ныҡлы» төҫмөрө лә бар. *Ер өҫтөндәге барлыҡ нәмә: ҡатҡыл үләндәр, ағас ботаҡтары, аҡланға һибелгән йылҡыларҙың ялы-ҡойроғо ап-аҡ ҡырау булды* (Ш. Янбаев). *Йософ оҙон ғына буйлы, ҡатынҡы кәүҙәле..* (В. Исхаҡов).

**Ҡатышыу, ҡатнашыу, аралашыу.** 1) Бергә ҡушылып буталыу. **Ҡатышыу, ҡатнашыу** актив ҡулланылған тиң синонимдар. *Ҡатышты алтын-көмөш баҡыр-еҙгә, барыр сүрәттә күренделәр былар күҙгә* (М. Ғафури). *Ҡәрәсин менән һыу ҡатнашмай, һыуы төпкә ултыра* (һөйл. теленән). *Ат кешнәгән, аҡырып илаған, ахылдашҡан, ҡысҡырышҡан тауыштар барыһы бергә аралашты* (Я. Хамматов).

2) *күсм.* Бер-береңә барышып, дуҫ булып йәшәү. **Ҡатышыу, ҡатнашыу** *кемгә, кем менән: Унан, уның юғары обществоларға ысынтылап ҡатыша алмауына ла эсе боша. Ә унда ҡатнашыу өсөн йә аҡса, йә геройлыҡ менән башҡалар алдында танылыу кәрәк* (И. Насыри). **Аралашыу** *кем менән: Ул үҙен һәр ваҡыт олпатлы, баҫалҡы кеше итеп тоторға тырыша: аҙ һүҙле, ваҡ-төйәк кеше менән аралашып, билбау сисеп, сер һөйләп ултырмай, самалап ҡына эсә, күп ашамай, тартмай* (Б. Бикбай).

— Ҡатыш, ҡатышма; ҡатнаш, ҡатнашлыҡ.

**Ҡаушау, юғалып ҡалыу, ҡойолоп төшөү.** Ни эшләргә белмәй аптырап ҡалыу. **Ҡаушау** — тулҡынланыуҙан ҡалтырап төшөү. **Юғалып ҡалыу** — ныҡ ҡаушау. **Ҡойолоп төшөү** (ҡурҡыуҙан, аптырауҙан). [*Ишкәле:*] — *Һылыу күҙемә баҡһа, ҡаушайым, һөйләһә — йөрәгемде ойота* (Ғ. Ибраһимов). *Ҡулындағы күкрәккә ҡуйып тыңлай торған торбаһын ҡайҙа ҡуйырға белмәй, ҡаушап, аҡрын-аҡрын ғына артҡа сигенә башланы* (И. Насыри). *Ул ни әйтергә белмәне, әммә үҙенең юғалып ҡалыуын һиҙҙермәне.* (Б. Бикбай). *Ғариф староста ҡурҡыуынан ҡойолоп төштө* (Ж. Кейекбаев).

**Ҡауышыу, ҡушылыу** *күсм.* Ирле-ҡатынлы булыу, өйләнешеү. *Ауыр — кеше булыу, ауыр — айырылышыу, ауыр — ҡауышыу* (Н. Нәжми). *Улар һөйөп ҡушылдылар, торҙолар татыу, бәхетле тормош ҡорҙолар, булманы асыу* (Б. Бикбай).

**Ҡойон, өйөрмә.** Өйөрөлөп-өйөрөлөп йөрөгән көслө ел. **Ҡойон** — өйөрөлөп килгән дауыл. *Ҡ о й о н уйнау. Тотонған ул бер заман йүгерергә. Артынан ҡойон уйнатып, атылып килә икән* (әкиәттән). *Ялҡойроғо тулы тиеп, ябайҙан айғыр алмағыҙ: ҡойон-дауыл уйнатып, Урал һыртын саңлатып, яуға сабыр ат тыумаҫ* (ҡобайырҙан). *Һин минең күңел түремә моң булып ишек ҡаҡтың, өйөрмәгә әйләндең дә далаға алып саптың* (Ғ. Рамазанов).

**Ҡоллоҡ, әсирлек** *иҫк.* Ҡол

булыу хәле. *Йәшәһен капитализм ҡоллоғонан азатлыҡҡа алып бара торған көрәш!* (М. Ғафури). *Ҡорал күтәргән ырыуҙарҙың ғәйәр егеттәре ҡыл арҡанға тағылып, әсирлеккә, хурлыҡлы ҡоллоҡҡа оҙатыла* (Ә. Хәкимов).

**Ҡот, йәм, толҡа** *иҫк.* Күңелгә ҡәнәғәтлек, ләззәт бирерҙәй хәл, матурлыҡ. **Ҡот, йәм** тиң ҡулланыла, **толҡа** һирәгерәк ҡулланыла. *Балаһыҙ өйҙөң ҡото юҡ* (әйтем). *Беҙҙең өйҙә көнөн-төнөн тыныс, әллә шуға уның ҡото юҡ* (Б. Бикбай). *Ҡарсығанан ҡасҡан һуна өйрәк толҡа тапмаҫ екән ҡамышһыҙ* (халыҡ йырынан).

**Ҡортлау** *күсм.*, **сереү** *күсм.*, **һаҫыу** *күсм.* Уйында отолғас, уйындан сығыу. **Ҡортлау** күберәк ҡулланыла. *Уйындан* *ҡ о р т л а п китеү. С е р е г ә н кешене уйындан ҡыуалар.*

**Ҡотҡарыу, ҡотолдороу, йолоу, азат итеү.** Бәлә-ҡазанан, ауыр хәлдән сығарыу. **Ҡотҡарыу** киңерәк ҡулланылышлы: ауыр хәлдән, һәләкәттән, ҡайғынан һ. б. **Йолоу** һирәгерәк ҡулланыла. **Азат итеү** китап теленә тартым; политик бойондороҡһоҙлоҡ биреүҙе лә белдерә. *Бурыстан а з а т и т е ү. Түләүҙән а з а т и т е ү. Был ауырлыҡтан һине кемдәр йолор, кем ҡотҡарыр?* (М. Ғафури). *Егет, һалдатты ҡотҡарып, теге яуыз ҡартты уның урынына бәйләп ҡуя* (әкиәттән). *Әгәр ҙә дөрөҫ һөйләй торған булһаң, ярты сәғәт тә тотмайым. Хәҙер ҡотолдорам..* (Т. Хәйбуллин). *Илдә Көньяҡ Вьетнамды азат итеү өсөн милли көрәш фронтының йоғонтоһо әҙмә-әҙ һәм ҡаҡшамаҫ рәүештә арта бара* («Совет Башҡ.»).

— Ҡотолғоһоҙ.

**Ҡотлау, тәбрикләү.** Берәй ваҡиға, байрам һ. б. уңайы менән яҡшы теләктәр әйтеү, тәбрик итеү. **Ҡотлау** күберәк ҡулланыла. *Ҡ о т л а у телеграммаһы. Ҡ о т л а у һүҙе.* **Тәбрикләү** — тантаналы ҡотлау (юғары стилгә хас). *Батырҙарҙы т ә б р и к л ә ү. Ҡояш сыға, тау ҡат күҙен асҡан балаларҙы ҡотлап нур менән..* (З. Шаһбазов).

**Ҡуҙғалыу, күтәрелеү, ҡалҡыу, ҡубыу, ҡуҙыу.** 1) Ҡапыл ғына башланып, көсәйеп китеү (ел, дауыл, буран һ. б.). **Ҡуҙғалыу, күтәрелеү, ҡалҡыу** бер самараҡ, **ҡуҙыу** һирәгерәк ҡулланыла. *Әле генә тып-тын торған һауа ҡапыл боҙолоп, ҡара болот сыҡты, ел ҡуҙғалды* (М. Тажи). *Ҡапыл ғына ҡойон ҡупты, ерҙән сүп-сар һеперә* (Ҡ. Даян). *Ҡурҡты микән дини ҡарт-ҡоролар ҡалҡа тиеп туфан һыуҙары* (Ғ. Дәүләтов). *Болот сыҡһа, ел ҡуҙыр..* (ҡобайырҙан). *Көтмәгәндә, яҙғы көндөң йәмен боҙоп, ҡаты ел күтәрелде* (Ғ. Ибраһимов).

2) *күсм.* Эш-хәрәкәткә, көрәшкә берҙәм, бер төптән тотоноу. *Көрәшкә ҡ у ҙ ғ а л ы у. Яуға к ү т ә р е л е ү.* [*Айбулат:*] — *Хәҙер ошо ваҡиғаға протест яһап, бөтә Рәсәй эшселәре ҡуҙғалған* (Һ. Дәүләтшина). *Китәм, дуҫтар, һуғышҡа, сиктә дауҙар ҡупҡан, ти* (Б. Бикбай). *Әгәр ҙә шундай берәй восстание ҡалҡһа, беҙгә ҡушылып китергә мөмкин* (Д. Юлтый).

3) *күсм.* Башлап ебәреү, йәмғиәт алдына ҡуйыу (һүҙ, эш-хәл). **Ҡубыу, ҡуҙыу** был мәғәнәлә бик һирәк ҡулланыла. *Мөһим мәсьәлә к ү т ә р е л е ү. Һүҙ ҡ а л ҡ ы у. Ике дуҫтың әңгәмәләре бик килешә. Яҙ көнө колхоз ойоштороу мәсьәләһе ҡуҙғалғас, Ғариф ағай.. беренсе булып ғариза бирҙе* (Б. Бикбай).

— Ҡуҙғалыш, күтәрелеш.

**Ҡул сабыу, алҡышлау.** Хуплап, тәбрик итеп ус һуғыу. **Алҡышлау** — көслө ҡул сабыу. *Гөрр.. итеп ҡул саптылар. Таныштарын айыра алманым* (С. Агиш). *Йыр аҡрын ғына*

*тынды һәм көслө алҡышлау яңғыраны* («Совет Башҡ.»).

**Ҡулсыр, оронсаҡ, оҙон ҡуллы** *күсм.*, **кәкре ҡуллы** *күсм.*, **шуҡ ҡуллы** *күсм.*, **бармағы үҙенә (табан) кәкре.** Ҡулы тик тора белмәгән, кеше нәмәһенә тейеп барған (кеше). **Ҡулсыр** йышыраҡ, **оронсаҡ** һирәгерәк ҡулланыла. **Оҙон ҡуллы, кәкре ҡуллы, шуҡ ҡуллы** — кеше нәмәһенә тейеп барған, уғрыраҡ; *ҡулы оҙон, ҡулы кәкре, ҡулы шуҡ* формаһында ла ҡулланыла. **Бармағы үҙенә (табан) кәкре** — әйбергә тейеп барыусан һәм үҙ мәнфәғәтен күберәк ҡараусан. *Хисамый йәштән үк ҡулсырыраҡ кеше ине* (Б. Бикбай). *Бур намыҫлы кешеләрҙән ҡурҡа, оҙон ҡуллылар менән дуҫлаша, үҙ тирәһенә фекерҙәштәрен йыя* («Совет Башҡ.»). *Ҡарттар, яңылыштығыҙ, юҡҡа хурланығыҙ, ул кәкре ҡуллы түгел ине* (һөйл. теленән). *Беҙгә бармаҡтары үҙҙәренә кәкре кешеләр кәрәкмәй, ә колхозды колхоз итә, колхозды үҙ семьяһы итеп тырышҡан кешеләр кәрәк* (Һ. Дәүләтшина).

**Ҡултамға, имза** *иҫк.* Эш ҡағыҙына, хатҡа һ. б. кеше яҙған исем-фамилияһы. *Ҡ у л т а м ғ а ҡ у й ы у. И м з а һ а л ы у. — Гөлйөҙөм, әйҙә, башлап ҡултамғаңды ҡуйып ебәр,— тине кассир* (Р. Низамов). *Ҡаланың промбанкыһы Ташбулатов имзаһы булған чек менән килгән кешегә һис һүҙһеҙ күрһәтелгән сумманы ебәрә тора* (И. Насыри).

**Ҡупшы, көйәҙ, фырт** *һөйл.* Өҫ-башын бик төҙөк, матур йөрөткән, ыҫпай. **Ҡупшы** киңерәк мәғәнәле: *ҡ у п ш ы к ә ү ҙ ә, ҡ у п ш ы кейенеү, ҡ у п ш ы йөрөү.* **Фырт** артыҡ ҡупшылыҡты белдереп, кире баһа бирә. *Бөтәһенең дә кейемдәре йәшел — бер иштән, ҡупшы кейем өҫтәренә иллә килешкән!* (Ғ. Дәүләтов). *Һоро костюм, һары шиблет.. — Ильяс ҡупшы һәр ерҙә* (Х. Кәрим). *Садрислам ярым ҡаласа кейенгән көйәҙ генә егет ине инде* (Ф. Иҫәнғолов).

— Ҡупшылыҡ, ҡупшыланыу; көйәҙлек, көйәҙләнеү; фыртлыҡ, фыртайыу.

**Ҡурҡаҡ, ҡуян йөрәк(ле).** Хәүеф-хәтәр алдында ҡаушап төшә торған; ҡыйыуҙың киреһе. **Ҡурҡаҡ** кешегә, йәнлектәргә ҡарата ҡулланыла; **ҡуян йөрәк** кешегә ҡарата ғына бер төрлө көлөү тойғоһо менән әйтелә. *Яу эсендә кеше араһында ҡурҡаҡтарҙан иҫәпләнмәй инең бит. Йөрәкле егетмен тиһең, һин япа-яңғыҙ саҡта батыр бул* (М. Кәрим). *Бер ҡыйыуға мең ҡурҡаҡты алмаштырмайҙар* (мәҡәл). *Азамат башын ҡаҡты. Бынан һуң артҡа сигенһәң, ғүмергә «ҡурҡаҡ» исемен тағырһың — шуны ул яҡшы аңлай. Ҡемдең генә инде «ҡуян йөрәк» булғыһы килә!* (Ә. Бикчәнтәев).

— Ҡурҡаҡлыҡ, ҡурҡаҡланыу.

**Ҡурҡыныс(лы), хәтәр, хәүефле, шомло, дәһшәтле, ҡот осҡос.** Ҡурҡыу тойғоһо тыуҙырған, бәлә-ҡаза белдереп торған. **Ҡурҡыныс(лы)** киңерәк ҡулланыла. **Хәтәр, хәүеф** үҙ-ара яҡын, хәүеф-хәтәр рәүешендә парлашалар. **Шомло** — билдәһеҙлеге менән ҡурҡыныс булып торған. *Ш о м л о ҡ а р а ш. Ш о м л о х ә б ә р.* **Дәһшәтле, ҡот осҡос** — бик ҡурҡыныс, һәләкәтле. *..Ҡескенә лампаларын ҡабыҙған эшселәр ҡурҡыныс бер ҡиәфәттә күренәләр* (М. Ғафури). *Томбойоҡтар ойой күлдәрҙә, иҫмәй инде хәтәр елдәр ҙә* (А. Игебаев). *НАТО-ның пландары хәүефле* («Совет Башҡ.»). *Була бит шундай хәлдәр: ҡара болоттар бөтә күк йөҙөн ҡаплап алалар, дәһшәтле йәшендәр йәшенләй, ер һелкетеп күк күкрәй* (Х. Мохтар). *Ул, балаһының таҡмағын әллә ниндәй шомло хәбәр һымаҡ күреп, асыуланды* (Һ. Дәүләтшина). *Ысын булһа, ҡот осҡос хәл бит был!* (И. Насыри).

**Ҡурҡыу, шөрләү, шыртлау,**

**өркөү, биленләү, бөжләү** *һөйл.*, **шөр ебәреү** *һөйл.*, **ҡойолоп төшөү** *күсм.*, **йөрәк ҡубыу, ҡот осоу, йән алҡымға килеү, йәндә уста тотоу, төҫ ҡасыу, ҡобара осоу, сәс үрә тороу.** Хәүеф-хәтәр алдында ҡаушап төшөү. **Ҡурҡыу** киң мәғәнәле: кешегә лә, башҡа йән эйәләренә лә әйтелә. **Шөрләү, шыртлау, бөжләү** — ҡурҡа бирәп ҡуйыу (еңелсә көлөү, мыҫҡыл белдерә). **Өркөү** — ҡапыл ҡурҡып һиҫкәнеү, тертләү (ғәҙәттә малға ҡарата әйтелә). **Шөр ебәреү** — ҡурҡыу (мыҫҡыллауҙы белдерә). **Ҡот осоу** — ныҡ ҡурҡыу. **Ҡойолоп төшөү** — ҡапыл ҡурҡып, ни эшләргә белмәү, юғалып ҡалыу. **Йән алҡымға килеү** — ниндәйҙер көсөргәнеш кисереп, тетрәп тороу. **Йәндә уста тотоу** — оҙаҡ ҡурҡып йөрөү. **Төҫ ҡасыу, ҡобара осоу** — ныҡ ҡурҡыуҙан йөҙ ағарыу. *Батша «Бөгөнгә дүрт егет һарайымды баҫып алып, үҙемде ботарлап ташларҙар ҙа — бына һиңә күҙ күрмәгән, ҡолаҡ ишетмәгән эш булыр!» тип ҡурҡҡан* (әкиәттән). *Саҡ ҡына «көш-көш!..» тигәс тә ҡурҡалар ҡаҙ, күркәләр* (Ш. Бабич). *Нимә, Сәүит власы, ғали йәнәптәре, һуғыш сыға-нитә ҡалһа, немец арт һабаҡты уҡытыр тип шөрләйһеңме әллә?* (Д. Исламов). *Түбәһе күккә тейерҙәй ҡөҙрәтләнеп килгән Әлибай, был хәлде күреп, ҡараҡтар баҫманымы икән тип, тәүҙә бер аҙ шөрләне* (Ғ. Ибраһимов). *Өйҙә ныҡ яуап бирергә тура килер, тип шыртлаған егеттәр, был эштән былай уңай ҡотолғас, еңеләйеп киттеләр..* (Һ. Дәүләтшина). *Һәй ҡыҙыҡ, күргәс мине, тайҙар, ҡолондар өркәләр* (Ш. Бабич). *Ҡатын кешенең үҙ иренән башҡа кешеләргә күренеүенә, ҡурҡмай, өркмәй түрәләр менән һөйләшеп йөрөүенә аптырай ул* (Һ. Дәүләтшина). *Иллә бөжләне малайың* (М. Ҡулаев). *..Барыһы ла шөр ебәреп ултыралар* (әкиәттән). *Шәкерттәр ..ҡойондан бигерәк, ана шуларҙы хәтерләүҙән шөр ебәреп, ..таҡыя кейгән егеткә яҡынырак һыйындылар* (Ғ. Ибраһимов). *Әй саба ул, мин ҡыуамын, әй саба ул, мин ҡыуам. Ҡупты йөрәк, шиңде ҡолаҡ — шөрләне меҫкен ҡуян* (Ш. Бабич). *Ул алланан ҡурҡып, бәндәнән оялып ҡото осор* (Һ. Дәүләтшина). *Айбарланып алдында торған ҡатындың ҡараштарынан Гәрәй ҡойолоп төштө, көлөргә лә, хурлығынан иларға ла белмәне* (Б. Бикбай). *Анау бер яурынына уҡа баҫҡандары килгән саҡта, төптө йәнең алҡымыңа килә торғайны* (Ғ. Дәүләтшин). *Аҫта упҡын, өҫтә күк тын, бер хәүефлән, бер кинән... Ҡайсын йырлай, мин йәнемде усымда тотоп киләм* (М. Кәрим). *Һуңғы ус кәнфитте бер юлы ебәргәйнем, һатыусымдың төҫө ҡасмаһынмы. Ҡобараһы осто егеттең* («Совет Башҡ.»). *Әхмәзиҙең ҡобараһы осто: ул бер һүҙ ҙә өндәшмәне, судтың ҡарары — закон, Әхмәзи быны яҡшы белә ине..* (Ж. Кейекбаев).

**Ҡурсалау, аралау.** Ауыр хәлдән ҡотҡарырға тырышыу. *Уларҙың [тауҙарҙың] бит тамсы эс кере юҡ, аралайҙар улар ҡайғыңдан* (Р. Бикбаев).

**Ҡурыу, ҡыҙҙырыу.** Ашамлыҡты утта тотоу (ғәҙәттә май эсендә). **Ҡурыу** киңерәк мәғәнәле: *ҡурмас* к у р ы у, *ит ҡурыу, йомортҡа* к у р ы у һ. б. *[Айбикәләр].. мулланы, тағы бер нисә ҡартты ғына, ҡурҙаҡ ҡурып, сәйгә генә саҡырып алалар ине* (Һ. Дәүләтшина). *Ҡатыны бушай алманы, таба тултырып ҡоймаҡ ҡоя, ит ҡыҙҙыра ине* (Б. Бикбай).

**Ҡусты, эне, мырҙа** *һөйл.* Үҙеңдән кесе ир-ат, шулай уҡ кесе ир туған. **Ҡусты, эне** йышыраҡ ҡулланыла. *Энекәш. Ағайэне.Берҙән-бер көндө Ҡейекбай Йылҡыбайға: «Ҡөйөҙбай ҡустыбыҙ һине лә, мине лә кейәүгә итте. Зиндандан ҡотҡарайыҡ*

*үҙен»,— тигән* (әкиәттән).— *Бынау төймәңде һатып аша, әммә әллә ни хаҡ булмаҫ, ҡусҡым,— тигән була бай,— бер һыныҡ икмәк еткән* (әкиәттән). *Анау ситтә ултырғаны бик йәш, һүҙгә лә ҡатнашмай, әллә ҡайһы ере Зәйнәптең яңғыҙ әнеһе Әхмәткә оҡшап ҡуя* (Һ. Дәүләтшина).— *Бара алмайым шул, мырҙам,— тине Фатима яғымлы тауыш менән һәм һүҙенең аҙағын үйынсалауға бороп ҡуйҙы* (Б. Бикбай).

**Ҡушылыу, ҡойоу**. Ағар һыуҙарға (йылға, шишмә һ. б.) ҡарата әйтелә. *Эйек Һаҡмарға ҡушыла* (һөйл. теленән). *Был яҡтарҙағы бөтә йылғалар кеүек үк, Ҡамышлы ла Ағиҙелгә ҡоя* (Д. Исламов).

**Ҡыбырҙау, ҡыймылдау, ҡымшаныу, йыбырҙау.** Әҙ-әҙ генә хәрәкәтләнеү. **Ҡыбырҙау, ҡыймылдау** үҙ-ара яҡын. **Ҡымшаныу** — торған урындан ҡуҙғала биреп ҡуйыу. **Йыбырҙау** — ваҡ-ваҡ ҡына хәрәкәттәр яһау. *Тараҡан өҫтәл ситенә килеп етте лә, уңға-һулға боролғолап аҙ ғына ҡыбырҙап торғас, бейек өҫтәлдән иҙәнгә һикерҙе* (Ғ. Әмири). *Уларҙың ҡыймылдамай тороуҙарын күргәс, Хәбибулла асыуланырға кереште* (М. Ғафури). *Йөрәгенең аҫтындағы йән эйәһе ҡыймылдаһа, йоҡолағы әсә ҡапыл һиҫкәнә лә күҙен аса* (М. Кәрим). *Яраланып, ҡымшанмай яттым Дағстанда төшкө эҫелә* (М. Лермонтов). *Ул [Гөлйөҙөм], шулай тыныс ҡына ятып, буйындағы бер туҡтауһыҙ йыбырҙап, туҡтауһыҙ әйләнгән йән эйәһенең улмы, ҡыҙмы булыуы тураһында уйлан[ды]..* (Һ. Дәүләтшина).

**Ҡыҙғаныс, йәл, аяныс.** Ҡыҙғаныу хисе уята торған (эш-хәл, ваҡиға, кеше һ. б.). **Ҡыҙғаныс** йышыраҡ ҡулланыла. *Ҡ ы ҙ ғ а н ы с кеше. Ҡ ы ҙ ғ а н ы с хәл. Ҡ ы ҙ ғ а н ы с булыу.* **Аяныс** — бик йәл, әсенеүле. *А я н ы с яҙмыш. Вафатына бер аҙна булды инде,— тине Шәрәф.— Эйе, әсәйең ҡыҙғаныс, ҡайтып өлгөрмәнең* (Б. Бикбай). *Яланбикә бик йәл ине.* (Һ. Дәүләтшина). *Үҙ-үҙемә шулай бер ҡасан да сикһеҙ йәл булғаным юҡ ине..* (Р. Ғарипов). *Ҡапитан өсөн уларға ҡарау көлкө лә, аяныс та, йөҙ ҡыҙартҡыс та ине* (И. Насыри).

**Ҡыҙыҡ(лы), мәрәкә, мәҙәк, ирмәк, көлкө(лө).** Көлкөнө килтерә торған, күңелде йыуатҡан. **Ҡыҙыҡ** киң мәғәнәле һәм йышыраҡ ҡулланыла. *Ҡ ы ҙ ы ҡ(л ы) китап. Ҡ ы ҙ ы ҡ хәл. Ҡ ы ҙ ы ҡ итеү. Ҡ ы ҙ ы ҡ күреү* һ. б. **Мәрәкә, көлкө** — еңел генә көлкө тыуҙырған. *М ә р ә к ә булыу. М ә р ә к ә хәл.* **Мәҙәк** — көлкө, мәрәкәгә яҡын. **Ирмәк** — бик ҡыҙыҡ, көлдөргөс. *И р м ә к малай. И р м ә к булыу. Социалистар! Был һүҙ, беренсе ишеткәндә, уға ҡыҙыҡ та, матур ҙа булып күренде* (М. Ғафури). *Бәхәс, һуғыштарҙы кәрәк булғанға түгел, бәлки мәрәкә өсөн генә ҡуптара торған Вася менән әлдән-әле ныҡ ҡына сәкәләшеп алалар* (Х. Мохтар). *Уның сәстәре оҙон; төҫөнә, йәшлегенә ҡарағанда, һаҡалмыйыҡтары йөҙөнә бер ҙә ятып бөтмәй, бик мәҙәк кенә тойолалар ине* (Д. Юлтый). *Бәй, һүҙгә мауығып, яҡташ, һүҙҙең осон сыуалттым. Ирмәк булды бер көнөндә йәйге матур сыуаҡтың* (М. Кәрим).

— Ҡыҙығыу, ҡыҙыҡһыныу, ҡыҙыҡтырыу; мәрәкәсел, мәрәкәләү, мәрәкәле; мәҙәклек, мәҙәксе.

**Ҡый, сүп, сүп-сар, ҡый-ҡыпыр.** 1) Хужалыҡта кәрәкмәгән ваҡ-төйәк, ташландыҡ нәмәләр. **Ҡый, ҡый-ҡыпыр** — эрерәк нәмәләр, **сүп, сүп-сар** — ваҡыраҡ ташландыҡтар. *Ҡый йыйылып киткән. Балыҡсы уны-быны ҡарап тормаған, ҡармаҡҡа эләккән сүп тип, балдаҡты яр башына ырғытҡан, ти* (әкиәттән)

— Ҡыйлыҡ, сүплек.

2) Ашлыҡ араһында үҫкән насар үлән. *Игенде* *к ы й* *баҫты.* *С у п* *үләне.* *К ы й ҙ ы* *утау.* *Ҡый үләндәренән иртә силос һалыу эше насар бара* («Совет Башҡ.»). *Бөтә ҡатындар ҙа һинең кеүек эшләһә, сөгөлдөрҙә суп тә булмаҫ ине, фермала сусҡа балалары ла үлмәҫ ине* (Р. Низамов).

— Ҡыйлы, ҡыйлау, ҡыйланыу; сүпле, сүпләү, сүпләнеү.

**Ҡыйбат(лы), ҡиммәт(ле).** 1) Хаҡы, баһаһы юғары булған; арзандың киреһе. *К ы й б а т (л ы) тауар.* *К и м м ә т л е бүрек.* *Иргә мал ҡыйбат түгел, ир үлһен дә ҙан ҡалһын* (Һ. Дәүләтшина). *..Башҡорттарға ла тоҙҙо, башҡа халыҡтарға булған кеүек, ҡаҙна мөгәзәйҙәренән ҡиммәт хаҡҡа һатырға тигән закондар сыҡты* (Ғ. Ибраһимов).

2) *күсм.* Әһәмиәтле, кәҙерле. *К ы й б а т л ы* *һүҙ.* *К и м м ә т л е* *мәғлүмәт.* *Ғәзиз башҡынайың һау булһын, башҡынайың ҡиммәт аҡсанан* (халыҡ йырынан). *Барыһынан да беҙгә ҡыйбат, беҙгә ҡыйбат ил, Ватан!* (Д. Юлтый).

— Ҡиммәтселек, ҡиммәтләнеү, ҡыйбатланыу.

**Ҡыйын, ауыр** *күсм.* Башҡарыу, еңеп сығыу өсөн ҙур көс, тырышлыҡ талап иткән (эш, хәл һ. б.); еңелдең киреһе. Ҡуп ваҡыт тиң ҡулланылалар. *К ы й ы н* *мәсьәлә.* *К ы й ы н* *юл.* **Ауыр**—кисереш, тойғоға ҡарата ла әйтелә. *А у ы р* *ҡайғы.* *А у ы р* *ҡараш,* *А у ы р* *хәл.* *А у ы р ғ а* *алыу.* *Көн дә шулай..* — *Көн дә шулай тиһең? Ҡыйын икән хәлең..* (Ҡ. Ҡинйәбулатова). *Бик беләмен: хәреф теҙеү — ҡыйын бер эш. Ҡыйын эштәр еңеләйә, булһаң тырыш* (Ш. Бабич). *Диңгеҙгә ингәнебеҙҙең икенсе көнө юлсылар өсөн артыҡ ауыр булды* (Ғ. Ибраһимов). *Ҡараңғыла балҡыу еңел, яҡтыла балҡыу — ауыр* (Н. Нәжми).

— Ҡыйынлыҡ, ҡыйынлашыу, ҡыйынһыныу, ауырлыҡ, ауырлашыу, ауырһыныу.

**Ҡыйыш, ҡыйыҡ, салыш.** Тигеҙ түгел; тураның киреһе. **Ҡыйыш** киңерәк ҡулланыла: кешегә, тәбиғәт күренештәренә ҡарата әйтелә. **Ҡыйыҡ, салыш** кешегә ҡарата ғына ҡулланыла. *Ауыҙың ҡыйыш булһа, көҙгөгә үпкәләмә* (мәҡәл). *Ауыҙы ҡыйыҡ булһа ла, байҙың ҡыҙы ир һайлар* (мәҡәл).— *Ә һин аҡырма, Африка маймылы. Юғиһә, мин һинең салыш битеңде бынау тәртешкә менән төҙәтермен! — тине Сәлих, тәртешкә алырға әйелгән булып* (Х. Мохтар).

— Ҡыйышайыу, ҡыйыш-мыйыш, салышайыу.

**Ҡыйышыу, өҙөшөү, тартҡылашыу** *күсм.* Ҡиҫкен көрәш алып барыу, алышыу. *Хандың Аҡһаҡ Тимер менән Ҡавказ, Хорезм өсөн өҙөшкән ваҡыты* (Ә. Хәкимов).

**Ҡырҡа, киҫкен.** Ҡәтғи рәүештә, өҙөп кенә (әйтеү, яуап биреү, хәл итеү һ. б.). **Ҡырҡа** йышыраҡ ҡулланыла. *К ы р к а* *ҡаршы килеү.* *К и ҫ к е н* *яуап биреү.* *Йөҙөкәс, үҙең беләһең, мин ебәргән яусыны атайыңдар ҡырҡа кире һуғып ҡайтарҙылар* (Һ. Дәүләтшина). *..Был ғәйепте аҙ ғына ла үҙ өҫтөнә алырға риза булмаған Ғимай был һүҙҙәргә киҫкен ҡаршы сыҡты* (И. Насыри).— *Һеҙгә нимә кәрәк, апайҙар?— тип һораны* [*Шәһүрә*] *киҫкен генә, һаман тынıслана алмайынса* (Н. Мусин).

1. **Ҡырҡыу, киҫеү, телеү.** 1) Үткер ҡорал менән ышҡып өҙөү. **Ҡырҡыу** киңерәк мәғәнәле: һәр төрлө нәмәгә ҡарата әйтелә. *Ҡолаҡ* *ҡ ы р ҡ ы у.* *Ҡайсы менән* *ҡ ы р ҡ ы у.* **Киҫеү** ҡырҡыуға яҡын. **Телеү** — үткер йөҙлө нәмә (күберәк бысаҡ) менән ҡырҡыу. *Икмәк* *т е л е ү.* *Ҡарбуз* *т е л е ү.* *Итәк ҡырҡһаң, ең була* (мәҡәл). *Ете ҡат үлсә, бер ҡат киҫ* (мәҡәл). *Соҡоп булмай илдең күҙен, киҫеп булмай илдең телен* (Р. Бикбаев).

2) Тәнде ҡыйып яралау. *Ҡыяҡ ҡамыш ҡулды ҡырҡа* (һөйл. теленән). *Юлға түшәлгән ҡырҡын табандарҙы телә* (Б. Бикбай).

2. **Ҡырҡыу, киҫеү.** 1) Сапҡылап ваҡлау, тураҡлау (балта һ. б. менән). **Ҡырҡыу** күберәк ҡулланыла. *Урман ҡ ы р ҡ ы у. Утын ҡ ы р ҡ ы у. Мин урманда булырмын, һинең янда ҡунырмын; таҡ-таҡ утын киҫермен, киҫеп бөткәс, килермен* (әкиәттән).

2) *күсм.* Өйкәп ашау, тишеү. *Ел күҙҙе ҡ ы р ҡ а. Ялан ерҙән ел иҫер, екән төбөн ҡом киҫер. Яҡшы ат башын нуҡта киҫер, фәҡир башын юҡ киҫер* (әйтем).

**Ҡырыҫ, ят бауырлы.** Кешегә ылыҡмаған, үҙ түгел. **Ҡырыҫ** — киңерәк мәғәнәле. *Ҡ ы р ы ҫ холоҡло. Ҡ ы р ы ҫ кеше. Ҡ ы р ы ҫ ҡыланыу.* **Ят бауырлы**—туғандарына ылығып бармаған.— *Бына бит ул ҡайһылай ят бауырлы. Бер ҙә беҙҙең кешенең ҡылығына тартмаған. Торғаны менән Сәлимә еңгәм, бахыр, ҡырыҫ* (Һ. Дәүләтшина).
— Ҡырыҫлыҡ, ҡырыҫланыу.

**Ҡысҡырыу, аҡырыу, баҡырыу** *күсм.*, **ларылдау, лауылдау** *һөйл.*, **сарбайлау, һөрәнләү, ҡауғалау, һөрән һалыу, яр һалыу, тамаҡ ярыу** *һөйл.* Көслө тауыш сығарыу. **Ҡысҡырыу** киң мәғәнәле: ныҡ тауышланыу, оло тауыш менән хәбәр һөйләү, екереү. **Аҡырыу, баҡырыу** — көслө тауыш менән ныҡ ҡысҡырыу һәм екереү. **Лауылдау** — оло тауыш менән туҡтауһыҙ ҡысҡырыу. **Сарбайлау** — әсе тауыш менән ғауға һалыу. **Һөрәнләү** — ныҡ итеп ҡысҡырыу (ғәҙәттә ҡурҡыштан). **Ҡауғалау** — нимәлер даулап ҡысҡырыу. **Һөрән һалыу** — ныҡ ҡысҡырыу, тауыш күтәреү (күберәк ҡурҡыштан). **Яр һалыу** — ныҡ ҡысҡырыу. **Тамаҡ ярыу** — ниҙер талап итеп ҡысҡырыу. Барыһы ла тиерлек яманлағанды белдерә. *Халыҡ кем ҡысҡырғанын тикшереп торманы* (М. Ғафури). *Ә бәләкәй ҡайнаға: «Ҡайтып күҙемә генә күренһен, мин унан өс йөҙ бот бойҙайҙы һығып таптырам»,— тип аҡыра* (Һ. Дәүләтшина). *Ҡемдер ҡулдарын болғап баҡыра* (И. Насыри). *Уларҙың ларылдауҙарын еңеп, урам баҡсаһы аша йәштәр таушы ишетелде* (Һ. Дәүләтшина). *Йыһанурҙың сарбайлауына бөтә халыҡ һөрләгөшөп барһалар ҙа эҙләгәнен алған икән, тип кенә ҡуйҙылар* (Т. Хәйбуллин). *Иҡсанов бер үҙенең ҡаршы тора алмауын белеп, йә имгәтеп-нитеп ҡуйырҙар, тип ҡото алынып, бөтә йортто яңғыратып һөрәнләй башланы* («Һәнәк»). *Белмәй һуң, һуғыш бөткән йылды бөтә ауылды ҡауғалатҡан Ғабидулла бит ул* (Н. Мусин).— *Ҡаруанды яу баҫты! Ҡаруанды яу баҫты! — тип һөрән һала башлағандар, ти* (әкиәттән). *Әтәстәр, берећен береһе уҙҙырырға теләгәндәй, таң тынлығын боҙоп, һөрән һала* (Н. Мусин). *Аттар алып ҡайтҡас, Макарканы күреп, мин яр һалдым: — Макарка!. Макарка!..* (Б. Бикбай). *«Юҡҡа тамаҡ ярмағыҙ, хужалар ылау хәстәрен күрә!»* (М. Басыров).
— Ҡысҡырыш, ҡысҡырыныу; аҡырыш, аҡырыныу; баҡырыныу; ҡауғалаш, ҡауғасыл.

**Ҡыҫылыу** *күсм.*, **тығылыу** *күсм.* Кешенең эшенә, тормошона кәрәкмәгәнгә ҡатнашыу. **Тығылыу** — тупаҫыраҡ һүҙ. [*Аҡмырҙа — Яубикәгә:*] *Ир-ат эшенә һин ҡыҫылма!* (Б. Бикбай). [*Ғәбдеян — Шәһүрәгә:*] *..Ә инде кәрәк кешеләргә теге-был әйбер биреүгә килгәндә, һин уныһына тығылма, ни эшләргә кәрәген үҙем белермен* (Н. Мусин).

**Ҡыуаныу, шатланыу, һөйөнөү, түбә күккә тейеү.** Шатлыҡ, ҡәнәғәтлек тойғоһо кисереү. **Ҡыуаныу, шатланыу** — тиң синонимдар, берен-бере алыштыра. **Һөйөнөү** — эстән генә ҡы-

уаныу. **Түбә күккә тейеү** — бик нык шатланыу. *Шатланырмын, әгәр шул һөйөүем ярҙам итһә яуға инергә. Ҡыуанырмын, әгәр шул нәфрәтем дошманды уттай көйҙөрһә* (Р. Ниғмәти). *Күптән инде минең был тиклем шатланғаным юҡ ине* (Ғ. Әмири). *Һәр терегә һөйөнәм, тик үлемгә көйөнәм; ә хәҙергә — ҡыуанам, диуана мин, диуана!..* (Р. Ғарипов). *Һәр шатлыҡтан түбә күккә тейҙе, тигеҙ бүлдек ҡайғы күргәндә, мин сирләһәм, оҙон төндәр буйы ул ултырҙы минең эргәмдә* (М. Кәрим).— *Баянда уйнарға йәһәт өйрәндең, әй,— тип маҡтап ебәргәс, уның түбәһе күккә тейҙе* (Н. Мусин).

**Ҡыуыу, баҫтырыу.** Ҡасҡан, йүгергәнде тотоу ниәте менән артынан йөрөү, эҙәрләү (кешене, йәнлекте). Берен-бере алыштыра ла ала. *Илгизәр әбәҡ бирә лә, Нәфисә уны ҡыуа* (М. Кәрим). *Бесәй туғыҙ бүрәнең артынан баҫтыра төштө, ти. Байтаҡ ер ҡыуып барҙы, ти бесәй* (әкиәттән). *Хужа, йоҡонан уянып, суҡмар күтәреп, бүрене ҡыуырға сыҡҡан* (әкиәттән).

— Ҡыуғын, ҡыуыш; баҫтырыш.

# Л

**Ләғнәт, ҡәһәр, ҡарғыш.** Йән асыуы менән әйтелгән насар теләк, әрнеп юралған бәхетһеҙлек. **Ҡәһәр** — бик ҡаты ҡарғыш. *Л ә ғ н ә т уҡыу. Ҡ ә һ ә р төшөү. Ҡара ҡ а р ғ ы ш. Ҡ а р ғ ы ш төшөү. Улай булғанда, башҡа ләғнәттең тағы ла ҡатырағы төшөргә мөмкин* (И. Насыри). *Ҡәһәр һуҡһын, ләғнәт төшһөн, ярашмай батшалары* (Һ. Дәүләтшина). *Эт ҡарғышы бүрегә йоҡмаҫ* (мәҡәл). *Башҡынама ниндәй ҡарғыш төштө, ни гөнаһтар өсөн был яза* (Б. Бикбай).

— Ләғнәтле, ҡәһәрле, ҡарғышлы, ҡәһәрләү, ҡарғау.

**Ләстит һатыу, тел сарлау, сафсата һатыу.** Юҡ-бар, буш һүҙ һөйләү. **Ләстит һатыу** — ваҡ-төйәк хәбәр, ғәйбәт һөйләү. **Тел сарлау** — әһәмиәтһеҙ хәбәр һөйләү. **Сафсата һатыу** — буш һүҙҙе аҡыллы итеп һөйләргә тырышыу. *Урам буйында теҙелешеп, ләстит һатып ултырған һаҡаллы ағайҙар мине танымайҙар* (М. Ғафури).— *Хәбәрегеҙҙе өйгөҙгә ҡайтып һөйләшегеҙ,— тине Шәһүрә,— магазин ләстит һатыу урыны түгел* (Н. Мусин). *Дөрөҫөн әйткәндә, осраған бер бисә менән тел сарларға ашҡынып торған ғәҙәтем юҡ..* (Ә. Бикчәнтәев). *Һинең ғәйбәт, сафсата һатып, донъяңды мөкиббән онота торған ғәҙәтең бар* (С. Ҡулибай).

# М

**Маҙаланыу, аҙапланыу.** Ҡыйынлыҡ күреү, мәшәҡәт кисереү. *Ғимаҙи ҡарт, ашығып, күлдәгенең иҙеүен артҡа кейеп маҙаланды* (С. Ҡудаш).

**Маҡсат, морат, ниәт.** Алға ҡуйылған бурыс, үтәлергә тейешле теләк. **Маҡсат, морат** үҙ-ара яҡын, шулай ҙа тәүгеһе күберәк ҡулланыла. *М а ҡ с а т ҡуйыу. М а ҡ с а т тотоу. Йәшәү м а ҡ с а т ы. М о р а т ҡ а ирешеү. М о р а т ҡ а етеү.* **Ниәт** — яҡындағы маҡсат, иҫәп. *Изге н и ә т. Яҡшы н и ә т. Н и ә т тотоу. Улар үҙҙәренсә план ҡороп, файҙаланыуы мөмкин булған*

*бөтә тура һәм ҡыйыҡ юлдар менән маҡсаттарына ҡарай атланылар* (И. Насыри). *Сабыр иткән — моратына еткән* (мәҡәл). *Яҡшы ниәт — ярты еңеү* (мәҡәл). *Игенсенең ниәте изге — быйылғы мул урожайға ныҡлы нигеҙ һалыу* («Совет Башҡ.»).

**Маҡтансыҡ, һауалы, ҡуҡыр** *һөйл.* Үҙен-үҙе әллә кемгә һанаған (кеше). **Маҡтансыҡ** күберәк ҡулланыла. *Ә ҡупырайырға тигәндә — бала-сағаһына тиклем кикреген ҡатырырға тора. Әйтерһең, уларҙың һәр береһе, кәм тигәндә, губернатор нәҫеле. Етмәһә, килеп тороп маҡтансыҡтар* (М. Кәрим). *Ҡуптән түгел уны [тимер крестты] берәй фриц тағып йөрөгәндер һауалы* (Б. Бикбай).— *Белмәгәне юҡ уның,— тиештеләр, ҡуҡыр малайҙы мыҫҡыллап.— Оҙон ҡолаҡлы ҡасыр бит ул* (F. Ибраһимов). *Башында шундай кикрекләнеп торған аҫыл тараҡ була тороп, ҡуҡыр әтәс муйынса бөртөгө эҙләп йөрөймө һуң!* (әкиәттән).

1. **Маҡтаныу, маһайыу, эреләнеү, ҙурланыу, кәпәренеү, ҡупайыу, һауаланыу, осоноу, ҡуҡырайыу, ҡупырайыу, минминләнеү, әллә кем булыу, танау сөйөү, морон күтәреү, күкрәк (түш) ҡағыу (һуғыу).** Үҙеңде башҡаларҙан өҫтөн һанап, эре тотоу. **Маҡтаныу** йышыраҡ ҡулланыла. **Маһайыу, эреләнеү, һауаланыу, ҙурланыу** — үҙеңде бик эрегә һанау. **Осоноу** — юҡ нәмәгә артыҡ маһайып ҡыланыу. **Ҡуҡырайыу, ҡупайыу, ҡупырайыу** — маҡтансыҡлыҡты йөҙгә, ҡиәфәткә сығарыу. *Беҙ етеҙ, тип, ҡоштар маҡтанмаһын, уларҙан да шәберәк осабыҙ* (Х. Кәрим). *Шундай ҙур дошмандар менән эш иткәнлектәре өсөн, күңелдәренән маһайып, эреләнеп киттеләр* (И. Насыри). *Шулай өлкән урындарҙа йөрөп эреләнмәүен әйт әле һин уның* (Һ. Дәүләтшина).— *Эреләндең.. хәҙер,— тиһең,— таныр-лыҡ та түгел һине..* (Н. Нәжми). *Анау ҡарт йыраусы ла, урҙаның рәсми хәтерендә маҡтансыҡ йыр, риүәйәт рәүешендә һаҡланған хәбәрҙе ҡуйыртып, ғәскәр башлыҡтарының кәпәренеүен хуплай* (Ә. Хәкимов). [*Бикбулат*] *Ниmәһенә шул саҡлы ҡупайған булалыр тағы* (F. Ибраһимов). *Осонғандың ҡулынан ҡуян ысҡынған* (мәҡәл). *Был бер ҙә маҡтаныуҙан йәки ҡупырайыуҙан түгел* (Һ. Дәүләтшина). *Ә ҡупырайырға тигәндә — бала-сағаһына тиклем кикреген ҡатырырға тора* (М. Кәрим). *Бирҙеғол уны* [*Арыҫланды*] *һауаланып ҡаршы алды* (F. Ибраһимов). *Юҡҡа беҙҙә ҡайһы берәүҙәр тормош тарафынан күптән фашланған һәм юлдан алып ташланған нәмәгә арнап шиғыр яҙған булалар ҙа герой булып ҡуҡырайып йөрөйҙәр* («Совет Башҡ.»). *Ә Ҡәбир менән мин һаман шулай осоноп, ҡыланып, бушты бушҡа ауҙарып йөрөүҙе дауам иттек* (З. Биишева). *Һин дә әллә кем түгел, мин дә әллә кем түгел, һинең әллә кем булыуың әжәлгә дарыу түгел* (таҡмаҡтан). *Тау аҡтарған, мин тауҙарҙы аҡтарҙым тип, күкрәк һуҡмаҫ* (Н. Нәжми). *..Танауын нисек күтәргән! Әйтерһең, генерал* (Д. Исламов). *Йөрөймө әллә кем булып, танауҙы үргә сөйөп* (И. Fиззәтуллин).

2. **Маҡтаныу, маһайыу, шапырыныу, кәпәренеү, ҡабыҡ ҡағыу (туҡмау, һуғыу), ярма (борсаҡ) ярыу, борсаҡ бөрттереү, борсаҡ атыу (сәсеү).** Үҙ-үҙеңде, эшеңде ҡабартып һөйләү, арттырып ебәреү. **Шапырыныу, кәпәренеү** — артыҡ ныҡ маһайыу. Һөйләү теленә хас һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр.— *Тарханбыҙ, тип маһаялар Бирҙеғолдар, — тине Ҡинйә, атаһының хәлен уртаҡлашырға теләп* (F. Ибраһимов). *Һин өй һалдың. ..Шапырынма, ауылда, тип, ул бейек. Ни йәме бар бейек өйҙөң, әгәр өйрәһе булһа*

*шыйыҡ* (Н. Нәжми).— *Мин ҡаҙаҡтарҙы буйһондороп ҡайтасаҡмын,— тип кәпәренде ул* [*Тәвкилев*], *Өфөнән сыҡҡас та* (Ғ. Ибраһимов). *Үҙе ҡыш көнө бында «мин фәлән иттем дә, мин төгән иттем» тигән булып, йомалар буйы ҡабыҡ һуғып ятҡан булды* (И. Насыри). [*Тәфтизан*] *Юҡҡа ирәймәне, ҡупырайманы, танау сөйөп, борсаҡ ярманы..* (А. Игебаев). [*Ҡотой старшина*].. *Беҙҙең ауылда ике полк ята, пулеметтары ла күп, тип борсаҡ ат тине* (А. Таһиров).

**Маҡтау, күккә күтәреү (сөйөү).** Ҡемдеңдер баһаһын, данын күтәреп һөйләү. **Күккә күтәреү (сөйөү)**— артыҡ ныҡ маҡтау. *Ғүмер буйы мин бит һеҙгә ғашиҡ, шуғалыр ҙа артыҡ маҡтаным* (Н. Нәжми). *Шуға яратам Уралды, йырҙарымда маҡтайым..* (Б. Бикбай). *Ҡенәзде маҡтайҙар. Күктәргә күтәрәләр* (И. Насыри). *Ғәжәп, Байғошов ниңә уны ҡапыл күккә күтәрә башланы икән?* («Һәнәк»). *Бына мөхәббәттең сере шунда, йәғни нәмәнең матурлығы өсөн яныуҙа, шуны күктәргә күтәреп, маҡтап йырлауҙан тора* (М. Ғафури).

— Маҡтаулы.

**Матур, һылыу, күркәм, сибәр, нәфис, зифа, һомғол, һоҡланғыс, нәзәкәтле, гүзәл, иҫ киткес, күҙ яуын алырлыҡ, ҡарап (күреп) туймаҫлыҡ, һоҡланып туймаҫлыҡ, бер ҡалаҡ һыуға һалып йоторлоҡ, һыу һөлөгө кеүек, бер бите ай, бер бите көн, атлы кеше аттан төшөп, йәйәү кеше ятып ҡарарлыҡ.** Күрер күҙгә йәмле, күренеше, булмышы күңелгә ятышлы. **Матур** киң ҡулланылышлы: йән эйәләренә, кешегә, тәбиғәт күренештәренә ҡарата әйтелә. *М а т у р йорт. М а т у р ҡараш. М а т у р егет. М а т у р яҙ* һ. б. **Һылыу** — үҙенә тартып торған, һөйкөмлө (күберәк кешенең эске һәм тышҡы матурлығына ҡарата әйтелә, ағастарға ҡарата ла шиғри телмәрҙә ҡулланыла). *Һ ы л ы у ҡайындар.* **Күркәм** — тышҡы матурлыҡҡа ҡарата әйтелә. **Нәфис** — нескә, күберәк кәүҙә матурлығына баҫым яһай (тәбиғәт күренештәренә ҡарата ла әйтелә). *Н ә ф и с ел. Н ә ф и с гөлдәр* һ. б. **Нәзәкәтле** — бик нескә (һирәк ҡулланыла, шиғри телгә хас). *Н ә з ә к ә т л е бармаҡтар.* **Сибәр** кешегә ҡарата ғына әйтелә. **Зифа, һомғол** буй-һындың матурлығын, төҙөклөгөн, нескәлеген билдәләй; үҫемлеккә ҡарата ла әйтелә. *З и ф а буй. З и ф а тал. Һ о м ғ о л ҡарағайҙар.* **Гүзәл** — юғары дәрәжәлә, бик матур (кешегә, тәбиғәт күренештәренә, абстракт төшөнсәләргә ҡарата ла әйтелә). *Г ү з ә л кеше. Г ү з ә л күренеш. Г ү з ә л киләсәк* һ. б. **Һоҡланғыс, иҫ киткес** — юғары дәрәжәлә матур (күберәк тәбиғәт күренештәренә ҡарата әйтелә). **Күҙ яуын алырлыҡ** — күберәк матур, затлы нәмәләргә ҡарата әйтелә. **Ҡарап (күреп) туймаҫлыҡ, һоҡланып туймаҫлыҡ** — бик матур (кешеләргә, тәбиғәт күренештәренә ҡарата әйтелә). **Бер ҡалаҡ һыуға һалып йоторлоҡ** бик матур, нескә ҡатын-ҡыҙға ҡарата әйтелә. **Һыу һөлөгө кеүек** — бик матур. **Бер бите ай, бер бите көн** күберәк халыҡ ижадында ҡулланыла (ҡатын-ҡыҙға ҡарата әйтелә). *Әй матур ҡыҙ Зөһрә йән, мин һине ҡасан күрәм?* (Ш. Бабич). *Биҙәкләйҙәр ер өҫтөн сәскәләр төҫлө матур ҡыҙҙар* (М. Ғафури). *Егеттәр— ыласын, һылыу — ҡыҙҙарым, балалар — гөлдәр, бик йәш — ҡарттарым* (М. Хәй). *Сырур туташ, алһыу йөҙөң, күҙең күркәм, тыуҙыңмы әллә алһыу нурлы йәйге иртән?* (Ш. Бабич). *Күркәмгә күмер ҡабы ла килешә* (мәҡәл). *Сәсәндең теле уртаҡ, сибәрҙең йөҙө уртаҡ, оҫтаның ҡулы уртаҡ* (мәҡәл). *Ә Ирочкалағы нәзәкәтле кәүҙә, нәфис йөҙ һыҙығы, оҙон керпектәр араһында янып торған*

*ҡара күҙҙәр Нинала юҡ ине* (Д. Юлтый). *Тал сыбыҡтай һомғол буй-һыныңды, күҙҙәреңдең зәңгәр ялҡынын ..Нисек күрмәҫкә һуң, күҙем булып? Әйтсе, һылыу, етмәй аҡылым!* (Р. Ғарипов). *Был биттән Суфияға моданың иң һуңғы нөктәһенә еткереп кейенгән, нескә билле, зифа буйлы иркә бер ҡыҙ, тәкәббер йылмайып, ҡарап тора* (З. Биишева). *Шул күреү, һинең гүзәл әхлағыңды ишетеү — күңелемдә бер эҙ ҡалдырған* (М. Ғафури). *Ҡариҙел йылғаһының уйһыу ярҙары ғәжәп матур. Бигерәк тә йылғаның урта ағымы һоҡланғыс* («Совет Башҡ.»). *Тәбиғәт был яҡтарҙа ҡышын да бик матур, ә йәйен инде иҫ киткес* («Совет Башҡ.»). *Йырлай, бейей, оса алсаҡ ҡыҙҙар, ҡарап туймаҫлыҡ һис уларға!* (Р. Ғарипов). *Шул тиклем ҡарап туйғыһыҙ сибәр кеше булыр икән!* (Ә. Бикчәнтәев). *Алтын ҡойроҡ, Ҡөмөшьял өс йәшкә етеп, күреп туймаҫлыҡ матур ҡонан була* (әкиәттән). *Ҡеүәтле дауылдар, урагандар артынан уҡ елһеҙ, тымыҡ, матур, һоҡланып туймаҫлыҡ көндәр була* (И. Насыри). *Өҫтәлгә күҙ яуын алырлыҡ аҡ ашъяулыҡ йәйелгән* (Ф. Иҫәнғолов). *Ул бына ошо Шишмә районының Ҡалмыҡ ауылы муллаһының бер ҡашыҡ һыуға һалып йоторлоҡ, һөлөк кеүек ҡыҙына өйләнде. Унан килеп, Аллаяр бер ҡыш эсендә һөлөк кеүек ике-өс атты яндыра* (Ф. Иҫәнғолов). *Бер бите ай, бер бите көн кеүек һылыу был (йәш) ҡатындан ул тыуған* (әкиәттән).

**Меҫкен, бисара, бахыр, байғош** *күсм.* Бәхеттән, ҡыуаныстан мәхрүм, йәлләү тойғоһо тыуҙырған. Исем мәғәнәһендә лә ҡулланылалар. **Меҫкен** активыраҡ ҡулланыла, унда кәмһетеү төҫмөрө лә бар. **Бахыр** — бик йәл. **Байғош** — үтә меҫкен, ҡағылып һуғылған. *Иламайым мин көндәрем һырнаҡ, һыуыҡ, һалҡын өсөн; илайым тик ярлы, меҫкен, ҡыҙғаныс халҡым өсөн* (Ш. Бабич). *Бер ағастан икенсе ағасҡа ҡунған һымаҡ, бер вагондан икенсеһенә ырғыйҙар, уларға ике донъя бер тин. Тик бисараларҙы күрә алмайҙар* (И. Насыри). *Тыңлаусылар барыһы бер юлы ах итеп аптыраштылар: — Уй алла, бахырҙарҙы!* (Һ. Дәүләтшина). [*Аяҙғол:*] *Юҡ, улым, шымсы түгелмен мин, хаҡлыҡ эҙләп һеҙҙең янға килгән бер байғош* (Б. Бикбай).

— Меҫкенлек, меҫкенләнеү; бисаралыҡ, бахырлыҡ, байғошлоҡ, байғошланыу.

**Милек, мөлкәт, мал, байлыҡ, дәүләт.** Берәй кешенең ҡарамағында булған матур нәмәләр, хазина һ. б. **Милек** киңерәк ҡулланылышлы, термин булараҡ та йөрөй. *Ҡолхоз м и л к е. Хосуси м и л е к.* **Мөлкәт** — ҡиммәте булған нәмә. **Мал, байлыҡ, дәүләт** уға яҡын. **Байлыҡ** рухи ҡиммәтте лә белдерә. *Культура б а й л ы ғ ы. Рухи б а й л ы ҡ* һ. б. *Йортон, мал-милкен һаҡлап ҡалыу өсөн, колхозға инергә лә ҡаршы түгеллеген белдерҙе ул* (И. Насыри). *Булмаһа, ул өс бот иген, алла рәхмәте менән, мөлкәтемдең хәйере булһын* (Һ. Дәүләтшина). *Аталарҙан ҡалған, һай, йәш бала күкрәк көсө менән мал таба* (халыҡ йырынан). *Шулай итеп, ул йыл буйына йыйылған байлыҡтары менән бергә бер нисә ай иркен йәшәрлек байлыҡ тупланы* (И. Насыри). *Шәһиҙә, ҡултығынан дәүләтен сығарып, ҡутара-ҡутара һөйләнде* (Һ. Дәүләтшина).

— Милексе, милекле, милекселек; мөлкәтле, маллы, дәүләтле.

**Мыжғыу, мыжлау, ҡымйыу, ҡайнау** *күсм.* Ҡүмәкләп бер урында ҡыбырҙашыу, мыж килеү. **Мыжғыу, мыжлау** — үҙ-ара ныҡ яҡын; **ҡайнау** күберәк кешегә ҡарата әйтелә; **ҡымйыу** күберәк бер урында ҡайнашҡан ваҡ йән эйәләренә әйтелә. *Матур йәшел диңгеҙҙәй тулҡын-*

*ланып яткан бесәнлектең өҫтөндә, сәскәлектең балын үҙ мәлендә алып ҡалырға тырышҡан бал ҡорттары һымаҡ ҡайнап, мыжғып бесән сабалар* (Ғ. Дәүләтшин). *Быуа тирәһендә алтын йыуыусы ҡатынҡыҙҙар һәм ирҙәр мыжғып эшләйҙәр ине* (М. Ғафури). *Улар, ләпәктәр иләүе шикелле, уттар тирәһендә ҡымйышалар* (Ф. Иҫәнғолов). *Майҙанда халыҡ ҡайнай.*

**Мыжыҡ, ваҡсыл, ваҡай** *һөйл.*, **ваҡ һүҙле.** Гел генә һуҡранып, бәйләнеп торған (кеше). **Мыжыҡ** йышыраҡ ҡулланыла. *Уны ҡайһы берәүҙәр картлыҡ кәсәфәте, кеше, ҡартая башлаһа, мыжыкҡа, күп һөйләүсәнгә әйләнә, тиҙәр* (С. Агиш). *Ир кешегә ваҡсыл булыу килешмәй. Ваҡ һүҙле кеше түгел ине лә ул* (һөйл. теленән).

**Мыҡты, таҙа** *күсм.* Ныҡлы һәм тулы кәүҙәле. *М ы ҡ т ы егет. М ы ҡ т ы кәүҙәле. Кәүҙәгә т а ҙ а. Т а ҙ а буйлы. Төҫкә-башҡа ла кешенән кәм ере юҡ Мөбәрәктең: атаһына оҡшап, таҙа кәүҙәле, ирҙәрсә баҫалҡы ҡарашлы егет* (Н. Мусин).

**Мыштыр, бызмыр, ығыш, яйман.** Әкрен ҡуҙғалыусан, яй эшләгән (кеше). Ябай һөйләү теленә хас синонимдар. *Гаев партия начальнигының хужалыҡ эштәре буйынса ярҙамсыһына Хәмит Хисмәтуллиндың вайымһыҙлығына, бызмырлығына һуҡранып алды* (Ш. Янбаев).

— Мыштырлау, бызмырлау, ығышыу, яйманланыу.

**Мәртәбә, тапҡыр, ҡат, ҡабат, рәт, юл** *күсм.* Ҡабатланып килеүсе әлдән-әле булған (эш-хәл); һандар һәм һанау һүҙҙәре менән бергә ҡулланылалар. **Мәртәбә, тапҡыр** — тиң синонимдар. *Бер нисә м ә р т ә б ә. Күп т а п ҡ ы р. Өс т а п ҡ ы р.* **Ҡат, ҡабат** үҙ-ара яҡын. *Ҡат-ҡат. Ҡабат-ҡабат.* **Рәт, юл** сағыштырмаса һирәк ҡулланыла. *Өс р ә т. Бер ю л ғ а. Йәш сағында, теге Пашка тирмәненә беренсе мәртәбә засипкасы булып кергәс, осратҡайны ул Сәғиҙәнең әсәһен..* (А. Ҡарнай). *Мин һиңә, Нәғим, нисә тапҡыр барҙым, етенем әҙер, ҡайҙа килтерәйем, тинем..* (Һ. Дәүләтшина). *Бына тәүге һәм һуңғы ҡат ҡайнар ирендәр аша ике йәш йөрәк үҙенең ҡайнарлығын алмаша* (М. Ҡәрим). *Мин, урманға ингәс тә әле, һаҙлыҡҡа бер нисә рәт әйләнеп ҡараным* (Ә. Вахитов). *Икенсе мәртәбә көмөш һандыҡ менән уртансы ҡыҙ менгән. Өсөнсө юлы һандыҡ менән оло ҡыҙ менгән* (әкиәттән).

**Мәшәү, ебегән** *күсм.*, **йомшаҡай, бешмәгән** *күсм.*, **бешәлкәһеҙ, мәмәй** *күсм.*, **мәмәй ауыҙ, асыҡ ауыҙ, йомшаҡ ауыҙ, төшөп ҡалған, ауыҙына ҡаптырған һары майҙы ла йота алмай** *һөйл.* Ихтыяры ныҡлы түгел, эш-йомошто еренә еткерә алмай торған, үтә ҡыйыуһыҙ. Башлыса һөйләү телендә яманлағанда, хурлағанда әйтеләләр. **Мәмәй ауыҙ, асыҡ ауыҙ, йомшаҡ ауыҙ** артыҡ бер ҡатлы, тапҡанын кешенән ашатып йөрөгән кешегә әйтелә. **Төшөп ҡалған** бик мәшәү, ҡулынан бер эш тә килмәгән. *..Ғамир тыумаҫ борон ҡартайып, мәшәүерәк булып үҫте* (Б. Бикбай). [*Ғәбәш:*] — *Бына хәҙер сығам да кешеләргә бөтәһен дә әйтәм.. Ебегән, асыҡ ауыҙ, бешмәгән әҙәм арҡаһында концерт булмай, тип әйтәм* («Совет Башҡ.»). *Ҡыҙҙар улар мәмәй ауыҙҙарҙы яратмайҙар* (Ә. Атнабаев). *Йыһанурҙың атаәсәһенә асыуы ла тыуып ҡуя. Улдарын ҡартайғансы ҡулына эш тейҙермәй үҫтермәһәләр, ул шул тиклем мәмәй ҙә булмаҫ ине, мин әйтәм* («Совет Башҡ.»). *Юҡ, ул саҡта Гәрәй йомшаҡ түшәп ҡатыға ултырта ғына белде. Асыҡ ауыҙҙарҙы шулай итәләр ул* (Б. Бикбай). *Беҙ генә ул, мәмәй ауыҙҙар, үҙ хаҡыбыҙҙы үҙебеҙ яулай алмайбыҙ* (И. Ғиззәтуллин).

*Хәлиҙә лә төшөп ҡалғандарҙан түгел, әйтер һүҙен әйтә белә* («Совет Башҡ.»). *Йомағол, күпме генә уйламаһын, Самиғулланың был ҡыланышын аңлай алманы. «Ауыҙына ҡаптырған һары майҙы ла йота белмәй бит, ахмаҡ!» — тип һүкте уны эсенән генә* (Ғ. Байбурин).

# Н

**Наҙан, томана.** Уҡый-яҙа белмәгән, аңраҡ (кеше). **Наҙан** күберәк ҡулланыла. *Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк! Арабыҙҙа наҙандар күп, уҡыу һирәк* (М. Аҡмулла). *Йөҙ наҙан бер ғалимдың тырнағына тормаҫ* (мәҡәл). *..Вәлетдин маҡтанып туя алмай: «Беҙҙең һары кәзә бөтә көтөүҙең батшаһы ул, ҡайҙа теләй, шунда алып бара һеҙҙең күпкәк, наҙан һыйырҙарығыҙҙы, томана һарыҡтарығыҙҙы..»— ти* (М. Ҡәрим). *Һа-ай, томанаһың да һин, бисәкәй,— тип әрләй башланы Арыҫлан* (Ғ. Ибраһимов).

— Наҙанлыҡ, томаналыҡ.

1. **Насар, хөрт** *һөйл.*, **алама** *күсм.*, **яман, әшәке** *күсм.* 1) Ҡире сифаты өҫтөн булған, түбән сифатлы; яҡшының киреһе. **Насар** киң ҡулланылышлы; эш-ҡылыҡҡа, холоҡҡа, әйберҙәргә, тәбиғәт күренештәренә ҡарата әйтелә. *Насар ат. Насар көн. Насар ниәт. Насар фекер* һ. б. **Хөрт** — яраҡһыҙ, килешһеҙ. *Хөрт кеше. Хөрт хәл* һ. б. **Яман** — уҫал, йәмһеҙ. **Әшәке** — бик насар (эш-хәл, һүҙ, ҡылыҡ һ. б.). *Насар булһа ла, беҙҙең арба бар, шуны егерһегеҙ* (Һ. Дәүләтшина). *Һалҡын һыуҙан ғына туңған йөрәк хөрт булыр ул, сибәр* (Ф. Иҫәнғолов). *Күршеләре Рябовтың совет кешеләренә хас булмаған алама ҡылыҡтарын ғәфү итмәне.* («Совет Башҡ.»). *Алама ағаста ботаҡ йыуан* (мәҡәл). *Ошо яман эштең кешеләргә күпме зыян итеүе хаҡында бер генә миҫал килтерәйек* («Совет Башҡ.»). *Яҡшы кеше йөрөгән ерен маҡтап йөрөр, яман кеше йөрөгән ерен үртәп йөрөр* (мәҡәл). *Эт яманы буранда ҡоторор* (әйтем).

2) Әхлаҡи йәһәттән бик түбән, тупаҫ. *Насар һүҙ. Алама ҡылыҡ. Яман эш. Әшәке хәбәр. — Һүҙҙең шәбе, насары ҡалай булалыр инде,— тине Ғәффә инәй* (С. Агиш). *Яmegandың ауыҙынан сыҡҡанды эт ашамаҫ* (мәҡәл). *Йомош һоратыусы минең әсәйгә ҡарата әшәке һүҙҙәр яуҙыра торғайны* (Ҡ. Мәргән).

— Насарлыҡ, насарайыу, хөртәйеү, аламалыҡ, аламаланыу, яманлыҡ, яманайыу, әшәкелек, әшәкеләнеү.

2. **Насар, хөрт** *һөйл.*, **мөшкөл.** Борсолоу тыуҙырған, йүне, рәте булмаған (эш-хәл тураһында). **Мөшкөл** — бик насар, ауыр. *Ун бишләп быҙау бер төптән сирләй бит, үлә-нитә ҡалһалар, бик насар булыр* (Б. Бикбай).— *Ну, туғандар, эш хөрт. Ҡараңғы ныҡыраҡ төшөп, ил аяғы әҙерәк һил булыу менән, беҙгә Айҙаҡайға һыҙырға кәрәк* (Һ. Дәүләтшина). *Ғәрәпсәгә биреп күңел уҡыһам да, белмәнем тел, инде хәлем булды мөшкөл — мин иламай, кем илаһын?* (М. Ғафури). *Шулай ҙа артабан ҡаршылыҡ күрһәтеү файҙаһыҙ. Уларҙы әҙерләгән хөкүмәт ғәскәрҙәре төрлө яҡтан ҡыҫып килә. Бик йонсоғандар, төрлө яҡтан эш мөшкөл, өмөт өҙөлгән* (Ғ. Ибраһимов).

— Насарайыу, хөртәйеү, мөшкөлләнеү.

**Нисек, ҡалай, ҡайһылай, ни рәүешле.** 1) Эш-хәлдең башҡарылыу рәүешен, шартын, торошон белергә теләгәндә ҡул-

ланыла (һорау алмашы). **Нисек** күберәк ҡулланыла. *Эй тыуған ер! Нисек йәшәр инем, аңламаһам һинең телеңде?!* (Н. Нәжми). *Ниңә һин дә иртәрәк тормайһың, малай, эштәрең нисек, өлгәшеү ҡалай?* (Ҡ. Ҡинйәбулатова). *Һаулыҡ нисек, ҡайһылай килеп еттегеҙ?*

2) Эш-хәлдең башҡарылыу рәүешен белдергәндә ҡулланыла (рәүеш мәғәнәһендә). — *Иптәштәр, әле генә Нәғим ҡорҙаш беҙгә үҙебеҙҙең сәсеү кампанияһының ҡалай уҙыуы тураһында һөйләне* (Һ. Дәүләтшина). *Был хәлдән нисек ҡотолоу юлын табырға кәрәк.*

3) Һоҡланыу, ғәжәпләнеүҙе белдергәндә ҡулланыла (рәүеш мәғәнәһендә). *Һеҙ нисек үҙгәргәнһегеҙ! Ҡалай матур ҡыҙ булып үҫкән, ә! Ҡайһылай ҙа килешә үҙенә күлдәге!*

— Нисектер, нисек тә, ҡалай ҙа, ҡайһылай ҙа.

**Ниәт, теләк, сама.** Ниҙер эшләр, ҡылыр өсөн алдан ҡоролған уй. **Ниәт** күберәк ҡулланыла. **Теләк, сама** үҙ-ара яҡынырaҡ. *Эш башы — ниәт* (әйтем). *Уларҙың торорға самалары юҡ, үлек кеүек йоҡлайҙар* (Д. Юлтый).

— Ниәтләү, ниәтләнеү, теләү, самалау.

**Нығыныу, төпләнеү.** Бер ергә ныҡлап урынлашыу. *Н ы ғ ы н ы п йәшәү. Т ө п л ә н е п эшләү. Мозафар ныҡлап эшләү, төпләнеп донъя көтөү уйы менән ҡайтты* (Н. Мусин).

**Ныҡлап, ең һыҙғанып, бил быуып, бил яҙмай, баш ҡалҡытмай, тәгәрәп йөрөп** *һөйл.* Бик ныҡ бирелеп, ихласлап, күңел һалып (эшкә тотоноу, эш башҡарыу). **Ең һыҙғанып, бил быуып** — ихласлап (эшкә тотоноу һәм башлау). **Тәгәрәп йөрөп** — бик тырышып, һыпырылып (эшләп йөрөү). *Иртәгә үк ныҡлап эшкә башларға кәрәк* (Б. Бикбай). *Айбулат ревком председателе вазифаһын ең һыҙғанып алып бара* (Һ. Дәүләтшина). *Ҙур һәм яуаплы бурысты үтәү өсөн, шағир билде биштән быуып эшләргә, артабан эҙләнергә, халыҡ тормошон зирәклек менән өйрәнергә тейеш* (Ә. Хәкимов). *Бабайҙарыбыҙ, әсәйҙәребеҙ һәм апайҙарыбыҙ, дошманды еңеү өсөн, бил яҙмай эшләй* («Совет Башҡ.»). *Тәүге көндәрҙән үк Мәҙинә тыуған колхозының баҫыуҙарында ең һыҙғанып, тәгәрәп йөрөп эшләй башланы* («Совет Башҡ.»).

**Ныҡышыу, серәшеү** *һөйл.* Нимәгәлер ирешергә ныҡ тырышыу. *Күп ныҡышты Әлибай, бик оҙаҡ тырышты. Бер нисә көн үткәс кенә, Ҡинйә уларға барып ҡайтырға риза булды* (Ғ. Ибраһимов). *Күрергә н ы ҡ ы ш ы у. Барам тип н ы ҡ ы ш ы у. Үтеп инмәк булып сафҡа, аҙмы серәште һуң ситтәр.*

— Ныҡыш, ныҡымыш; серәш.

**Нәжәгәй, ялағай.** Күк күкрәмәй ялтыраған йәшен (ғәҙәттә, көҙгә табанырaҡ була). *Төндәрен лапаҫ башында күктәге Ҡош Юлын, яңы эҙ ҡалдырып атылған йондоҙҙарҙы, иген бешкәндә, нәжәгәй уйнауын ҡарап ятҡан ваҡыттарҙы онотоpлоҡмо?* (Р. Низамов). *Ауыр ҡара болот ҡаплауҙан ҡараңғылана төшкән көн ҡапыл әллә ҡылыс нурынан, әллә ялағай ялтырауынан яҡтырғандай була* (Ә. Вахитов).

**Нәҫел, нәсәп, тоҡом, ара, ырыу, зат, тамыр** *күсм.*, **ором** *иҫк.* Бер ата-бабанан килгән ҡан-ҡәрҙәш быуындар. **Нәҫел** киңерәк ҡулланылышлы, күбеһе менән парлаша ала. *Нәҫел-нәсәп. Нәҫел-ырыу. Нәҫел тартыу.* **Тоҡом** кешегә ҡарата һирәгерәк ҡулланыла. *Т о ҡ о м д о ҡоротоу.* **Ырыу** ҡанҡәрҙәшлектең бик борондан килеүен белдерә. *Ы р ы у башы. Зат-ырыу.* **Зат, тамыр, ором** һирәгерәк ҡулланыла. *Шулай була тороп та әҙәм балалары беҙҙең нәҫелебеҙҙе ҡоротоpға тырышалар* (М. Ғафури).

*Барығыҙҙы ла ҡырып бөтөрәм дә үҙем ошонда бөтә нәҫелырыуым менән күсеп киләм,— ти икән дейеү* (әкиәттән). *Нәҫелен белмәгән нәсәпһеҙ булыр* (мәҡәл). *Ә уң яғында ултырғаны — әсәһе — тип нәҫел-нәсәп, ырыу, банкылағы текущий счеттарын һөйләп алып китте* (И. Насыри). *Бабсаҡ батыр ана шулай донъя ҡалды, ҡатыны Йәмилә, бөтә ырыу етем ҡалды* («Бабсаҡ менән Күсәк»). *Затым, ырыуым менән ярлы булып, бай тупһаһында үҫтем, ата-олатам байҙар, түрәләргә үс булдылар* (Т. Хәйбуллин). *Тамыр тамырға тарта* (мәҡәл).

— Нәҫелле, нәҫелдәш, нәсәпле, тоҡомло, ырыулы, ырыуҙаш, затлы, тамырлы.

1. **Нәтижә, һөҙөмтә.** Эш-хәлдән, ҡылыҡтан килеп сыҡҡан ҡаҙаныш. *Көтөп алған шатлыҡтың нәтижәһе яңы килеп етте* (М. Ғафури). *Ул йыйылыш һәм һуңғы һөйләшеүҙәр һөҙөмтәһен һөйләп алып китте* (И. Насыри).

2. **Нәтижә, һөҙөмтә, һығымта, йомғаҡ.** Нимәнең дә булһа йыйып ҡына әйтелгән йөкмәткеһе, төп фекер. *Нәтижә яһау. Нәтижәгә килеү. Һөҙөмтә яһау. Һығымта сығарыу. Йомғаҡ яһау. ОРС-тың партия, профсоюз һәм комсомол ойошмалары ла цех мөдире Ирина Корнееваны етәксе урында ҡалдырыу мөмкин түгел, тигән һығымтаға килделәр* («Совет Башҡ.»).

— Йомғаҡлау.

**Нәүбәт, сират, киҙеү** *иҫк.* Нимер башҡарыу өсөн бер-бер артлы теҙелгән төркөм. *Үҙ нәүбәтендә. Сиратҡа баҫыу. Сират көтөү. Сиратҡа тороу. Сираттан тыш. Комиссия илгә батыр һайлай, нәүбәт көтә бик күп егеттәр* (Ҡ. Даян). *Был ваҡытта «Ҡарсыға» менән «Рекс» үҙ сираттарын көтөп торалар ине инде* («Совет Башҡ.»). [*Сырым батыр*] *Үҙе күсте әйләнеп-байҡап, һаҡсыларҙы, мал бағыусыларҙы ҡат-ҡат киҫәтте: «Киҙеү менән генә серем итергә, шылт иткән тауышҡа ла егеттәрҙе уятырға!»* (Ә. Хәкимов).

# О

**Оҙаҡ, оҙайлы, оҙон.** Дауамлы ваҡыт эсендә булған; тиҙҙең киреһе. **Оҙаҡ** киңерәк мәғәнәле, рәүеш булып та ҡулланыла. *Оҙаҡ йылдар. Оҙаҡ йөрөү. Оҙаҡ йәшәү.* **Оҙайлы** — күп дауам иткән. **Оҙон** — оҙаҡҡа һуҙылған, дауамлы; **оҙаҡ** һүҙенә яҡын. *Оҙон ҡыш. Оҙон тойолоу. Оҙон итеп һөйләү. Баштан уҡ әйтеп ҡуйырға кәрәк, ошо мәҡәләне яҙырға тип ҡулға ҡәләм алғансы, бик оҙаҡ һәм етди уйландыҡ* («Совет Башҡ.»). *Бигерәк тиҙ күнектең һин миңә. Хатта яңы кейемгә лә оҙағыраҡ күнегәләр* (М. Кәрим). *Һүҙем бөттө, яҙмам инде, бәлки етер, оҙон булһа, тыңлаусылар ялҡып бөтөр* («Бабсаҡ менән Күсәк»). *Тепловоздың оҙайлы гудогы яңы совет тимер юлы тыуыуы хаҡында һөрән ҡалды* («Ленинсы»). *Һоҡланам һәм хатта көнләшәм мин оҙон ғүмеренә ҡайындың* (С. Ҡулибай).

**Оҙон, һонтор.** Буйға ғәҙәттәгенән артыҡ; ҡыҫҡаның киреһе. **Оҙон** киң ҡулланылышлы: тәбиғәт күренештәренә, кешегә һәм уның тән өлөштәренә ҡарата әйтелә. *Оҙон ағас. Оҙон сәс. Оҙон керпек.* **Һонтор** кәүҙәгә ҡарата ғына әйтелә (көлөү, мыҫҡыллау төҫмөрө бар). *Оҙон ҡара ҡалын сәсенең ике йыуан толомо һике өҫтөнә бөгөлөп, әйләнеп ятты* (Һ. Дәүләтшина). *Ике һаҡсы: береһе*

*оҙон буйлы, йәш сырайлы, оҙон керпекле..* (Ғ. Сәләм). *Тәкбировтың өҫ-башы, ҡиәфәте тәү ҡарашҡа ысынлап та бик хәтәр: ..резина итек ҡуңысына һалып кейгән салбары уның былай ҙа һонтор кәүҙәһен тағы ла оҙонораҡ күрһәтә* (Н. Мусин).

— Оҙонайыу, оҙонлоҡ, һонторланыу.

**Ойоҡбаш, башалтай.** Ҡыҫҡа ҡуңыслы ойоҡ. *О й о ҡ б а ш бәйләү. О й о ҡ б а ш кейеү. Б а ш а л т а й алыу. Йөн б а ш а л т а й.*

**Ойпаланыу, бөтәрләнеү, борсаланыу, әүһәләнеү, тәпәрләнеү** *һөйл.* Йомарланып, бөкләнеп таушалыу (кейемгә ҡарата). **Ойпаланыу** күберәк ҡулланыла. *Әскәт ҡырылып, ойпаланып бөткән пинжәге менән салбарын һыйпаклап көн уҙғара* (Н. Мусин).

**Оран, ылаң** *иҫк.* Яуға саҡырған ауаз. **Оран** йышыраҡ ҡулланыла. *О р а н биреү. О р а н һалыу. Яу ораны һалды Ватан, ат атланды батырҙар — ил дошмандарын ҡыйратып, яуҙан еңеп ҡайтырҙар* (Р. Ниғмәти). *Шунан: «Алпамыша үлгән икән»,— тигән ылаң һалалар* (әкиәттән).

**Осҡон, сатҡы.** 1) Янып торған йәки ныҡ ҡыҙған нәмәләрҙән сәсрәгән ут бөрсөктәре. **Осҡон** йышыраҡ ҡулланыла. *О с ҡ о н сәсрәү. О с ҡ о н таралыу. Йәшен с а т ҡ ы һ ы. Элек улар осҡон рәүешендә генә инеләр. Ә күҙҙәрен йомғандан һуң, ҙур-ҙур шарҙарға әйләнделәр* (И. Насыри). *Ут тирәһендә күп уралған кешенең итәгенә сатҡы төшөүсән..* (Б. Бикбай).

2) *күсм.* Ниҙең дә булһа асыҡ билгеһе. *Күңелгә о с ҡ о н һалыу. Өмөт с а т ҡ ы л а р ы. Революция о с ҡ о н о. О с ҡ о н д а н ялҡын ҡабыныу.*

**Осрау, юлығыу, тарыу, тап булыу.** 1) Барғанда, хәрәкәт иткәндә кемгә йәки нимәгәлер тура килеү. **Осрау** киңерәк мәғәнәле: яҡындан күреү, күҙгә салыныу, барып сығыу. **Юлығыу** — юл ыңғайы барып сығыу. *Йылғаға ю л ы ғ ы у.* **Тарыу** — көтмәгәндә, ҡапылыраҡ тура килеү. **Тап булыу** — юлда осрау, ҡаршыға килеп сығыу. *Таштан ташҡа бәрелеп, шаулап ағып ятҡан йылғаға осраныҡ* (М. Ғафури). *Ул шулай ашығып ҡына барғанда, юлда уға уҡытыусыһы Хәҙисә менән Алмаҡай осранылар* (Һ. Дәүләтшина). *Бара ла ғына торғас та, ай, Юлғотто дуҫ-иштәренә барып юлыҡты* (халыҡ йырынан). *Айыуҙан ҡурҡҡан — бүрегә тарыған* (мәҡәл).

2) Ниндәй ҙә булһа хәлгә дусар булыу. Был мәғәнәлә **тап булыу** һирәгерәк ҡулланыла, башҡалары бер сама. *Уңышһыҙлыҡҡа о с р а у. Бәләгә т а р ы у. Ауырлыҡҡа ю л ы ғ ы у. Бүленгән бүрегә юлыҡҡан* (мәҡәл). [*Йәмһүр:*] *һеҙгә ошо килеүемдә бәләгә юлығып бөттөм, юлда өс йыланға тап булдым* (әкиәттән). *Дошмандан ҡурҡҡан үлемгә тарыған* (мәҡәл).

— Осрашыу, осратыу.

**Отҡо, өшкәмә** *һөйл.*, **ҡотҡо.** Кеше араһын боҙоу өсөн аҫтыртын таратылған насар һүҙ. **Отҡо** күберәк ҡулланыла. *О т ҡ о таратыу. О т ҡ о ебәреү. О т ҡ о һалыу. Ө ш к ә м ә биреү. Ҡ о т ҡ о таратыу.*

**Офоҡ, горизонт.** Ер менән күк тоташҡан һымаҡ булып торған һыҙыҡ. **Горизонт** күберәк рәсми телмәрҙә термин итеп ҡулланыла. *Киң о ф о ҡ. О ф о ҡ күтәрелеү. Г о р и з о н т һыҙығы. Офоҡ сиктәре киңәйеп, тын алырға иркенәйеп ҡалды* (Р. Низамов). *Юғарыға үрләгән һайын горизонт киңәйә бара.*

**Оялыу, тартыныу, оятһыныу, баҙау.** Уңайһыҙлыҡ тойоу, яңылышыуҙан ҡурҡып, үҙеңдә ҡыйыуһыҙ тотоу. **Оялыу** киңерәк ҡулланылышлы: уңайһыҙланыу һәм оятсылыҡ кисереү.

**Тартыныу, оятһыныу** — бер ни тиклем оялып тороу, ҡыймау, баҙмау. *Оялмаған тик тормаҫ* (әйтем). *Мин, бик ҡурҡып һәм оялып, самауыр артынараҡ барып ултырҙым* (М. Ғафури). *Иптәш скульптор! Тартынмайса йөрәк серҙәреңде әйт әле: ниндәй уйҙар һиндә урғылдылар, төҙөгәндә Ильич һәйкәлен* (Х. Кәрим).

— Оялтыу, оялсан, оялмайса.

**Оятһыҙ, битһеҙ, хаяһыҙ, һөмһөҙ, эт тиреһен битенә ҡаплаған** *һөйл.*, **күн бит** *һөйл.*, **сарыҡ бит** *һөйл.* Насар, әҙәпһеҙ эш-ҡылыҡтан тартына белмәгән (яманлау һүҙҙәре). **Оятһыҙ** киң мәғәнәле: эш-ҡылыҡҡа, кешенең һүҙенә ҡарата әйтелә. *Оятһыҙ кеше. Оятһыҙ ҡараш. Оятһыҙ һүҙ.* **Битһеҙ** — эш-ҡылығында оят белмәгән (кеше). **Хаяһыҙ** — һүҙе, теле әҙәпһеҙ. **Һөмһөҙ** — тартына белмәгән, үтә оятһыҙ (эш-ҡылығы менән). *Оялмайынса, балаһы атаһына өйрәтһен, имеш. Был ниндәй оятһыҙ баш-баштаҡлыҡ* (Һ. Дәүләтшина). *Битһеҙ бүркен баҫмаҫ* (әйтем). *Ғүмәр һүҙен һала алмай ғына килгәйнем, бындай хаяһыҙ икәнеңде белһәм — аяҡ та атламаған булыр инем* (Н. Ҡәрип). *Исмаһам, һөмһөҙ Ҡәтүк тә тик кенә тора белмәй* (Ә. Бикчәнтәев). [*Мәғфүрә:*] — *Был Имайҙың ғына эше булыр. Бер тин тиһәң, иманын һата, йөҙө ҡара, күн бит* (Һ. Дәүләтшина).

# Ө

**Өгөт, дим, өгөт-нәсихәт.** Нимәгә булһа ла өндәп бирелгән кәңәш, саҡырыу һүҙе. **Өгөт** йышыраҡ ҡулланыла. *Өгөт биреү. Өгөттө тыңлау.* **Өгөт-нәсихәт** — һәр төрлө кәңәш, дим (кире баһа менән дә ҡулланыла). *Өгөт-нәсихәт уҡыу.* «*Әгәр һеҙҙе студенттар ярата торған булһалар..*» *тип башлаған өгөтө иҫенә төштө уның* (С. Агиш). *Үкһеҙгә өгөт бирмә, урын бир* (мәҡәл). *Һеҙҙең сиркәү өгөт-нәсихәт яҙмаларында шулай тип яҙыла түгелме һуң?* («Совет Башҡ.»). *Иҫәргә дим бир, ике ҡулына суҡмар бир* (әйтем).

— Өгөтләү, димләү.

**Өҙлөкһөҙ, туҡтауһыҙ.** Туҡтап, өҙөлөп тормаған. *Төньяҡтан өҙлөкһөҙ һалҡын ел иҫте* (Д. Исламов). [*Вәлетдиндең*] *ике яңағы буйлап күҙ йәштәре туҡтауһыҙ аға бирҙе* (М. Ҡәрим).

**Өйрөлөү, әйләнеү.** Бер нөктә тирәләй хәрәкәт итеү. *Орсоҡ өйрөлөү. Тәгәрмәс әйләнеү. Туп тәгәрләп киткән дә бер ерҙә зырлап өйрөлә башлаған* (әкиәттән).

1. **Өйрәнеү, күнегеү.** Ниндәйҙер эш-ҡылыҡты, күп ҡабатлап, ғәҙәткә индереү. **Өйрәнеү** йышыраҡ ҡулланыла. *Иртә торорға өйрәнеү. Саңғыла йөрөргә өйрәнеү. Был тиклем киској ҡалып ултырып өйрәнмәгән Һыуһылыу әбей улының былай оҙаҡ ултырыуына йыбанып бөттө* (Н. Мусин). *..Атай мәрхүм һунарсы була торғайны. Мин йәштән үк уның һөнәренә күнегә килдем* (С. Ҡулибай). *Бәхеткә лә, рәхәткә лә микән әллә кеше бик тиҙ күнегә..* (Н. Нәжми). [*Батша:*] *Мин алтын ҡалаҡ менән ашап өйрәнгәнмен* (әкиәттән).

2. **Өйрәнеү, күнегеү, әйләшеү, эҫенеү.** Бер хәлгә йәки кешегә ылығып, үҙләшеп китеү. **Өйрәнеү, күнегеү** үҙ-ара яҡынырак; **эҫенеү, әйләшеү** кешегә ҡарата әйтелә. *Тимер, башын баҫып, буш урам буйынса һаман бара бирә. Ул — тынлыҡҡа өйрәнмәгән кеше* (Б. Бикбай). *Шаулы ҡала тормошо-*

*на өйрәнгән немец ҡыҙы аҡрынлап күнекте* (И. Насыри). [*Туҡмуйыҡ*] *..һөйкөмлө Миңлекәйгә тәүге көндәрҙән үк эйәләшеп өлгөргәйне* (Ғ. Ибраһимов). [*Аҫылбикә*] *..ҡайныһы менән ҡәйнәһенә генә түгел, бөтә ҡәрҙәштәренә, бала-сағаларына, күрше-күләненә тиҙ генә эҫенеп китте* (Ғ. Ибраһимов).

1. **Өлгө, үрнәк, миҫал.** Үҙенә ҡабул итеп, артынан эйәрерлек эш-хәл, ҡылыҡ. **Өлгө** күберәк ҡулланыла, уға **үрнәк** нығыраҡ яҡын. *Ө л г ө алыу. Ө л г ө булыу. Ү р н ә к алыу. Ү р н ә к күрһәтеү. Ҡыйыулыҡ ө л г ө һ ө.* **Миҫал** һирәгерәк ҡулланыла. *М и ҫ а л булыу. М и ҫ а л итеү. Бер атыуҙа йәнһеҙ иттем ҡыпсаҡ батырын, күрһәттем тип, өлгө булыр эшемде мин* («Бабсаҡ менән Ҡуҫәк»). *Сәсән-шағирҙарҙан өлгө алып, ижадымды шулай башланым* (Б. Вәлид). *Өлкәндәргә ҡайҙа ла хөрмәт күрһәт, киленсәк; кеселәргә ҡайҙа ла үрнәк күрһәт, киленсәк* (халыҡ йырынан). *Эшлекле миҫалға ҡарар, эшлекһеҙ мыҫҡалға ҡарар* (мәҡәл).

— Өлгөлө.

2. **Өлгө, үрнәк.** Ҡейемдең беселешен, машинаның төҙөлөшөн күрһәткән һыҙым. **Өлгө** күберәк ҡулланыла. *Өс тигәс тә ни яман? Өлгөһөҙ бескән тун яман. Дүрт тигәс тә ни яман? Дәртһеҙ булһаң,— шул яман* (әйтем).

**Өлгәш, өлгөрөш.** Уҡыусыларҙың уҡытылған фәнде үҙләштереү кимәле. *Ө л г ә ш түбәнәйеү. Ө л г ө р ө ш күтәрелеү. Ө л г ә ш т е тикшереү. Тәрбиәүи эш һөҙөмтәләре уҡыусыларҙың юғары өлгәшендә лә күренде* («Башҡ. уҡ.»). *Республика буйынса тотош алғанда студенттарҙың өлгөрөшө насар түгел* («Совет Башҡ.»).

1. **Өлгөрөү, етешеү, етеү, етлегеү.** Бала йәшенән сығыу, балиғ булыу. *А ҡ ъ я л, тирә-яҡты таң ҡалдырып, ай үҫәһен көн үҫкән, йыл үҫәһен ай үҫкән, ете йәшендә батыр булып етешкән* (әкиәттән). *Мин хәҙер беләм, кеше ғүмерендә шундай минуттар ҙа була, ул бына шулай ҡапыл өлгөрөү һәм бәхет кисерә* (Н. Ғәлимов). *Хәлим хәҙер еткән егет.*

2. **Өлгөрөү, етешеү.** Бар эшкә ҡул етеү. *Иҙән һәм һике таҡталарын алып китергә өлгөргән* (Б. Бикбай). *Зимфира конторала ла эшләй, өй эшенә лә етешә, уңған* (Ғ. Лоҡманов). *Өлгөр Аҫылбикә бөтә эшкә етеште* (Ғ. Ибраһимов).

**Өлтөрәү, өҙәләнеү, бер артына бер алдына сығыу.** Берәй кешегә ихлас хәстәрлек күрһәтеү. **Өлтөрәү** йышыраҡ ҡулланыла. *Ө л т ө р ә п тороу. Ө л т ө р ә п йөрөү. Әхтәмде күреү менән, еңгәһе өҙәләнеп табын әҙерләй башланы* (Ә. Хәкимов).

**Өләшеү, таратыу.** Ҡүмәк кешегә бүлгеләп биреп сығыу. **Өләшеү** — өлөшләп, тигеҙ итеп биреү. *Хәйер ө л ә ш е ү.* **Таратыу** — тигеҙ бүлмәйенсә биреп сығыу. *А ҡ с а т а р а т ы у. Хат т а р а т ы у. Өләшә белмәгән өлөшһөҙ ҡалған* (мәҡәл). — *Бөтә малды таратып бөтөргәме? — тип һаранланды Арыҫлан* (Ғ. Ибраһимов). *Бер минут эсендә минең тараҡтан ҡағыҙҙар менән бөтә халыҡтың ҡулы сыбарланғайны* (Д. Юлтый).

**Өндәү, саҡырыу, әйҙәү.** Берәй эшкә, ҡылыҡҡа димләү. **Өндәү** йышыраҡ ҡулланыла, ғәҙәттә, һүҙ менән димләүҙе белдерә. *Көрәшкә ө н д ә ү.* **Саҡырыу** — өндәүгә яҡын. *Ярышҡа с а ҡ ы р ы у.* **Әйҙәү** — арттан эйәртеү (юғары стилгә тартым). *Яуға ә й ҙ ә ү. Беҙҙе ул большевиктарға ҡаршы һөйләргә өндәне* (С. Агиш). *Аслыҡтан, тән язаһынан яфа сигеп, Һабрау элеккенән яман Урҙаның тетмәһен тетә, башҡорттарҙы берҙәмлеккә өндәй, Еҙүкәйгә ҡаршы ҡуя* (Ә. Хәкимов). *Салауат батыр ир ине, менгән*

*аты кир ине, яуға саҡырып өндәгәндә, тауыштары күр ине* (халыҡ йырынан). *Мин генә тик алыҫ балалыҡтан әллә ниңә һине һағынам, гүйә, әйтеп әйҙәйһең гел тыуған яғыма* (Р. Ғарипов). *Салт аяҙ күк йөҙө, уның асыҡ зәңгәрлеге күңелде үҙенә әйҙәп тора* (Н. Мусин).

— Өндәмә.

**Өндәшеү, мөрәжәғәт итеү, һүҙ ҡушыу, һүҙ ҡатыу.** Үтенес белдереп йәки иғтибарын йәлеп итергә була кемгәлер һүҙ әйтеү. **Өндәшеү** — һүҙ менән үтенес әйтеү йә кемделер ҡаратыу. **Мөрәжәғәт итеү** — күберәк рәсми өндәшеү. **Һүҙ ҡушыу** — һөйләшеү ниәте менән һүҙ башлау; **һүҙ ҡатыу** ҙа шул уҡ мәғәнәлә, ләкин һирәгерәк ҡулланыла. *Ул, Айбулатты күреү менән йылмайып, асыҡ өндәште* (Һ. Дәүләтшина). *Әле ул, Ирназаровтар артынан ғәжәпләнеп тороп ҡалғас, өйҙәгеләргә бындай һорау менән мөрәжәғәт итте..* (И. Насыри). *Хатта шул тиклемгә барып етте, Исхаков аҡрын-аҡрын милиционерҙарға һүҙ ҡуша, уларҙың йөрәктәрен аулай башла*[*ны*].. (И. Насыри). *Их, шунда миңә — айырым бер үҙемә бер йылы һүҙ генә ҡатһасы!* (Ф. Исәнғолов). *Юҡ, хәҙер һин үкһеп илаһаң да, һис кем килеп инде йыуатмаҫ. Һиҙгер ҡулы менән сәсең һыйпап, сеү, балам, тип инде һүҙ ҡатмаҫ* (Р. Ғарипов).

**Өндәшмәү, тешегеү, ләм-мим** [**тип әйтмәү**], **телде йотоу** *һөйл.*, **телде ҡыҫыу (тешләү)** *һөйл.*, **телде тыйыу, ауыҙҙы ябыу** *һөйл.*, **ауыҙҙы тығыу** *һөйл.*, *тупаҫ,* **ауыҙ йомоу, теште ҡыҫыу, ауыҙға һыу уртлау, ауыҙға йөҙөк йәшереү (ҡабыу).** Бер һүҙ ҙә әйтмәү, өн сығармау. **Өндәшмәү** киң ҡулланылышлы. Өндәшмәй ҡалыу. **Тешегеү** — кәзәләнеп, үсегеп өндәшмәү. *Т е ш е г е п йөрөү.* **Телде йотоу** — юрый өндәшмәү. **Телде тыйыу, телде ҡыҫыу (тешләү), ауыҙҙы йомоу** — хәбәрҙе таратмау өсөн, сер йәшереп һөйләшмәү. **Ауыҙҙы ябыу, ауыҙҙы тығыу** — ирекһеҙҙән, тыйғандан өндәшмәҫ булыу. *Гөлйөҙөм өндәшмәне. Йомағужа һорауын ҡабатланы, яуап булманы* (Һ. Дәүләтшина). *Ниңә, ваҡыт, болоттарға төрөнөп, туҡтап ҡалдың былай тешегеп?* (Р. Бикбаев). *Бикбай ҙа, Мәхмүтов та «ләм-мим» тип бер ауыҙ ҙа һүҙ әйтмәнеләр* (И. Насыри). *Ниңә телеңде йоттоң, һинән дөрөҫмө-юҡмы, тип һорайым да баһа!* (Ә. Бикчәнтәев). *Башта Холодовский беҙҙән, минән, Исламдан, Ҡирштан, тел ҡыҫыу вәғәҙәһен алды, унан һуң ғына уҡытыусы Гайдан карауат аҫтындағы тауыҡ ояһынан берике брошюра сығарҙы* (А. Таһиров). *«Яҙығына күрә язаһы»,— тип ул* [*Әсғәт*] *телен дә тыймаңы, йәбер-йоборға ла иҫе китмәне* (М. Кәрим). *Әллә мин һеҙгә ҡарауылсымы? — тип ҡоторондо Ҡыҙылтеш һәм Борис-Кипаристы этеп ебәрҙе.— Әгәр ҙә телеңде тыя белмәһәң..* (Ә. Бикчәнтәев). [*Сынбулатов*].. *әрәм-шәрәм ителгән иген хаҡында ауыҙ йомдо* (М. Тажи). *Ағас адвокаттың ауыҙы тиҙ тығылды* (Б. Бикбай). *Батша бындай хаҡ һүҙгә бер ни ҙә әйтә алмай, ауыҙ йомоп ҡала* (экиәттән). *Пристав ..ауыҙына йөҙөк йәшергән шикелле, һүҙенән туҡтаны* (Һ. Дәүләтшина). *Бисәм ..сәнскеһен ит өҫтөнә атып бәрә лә миңә боролоп ҡарай: «Ниңә ауыҙыңа һыу уртлап тораһың? Һинең өсөн кем сауҙалашырға тейеш?»* (Й. Солтанов). *Суфия — Суфия түгел, әллә ниндәй, йөҙөк ҡапҡанмы ни ауыҙына?..* (Б. Бикбай).

— Өндәшмәҫ, тешеккән.

**Өҫтөн, юғары.** Баһаһы, дәрәжәһе йәки бер сифаты менән башҡаларҙан артыҡ. *Мәмләкәт даны бөтә нәмәнән өҫтөн* (Ә. Хәкимов).

**Өшөү туңыу, шыҡырайыу, ҡатыу** *күсм.*, **теш тешкә теймәү.**

һалҡындан интегеү. **Өшөү** киңерәк мәғәнәле: бөтә йән эйәләренә, тереклектәргә ҡарата әйтелә. **Туңыу** — ныҡ өшөү. Үҫемлектәргә ҡарата икеһе лә әйтелә. *Картуф* *ө ш ө ү*. *Кәбеҫтә т у ң ы у* һ. б. **Шыҡырайыу** — нығ өшөп, ҡуҙғала алмай башлау (кешегә, хайуандарға ҡарата ғына әйтелә). **Ҡатыу** — нығ өшөү (кешегә ҡарата ғына ҡулланыла). *Аяҡтарына шырау ҡаҙалып бөттө, өшөнө* (Б. Бикбай). *Көн буйы һалҡын ҡар өҫтөндә туңабыҙ беҙ тамам* (Д. Юлтый). *Берәү туңып һикерә, берәү туйып һикерә* (әйтем). *Ҡайҙа бүре, айыу тартһынмы, һаҙға батһындармы, тибендә йөрөгәндә шыҡырайып туңһындармы* (Б. Бикбай). *Бында һыуыҡта ни тип тораһың, катаһың бит.*

— Өшөмтәл, өшөксән.

# П

**Пар, иш, уҙаҡ, ҡуш.** 1) *с.* Бер бөтөн булған, бер төрлө (ике нәмә). **Пар** — бер бөтөндөң ике өлөшө һәм оҡшаш. *П а р күгәрсен. П а р сынаяҡ. П а р итек. Бер п а р ойоҡ.* **Иш** — бер тиң, бер төрлө. **Уҙаҡ** кешегә ҡарата ғына әйтелә. **Ҡуш** — бергә ҡушылып торған ике нәмә. *Ҡ у ш ҡайын. Икенсе, өсөнсө ауылдарҙан үҙе, пар аттар ебәртеп, ҡунаҡтар алдыртты* (Һ. Дәүләтшина). *Бер пар күлдәк-салбарын һалдат тоғона һалып йөкмәне лә ауылдан сығып китте* (Н. Мусин). *Мин уларҙы белә инем, «Эй матур пар!» — тиә инем күргән сағымда* (Н. Нәжми). *Яманға яман иш була* (мәҡәл). *Иш-ише менән, ҡуш-ҡушы менән* (мәҡәл). *Быларҙы күрһәтеү өсөн саҡырыла торған ауыл ҡунаҡтары егерме уҙаҡ булғанға күрә, ике тәкәнең дә ите ҡаҙанға һалынды* (Ғ. Дәүләтшин).

2) *и.* Икенең тиң һыңары. *Ә йыр тынғас, ағас ботағына осоп килеп ҡунды һандуғас, канаттарын елпеп-елпеп ҡаға, үҙенә тиң пары табылғас* (Ф. Мөхәмәтйәнов). *Иштуғаны иш булa алмай, күңелем төштө Хәйҙәргә. Инде, еңгәм, ни эшләйем һуң, берәү ҙә юҡ һайларға* (халыҡ йырынан). *Иламаны ҡара хәбәр килгәс, һаман көттө уҙаҡ артисын* (Р. Ғарипов).

**Политика, сәйәсәт** *иҫк.* Дәүләт идаралығы, партия йәки берәй ижтимағи төркөм алып барған йүнәлешле эшмәкәрлек. *Тышҡы п о л и т и к а. Эске п о л и т и к а. Ядро һуғышы ҡурҡынысын бөтөрөү — СССР политикаһының иң мөһим йүнәлеше* («Совет Башҡ.»). *Аҡҡужа менән Юлыш ошо сәйәсәтте үткәрергә тырышты ла* (Ә. Хәкимов). *Берәүҙәре өсөн был — төштәрҙә генә күрә торған хыял, икенселәрҙең үҙ алдарына ҡуйылған маҡсат, ә батша тәхетенең ҙур сәйәсәте ине* (Ғ. Ибраһимов).

# Р

**Реаль, ғәмәли.** Тормошта булған һәм тормошҡа ашыуы мөмкин булған. **Реаль** йышыраҡ ҡулланыла. *Р е а л ь шарт. Р е а л ь хәл. Р е а л ь политика. Р е а л ь план. Ғ ә м ә л и хәл. ..Тыныслыҡ өсөн социалистик илдәрҙең берлектәге көрәше империализмдың политик һәм хәрби ҡапма-ҡаршы тороуға, ҡыҙыу ҡоралланыуҙы көсәйтергә алған курсына реаль альтернативаны тәшкил итә* («Совет Башҡ.»). *Был мәсьәле*

[*яңы әлеп*] *йөмһүриәттәрҙә нык ҡуҙғатылып, ғәмәли эштәргә барып бәйләнде* (Т. Йәнәби).

— Реаллек, реалләшеү; ғәмәлләшеү.

**Ришүәт, бирем, йолом** *иҫк.*, **взятка.** Файҙа күреү маҡсаты менән бирелгән нәмә йәки аҡса. **Ришүәт** рәсми телмәрҙә ҡулланыла. *Ришүәт алыу. Ришүәт биреү.* **Бирем, взятка** һөйләү теленә хас. *Ул заманДарҙа түрәләр ришүәт биргән кешене ҙур бәләләрҙән ҡотҡара торған булған* («Совет Башҡ.»). *Старшина үҙе һөйләшеп, йолом һоноп ҡайтҡан да элеккесә ҡуҡырайып йөрөй бирә* (F. Ибраһимов).

— Ришүәтсе, ришүәтселек.

**Рәнйеү, зәхмәт**. Мифик заттар тарафынан ҡағыла торған ҡаты ауырыу (дини хөрәфәт буйынса). *Рәнйеү ҡағылыу. Зәхмәт тейеү. Зәхмәт һуғылыу.* [*Хәсби ҡарсыҡ Гөльямалға:*] *— Зәхмәт ҡағылғандыр. Сәләй мулланың тыны бик килешә тиҙәр, өшкөртөп ҡарарға кәрәк* (А. Ҡарнай).

**Рәсми, официаль.** Хөкүмәт һәм урындағы идара тарафынан сығарылған. **Рәсми** күберәк ҡулланыла. *Рәсми белдереү. Рәсми төҫ биреү. Официаль мөрәжәғәт. Fаффан Тәкбирович һәр эшкә лә мөмкин тиклем рәсми төҫ бирергә тырыша торған кеше* (Н. Мусин).

— Рәсмилек, рәсмиләштереү, официаллек, официалләштереү.

**Рәт, йүн.** Эш-хәлдең уңайы, ғәмәлгә ярашлылығы. *Эштең рәте китте. Һаулыҡтың йүне юҡ. Бында ла бер ҙә йүн булманы. Ҡинйәнең үҙенең аңлауынса ла унда* [*Бохарға*] *барып уҡыуҙың рәте булмаҫ төҫлө ине* (F. Ибраһимов). *Бында ла булмаҫ рәт бик: хөкөм итмәй тик тора, һис кеше белмәй телен, «тарт-тарт» тип тик ҡысҡыра* (М. Fафури).

— Рәтле, рәтһеҙ; йүнле.

**Рәтләү, яйлау, көйләү, юлға һалыу, тәртипкә һалыу, рәткә һалыу.** Билдәле бер тәртиптә ойоштороу, тейешле йүнәлешкә ебәреү (эш-хәлде, тормошто). **Рәтләү** — тәртипле хәлгә килтереү, һәйбәтләп ебәреү. **Юлға һалыу** — насарайған эш-хәлде көйләү. ..*Өҫтәл артына ултырып, кисә ял иткән көндә йыйылған эштәрен рәтләргә уйланы ул* (И. Насыри). *Петр Беренсе хөкөм һөргән саҡта уҡ, әле Рәсәй империяһының ..сауҙа эштәрен яйлау хаҡындағы уйҙар бик нык көсәйгәйне* (F. Ибраһимов). *Ҡайҙа, ҡайһы эшендә генә һүрәнлек һиҙһә, шул урынға ынтылды, юлға һалды* (Һ. Дәүләтшина). *Ул, эштән ҡайтҡандың һуңында, арлы-бирле генә ҡапҡыланы ла ячейканың эшен тәртипкә һалып килеү уйы менән почтаға китте* (И. Насыри). *Беҙҙең брсиҙәтел, Тимер ҡусты Янһаров, бик отҡор егет, эште китап буйынса һәләк тиҙ рәткә һалып ебәрер* (Б. Бикбай).

# С

**Сабыу** *күсм.*, **ҡыуыу** *күсм.* Ниҙер хәстәрләп, йүнләп йөрөү. *Дан артынан сабыу. Мал артынан ҡыуыу. Донъя артынан сабыу.*

**Сайҡалыу, тирбәлеү, бәүелеү, тулҡыныу.** Талғын ғына һелкенеү. **Сайҡалыу** — күберәк ҡулланыла. **Тирбәлеү** — шиғри телгә тартым һүҙ. **Бәүелеү** — нимәнеңдер өҫтөндә йәки аҫыулы килеш һелкенеү. **Тулҡыныу** — тигеҙ хәрәкәттәр яһап бәүелеү. *Кипаристың ҡыйғас ҡолағаһе тулҡындарға ятып сайҡала* (F. Сәләм). *Болот тетрәп, ямғыр түгелгән, күктәге ай хатта сайҡалған* (М. Кәрим). *Егерме бишләп аласыҡ әкрен генә тирбәлә* (F. Fүмәр).

*Йә Иҙелдең тулҡынында аҡсарлаҡтар булып тирбәлдек, аҡ сабаҡтар булып йөҙҙөк, тауҙар түбәһенә үрләнек* (М. Кәрим). *Турыҡайҙың кешнәүенә яуап булғандай, әкрен генә иҫкән йылы ел менән йылҡы көтөүсеһенең моңло йыры бәүелә-бәүелә Вәхиткә килеп етте* (С. Ильясов). *Ул пианино алдында күбәләк кеүек һелкенә, тирбәлә, уның нескә, нәфис бармаҡтары клавиатура өҫтөндә аҡ ебәк кеүек бәүеләләр, тулҡыналар..* (Д. Юлтый).

**Сайҡау, салыҡлау, һелкеү.** Башты аҫтан өҫкә ҡарай йә ян-яҡҡа һелкетеү. **Салыҡлау** — тар ҡулланылышлы: атҡа ҡарата ғына әйтелә. **Һелкеү** — киҫкенерәк хәрәкәт менән ҡағыу. *Яубаҫар, клубҡа барырға сыҡҡас, атлаған һайын төнгө бурандың эҙҙәрен күреп, башын сайҡап ҡуйғылаåны* (Р. Низамов). *Ала ат өйгә ҡайтырға тигәндә, тағы ла ихласыраҡ, башын салыҡлай-салыҡлай юртып китте* (Һ. Дәүләтшина). *Ул тора һалып, башын һелкеп ебәреүгә, Мәскәй, бот-сат килеп, стенаға барып бәрелгән* (әкиәттән).

**Саҡ, көскә, көс-хәл менән, мең бәлә менән.** Ҙур ауырлыҡ менән, күп көс, тырышлыҡ һалып (ниҙер башҡарыу, еңеп сығыу). **Саҡ** йышыраҡ ҡулланыла. **Көс-хәл менән** — саҡ-саҡ, ҙур көс һалып. **Мең бәлә менән** — ҙур ауырлыҡ, көс менән, ҡурҡыныстар аша. *Ҡара тауыҡ алан-йолан ҡаранды ла, әйтерһең, сит баҡсала йөрөгәнен саҡ аңлап, ҡытҡылдай-ҡытҡылдай үҙҙәре яғына китте* (Р. Низамов). *Полковник ярҙамында көскә икенсе ҡатҡа күтәрелгән ҡарт генерал хәл йыйырға туҡталды* (Я. Хамматов). *Көс-хәл менән ауыҙынан хәлһеҙ генә тауыш сыҡҡан. Саҡ-саҡ ҡына көндө күргән, ҡарағанға тар ярыҡтан* (Р. Бикбаев). *Миша Фролов уларҙы, көскә тәртипкә саҡырып, шаулауҙан туҡтатты* (Һ. Дәүләтшина). *Төн уртаһында Ғәйшә абыстай, үҙенең аҡтыҡ сиккә еткәнен белеп, Мәрйәмде көс-хәл менән уятты. Саҡ-саҡ өндәшеп, сыра яндырырға ҡушты* (М. Ғафури). *Яҡын тирәләге халыҡтар килеп, мең бәлә менән сығарып алғандар* (И. Насыри).

**Салыу, бысаҡлау.** Малды, ҡош-ҡортто, йәнлекте үткер ҡорал менән һуйыу. **Салыу** йышыраҡ ҡулланыла. *Ҡорбан с а л ы у. С а л ы п биреү. С а л ы у ; һөйәге. Һуғым малын бысаҡ менән салыу йәки бысаҡлау башҡорттарға, һис шикһеҙ, һуңыраҡ ингән бер йола булып һанала* (Ж. Ҡейекбаев).

**Самалау, шәйләү.** Уй менән ниҙер ниәтләү. [*Максим менән Ҡинйәнең*] *..һөйләшеүен шәйләп, шунда уҡ Зәбир мулла килеп етте* (Ғ. Ибраһимов). *Күркә ялҡау шәйләне яуап бирмәй ҡасырға* (Ғ. Сәләм).

**Саң, туҙан.** Һауала осоп йөрөгән һәм әйбер өҫтөнә ҡуна торған ваҡ сүп-сар. Тиң мәғәнәле синонимдар, һүҙбәйләнештәрҙә ҡулланылыштары менән бербереһенән айырылалар. *С а ң болото. С а ң уйнатыу. Т у ҙ а н туҙҙырыу. С а ң-томан. Әнерҙә генә ямғыр яуып үткәнлектән, юлда саң эҙҙәре юҡ* (Т. Йәнәби). *Саң-туҙан булмаһын өсөн, форточка һәм ишектәрҙе асып, стеналағы саңды һепертке менән һеперә торорға кәрәк* («Совет Башҡ.»). *Урамдарың буйлап сабып үтте, йәйен — туҙан, ҡыш ҡар туҙҙырып, баллы кәрәҙ кеүек шаҙра малай, үҫтем һиндә гармун һыҙҙырып* (Н. Нәжми).

— Саңлы, саңланыу; туҙанлы, туҙанлау.

**Саңғы, ҡалтағай.** Ҡарҙа батмаҫ өсөн, аяҡҡа эләктереп шыуа торған ҡорамал. **Саңғы** телдә актив ҡулланыла. *С а ң ғ ы л а йөрөү. С а ң ғ ы ярышы.* **Ҡалтағай** — ҡулдан эшләнгән киң саңғы. «*Төлкө!*» — *тип уйланы ул һәм, күҙ асып йомғансы йыйынып, саңғыһын кейҙе лә*

*шул яҡҡа йомолдо* (Ғ. Әмири). *Ҡарҙы ниҙер киң итеп ышыртып үткән. Уның өҫтөндә ҡалтағай юлы беленеп ята* (Н. Мусин).

— Саңғысы.

**Сапҡын, сабарман** *иҫк.* Йомош менән саптырыла торған һыбайлы. **Сапҡын** йышыраҡ ҡулланыла. *Сапҡын ебәреү. Сапҡын итеү. Таң алдынан килеүсе кеше, ысынлап та, Михаил ебәргән сапҡын булып сыҡты* (Я. Хамматов).

**Сараһыҙҙан, ирекһеҙҙән.** Башҡаса мөмкин булмағандан (ниҙер ҡылыу). *Сараһыҙҙан китеү. Ирекһеҙҙән ҡайтыу.*

**Сарға, сарылдаҡ.** Сарылдап торған, ғауғасыл (ҡатын). *Айһай, сарға бисә Нәсимә еңгә* (З. Биишева).

**Сауҙа, алыш-биреш.** Тауар алышыу һәм һатыу эше. **Сауҙа** йышыраҡ ҡулланыла, термин булып та йөрөй. *Сауҙа министерствоһы. Эске сауҙа.* **Алыш-биреш** ваҡ сауҙа бәйләнештәрен дә белдерә. *Алыш-биреш итеү. Совет сауҙаһы әле яңы ғына моронлап килә* (Ғ. Дәүләтшин). *Ырымбур яғынан ҡыуып килтергән аттар был яҡта урлаған аттар менән ошо урманда алыш-биреш ителгән* («Совет Башҡ.»). *Миллионер Әхмәровта бер йылдан артығыраҡ эшләп, русса икмәк-тоҙлоҡ өйрәнеп, ауылға ҡайтҡан саҡта Гәрәй сауҙа, алыш-биреш өлкәһендә тамам шымарып, ҡылйыуғысҡа әйләнеп өлгөргәйне инде* (Б. Бикбай).

— Сауҙагәр, сауҙалау, сауҙалашыу.

1. **Саф, таҙа, пак, керһеҙ, аҡ** *күсм.* 1) Бысраҡ, кер, туҙан ҡатышмаған, болғанмаған. **Саф** киңерәк ҡулланыла. *Саф ҡар. Саф һауа. Саф һыулы.* **Таҙа** — керһеҙ, сүп-сарһыҙ. *Таҙа һауа. Таҙа кейем. Таҙа бүлмә.* Башҡалары һирәгерәк ҡулланыла; **керһеҙ, аҡ** кейемгә ҡарата ғына әйтелә. *Керһеҙ күлдәк. Ҡулъяулығы аҡ көйө әле. Шунан унда Ҡулуртлар көмөштәй саф диңгеҙ һыуын уртлап алған* (әкиәттән). *Сәңгелдәк янында ҡырҡ ямаулы, ләкин барынса таҙа күлдәк кейгән, ете йәштәр самалы һылыуҡай Өмөтҡужаны бәүетеп ултыра* (Ғ. Дәүләтшин). *Ҡулың аҡ булһа, йөҙөң пак* (әйтем). *Нурҙа, һыуҙа мин ҡойондом, күрмәнем пак өҫтәрем* (Д. Юлтый).

2) *күсм.* Әхлаҡи яҡтан боҙолмаған, намыҫына тап төшмәгән. **Саф** күберәк ҡулланыла. *Саф выждан. Саф күңел. Саф мөхәббәт. Саф тойғо.* **Таҙа, пак, аҡ, керһеҙ** был мәғәнәлә үҙ-ара яҡыныраҡ. *Пак күңел. Аҡ күңел. Тойғоларым ғорур һәм саф минең, һалдаттыҡы кеүек аҙымдар* (Х. Ғиләжев). *Уның йөрәге әллә нindәй бер юғары, таҙа, саф дуҫлыҡ, мәңгелек ышаныс менән тулҡынып тибә ине* (Һ. Дәүләтшина). .. *Үҙенең «һөттән аҡ, һыуҙан пак» икәнлегенә ышандырып ҡуйҙы ул* (Һ. Дәүләтшина). *Ҡулы керһеҙҙең күңеле көр* (мәҡәл).

— Сафланыу, сафлыҡ; таҙарыу, таҙалыҡ; пакланыу, паклыҡ; керһеҙлек, ағарыу, аҡлыҡ.

2. **Саф, таҙа.** Башҡа нәмә ҡатышмаған, бер төрлөнән генә торған. *Саф алтын. Саф көмөш. Таҙа спирт. Таҙа бензин.*

3. **Саф, рәт** *и.* Бер тәртип менән теҙелгән кешеләр төркөмө. **Саф** китап теленә тартым. *Сафҡа баҫыу. Сафтан сығыу. Саф-саф теҙелеү. Кавалеристар сафы. Рәткә теҙелеү. Рәт-рәт булып тороу.*

**Сигенеү, сигеү.** 1) Торған ерҙән артҡа табан китеү һәм билгән урынды ташлап киргә ҡайтыу. *Дошман сигенде. Ат һуҡкан ыңғайға кире сигенде* (Д. Юлтый). *Аптыраҡ менән Бикбулат, юл биреп, артҡараҡ сикте* (Ғ. Ибраһимов).

2) *күсм.* Ниәтләгән эштән, уй-фекерҙән кире ҡайтыу. Был мәғәнәлә **ҡайтауыллау** һүҙе лә ҡулланыла. *Уйҙан с и г е н е ү. Теләктән кире с и г е ү.*

**Сисеү, һалыу.** Өҫтәге кейемһалымдан бушаныу. **Сисеү** йышыраҡ ҡулланыла. *Сөйөмбикә, эш кейемен һалып, өҫтөнә сәскәле йоҡа ғына күлдәген кейгән..* (Ш. Янбаев).

**Сит, ят.** Үҙ түгел; таныш, яҡын булмаған (ер-һыу, кеше, нәмә һ. б.). **Сит** йышыраҡ ҡулланыла. *С и т ил. С и т ер. С и т итеү. С и т күреү. С и т кеше.* **Ят** һүҙендә «таныш булмаған» төҫмөрө көслөрәк. *Я т ер. Я т кеше. Әсәһе үлеп, берике ай торғас, атаһы уларҙың өйҙәренә бер сит ҡатын алып ҡайтты* (М. Ғафури). *Илашыуға үҙ яҡшы, һыйлашыуға сит яҡшы* (мәҡәл). *Ҡурәһең, ҡыҙ тыңламаны аҡылын, ят егеткә өҙөлөп әйтте: «Яҡыным!»* (М. Кәрим). *Зөһрәгә ауыр, ул үҙен был семьяла сит кеше итеп тоя башланы. Нисә уйлаһаң да хәҙер уны артыҡ, ят күрәләр* (Н. Мусин).

**Солох, ярашыу.** Үҙ-ара һуғышты йәки һуғыш хәлен туҡтатыу тураһында килешеү. **Солох** рәсми телмәргә хас. *С о л о х төҙөү. С о л о х иғлан итеү. Ҡиләсәктә беҙ дуҫ йәшәрбеҙ, мә ҡулымды — солох. Рауил, «солох» һүҙенең «тыныслыҡ» тигән мәғәнәһенә төшөнөп етмәһә лә, бик ҡыуанды* (Б. Бикбай). *Дошман менән ваҡытлыса ярашыу төҙөлдө.*

**Сөй, ҡаҙау, ҡаҙаҡ.** Берәй нәмәне тоттороу, беркетеү өсөн ҡағыла торған бер башы осло нәмә. Үҙ-ара бик яҡындар. *Арба с ө й ө. Итек с ө й ө. Ваҡ ҡ а ҙ а у. Эре ҡ а ҙ а у. Тимер ҡ а ҙ а у. Ағас ҡ а ҙ а ҡ. Гөлйөҙөм, әсәләренән ҡайтып, көпөһөн сисеп сөйгә элде* (Һ. Дәүләтшина). *Уныһын үҙем унанбынан ғына ҡалай менән ситләп ҡуйғайным да, ваҡ ҡаҙау булмағас ни, йүнләп нығытып булманы* (Ғ. Дәүләтшин). *Тырышҡан ташҡа ҡаҙаҡ ҡаҡҡан* (мәҡәл).

— Сөйләү, ҡаҙаҡлау.

**Сөмөкәй, сөмбәй, сөңгөл.** Йылға, күлдең соҡорло тәрән урыны. *Һыу инергә был йылғаның ярҙары уңай икән, иң тәрән тигән сөмбәйе муйындан ғына икән* (С. Ҡулибай). *Бер мәл һине сөңгөл ялмап алды, ҡолас ташлап һыуҙа йөҙгәндә* (Р. Ғарипов).

**Сүгеү, сүгәләү, сүкәйеү.** Аяҡты бөгөп түбәнәйеү. *Ергә с ү г е ү. С ү г ә л ә п ултырыу. Үлән араһында с ү к ә й е ү.*

**Сыҙам(лы), сабыр, түҙем(ле).** Төрлө ауыр хәлгә түҙеүсән, сыҙай алған. **Сыҙам(лы)** киңерәк мәғәнәле. **Сабыр** — тыныс, ауырыраҡ холоҡло (тәбиғәттән килгән сифат). *С а б ы р булыу. С а б ы р итеү.* **Түҙем(ле)** күберәк ныҡлы ихтыярҙы белдерә. *Ни ҡәҙәре сыҙамлы булһа ла, кеше аслыҡ кеүек ҙур эштәргә түҙә алмай* (М. Ғафури). *Ә Плахиндың ҡатыны, киреһенсә, сабыр холоҡло, тыныс ғәҙәтле* («Совет Башҡ.»). *Был ерҙәрҙә көрәш алып бара түҙемле кешеләр..* (Ғ. Сәләм).

— Сыҙамлыҡ, сабырлыҡ, түҙемлелек.

**Сыуаҡ, аяҙ, ҡояшлы.** Болот, томан һ. б. булмаған (көн). **Сыуаҡ, аяҙ** көнгә лә, төнгә лә әйтелә; **ҡояшлы** көн генә була. *Ҡ о я ш л ы иртә. Ҡ о я ш л ы көн. Ә хәҙергә: йәй, сыуаҡ көн, хуш еҫ. Буров менән Морат урамда* (Р. Ниғмәти). *Ҡояшлы көн тыуа ауылда, асыла алда киң, яҡты юл* (Б. Бикбай).

— Сыуаҡлау, сыуағайыу, аяҙыу, ҡояшлау.

**Сырамытыу, төҫмөрләү.** Төҫбашына ҡарап, танығандай итеү, оҡшатыу. *Сырамытып ҡуйғайным да, атайың булған икән.*

**Сәп, мәрәй** *иҫк.*, **нишан** *иҫк.* Тоҫҡап атыр, бәрер өсөн ҡуйылған билдә. *Яҙыҡ атмам уҡты, сәпкә тоҫҡап, тик ҡолаҡ һал һәр бер һүҙемә* (Р. Ғарипов).

**Сәнсеү, ҡаҙау, беҙәү.** Осло нәмә йәки ҡорал менән төртөү, тишеп индереү. **Сәнсеү** — көс һалып йә иплә́п кенә төртөү. *Балыҡ с ә н с е ү. Энә менән с ә н с е ү.* **Ҡаҙау** — көс менән сәнсеү. **Беҙәү** — тура сәнсеү. [*Егет*] *Иң һуңғыһын һөңгө менән сәнсеп үлтергән дә, атына менеп алып, иҫән ҡалғандарының артынан ҡыуып киткән, ти* (әкиәттән). *Ҡарт, унығыны ҡарап тормай, һикереп төшә лә, билендәге хәнйәрен тартып алып, кеңәзгә үтәнәнүтә ҡаҙай* (И. Насыри). *Ҡалдырҙым да бысағымды ерҙә беҙәп, күк яғына йүгереп киттем уҡты эҙләп* (әкиәттән).

# Т

**Табан, ҡарай.** 1) Төбәү килештәге һүҙҙәр менән эш-хәрәкәттең йүнәлешен белдерә. **Табан** күберәк ҡулланыла. *Ҡалаға т а б а н. Тауға т а б а н. Әләгер булһа, шул өс тоҙаҡ та етер әле, тип уйлап, егет ауылына табан ыңғайлай* (әкиәттән). *Ул тәмле төш күреп ятҡанда, йондоҙ ҡашҡа Арал диңгеҙе яғына ҡарай сабып сыға ла китә* (әкиәттән).

2) Төбәү килештәге һүҙҙәр менән эш-хәрәкәттең билдәле бер ваҡытҡа яҡынлағанын белдерә. *Байрамға ҡ а р а й. Төнгә ҡ а р а й. Таңға т а б а н. Ҡышҡа т а б а н. Ҡискә табан беҙ, ауыл Советынан сығып, тағы ла Ҡоҙашевтың өйөнә килдек* («Совет Башҡ.»).

**Тағы, йәнә, ҡабат, ҡайтанан, яңынан, киренән.** Булған эш-хәлдә, хәрәкәттә ҡабатлап. **Тағы, йәнә** йышыраҡ ҡулланыла. *Уның асылмауын белә тороп, тағы тарттым, ныҡ көсәнеп тарттым* (Д. Юлтый). *Яр буйындағы маяҡтар, төн килһә, балҡый йәнә* (Ә. Вәли). *Ләкин тауыш ҡабат ҡабатланманы* (И. Насыри). [*Эрнестың күршеһе*] *..Йәнә бүлмәләш күршеһенә ҡарап, һаман да өндәшеүсе булмағас, кире ишек яғына китте* (Р. Солтангәрәев). *Һин ҡарғаның йомортҡаһын алып ятҡан арала, мин һинең башыңдан кәпәсеңде һалдырҙым да, түбәтәйеңде алғас, ҡайтанан кейҙереп ҡуйҙым* (Ғ. Әмири). *Бер-бер йомош бармы әллә яңынан..*

**Тайпылыу, тайшаныу, янтайыу, ялтаныу.** Хәрәкәт иткән йүнәлештән ситкә китеү. **Тайпылыу** киңерәк ҡулланылышлы. *Юлдан т а й п ы л ы у.* **Тайшаныу** — бәрелеүҙән һаҡланып ситкә ынтылыу. **Янтайыу, ялтаныу** — ҡапыл боролоп ситкә китеү. *Йәш ҡатындың яланғас аҡ беләктәре уның беләгенә ҡағылды, ..Морат, уңайһыҙланып, ситкә тайпылды* (Ф. Иҫәнғолов). *Ҡуҙы яурын, ҡорос ботаҡ, бәлдәгәндә — тайшанып, ҡырын китһәң, һиңә хурлыҡ* («Бабсаҡ менән Күсәк»). *Тоҙ тейәгән ылауҙар ашығып, уға юл бирҙе, йәйәүле йөргөнсөләр ҡурҡышып ситкә тайшанды* (Ғ. Ибраһимов). *Былай ҙа ярһыған ат өйрөлөп китте. Ҡапыл янтайҙы* (Я. Хамматов). *Николай Махов, иптәше артынан эйәреү өсөн,.. ҡапыл ситкә ялтанды* («Ленинсы»).

— Тайпылыш.

**Талаш, тартыш, ыҙғыш, дау, ғауға, янъял.** Кешеләр араһында килеп сыҡҡан шаулы әрләш. **Талаш** — һүҙ менән хурлаш, яманлаш. *Т а л а ш сығыу.* **Дау, ғауға** — ниҙер талап итеүҙән сыҡҡан ҙур талаш. *Д а у ҡуптарыу.* **Янъял** — бик ҡаты ғауға. *Я н ъ я л ҡалҡыу. Иң тәүҙә уларҙың Исламғәле ҡарт менән ҙур талаштары булып алды* (И. Насыри). *Моратша үҙе старшина ваҡытта был ыҙғышты ташламаясаҡ* (Һ. Дәүләтшина). *Дау баш ярыр, тура һүҙ таш ярыр* (мәҡәл). *Көндәрҙең береһендә Миңле-*

*камал ғауға ҡуптара* («Совет Башҡ.»). *Фекер ҡылһаҡ — һәр йәһәттән ҡулыбыҙ буш, үҙ-ара яҙғыш, янъял беҙгә мах-сус* (М. Ғафури). *Был һүҙҙән ҡүбәйҙе — шау ҙа шыу, ул талашыу, бәйләнешеү, үҙ-ара янъял да дау* (Ш. Бабич). *Бына шул арҡала ике арала янъял сығып китеп, тауыҡ осорға өйрәнә алмай ҡалған да инде* (әкиәттән).

— Талашыу, тартышыу; даулашыу, даулау, даусыл; ғауғалашыу, ғауғасыл; янъялсы, янъяллашыу.

**Талымлау, ашҡа төрләнеү, аш көҫәү**. Һайланып ашау, төрлө аш теләү. *Сәсәктән ауырығаны бирле йүнләп ашағаны юҡ, аҙыҡ талымлап тик йөрөй* (М. Тажи). *Ошо арала ашҡа төрләнеп торам әле, нимәнең касафатылыр инде.*

**Тамаҡ саҡырыу, осколоҡ тотоу, сиҡаҡлау.** Тамаҡ төбөнән ирекһеҙҙән сиҡ-сиҡ иткән тауыш сығыу. *Тамаҡ саҡыра, мине кем иҫенә төшөрә икән* (һөйл. теленән). [*Мазһар*].. *осколоҡ тотоуҙан сиҡаҡлай башлай* (С. Ҡулибай). [*Әптерәй*].. *осколоҡ тота-тота һөйләнә башланы* (М. Тажи).

**Тамамлау, бөтөрөү, теүәлләү, ослау** *ҡүсм.*, **осона сығыу.** Эш-хәлде, һүҙҙе һ. б. аҙағына еткереп ҡуйыу, тамам итеү. **Тамамлау** киңерәк ҡулланылышлы: эште, уҡыуҙы, һүҙҙе һ. б. **Теүәлләү** эшкә ҡарата ғына әйтелә. **Ослау, осона сығыу** — эште, һүҙҙе, уйҙы аҙағына еткереп ҡуйыу. *Хәҙер ул урта мәктәпте тамамлаған ҡыҙ* (Р. Низамов). *Архитектор һүҙгә аҙ ҡатнаша: «Тамамлайһы бар,— ти,— был эште»* (Ғ. Сәләм). *Ауылда мәктәп бөтөргәс, уҡырға тип ҡалаға оҙаттылар* (Ф. Иҫәнғолов). *Үткән көҙ ураҡты теүәлләгәс, колхоз мине курортҡа ебәрҙе* (Д. Исламов). *Ғәбдеян һүҙен ослай алманы, ишектә лесничий күренде* (Н. Мусин). *Йәнтимер урынһыҙ шаярыуға яуап бирергә теләмәне, башлаған һүҙемде үҙем осланым* (С. Агиш). *«Йософ китабы» көйө менән көйләйем мин, үҙ хәлемде һеҙҙәргә һөйләйем мин, бәйетемде ослай алмай йөҙәйем мин..* (бәйеттән). *Уйҙарының осона сыҡмайынса, ул* [*Ҡасим*] *утар яғына кире боролдо* (Н. Мусин).

**Тамыу, тамсылау.** Тамсы-тамсы булып төшөү. *Ирегән ҡар һыуҙары һарай түбәһенән тамсылап тора ине* (М. Тажи).

**Танау, морон, томшоҡ** *һөйл.* Еҫ һиҙеү һәм үпкәгә һауа үткәреү органы. Ҡулланылышта айырылалар. **Танау** киң ҡулланыла, стиль йәһәтенән битараф термин булып йөрөй. *Т а н а у ауырыуҙары. Т а н а у өнө. Осло т а н а у. Ҡылыс т а н а у.* **Морон, томшоҡ** кешегә ҡарата әйтелгәндә, кәмһетеү, хурлау төҫмөрөн бирә, түбән стилгә ҡарай. *М о р о н о һуҙылыу. М о р о н о кипмәгән. Т о м ш о ғ о н а ҡундырыу. Маҡтансыҡтың мороно күктә* (мәҡәл). *Уның* [*Сурағолдоң*] *төҫтәре ағарҙы, асыуҙары ҡабарҙы, ғәрлегенә түҙә алманы, ҡаршыһында баҫып торған Хәби байҙың томшоғона ғына туралап бирҙе ултыртты* (Т. Хәйбуллин).

**Таныш, белеш, таныш-белеш, бараман** *иҫк.*, **күҙ күргән** *ҡүсм.* Электән белгән, ҡатнашып, аралашып йәшәгән кеше. **Таныш** — яҡындан белгән кеше. **Белеш** ғәҙәттә рустар араһынан булған, аралышып, алыш-биреш итеп йәшәгән кеше. **Күҙ күргән** — бер аҙ таныш булған кеше. **Бараман** — ҡатышып йәшәгән яҡын кеше. *Бер күргән — белеш, ике күргән — таныш* (мәҡәл). *Ул бер көндө минең бер танышым менән килә ине* (М. Ғафури). *Үҙенең таныш-белештәренә йөрөп һыйланды* (И. Насыри). *Район тирәһендә күҙ күргән кешеләрегеҙ барҙыр бит, һөйләшеп ҡарағыҙ* (һөйл. теленән). *Бараманың бар булһа, барһаң, айран эсерһең* (мәҡәл).

**Таң беленеү, таң һыҙылыу, таң ҡыйылыу.** Таң ата башлау, офоҡ сите яҡтыра башлау. *Таң беленә башлағанда, Татырлы йылғаға барып инде* (И. Ҡөҫәпҡол). *Таң һыҙылып барғанда, гермaндар туп аталыр* (бәйеттән). *Шулай таң ҡыйылғансы серләшәбеҙ* (Ф. Иҫәнғолов).

**Тапма, биҙгәк.** Бер өшөтөп, бер ҡыҙҙырып ауырыта торған йоғошло сир. *Т а п м а табыу. Т а п м а тотоу. Б и ҙ г ә к серәкәйе. Б и ҙ г ә к тотоу. Тән, тапма тотҡандағы кеүек, дер-дер ҡалтырай* (Б. Хәсән).

1. **Тар, ҡыҫыҡ, ҡыҫынҡы, ҡыҫтау, кипсәү** *һөйл.* Ҡыҫып, тартып торған; киң түгел (кейемгә ҡарата). **Тар** йышыраҡ ҡулланыла. *Т а р итек. Т а р күлдәк. Ҡамсат бүркең бар икән, башҡайыңа тар икән* (халыҡ йырынан). *Итегең ҡыҫыҡ булһа, донъя киңлегенән ни файҙа?* (мәҡәл). *Ҡыҫынҡы быйма аяҡты өйкәй.*

2. **Тар, ҡыҫан, ҡыҫыҡ, ҡыҫынҡы, ҡыҫтау, тығыҙ.** 1) Киң булмаған, иркен түгел (урынер, бина эсе). **Тар** күберәк ҡулланыла. *Т а р бүлмә. Т а р ялан. Тар ләхеттән тар окопта әжәлдәр көтөп ятам* (бәйеттән). *Унда, сәғәт һайын тип әйтерлек, кеше өҫтөнә кеше тейәп пароход һәм поездар китеп тора. Шулай ҙа баҫыр урын юҡ, тығыҙ* (И. Насыри).

2) Бик аҙ, наҡыҫ (ваҡыт төшөнсәһендә). *Ваҡыт бик т а р. Ҡ ы ҫ а н ваҡыт. Ҡуйынындағы икмәген алып, атынан төшмәй генә ашарға керешкән был. Ваҡыты ҡыҫтау булған, ти, батшаның* (М. Кәрим).

**Тас, тап, хәс, нәк** *к.* 1) Оҡшатыуҙы, сағыштырыуҙы көсәйтәләр. *Т а п әсәһе. Т а с һин инде. Н ә к үҙе. Х ә с ағаһы. Тора малай нәк атаһы һымаҡ, елкәһендә — һуғыш нужаһы* (Р. Ғарипов).

2) Эш-хәлдең, ваҡыттың теүәллеген, тәңгәллеген көсәйтәләр. Был мәғәнәлә **хәс** ҡулланылмай. *Т а п төш ваҡыты. Т а с яртыһы. Н ә к шул мәл.*

**Таҫыл, оҫол, һол.** Эш-йомошто тиҙ генә һәм оҫта башҡарыу һәләтлеге, сослоҡ. **Һол** һирәгерәк ҡулланыла. *Заповедник ойошторолғанға тиклем, Атаһулла тирә-яҡта дан тотҡан һунарсы ине. Аяуһыҙлыҡ менән дә, таһыл яғынан да алдырҙы ул* (Н. Мусин). *Ҡөс бар, оҫол юҡ һиндә, эштең ибен белмәй тотонаһың* (һөйл. теленән).

**Тауыш, шау-шыу, сыр-сыу, ғауға.** Күмәк ҡысҡырыш. **Тауыш** күберәк ҡулланыла. *Т а у ы ш ҡубыу. Т а у ы ш китеү.* **Сыр-сыу** — әсе тауыш сығарып ҡысҡырыш. **Ғауға** — оло тауыш. *..Бөтәһе лә клуб мөдире итеп Ҡинжабайҙы билдәләүгә ҡаршы төштө. Тауыш ҡупты* («Совет Башҡ.»). *Йәш кенәз карауатынан ғына булһа ла үҙ теләген ғәмәлгә ашырыу планын ҡорғанда, ҡалалағы шау-шыу, паника артҡандан-артты* (И. Насыри). *Әллә Морат, дошман һиҙмәһен тип, шау-шыуһыҙ киләме?* (Ә. Хәкимов). *Ҡатындар араһында сыр-сыу, тауыш күтәрелә* (Һ. Дәүләтшина). *Элегерәк бында көн дә тәртип боҙола, тауыш-ғауға күтәрелә ине* («Совет Башҡ.»).

1. **Тейеү, ҡағылыу, ороноу, йоғоноу.** 1) Ҡулды тейҙереү, ҡул менән тотоноу, алыу. **Тейеү, ҡағылыу** йышыраҡ ҡулланыла. *Иҫкегә ҡулың тейһә, иҫең китер* (мәҡәл). *Тик ҡағылмам умырзаяға, былай ҙа бит ғүмере — заяға!* (Р. Ғарипов). *Ҡарын иле ҡара Туҡай атҡа орона алмай. Хәбәр алып барырға ҡурҡып, илап ҡайтып китә* («Алпамыша»). *Унда [һарайҙа] алтындар, гәүһәрҙәр, яҡуттар ятыр. Уларға ла ронма* (әкиәттән). *Мораҙым битләүендәге бөтә сәскәләр, емеш-еләктәр ҡул менән оронор, ауыҙ менән татып ҡарар өсөн түгел, ә күҙеңде ҡыҙыҡтырыр өсөн генә үҫәләр кеүек*

*тойола* (Ш. Янбаев). *Ҡеше нәмәһенә һорауһыҙ йоғонмағыҙ* (Ғ. Минһажев).

2) Ниндәйҙер насар шауҡымы булыу, зыян итеү. [*Драгун*] *Балаларҙың малай-шалайҙар ғына икәнен күреп, бер аҙ тынысланды, ахыры. Теймәйҙәр, ҡағылмайҙар* (Ғ. Ибраһимов). *Йыры менән ул* [*Рауза*] *кешеләрҙең асыҡ йәрәхәттәренә ҡағылды, ахыры* (М. Кәрим). [*Ҡинйәбикә:*] — *Ҡуйсы-ҡуйсы, ҡәйнәм. Юҡты ҡаҙыйһың да ултыраһың, ул һиңә оронмай, зыяны теймәй..* (Һ. Дәүләтшина). *Был каруан башсыларына юлбасарҙар ҙа йоғонмай, ти* (Ғ. Ибраһимов).

2. **Тейеү, һуғылыу.** Юл ыңғайы инеп сығыу, туҡтап китеү. *Ҡырымдан ҡайтышлай, ҡарар өсөн Сәйҙелдәр тейҙеләр Мәскәүгә* (Ғ. Сәләм). *Улар уянғансы, Арыҫлан бер ыңғай улының йәйләүенә лә һуғылырға уйланы* (Ғ. Ибраһимов).

3. **Тейеү, эләгеү, тамыу** *кусм.*, **тәтеү** *һөйл.*, **һәбеү** *һөйл.* Көтмәгәндә ҡулға төшөү, карамаҡҡа инеү (байлыҡ, мал, аҡса һ. б.). **Тейеү** йышыраҡ ҡулланыла. **Эләгеү** — өлөшкә төшөү. **Тәтеү, һәбеү** — күберәк кире мәғәнәлә, мыҫҡыллау төҫмөрө менән әйтелә. *Һурпа теймәҫ ерҙән ҡалъя өмөт итмә* (мәҡәл). *Мине урам яҡ өйгә — ҡунаҡ өйөнә һалдылар. Башҡа ваҡытта бында инеп йөрөү ҙә һирәк эләгә беҙгә* (М. Кәрим). *Июндә уларға эш хаҡы аҙыраҡ тейҙе, икенсе квартал планын арттырып үтәй алмағас, өмөтләнеп йөрөгән премия ла тәтемәне* (Н. Мусин). *Был юлы кәсеп уңманы, артыҡ аҡса һәпмәне* (һөйл. теленән). *Ундай кейәү йәш ҡыҙҙарға ла бик үк тәтеп бармай* (Д. Исламов).

**Телмәр, сығыш, нотоҡ** *иҫк.* Йыйылышта һөйләгән һүҙ. *Т е л м ә р тотоу. Т е л м ә р һөйләү. С ы ғ ы ш яһау. С ы ғ ы ш ҡ а әҙерләнеү. Н о т о ҡ һөйләү. Н о т о ҡ уҡыу.*

**Теләнеү, һораныу, хәйерселәү.** Хәйер һорау. *Ир үтә алмаған йылға юҡ, теләнмәгән мулла юҡ* (мәҡәл). *Шәрифтең фекере теләнеп булһа ла, ..өйҙә яткан астарҙы туйҙырыу ине* (М. Ғафури).

— Теләнсе, хәйерсе.

**Тере, йәнле.** Йәне бар, үлмәгән. **Йәнле** һүҙенең терминологик ҡулланышы ла бар. *Й ә н л е мөйөш. Й ә н л е тәбиғәт. Иркәбайҙың тере бүре алып ҡайтҡанын, әлбиттә, иң элек малайҙар күреп алдылар һәм бөтә ауылға шау һалдылар* (Ғ. Әмири). *Иртә менән йәнле әҙәм ҡалмаған кеүек тыныс ятҡан ауыл кис менән гөжләп китте* (Һ. Дәүләтшина).

**Тертләү, сыусыу** *һөйл.* Ҡапыл ҡурҡып, һиҫкәнеп китеү. *Ҡарасәс асыу менән әйткән был һүҙҙән сыусып китте* (Ғ. Дәүләтшин).

**Терәк, таяныс, таяу.** 1) Тотоноп торорлоҡ, таянырлыҡ урын. *Т а я у һуғыу. Т е р ә ү ҡуйыу. Т а я у ғ а тотоноу. ..Тәгәрмәс аҫтында таяныс булырлыҡ ҡаты ер юҡ* (Ф. Иҫәнғолов). *Уттың ялы-ҡойроғо юҡ, һыуҙың да юҡ таяуы* (Р. Ғарипов).

2) *кусм.* Ярҙам итерлек, ышаныслы (кеше, көс). *Имайға етеп ҡайтты. Уның аҡыллы кәңәштәре, ҡалала эш йөрөтә белеүе уға* [*Ныяҙғолға*] *тағы ла ҙур терәк булды* (Һ. Дәүләтшина). [*Атайым*] *күп ваҡыт мине үҙе менән алып китә, ни өсөн тиһәң, мин уның берҙән-бер ҡул ярҙамсыһы, таянысы инем* (С. Кулибай). *Алдыңда ышаныс булһын, артыңда таяныс булһын* (мәҡәл). *Ана шунда бына һинең кеүек, минең кеүек кәрәк таяныс* (Н. Нәжми).

**Тешләнеү, асырғаныу, серәнеү.** Асыу менән көсәнеү. *Шәмси, асырғанып, ҡағыҙ өҫтөндә ҡыбырҙаған Даяндың ҡулын таҡтаға ҡуша һуҡты* (Ғ. Хәйри).

**Тиҙ, шәп, йәһәт, йылдам, йән-фарман.** Ҡыҫҡа ғына ваҡыт

эсендә (булыу, үтеү, башҡарыу). **Тиҙ, шәп** үҙ-ара яҡын. *Т и ҙ йөрөү. Т и ҙ ҡайтыу. Ш ә п килеү. Ш ә п үтеү.* **Йәһәт** — ашығыслыҡ менән. **Йән-фарман** — бик шәп, бөтә көскә. *Әбей тиҙ генә теген биреп ебәрә* (Һ. Дәүләтшина). *Ҡыңғырау һәм кырандас тауышына донъя тулыр, бер яғынан енләнеп, иҫерек ағайҙар шәп уҙыр* (Ш. Бабич). *Мәғфүрә менән килен Рәхимәнең бөтә ҡушҡандарын йәһәт эшләп торҙолар* (Һ. Дәүләтшина) ...*Башҡорт теленә марксизм-ленинизм классиктарының әҫәрҙәрен тәржемә итеү ҙә йылдам алға китте* («Совет Башҡ.»). *Гөлйөҙөм, тик ошо һуңғы һүҙҙе генә көткән кеүек, көйәнтә-силәктәрен, аяғы менән тибеп, ситкә тәгәрәтте лә йән-фарман яр аҫтына йүгерҙе* (Һ. Дәүләтшина).
— Тиҙлек, тиҙләтеү; шәбәйеү, шәпләү; йәһәтләү.

**Тиҙҙән, оҙаҡламай.** Яҡын арала, ҡыҫка ваҡыт эсендә. *Танк әллә ҡайҙа китмәйәсәк, барыбер тиҙҙән туктаясаҡ ине* (Ғ. Әмири).— *Миңә уны күрергә кәрәк ине бит әле.— Оҙаҡламай ҡайтыр ҙа инде* (Р. Низамов).

**Тикле(м), саҡлы, хәтле(м), ҡәҙәр(ле), сәйен** *һөйл.* Урын, ваҡыт, сағыштырыу мәғәнәләрен белдергән бәйләүестәр. *Ҡерпек ҡаҡкан тиклем ғүмеремдә, ирек алған халыҡ эсендә, иркен ерҙә, иркен ҡалһа инем өндә, ләкин түгел төштә* (Д. Юлтый). *Уңға ҡараһаң да, һулға ҡараһаң да түбәләре күккә олғашҡан тауҙар. Улар итәктәренән алып түбәләренә саҡлы, Бөрйән яҡтарына ғына хас булған ҡалын урман менән ҡапланған* («Совет Башҡ.»). *Унда иртәнән алып кискә хәтле урамдарҙа боевой марштар гөрһөлдәй, раз-два командалары яңғырап тора* (Һ. Дәүләтшина). *Ә бит бала табыу ғазаплы ун биш тауҙы күтәреү ҡәҙәр* (М. Хәй). *Һиңә бирәм, йырым! Ал, күҙ нурым, үҙең ала алған ҡәҙәрле..* (Р. Ғарипов). *Иртәгәме, бөгөнмө бесәнгә сығырға торалар, ул, шуға сәйен бөтмәһә, унан күҙгә тиклем киндерһеҙ ҡала* (Һ. Дәүләтшина).

**Тиң, тигеҙ, бер, бәрәбәр.** Бер-береһенә нык оҡшаш, бер дәрәжәлә. **Тиң** киң мәғәнәле: күләмде, ҙурлыҡты, абстракт төшөнсәләрҙе белдерә. *Т и ң хоҡуҡлы. Т и ң яҡлы. Һөйләмдең т и ң киҫәктәре.* **Тигеҙ** — күләм, ауырлыҡ һ. б. яҡтан бер (китап теленә хас). **Бәрәбәр** бер-береһенә торош итерлек. *Егет кеше — бер кеше, арыҫланға тиң кеше* (мәҡәл). *Үлем алдында барыбыҙ ҙа бер тигеҙ* (мәҡәл). *Белмәгән менән бәрәбәрме белә торған кеше? Тиң булырмы күрмәгән менән күрә торған кеше? Берме үҙ-үҙен наҙанлыҡ ҡәберенә күмгән менән ысын ғилемдән ҡәлбенә рух-йән бирә торған кеше?* (Ш. Бабич). *Етмеш һөнәр, етмеш аҡыл талап итмә һин минән, мин бәрәбәр япраҡтарҙы ҡағып үткән ел менән* (М. Кәрим).
— Тиңәү, тиңләү, тиңлек, тиңләшеү, тиңһеҙ; тигеҙләү, тигеҙлек.

**Тирә-яҡ, тирә-йүн, әйләнә-тирә, мөхит** *кит.* Ҡешене уратып алған яҡын-тирә. *Т и р ә я ҡ к а күҙ һалыу. Т и р ә й ү н д е күҙәтеү. Ә й л ә н ә т и р ә н е йөрөп сығыу. М ө х и т т е һаҡлау. Таң ҡаршылап, ярһып йырлап торам. Әйләнәмдә — сәскә, гөл генә...* (З. Биишева). *Тирә-яҡ мөхитте, һыу ятҡылыҡтарын һәм ерҙәрҙе һаҡлау — көнүҙәк проблема..* («Совет Башҡ.»).

**Тиҫтә, ун.** Туғыҙҙан бер берәмеккә артыҡ булған һан. **Тиҫтә** унарлап иҫәпләгәндә, **ун** берәмләп һанағанда ҡулланыла. *Бер т и ҫ т ә. Ике т и ҫ т ә. У н бер. У н ике. У н йәш.*
— Тиҫтәләп, унарлап, унлыҡ, унарлыҡ, унау.

**Тойоу, һиҙеү.** 1) Һиҙеү-тойоу органдары аша тышҡы тәь-

çирҙе ҡабул итеү, белеү. Тәм *т о й о у. Еҫ һ и ҙ е ү. Һалҡынды т о й о у. Ауыртҡанды т о й о у. Аждаһа, кеше еҫен тойоп, уянып китә лә Ҡейеҙбайҙы йотмаҡ була* (әкиәттән). *Һыуҙа балыҡ йөҙәләр, һыу һалҡынын һиҙәләр. Ҡашы ҡара бер матур бар, эстәремдә өҙәлер* (халыҡ йырынан).

2) Белеп, аңлап алыу, төшөнөү. *Һәм мин тоям төн ҡараһы аша ул күҙҙәрҙең йылы ҡарашын* (М. Кәрим). *Бара торғас, бесәйҙең был хыянатын хужа һиҙҙе* (М. Ғафури). *Күпме йылдар артҡа ҡалған хәҙер, тик һиҙмәнем ғүмер үткәнен* (Н. Нәжми).

3) Хис итеү, берәй төрлө итеп һанау. *Берәү үҙен уҡытыусы тоя, берәү һаҡлай кеше ғүмерен* (Р. Ғарипов). *Шуның өсөн барған һайын Вахит ул оҙон сәсле егетте үҙенә яҡын һиҙҙе* (М. Ғафури).

— Тойоусанлыҡ, тойоноу; һиҙенеү, һиҙемләү, һиҙеүсәнлек, һиҙмәҫтән.

**Тоҡаныу, ҡабыныу.** 1) Яна башлау, ут хасил булыу. **Ҡабыныу** был мәғәнәлә **ҡабыу** рәүешендә лә ҡулланыла: *ут ҡ а б ы у*, ләкин **ҡабыныу** яҡтылыҡ биреү, ялтырауҙы ла белдерә. *Йондоҙҙар ҡ а б ы н а. Электр ҡ а б ы н д ы. Ул да әллә нисә ҡабат сыртылдатып сирткәс кенә сак тоҡанды* (Һ. Дәүләтшина). *Оркестр тулҡыны тынды ҡапыл, ут бер һүнде, тағы ҡабынды* (Б. Бикбай). *Ерҙән атылып сыға сабый үлән, күктә йондоҙ ярһып тоҡана* (Р. Бикбаев).

2) *күсм.* Ҡапыл ғына ҡыҙып, ярһып китеү. *Бәхәсләшергә тотонһам, мин гөлт итеп тоҡанам да китәм, ә ул тыныслығын юғалтмай* (Ә. Бикчәнтәев).

3) *күсм.* Дәртләнеп, рухланып китеү; күңел күтәрелеү. *Мин йырламай, былбыл, кем йырлаһын, йөрәк ялҡындарым ҡабынғас* (Ш. Бабич).

4) *күсм.* Башланып китеү, хәрәкәткә килеү (хәл-ваҡиға тураһында). *Восстание ҡ а б ы н ы у. Хәрәкәт т о ҡ а н ы у. «Герман һуғышы» тоҡанырға торғанда ғына, Ҡотло ҡул, тотлоға-тотлоға, шундай бер хәбәр һалды..* (М. Кәрим).

**Тоҡор, тоҡос, топос, ҡыҫҡа.** Оҙонлоғо ғәҙәттәгенән кәм (кешенең буйына, тән ағзаларына ҡарата әйтелә). *Т о ҡ о р ҡойроҡ. Т о ҡ о с бармаҡ. Ҡ ы ҫ ҡ а буйлы.* **Топос** һирәк ҡулланыла; ҡырҡҡандан һуң ҡыҫҡарып ҡалғанды белдерә. *Ауылда ул тоҡор Талип тип йөрөтөлгән бер иргәйел кешенән генә ғүмер буйы ҡурҡҡан* (Б. Бикбай).

**Толом, үрем.** Үрелгән сәс шәлкеме. **Толом** күберәк ҡулланыла. *Беҙгә яһаҡ һалдылар — толомға, зәңгәр күҙгә* (Ғ. Сәләм). *Туғыҙ толом аҡ ебәк, туғыҙ үрем, сиралып, сәркеп китһәң, һиңә хурлыҡ* («Бабсаҡ менән Күсәк»).

**Томһарыу, төмһәйеү, турҫайыу.** Ҡәйефһеҙләнеп, төҫтө боҙоу. *Т о м һ а р ы п ултырыу. Т ө м һ ә й е п йөрөү. Турҫайып ҡарап тороу.*

**Тормош, йәшәйеш, көнкүреш.** Йәшәү, көн итеш. **Тормош** йышыраҡ ҡулланыла. *Ауыр т о р м о ш. Рәхәт т о р м о ш. Күсмә т о р м о ш.* Тыныс *т о р м о ш. Т о р м о ш хәле.* **Йәшәйеш** дөйөмөрәк мәғәнәле. *Үлем һәм й ә ш ә й е ш.* **Көнкүреш** — ғәҙәти, көндәге тормош. *Ҡ ө н к ү р е ш хеҙмәте. Тормош матур бөгөнгө туй һымаҡ, ләкин тормош һис тә туй түгел* (Н. Нәжми).

**Тотҡон, әсир.** Иркенән мәхрүм ителгән кеше. **Тотҡон** киңерәк мәғәнәле: иркенән мәхрүм ителгән, ҡулға алынған кеше. *Т о т ҡ о н булыу.* **Әсир** — иҫкергән һүҙ. *Тотҡондоң йөрәге ҡапыл ҡайнар һыуға манғандай бешеп китте* (Ғ. Әмири). *Мин әсирҙә алыҫ, ят яҡтарҙа, моңһоу көндәр үтә зар менән* («Совет Башҡ.»).

— Тотконлоҡ, әсирлек.

**Тотоноу, бөтөрөү, тотоу** *күсм.* Аҡсаны, мал, дәүләтте кәрәк-яраҡ өсөн ҡулланыу. *Аҡсаны т о т о н о у. Малды б ө т ө р ө ү.* **Тотоу** һирәгерәк ҡулланыла. *Ашлыҡты т о т о п бөтөү. Һуңғы тиндәрҙе тотоп, киноһына ла барҙыҡ, үҙебеҙҙә бер төрлө ләярлылыҡ һиҙмәнек* (С. Агиш).

**Тотоу, аулау.** Йәнлек, ҡошҡортто эҙәрләп ҡулға төшөрөү. *Балыҡ т о т о у. Ҡош а у л а у. Бүре т о т о у. Аҡсарлаҡтар айҡап күл өҫтәрен, аҡ сабаҡтар аулай ем өсөн* (Д. Юлтый).

**Төҙ, тура.** 1) Тигеҙ йүнәлешле; ҡыйыш түгел. Үҙ-ара яҡын синонимдар. Рәүеш мәғәнәһендә ҡулланылғанда, уларға **мәргән** һүҙе лә синоним була. *Т у р а атыу. Т ө ҙ бәреү. М ә р г ә н атыу.* **Тура** күберәк горизонталь торошҡа ҡарата ҡулланыла. *Т у р а һыҙыҡ. Т у р а юл.* **Төҙ** күберәк вертикаль торошто белдерә. *Т ө ҙ г ә ҡатыу. Т ө ҙ кәүҙә. Һалкынса тын иртәләрҙә ҙур ауылдың төтөндәре төҙ бағана булып күккә күтәрелә* (Ф. Иҫәнғолов).

2) *күсм.* Ялған булмаған, дөрөҫ, тоғролоҡло. *Юл кәкре, иҫерек төҙ* (мәҡәл). *Тотолмаған бур бейҙән дә төҙ булыр* (мәҡәл).

1. **Төҙөү, короу, һалыу.** Ниндәй булһа ла ҡоролма яһау (йорт, һәйкәл, юл һ. б.). **Төҙөү** киңерәк мәғәнәле, уға **һалыу** яҡын. **Ҡороу** — ер өҫтөндә күтәргән нәмәләргә ҡарата ғына әйтелә. *Йорт ҡ о р о у. Ҡыуыш ҡ о р о у. Тирмә ҡ о р о у. Беҙ илебеҙҙә ныҡ нигеҙҙәр төҙөнөк, ҙур еңеүле юлдар үтелде* (Ғ. Сәләм). *Бер тау араһындағы уяға барып, ҡышлау ҡорғандар ҙа йылҡыларын тибенгә ҡыуғандар* (әкиәттән). *Бер ваҡыт ҡараһам, үҙемдең баҙ өйгә терәп ҙур-ҙур келәттәр һалғанмын, ә теге бойҙайҙар үҙемдеке булған да ҡуйған икән, тием* (әкиәттән).

— Төҙөүсе, төҙөлөш; ҡоролош, ҡоролма.

2. **Төҙөү, короу** *күсм.* Алдан уйлау, ниәтләү. *План т ө ҙ ө ү. Хәйлә ҡ о р о у.* Был мәғәнәлә **короу** күберәк ҡулланыла. *Алдағы йылға тағы ла ҙур пландар ҡороп торабыҙ* (Р. Низамов).

1. **Төҙәү, тоҫкау, туралау.** Уҡ-мылтыҡты һ. б. ҡоралды сәпкә йәки билдәләнгән нәмәгә йүнәлтеү. [*Аҡмырҙа:*] — *Ҡарап ҡарайыҡ,— тип йән асыуы менән һуңғы уғын төҙәп, атып ебәргән, ти* (әкиәттән). *Яһаулы мылтыҡты кешегә тоҫҡарға ярамай* (һөйл. теленән). *Теҙләнеп турылаңы охотник ҡуянға мылтығын, һәм ҡуянға атты ла аҡһатты улар т ҡултығын* (Ш. Бабич).

2. **Төҙәү, тоҫкау, төбәү, текәү.** 1) Күҙ-ҡарашты туп-тура йүнәлтеү. *Егет алға барҙы, ә күҙҙәрен поезд килер яҡҡа төбәгән* (Ғ. Сәләм). *Ҡыҙ зәңгәр күҙҙәрен күккә текәгән* (Н. Мусин).

2) *Күсм.* Уй-ниәтте, һүҙҙе нимәгәлер йүнәлтеү. *Уйҙар, хыялдар әллә ҡайҙа төбәлгән. Атап әйтмәһә лә, уның һүҙҙәре йорт хужаһының станция янына өйгән туғындарына, себей күҙле мәзиндең диненә төҙәлгән һымаҡ булды* (И. Насыри).

**Төңөлөү, дүнеү.** Берәй нәмәгә, кешегә булған ышанысты, өмөттө бөтөнләй юғалтыу, уйҙан кире ҡайтыу. *Бахыр Аҡназар ары бәрелә, бире һуғыла, бер нәмә лә сыҡмай. Шунан бар нәмәнән төңөлөп, бер улын күтәрә, икенсеһен етәкләй ҙа ары китә* (әкиәттән). *..Асығын әйтәм: Алдар батыр әле лә элекке уйынан дүнмәгән* (Ғ. Ибраһимов).

**Төрөү, урау, төрнәү.** Сепрәк, ҡағыҙ һ. б. шуның кеүек нәмә менән уратып сырмау. *Сәй т ө р ө ү. Бала т ө р ө ү. Ҡағыҙға у р а у. Кәнфит т ө р н ә ү. Тәмәке т ө р н ә ү. Ныҡ туҡмалған йәки тәне телгеләнеп*

*яраланған кешене ысынлап та һарыҡ тиреһенә төрәләр* (Ғ. Ибраһимов).

1. **Төҫ, ҡиәфәт.** Ҡешенең тышҡы күренеше (һын һәм йөҙ). *Етди т ө ҫ. Олпат т ө ҫ. Уйсан ҡ и ә ф ә т.* [*Тайба:*] *Үтә лә ябыҡ, үтә лә йонсоу инең. Әле инде, аллаға шөкөр, бөтөнләй үҙ төҫөңә ҡайта яҙҙың* (З. Биишева).

2. **Төҫ, йәм, күрк.** Биҙәп, матурлыҡ биреп торған сифат. *Яңы мәктәп ауылға төҫ биреп тора. Ағас күрке япраҡ, әҙәм күрке сепрәк* (мәҡәл).

**Төш, өйлә** *һөйл.* Ҡөн үҙәге. **Төш** йышыраҡ ҡулланыла. *Т ө ш етеү. Т ө ш к ә туҡтау. Әй көрәшәләр, әй көрәшәләр, ти, былар, көрәшә торғас, төш ауып, көн кискә һарҡты, ти* (әкиәттән). *Өйләнән һуң һалды юлға әҙерләй башланылар* (Й. Солтанов).

— Төшкө, төшлөк.

**Тубыҡ, теҙ.** Бот һөйәген балтыр һөйәгенә тоташтырған быуын. Һүҙбәйләнештәрҙә айырылалар. *Т у б ы ҡ ҡапҡасы. Т е ҙ быуыны. Т у б ы ҡ ҡ а ултыртып йығыу. Ул уң аяғын һул аяғының теҙ башына һалған да ..усын яңағына ҡуйған* (М. Тажи).

1. **Туҙыу, тетелеү, ылйырау.** Тотоноуҙан, ваҡыт үтеүҙән алама, яраҡһыҙ хәлгә килеү (кейем-һалымға ҡарата). **Туҙыу** киңерәк мәғәнәле: өҫ һәм аяҡ кейемдәренә ҡарата әйтелә; **тетелеү, ылйырау** — бөтөнләй туҙып бөтөү (өҫ кейеменә ҡарата ғына әйтелә). *Ҡамсат ҡына бүрек туҙмай тиҙәр, ҡырылып уҡ ситенән туҙа икән* (халыҡ йырынан). *Арып-алйып киләләр тотҡондар. Ҡейемдәр ылйырап бөткән* (Ғ. Ибраһимов).

2. **Туҙыу, туҙыныу, боларыу.** Асыуланып, ярһып әрләшеү, ыҙғышыу. *Аҡназар ..хәлде бисәһенә һөйләп биргән. Бына бисәһе туҙып киткән быныҡ, ..тауыш ҡуптарған* (әкиәттән).

**Туған, ҡәрҙәш, туған-ҡәрҙәш, туған-тыумаса, туған-ырыу, ағай-эне.** Ҡан-ҡәрҙәшлеге менән бәйләнгән кешеләр. **Туған** йышыраҡ ҡулланыла, һүҙбәйләнештәрҙә айырыла. *Бер т у ғ а н. Ике т у ғ а н. Яҡын т у ғ а н.* Башҡалары үҙ-ара яҡын, берен-бере алыштыра ала. *Туғаныңдан биҙмә, нәҫелең ҡорор* (мәҡәл). *Мәрйәм бисара эсенән: «Беҙҙең ҡәрҙәштәребеҙ ҡайҙа икән?» — тип туғандарын һорап торған ваҡытта, әллә нindәй ят кешеләрҙең керә-сығып йөрөгәнен күргәс, ҡурҡа башланы* (М. Ғафури). *Ниғмәтйән ағай.. кемгә барып һүҙ ҡушырға белмәне. Әйтерһең, ул туған-тыумасаһыҙ, ағай-энеһеҙ ғүмер үткәргән* (Ә. Зәйнуллин). *Мәрйәм быны ишетеү менән аптырап китте һәм унда былай ҡунаҡ итерлек туған-ҡәрҙәштәре юҡ икәнен әйтте* (М. Ғафури). *Уның яҡын туған-тыумасалары юҡ тиерлек ине* (Ғ. Әмири).

— Туғанлыҡ, туғанлашыу, ҡәрҙәшлек, ағай-энелек.

**Туйғансы, алҡынғансы, бүккәнсе, үпкә йөҙгәнсе.** Ашау, эсеү теләге ҡайтҡансы, күңел булғансы. **Туйғансы** киңерәк ҡулланылышлы. *Т у й ғ а н с ы ашау. Т у й ғ а н с ы эсеү. Т у й ғ а н с ы һыйлашыу* һ. б. **Алҡынғансы** — бик ныҡ туйып, кире килгәнсе (тупаҫыраҡ һүҙ). **Үпкә йөҙгәнсе** эсеүгә ҡарата әйтелә. *Әхмәтсафа йортона бөтә ҡазыйҙарҙы саҡырҙылар. Уларҙы алҡынғансы һыйланылар* (С. Агиш). *Әйтәгүр, бер кинәнеп үпкәм йөҙгәнсе сәй эсеп ҡайттым әле* (Һ. Дәүләтшина).

**Туҡмау, бешеү, һыҙырыу, ҡайыҙлау, түбәләү, сикәләү, ярыу, киҫеү** *күсм.*, **дөмбәҫләү, төйөү** *күсм.*, **һыптырыу, һүтеү, кәрәген биреү, күрмәгәнен күрһәтеү, тетмәһен тетеү** *һөйл.*, **иҙмәһен иҙеү** *һөйл.*, **арт һабағын уҡытыу, һырт ҡайышын алыу** *күсм.*, **һыу эскеһеҙ итеү.** Ауырттырғансы ҡат-ҡат

һуғыу. **Туҡмау, бешеү** дөйөмөрәк мәғәнәле. **Һыҙырыу, ярыу, ҡайыҙлау, һыптырыу** — сыбыртҡы, ҡамсы йәки тал менән туҡмау. **Түбәләү, сикәләү** — ус менән һуҡҡалау. **Дөмбәҫләү, төйөү, һүтеү, киҫеү** — ныҡ туҡмау. Фразеологик берәмектәрҙә «бик ҡаты туҡмау» мәғәнәһендә ҡулланылалар. *Әгәр ҙә һөйләмәһәм, ҡанға батырғансы туҡмау менән ҡурҡыталар* (С. Агиш). [*Тимер*] *кемде күрһә — шуны урамда, көсө етһә, тотоп туҡманы* (Н. Нәжми). *Ярыуҙы ла ҡайыҙлауҙы ғына беләһең. Ҡешеләр улай өйрәтмәйҙәр* (Х. Мохтар). *Башҡортса ҡайыҙлау — ҡайыр менән туҡмау тигән һүҙ* (Ж. Кейекбаев). *Тегеһе, ҡырт ҡына боролоп, ауыл буйына атын ҡамсы менән ҡайыҙлап, йән-фарман сабып үтте* («Совет Башҡ».). *Тиҫтәләгән малай Сәлихтең арҡаһын йоҙроҡ менән дөмбәҫләй башланы* (Х. Мохтар). [*Ирғәле:*] *Уҡымайым да! Сәхи хәлфә мине сикәләй ҙә сикәләй..* (Б. Бикбай). *Бынан ары алыш күпме һәм нисек барғандыр, асыҡ ҡына хәтерләмәйем. Әммә шунан һуң да бер-беребеҙҙе байтаҡ дөмбәҫләнек б у ғ а й* (М.Кәрим). *Ҡилеп сыҡһам, ни күҙем менән күрәйем, Фәхрисламм Ғайнулланы абаулатып һүтеп ята, саҡ әрсәләнем* (Т.Морат). [*Сәрүәр:*] *Ни эшләп мин уға яуап яҙып торайым? Атайымдарға ишетелһә, күрмәгәнеңде күрһәтер* (Х. Ибраһимов). *Бер төркөм кешеләр геү-гү итеп ҡалды: «Алығыҙ, тотоғоҙ үҙҙәрен! Бирәйек кәрәктәрен!»* («Совет Башҡ.»). *Ҡиндер талҡыған шикелле, тегенең тетә генә тетмәһен* («Һәнәк»).—*Ҡулымда ҡөҙрәтем булһа,— тип быжғырта ҡарт,— сат йәбешеп, һәр ҡайһыһының иҙмәһен иҙер инем* (Ә. Бикчәнтәев). ..*Ҡайтырһың әле ..арт һабағыңды уҡытмаһаммы,— ти был ҡыҙып-ҡыҙып* (Ә. Зәйнуллин). ..— *Үмәр, олатайым ҡайтып китһә, һырт ҡайышыбыҙҙы алыр..* (Һ. Дәүләтшина). [*Ғариф улдарына:*] *Әрәмтамаҡтар! Өйөрөгөҙҙө бер епкә теҙеп, һыу эскеһеҙ итергә эйәһе юҡ* (Ж. Кейекбаев).

**Тулыһынса, тотош, тотошлай, бөткәнсе.** Бар булғаны бергә, тулы көйгә. *Т у л ы һ ы н с а алыу. Т о т о ш биреү. Т о т о ш л а й йөрөтөү. Күлуртлар батыр яҡындағы бер күлде тотошлай уртлап алған* (әкиәттән).

**Тумалаҡ, йомро.** 1) Шар һымаҡ, түңәрәк. *Т у м а л а ҡ балсыҡ. Й о м р о ағас. Тау битендәге тәгәрәп ятҡан йомро таштарҙы йыйып, уға балсыҡ ҡатнаштырып, ҡайһы берҙәре, ҡырҡа-сорҡа итеп, кәртә һымаҡ нәмәләр яһағандар* (Ғ. Дәүләтшин).

2) Тығыҙ, таҙа тәнле. *Тимербулатты бәләкәйерәк кенә ҡара тумалаҡ атҡа мендерҙеләр* (Һ. Дәүләтшина).

— Тумалаҡланыу, йомроланыу.

**Туңаҙыу, туңғаҡланыу, ҡатҡаҡланыу.** Епшегәндән һуң бер аҙ һыуытып, туңып тороу. *Аяҡ аҫты кисә көндөҙ ереп ҡалып, төнгө һыуыҡ менән ҡатҡаҡланған* (Һ. Дәүләтшина).

**Туплау, йыйыу.** Бер урында күпләп тотоу, таратмау. *Көтөүҙе үҙеңә ал да ни тапҡаныңды туплай бар. Хәҙер һин егет ҡорона тулғанһың, бала түгелһең* (Һ. Дәүләтшина). *Семетеп йыйһаң, услап ашарһың* (мәҡәл).

**Тупһа, буҫаға.** Ишек, тәҙрә яңағының аҫҡы өлөшө. — *Ул атаһын күрергә тейеш.. һиненең үҙеңде генә тупһама ла аяҡ баҫтыраһым юҡ* (Р. Котошов). *Ҡилен ҡәйнә буҫағаһынан* (мәҡәл). *Француз, француз килә, ти, яуы еткән Мәскәүгә лә буҫағала тора, ти* (халыҡ йырынан).

**Тура, түтә.** Тәңгәл генә килеп сыҡҡан (юл, һыҙыҡ); урауҙың киреһе. *Т у р а юлдан китеү. Т у р а сығыу. Ҡыл тарт-*

*ҡан кеүек тура юл көньяҡҡа ҡарап китте лә китте* (Ж. Кейекбаев). *Ҡусәрхан түтә юлдан, Ҡуҙыйкүрпәс урау юлдан китте, ти* («Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу»).

**Түбәнселекле, кеселекле, кесе бәйелле.** Олоно олоға һанай, ихтирам итә белгән. *Өйрәнсек һөнәрсе янына үҙе.. килгән. Түбәнселекле, мөләйем тауыш менән сәләм биргән* (З. Биишева).

**Түгелеү, ҡойолоу, һибелеү, һирпелеү, сәселеү.** 1) Ситкә ағыу, йәйелеү (шыйыҡ нәмәләр, ямғыр һ. б.). **Түгелеү** — ташыу, күпләп ағып сығыу. *Күҙҙән йәш т ү г е л е ү. Яранан ҡан т ү г е л е ү.* **Ҡойолоу** — бик күп түгелеү, ағып тороу. *Түбәнән һыу ҡ о й о л о у.* **Һибелеү, һирпелеү, сәселеү** — таралып ағыу. *Тар ҡаҙанға аш һалма, ҡайнай-ҡайнай түгелер* (мәҡәл). *Бөгөн дә шул тамсы-тамсы көмөш ҡойола, ҡырҙар һулай һәм, бейешеп, талдар ҡойона* (М. Кәрим). *Һуңғы болот ҡанат ҡағып китте — ынйылары сәселеп ҡалдылар* (М. Кәрим).

2) Таралып төшөп тороу, бөркөлөү (нур, яҡтылыҡ һ. б.). *Ҡояштан нур т ү г е л е ү. Урам яҡтағы ҡарындыҡ тәҙрә арҡыры аҙ ғына ут яҡтыһы һибелә* (Т. Хәйбуллин). *Күтәр башың, ҡара Уралыңа, унда яҙ нурҙары һирпелә* (Д. Юлтый).

**Түгеү, ҡойоу.** Күпләп ағыҙыу (һыу, күҙ йәше һ б.). *Ә ямғыр, елләп-дауыллап, ҡоя ла ҡоя һаман* (Н. Нәжми). *Күҙ йәшеңде ҡоймай, минең менән бер көн килеп һөйләш яҙ һайын* (Р. Ғарипов).

**Түҙеү, сыҙау.** Ауыр хәлгә, ниндәйҙер тәьҫиргә сабырлыҡ менән ҡаршы тороу, бирешмәү. *Ауырлыҡҡа т ү ҙ е ү. Аслыҡҡа т ү ҙ е ү. Һыуыҡҡа с ы ҙ а у. Ауыртыуға с ы ҙ а у. Ултырып с ы ҙ а м а у. Беҙҙекеләр нисек түҙгән икән, беҙ һуғышта үлгән саҡтарҙа?* (Н. Нәжми). *Ауыҙы онға тейгән эт тирмән яламай түҙә алмай* (мәҡәл).

**Түшәү, йәйеү.** Таратып һалыу. **Түшәү** — ятыр, ултырыр өсөн таратыу; **йәйеү** — ғөмүмән таратыу. *Түшәк т ү ш ә ү. Урын й ә й е ү. Балаҫ т ү ш ә ү. Ҡейеҙ т ү ш ә ү. Бесән т ү ш ә ү. Аҡ асфальт йәйәләрмени — урамдарға аҡ ҡар яуа* (Б. Бикбай). *Аҫылбикә шунда уҡ Айымдың аяҡ аҫтына үҙ ҡулдары менән аҡ кейеҙ йәйҙе* (Ғ. Ибраһимов).

— Түшәк, түшәлеү; йәймә, йәйелеү.

**Тыйнаҡ(лы), тыйыулы, тәртипле, тәүфиҡлы, инсафлы, әҙәпле, ипле.** Әхлаҡ ҡағиҙәләренә һыйышлы. **Тыйнаҡ(лы), тыйыулы** — үҙен һәйбәт тота белгән, ипле. **Тәртипле** — тәртип ҡағиҙәләрен боҙмаған. *Т ә р т и п л е уҡыусы.* **Тәүфиҡлы** — һәйбәт тәрбиә алған, бик тыйнаҡ. **Инсафлы** — кеселекле, кешегә юл ҡуя белгән. *Шикләнмә, һин, тау ҡыҙҙары кеүек, улар беҙҙең тыйнаҡ, ипленәр* (Н. Нәжми). *Илдәр сиге, ҡитғалар аша алып барҙым туған яғымды, артыҡ ҡыйыу матурҙарҙы күрһәм, тыйнаҡ ҡыҙҙар, һеҙҙе һағындым* (Ғ. Рамазанов). *Әллә ни байлыҡтары булмаһа ла, балалары тәүфиҡлы* (Һ. Дәүләтшина). *Ихсановтар кеүек башҡа байҙар ҙа шулай уҡ, ҡайҙа ғына барһалар ҙа, теге вожданлы, инсафлы кешенән алда йөрөйҙәр* (М. Ғафури).

**Тылҡыу, туҡыу** *кҫм.* Ҡат-ҡат әйтеү, ҡабатлау. *Ә ҡыҙ хәлде аңламай, һаман үҙенекен туҡый* (Н. Мусин).

1. **Тыныу, тымыу, баҫылыу, туҡтау, һил булыу.** Эш-хәрәкәтте ғәмәлдән сығарыу. **Һил булыу** — туҡтап, тып-тын ҡалыу. Башҡалары үҙ-ара бик яҡын. *Ямғыр т ы н ы у. Ел т ы м ы у. Буран б а ҫ ы л ы у. Тауыш т у ҡ т а у. Ямғыр тынған. Ерҙән томан ҡалҡа. Ҡайын, ҡарағайҙар ойоған* (Р.Ғарипов). *Бер аҙ үткәс кенә,*

*атыш баҫылып, урам һил булып ҡалды* (Ғ. Дәүләтшин).

2. **Тыныу, шымыу, шымтайыу** *һөйл.* Һүҙ-хәбәрҙе, тауышты туктатыу. *Был һүҙҙәре менән шаҡ ҡатырғас, ҡара Йомағол тынып ҡалды* (М. Кәрим). *Улар Суровтың тауышын ишетеү менән шым булып тындылар* (А. Таһиров). *Партизандар ҙа, шуның һымаҡ, тыштан шымдылар..* (Һ. Дәүләтшина). *Кәримә урындыкка барып ултырҙы ла, ауыҙын яулыҡ сите менән ҡаплап, шымтайҙы* (Н. Мусин). *Ҡапыл шымып ҡалды халыҡ, тынған Юшатыр төҫлө..* (Б. Бикбай).

— Тынғыһыҙ, тынысһыҙ, тыныс.

**Тыңлау, ҡолаҡ һалыу, ҡолаҡты ослайтыу, ҡолаҡты торғоҙоу.** Тауыш, шау-шыуҙы, телмәрҙе ҡабул итеү, ишетеп тороу. **Тыңлау** киңерәк ҡулланылышлы. **Ҡолаҡты ослайтыу**— һағайып тыңлау. **Ҡолаҡ һалыу**— иғтибар менән тыңлау. *Бер көн Шәрәйҙә халыҡтың, был хәбәрҙе тыңлап тороп, иҫе китеп ҡайтҡан* (И. Насыри). *Ергә ятып, ҡолағымды һалһам, ете ҡат ер аҫтында, ете диңгеҙ аҫтында етмеш батшалыҡ эсендә ниҙәр булып ятҡанын беләм. Әле бына ҡырҡ беренсе батшалыкты тыңлап ята инем* (әкиәттән).

**Тыуған ил, Ватан, ил.** Тыуып үҫкән, гражданлыҡ хоҡуғы биргән дәүләт, урын-ер. **Ватан** — рәсми телгә, шиғриәткә хас һүҙ. *Бөйөк Ватан һуғышы. Ватанды һаҡлау.* **Ил** — күберәк һөйләү телендә, халыҡ ижадында ҡулланыла; йәшәгән төбәк мәғәнәһендә лә ҡулланыла. *Ир тыуған иләндә, эт туйған ерендә* (мәҡәл). *Ватан ул, ҡыҙым, тыуған ил, бына беҙ торған урын* (Р. Ниғмәти). *Иле барҙың — көнө бар* (мәҡәл). *Күп илдәрҙе, күп ерҙәрҙе күрҙем, ғашиҡ итте минe йылы яҡ* (Р. Ғарипов).

— Ватандаш, ватансы, ватансылыҡ; илсе, илселек.

**Тыуҙырыу, табыу** *күсм.*, **бушаныу** *күсм.*, **ҡотолоу** *күсм.* Баланы донъяға килтереү. *Теге ҡатын йәнә бер ул тыуҙырған, ти* (әкиәттән). *Яңғыҙ булыр егеткә бала тапмаҫ ҡатын тап булыр* (мәҡәл).— *Мине арбаға ултыртып алып ҡайт, мин ауырып киттем,— ти* [*әбей*], *бушанғанын әйтмәй, йәшерә* («Алпамыша»). [*Биби*] *ирҙән уңмай, Ғәтиәт, Хисмәт исемле ике малай тапҡас, ҡапыл үлеп китә* (Б. Бикбай).

1. **Тыуыу, яралыу, донъяға килеү.** Бала барлыҡҡа килеү. *Бер бите ай, бер бите көн кеүек һылыу был ҡатындан бер ул тыуған, уға Заятүләк тип исем ҡушҡандар, ти* (әкиәттән). *Ауыр — тыуыу, ауыр — кеше булыу* (Н. Нәжми). *Ҡарайым ҡыҙыма һәм шулай уйлайым: тағы бер бәхетле яралды донъяла* (Р. Ниғмәти).

— Яралғы.

2. **Тыуыу, яралыу.** Хасил булыу, ғәмәлгә инеү (уй-теләк, фекер һ. б.). *Аҡһаҡалдарҙың күңелендә икеләнеү яралыуына Сырым риза ине* (Ә. Хәкимов).

**Тәгәрәү, йығылыу, ҡолау, ауыу, тәкмәсеү** *һөйл.*, **ялпашыу** *һөйл.*, **мәтәлләү.** Юғарынан түбәнгә ҡарай осоу. **Тәгәрәү, йығылыу** киңерәк ҡулланылышлы, үҙ-ара бик яҡын. **Ауыу** — ҙур нәмәләргә ҡарата әйтелә, юғары стилгә тартым. **Тәкмәсеү, мәтәлләү** — тәгәрләп китеү (кешегә ҡарата ғына әйтелә); **ялпашыу** көлөү йәки мыҫҡыллауҙы белдерә. *Юлбаҫар ҡарағош, ҡанһырап, ҡаянан түбән тәгәрәне* (Ф. Иҫәнғолов). *Йығылған һөрөнгәндән көлгән* (мәҡәл). *Булмаһа әгәр шул нәфрәт, ҡалһам ҡурҡыуҙан ҡолап: дуҫтарым үтерҙәр ине минең тирәмдән урап..* (Р. Ниғмәти). *Ҡылыстар ялтланы. Баштар ысыҡлы үләнгә тәгәрләне, аттар ҡаты кешнәп ергә ауҙы* (Ғ. Ибраһимов). *Күгелйем бушлыҡ тирә-яҡ, йыраҡта тауҙар ауа* (М. Кәрим). *Бәйгеләрҙә сапҡан ат та ауа,*

*бөркөттәр ҙә ҡолай һауанан, ә аҡҡоштар яңғыҙлыҡтан ҡасып, ташлана, ти, уҡтай ҡаяға* (Р. Шәкүров).

**Тәм, тат.** Телдең һиҙеү-тойоу һәләтенә тәьҫир иткән сифат. **Тәм** киңерәк мәғәнәле. **Тат** башлыса шәрбәткә тартым. *Оҙон юлға сыҡҡан берәүгә, тим, булмаһа ла таты һәм мәге, ярап ҡалыр әле, бәлки асыҡҡанда, көйөп бешкән арыш икмәге* (Р. Ғарипов).

**Тәмле, татлы, шәрбәтле, телеңде йоторлоҡ.** Тәм-таты һәйбәт булған (ашамлыҡ). **Тәмле** киңерәк ҡулланылышлы; **татлы** — шәрбәтлегә тартым. **Телеңде йоторлоҡ** — бик тәмле (аш-һыуға ҡарата ғына). **Тәмле, татлы** һүҙҙәренең «күңелгә рәхәт бирерҙәй, ләззәтле» мәғәнәһе лә бар. *Ул пандар ниндәй генә тәмле аш ашамай торғайнылар* (Д. Юлтый). *Бал татлы, балдан бала татлы* (мәҡәл). *Минең туған ҡырҙарым, балдан татлы һыуҙарым* (С. Юлаев). *..Бешергән аштары телеңде йоторлоҡ була* (Б. Бикбай).

**Тәмләү, татыу, тәм итеү, ауыҙ итеү.** Ашап ҡарап тәмен белеү. **Ауыҙ итеү** — тәмләү һәм бер аҙ ашау. **Татыу** һирәгерәк ҡулланыла. *Шунан теге ҡарт: «Аш һалып бир, тәмләп ҡарайым»,— тигән* (әкиәттән). *Ҡеше татый уның тәмен тик бер генә ғүмергә* (Б. Бикбай). *Фәһимәне әле Сабир, әле әсәһе ашамлыҡтарҙың бөтәһенән дә ауыҙ итергә ҡыҫтап торҙолар* (С. Агиш). *Шундай уха бешергән, телеңде лә йоторлоҡ, бер татыһаң, ғүмер буйы тәмен телдә тоторлоҡ!..* (Р. Ғарипов).

**Тәңгәл, тапҡыр, тура.** Нимәгәлер ҡаршы ятҡан урын-ер. **Тәңгәл, тапҡыр** бер самараҡ, **тура** һирәгерәк ҡулланыла. *Ауыл т ә ң г ә л е. Т ы ҡ р ы ҡ т ә ң г ә л е. Урман т а п ҡ ы р ы. Т ә ң г ә л килеү. Батырҙар шунда уҡ ер аҫтындағы ҡыҙҙың ҡайһы тәңгәлдә булыуын билдәләп алғандар* (әкиәттән). *Ситән буйына, аҙ ятҡан тапҡырға килә башланы теге* (Б. Бикбай). [*Арыҫландың*] *..ишәйләүен ни бары дүрт-биш саҡрым ғына ерҙәге Бөгәл йылғаның Тора һыуына табан боролған тәңгәлендәге туғайына ҡоророға уйланылар* (Ғ. Ибраһимов).

**Тәпәш(әк), тәбәнәк, кәрлә.** Бейеклеге, буйы ғәҙәттәгенән кәм, түбән. **Тәпәш(әк)** киңерәк ҡулланылышлы: кешегә, үҫемлектәргә, ҡоролмаларға һ. б. ҡарата әйтелә. *Т ә п ә ш (әк) йорт. Т ә п ә ш тау. Т ә п ә ш буйлы.* **Тәбәнәк, кәрлә** кешегә, ағасҡа ҡарата ғына әйтелә. *Уның аҫтынан тәпәшәк кенә буйлы, йоҡа кәүҙәле, ялтырап торған сырайлы, осло эйәкле һәм йөҙ түбән ҡарашлы бер кеше килеп сыҡты* (И. Насыри). *Бульдозерҙы тәбәнәк буйлы егет йөрөтә* («Ленинсы»). *..Ул кәрлә ҡыуаҡтар араһында үҫкән бейек ҡарағайҙы хәтерләтә* (Ғ. Әмири).

**Тәржемәләү, тәржемә итеү, ауҙарыу** *күсм.* Бер телдән икенсе телгә әйләндереү. *Ник балаларға театр яҙмай Мирхәйҙәр, тиҙәр, бар икән русса яҙырлыҡ — әйҙә тик ауҙар, тиҙәр* (Ш. Бабич).

# У

**Уғры, бур, ҡараҡ.** Йәмғиәт йәки кеше милкенә ҡул һуҙыусы кеше. **Уғры** дөйөмөрәк мәғәнәле. **Бур** — ғәҙәттә эре әйбер, мал урлаусы кеше. **Ҡараҡ** — йәшенеп ятып урлаусы эре уғры. *Ат ҡ а р а ғ ы. Уғры урлай, ҡулын ҡуйып ҡалдырмай* (мәҡәл). *Бур байыҡмаҫ, бирән туймаҫ* (мәҡәл). *Ат ур-*

*ланыҡ — бур булдыҡ, ит урлап та тотолманыҡ, ҡыҙ урламай хур булдыҡ* (халыҡ йырынан). *Ҡалын ырыуҙың ҡарағы күп була* (мәҡәл).

**Уйлау, фекерләү, фекер йөрөтөү, баш ватыу.** Баш мейеһен эшләтеү. **Уйлау, фекерләү** киң мәғәнәле: ғөмүмән, фекерҙең эшләүе һәм ниҙелер сисергә тырышыу. Һүҙбәйләнештәрҙә айырылалар: *у й л а п эшләү, у й л а п йөрөү* һ. б.; **фекерләү** һүҙенең ҡулланылышы сикләрәк. *Ф е к е р л ә ү һәләте.* **Фекер йөрөтөү** — билдәле бер йүнәлештә уйлау. **Баш ватыу** — ниҙеңдер өҫтөндә оҙаҡ уйланыу. *Ҡалай итеп бынан ҡотолорға юл эҙләй, көн уйлай, төн уйлай был* (әкиәттән). *Алғаныңа ҡарап шөкөр ит, алырыңа ҡарап фекер ит* (мәҡәл). *Төрлөһө тураһында фекер йөрөтәбеҙ* (Д. Юлтый). *Беҙҙеңсә, Дауытов ағай, беҙҙең бурыс — уҡыу, мөхәббәт тураһында баш ватыу кәрәкмәй* (С. Агиш).

— Уйланыу, уйсан; баш ватҡыс.

**Уйһыу, уйпат.** Соҡорланып торған, түбән ер. **Уйпат** — уйһыуыраҡ. *Ана, уйһыу урынға йыйылған күләүеккә салҡан ҡолап төшкән зәңгәр күк тә — Зиннәттең бала сағы!* (Ф. Иҫәнғолов). *Таулыҡтарҙа тәмле әмзә үҫә, уйпат ерҙәрендә — ҡуҙғалаҡ* (Р. Ниғмәти).

— Уйһыл, уйһыулыҡ; уйпатлыҡ.

**Уҡытыусы, мөғәллим** *иҫк.*, **педагог.** Уҡытыу, тәрбиә эше менән шөғөлләнгән кеше. **Уҡытыусы** киң ҡулланылышлы. *У ҡ ы т ы у с ы л а р съезы. У ҡ ы т ы у с ы булыу.* **Мөғәллим** хәҙер һирәк ҡулланыла. **Педагог** башлыса рәсми телмәрҙә ҡулланыла. *Ә ниңә мотлаҡ ҡаты күңелле булырға?! Судья ла, уҡытыусы һымаҡ уҡ, тәрбиәләүсе түгелме ни?* (Ғ. Әмири). *Техникумға уҡырға инергә теләйһеңме? Өс йылдан мәғлүмәтле педагог буласаҡһың?* (С. Агиш).

**Уңай(лы), ҡулай(лы), йәтеш(ле), йәпле, яйлы.** Ярап, килешеп, уңай килеп торған. Үҙара яҡын синонимдар (эш-хәлгә, һүҙгә ҡарата әйтелә). **Йәпле** — ипкә килеп торған, тотоноуға бик уңай. *Мин, ике бүрәнә араһынан уңайлы ғына урын табып, ята башлайым* (К. Мәргән). *Мин яуап бирҙем ҡыҙыма, ҡулайлы һүҙҙәр табып* (Р. Ниғмәти). *Кәрәк кенә саҡта йәтешле нәмә табыла һаламы ни ул* (Б. Бикбай). *Вәли бабайҙың балтаһын алып торайыҡ, һабы бик йәпле уның* (һөйл. теленән). *Айбулат былай уңай осрашыуҙы ҡулдан ысҡындырмаҫ өсөн, һөйләшергә яйлы һүҙҙәр эҙләне* (Һ. Дәүләтшина).

**Уңалыу, төҙәлеү.** Ит үреп ҡапланыу (яра тураһында). *Көн артынан көндәр үтте. Ҡаныштың ҡылыс яраһы уңалып бара, тик күңел тыныслығы килмәй* (Ғ. Ибраһимов). *Йәш талда тамға уңалыр бер нисә йылдан, ә йөрәктә тамға ҡалыр уңалмай торған!..* (Б. Бикбай).

**Уңған, булдыҡлы, егәрле, эшлекле, булған** *күсм.* Һәр эшкә һәләтле, эш ярата торған. **Уңған** — тыңлаулы төҫмөрөн дә бирә. **Егәрле** етеҙлек, өлгөрлөккә баҫым яһай. **Эшлекле** — эшмәкәр, егәрле. *Уның Хөсәйен тигән иптәше бар, уныһы ла шулай, бик уңған бала* (Һ. Дәүләтшина). *Өйҙә булдыҡлы ирем эшләп, тағы әллә нәмәләр алып ҡайтыр әле, тип көтөп ултырған Бәҙри, Шәрифтең ҡоро юнысҡы менән генә ҡайтып кергәнен күргәс, бер аҙ күңелһеҙләнде* (М. Ғафури). *Совет крәҫтиәне уңған да, егәрле лә* («Совет Башҡ.»). *Хәҙерге ял итеүселәрҙең күбеһе илдең эшлекле, ҡәҙерле кешеләре* (Һ. Дәүләтшина).

1. **Уңыу, йәлсеү, мандыу, кәтайыу.** Ниҙәндер файҙа кү-

реп, табыш алып байып китеү. **Уңыу** — киңерәк ҡулланылышлы: яҡшы булып сығыу, шәпкә сығыу. *Ҡәләштән у ң ы у. Малдан у ң ы у. Юл у ң ы у.* **Йәлсеү, мандыу** малға, байлыҡҡа ҡарата әйтелә. **Ҡотайыу** — хәлләнеү, тормош хәлен рәтләп алып китеү. *Атың ашамһаҡ булһа — уңдың, ҡатының ашамһаҡ булһа — бөлдөң* (мәҡәл). *Шунан бирле йәлсей алмай килеп, егерме дүртенсе йылда ғына һыйырын, башмағын, тағы бәләкәй арышын һатып, кооперативтан алған ярҙамын ҡушып бер ат алғайны* (Ғ. Дәүләтшин). *Иҙел буйы шул йүгеректе ҡәҙерләп тота белһә, йылҡының ҡото йәнә ҡайтыр ине. Шуға тиклем Иҙел буйы йылҡыға мандый алмаҫ* (әкиәттән). *Мисбах ҡарт үлер алдынан, 1914 йылда, улар тамам ҡотайып өлгөргәйнеләр инде* (Б. Бикбай).

2. **Уңыу, төҫһөҙләнеү.** Үҙ төҫө, буяуы бөтөү, аҡһылланыу. *Кешенең йәшенә ҡарап сәстәге пигменттар аҙая, ә һауа күбәйә, сәс уңа — ағара. Тимәк, сәс ағарыу — уның төҫһөҙләнеүенең күренеше ул* («Совет Башҡ.»).

**Уңыш, урожай.** Сәскән, ултыртҡан иген, йәшелсә һ. б. өлгөргәс алынған төшөмө. **Уңыш** киңерәк мәғәнәле. *У ң ы ш ҡ а ирешеү. У ң ы ш артыу. Беҙ быйыл, былтырғыға ҡарағанда, ике тапҡыр артыҡ сәстек. Шик юҡ, уңышты ла күберәк алырбыҙ* (Б. Бикбай). *Быйыл уҙған йылға ҡарағанда урып йыйыу эштәре бик ҡыҙыу, көсөргәнешле үтәсәк, сөнки игендәр ҡалын, мул урожай көтөлә* («Совет Башҡ.»).

— Уңдырышлы, уңышлы.

**Урлау, сәлдереү, шылдырыу** *күсм.*, **тайҙырыу** *күсм.*, **һөртөү** *күсм.*, **тибеү** *күсм.*, **кәгеү** *күсм.*, **айыу майы һөртөү** *һөйл.* Кеше нәмәһен, йәшертен рәүештә алып, үҙләштереү. **Урлау** киңерәк мәғәнәле. **Сәлдереү** — ҡул осондағы ваҡтөйәкте урлау. **Һөртөү, тайҙырыу, тибеү** — һиҙҙермәй генә, бик оҫта урлау. **Айыу майы һөртөү** — эҙ ҡалдырмай урлау (мыҫҡыллау тойғоһо белдерә). *Береһе халыҡтың ҡара тир түгеп тапҡан аҡсаһын сәлдерә, икенсеһе ҡыҙ урлай* («Совет Башҡ.»). *Йомортҡа, ҡыяр сәлдереү уларҙан да ҡалманы* (Р. Низамов). [*Фәйрүш:*] *Кеше күҙ-ҡолаҡ булмаған саҡта ..арышын да, бойҙайын да тайҙырып була* (Ҡ. Даян). [*Рәхимйән:*] *Ул бер ваҡыт баҙарға минең ҡарсыҡтың быймаһын тибеп тайған* (Н. Иҙелбай). *Аҡселән буйҙарында еңел юл менән ҡулға мал төшөрөүселәр булһа, улар: «айыу майы һөрттөм», «сәлдерҙем» йәки «шылдырҙым» тип тормайҙар..* (Б. Бикбай).

— Урлашыу, урлыҡ.

**Уҫал, яһил.** Асыуы ташып торған. **Уҫал** киң мәғәнәле: кешегә, йәнлектәргә ҡарата әйтелә. *У ҫ а л кеше. У ҫ а л эт.* **Яһил** — бик уҫал, сәсрәп торған (кешегә ҡарата ғына әйтелә). *Был мин уйлай ала торған нәмәләрҙең иң уҫалы, иң яуызы һәм иң ҡот осҡосо ине* (Ғ. Ибраһимов). *Ҡасам, тормайым, китәм хәҙер был яһилдар араһынан..* (Д. Юлтый).

— Уҫаллыҡ, уҫаллашыу; яһиллыҡ, яһиллашыу.

## Ү

**Үлеү, ауыу** *күсм.*, **ҡырылыу, китеү** *күсм.*, **сәнселеү** *күсм.*, *һөйл.*, **дөмөгөү** *һөйл.*, **сәсрәү** *күсм.*, *һөйл.*, **суҡыныу** *күсм.*, **вафат булыу, һәләк булыу, харап булыу, мәрхүм булыу, (яҡты) донъянан китеү (кисеү, үтеү), мәңгелеккә китеү, мәң-**

**гелек йоҡоға китеү, тормоштан китеү, теге донъяға китеү, ғүмер һүнеү, ғүмер өҙөлөү, гүргә инеү, ҡәбер эйәһе булыу, донъя ҡуйыу, йән биреү, аяҡ һуҙыу** *һөйл.* Йәшәүҙән туҡтау. **Үлеү** киң ҡулланылышлы: кешегә, йән эйәләренә әйтелә; стиль йәһәтенән битараф. **Ауыу** — яуҙа һәләк булыу; олпатлы, хөрмәтле кешегә ҡарата әйтелә. **Вафат булыу** китап теленә хас. **Ҡырылыу** — күпләп үлеү (бәхетһеҙлек, афәт нәтижәһендә; мал-тыуар, кешегә ҡарата). **Сәнселеү, дөмөгөү, сәсрәү, суҡыныу** асыу менән әйтелә, кире мөнәсәбәт белдерә. **Һәләк булыу, харап булыу** — бәхетһеҙлек арҡаһында үлеү. **Йән биреү** кешегә, йән эйәләренә ҡарата әйтелә. **Аяҡ һуҙыу** асыу тойғоһо белдерә. **Гүргә инеү, мәңгелеккә китеү, ғүмер һүнеү, ғүмер өҙөлөү, мәңгелек йоҡоға китеү** — ихтирам менән әйтелә, юғары стилгә хас. **Донъя ҡуйыу** ябай телмәрҙә ҡулланыла. *Яман ирҙәр үлер, ай, мал өсөн, яҡшы ирҙәр үлер дан өсөн* (халыҡ йырынан). *Донъя беҙҙән генә ҡалмаған ул, бер саҡ килер үлем — ят ҡунаҡ; Ауһам ине шул саҡ, бәйгеләрҙә йөрәге ярылып үлгән ат һымаҡ* (М. Кәрим). *Яу ҡырында тыуған иле өсөн ир-егеткәй юҡҡа ауырмы* (Н. Нәжми). *Лашманға ебәрелеүҙә еңел түгел. Унда киткәндәр, ҡаруман эсенән сыҡмайынса, караптар яһау өсөн ағас ҡырҡалар, сиргә һабышалар, үләләр, ҡырылалар* (Ғ. Ибраһимов). *Быйыл уларҙың күбеһе ҡыштың әсе һыуығында астан ҡырылып бөттө* (Һ. Дәүләтшина). *Инәкәйем, мин алдараҡ китһәм, ҡайғырма һис минең киткәнгә* (Р. Ғарипов). [*Әбей:*] *Әйҙә, ырыуы менән сәнселмәгәндәрме шунда тағы* (Т. Хәйбуллин). *Мулла үҙе дөмөгәп кенә китһен ине лә, бына кейәү мәрхүмдең үҙенә ауыр булыр, тип ҡурҡам шул* (Һ. Дәүләтшина). [*Йәнтүрә:*] *Баштары Себергә китте. Шунда үҙҙәре лә сәсрәне булырға кәрәк* (Ғ. Ибраһим-Ҡыпсаҡ). *Уларҙы алырға барып, әллә ни ҡәҙәре кешеләр шунда һәләк булғандар* (М. Ғафури). *Атаһы менән әсәһе харап булдылар, өсөнсөһө юғала бит инде..* (Һ. Дәүләтшина). *..Унан Ҡуҙыйкүрпәсте ҡосаҡлап ҡыҫты, ти, шулайтып Маянһылыу ҙа донъянан кисте, ти* (әкиәттән). *Ә ул 40 йәшендә беҙҙән мәңгелеккә китте. Ғәҙәттән тыш кеше батыр һәм ҡыйыу революционер, талантлы полководец һәм данлы ленинсы гвардияның боецы тормоштан китте* («Совет Башҡ.»). *«Ҡотҡарығыҙ».. Тимәк, унда тағы ла бер ғүмер һүнә* (М. Кәрим). *Һүндергәндәр минең күҙ нурымды, гөлкәйемдең ғүмере өҙөлдө* (Б. Бикбай). *Ҡарт сәсән, ана шулай үҙе йәшәгән ерҙең байлығына, матурлығына һоҡланып, ҡобайыр әйтте, ти. Ә тап бына шул ваҡытта Урал батыр үҙе донъя ҡуйҙы, ти* (әкиәттән). *Онотаһым юҡ үлгәндә лә, гүрҙәргә кергәндә лә* (халыҡ йырынан). *Һуң бит һеҙҙең ата-әсәләрегеҙ, йә булмаһа ағай-энеләрегеҙ уға барып, дарыу алып, ғазап сиккәндәре йәки теге донъяға киткәндәре барҙыр* (И. Насыри). *Ике-өс йыл эсендә бер өй эсенән өс кеше ҡәбер эйәһе булһынсы, ә?* (Ж. Кейекбаев). *Яуыз уйлы һөт күле батшаһының йән биреүе ана шулай булды, ти* (әкиәттән). *Ҡилде һатлыҡ йән, аҡсаға алданып, мылтыҡ аҫҡан булды, палачҡа ялланып, хужанан һорамай ул түргә уҙҙы һәм.. Конго ерендә аяғын һуҙҙы* («Совет Башҡ.»).

**Үлтереү, ҡырыу, бөтөрөү** *ҡусм.*, **һәләк (харап) итеү, юҡ итеү, башына етеү, башын ашау, йәнен ҡыйыу, йәнен алыу.** Йәшәүен туҡтатыу, тормошон өҙөү. **Үлтереү** бөтә йән эйәләренә ҡарата ла әйтелә. **Ҡырыу** — күпләп үлтереү. **Башына етеү** — эҙәрләп йөрөп үл-

тереү. **Башын ашау** — ауыр хәлгә ҡуйып һәләк итеү. *Баярҙың үҙен үлтермәксе инек, ҡалала булып ҡалды* (И. Насыри). *Яу ҡырында иртә, һуң тип торманыҡ, ҡайҙа барһаҡ, шунда фашист тураныҡ, ..йөҙҙө ҡырһаҡ, тағы меңде үлтерҙек, меңдән артып китһәләр ҙә бөтөрҙәк* (М. Кәрим). *Алмалай ҡыҙым Гөлйөҙөмдө юҡ итте, арыҫландай кейәүемде харап итте, ҡанескес..* (Һ. Дәүләтшина). [*Яран:*] — *Эй, батшам,— тигән,— һин уға бар менән юҡты алып килергә ҡуш. Ул уны барыбер таба алмаясаҡ. Шулай итеп беҙ уның башына етербеҙ,— тигән, ти* (әкиәттән). *Ышанмағыҙ, түрә тигәндәргә — Себер ебәреп үк, башты ашай* (халыҡ йырынан). *Әбей: «Ни эшләп улай балама тейҙең,— тине,— сабыйымдың ниңә йәнен ҡыйҙың»,— тине* («Бабсаҡ менән Күсәк»). *Ҡан өсөн — ҡан ағыҙырға, йән өсөн — йән ҡыйырға* (Ғ. Әмири). *Дошман һыртын биреп ҡасһа ла, йәнен алыр өсөн барырбыҙ* (Д. Юлтый).

— Үлеш, үлтереш; ҡырылыш.

**Үпкәләү, хәтер ҡалыу.** Кешенең һүҙ-ҡылығын ауырға алып, уға үсегеү. *Үпкәләп ултырғанға үпкә тороп ҡалған* (әйтем). *Әйҙә, ҡоҙа, түргә уҙ, аяҡҡайың талмаһын. Беҙҙең хәтер ҡалһа-ҡалһын, һеҙҙең хәтер ҡалмаһын* (халыҡ йырынан).

**Үс, ҡон.** Асыуҙы ҡайтарыу ниәте менән эшләнгән этлек, йәбер. **Үс** йышыраҡ ҡулланыла. *Ү с алыу. Ү с ҡайтарыу. Ү с ҡаныу. Ү с итеү. Ҡ о н о н алыу. Ҡ о н о н ҡайтарыу. Ҡәсеп таба алмағанлыҡтың, тапһа ла аҡсаһын эсеп бөтөргәнлектең үсен Йәмиләнән алмаҡсы була* (М. Ғафури). *Ете ҡыҙҙың ҡонон алмай, гүргә инмәҫ һөйәгем* (халыҡ йырынан).

— Үсәү, үсләшеү.

**Үсегеү, ҡылтайыу, ҡыйшайыу** *күсм.*, **кәзәһе төкөү** *һөйл.*, **кәзәһе артынан ҡалмау, һеркәһе һыу күтәрмәү.** Үпкә белдереп турһайыу. **Үсегеү** киңерәк ҡулланылышлы. **Ҡылтайыу, ҡыйшайыу** — бик тиҙ үсегеү, юҡ-барға ғына үпкәләп барыу. **Кәзәһе төкөү, һеркәһе һыу күтәрмәү** — еңелсә көлөп, шаяртыу төҫмөрө менән әйтелә.— *Мин шуны беләм: исем ҡуштылармы, үсегергә ярамай, үсектеңме, тарала ла китә ул* (С. Агиш). *Әхмүш ҡолас кереп йәшәргә ярата, маҡтаныңмы — ирей ҙә китә, саҡ ҡына ҡаршы килдеңме, тәртәһе ерек — ҡылтая ла ҡуя.* (Б. Бикбай).— *Ни эшләп кәзәң төкөй башланы әле?* (Ф. Иҫәнғолов).— *Кеше булғас, һөйләшә лә бел. Кәзәң төкөгән кеүек тик киләһең* («Совет Башҡ.»). *Әсәйем дауам итте: «Ә һин артыҡ үҙ һүҙлеһең. Саҡ ҡына булһа, һеркәң һыу күтәрмәй»* (Яр. Вәлиев).

**Үсекләү, ирештереү, үртәү** *күсм.*, **әләкләү.** Асыуландырырға, ярһытырға тырышып көлөү, мыҫҡыл итеү. *Күсәкте үсекләйҙәр, ҡыпсаҡ һин, тип, дым тарттиһә, бүртә торған борсаҡ һин, тип* («Бабсаҡ менән Күсәк»). *Эй егет, егет. Бер еңгәне лә еңеп, көмөш балдағын ала алмағас, ҡайһылай итеп ҡәйнеш булып йөрөгән булаһың! — Заһит ҡустыһын шаяртып ирештерҙе* (Һ. Дәүләтшина). *Унда күңелле, иптәштәре бөтәһе лә бала-сағалы кешеләр, көлөшәләр, бербереһен үртәп шаяралар* («Совет Башҡ.»).

**Үсексән, ҡылтымбай** *һөйл.*, **тәртәһе ерек** *һөйл.* Тиҙ генә үсегеп барған. **Тәртәһе ерек** — шаяртыбыраҡ әйтә торған йәшерен мәғәнәле һүҙ. *Өндәшмәйһең, һөйләшмәйһең, ипкә килмәһә көйөң, мырт итеп һынырға тора, ерек шул тәртәң һинең* (А. Игебаев).

**Үсләшеү, хасланыу, кенә ҡыуыу (тотоу), теш ҡайрау.** Үс

алыу ниәте менән асыу һаҡлап йөрөү. **Хасланыу** — нык үсләшеү, ҡаҙалыу. **Ҡенә ҡыуыу (тотоу), теш ҡайрау** — оҙаҡ үсләшеп, асыу тотоп йөрөү. *Ә һеҙ юрый үсләшеп, кис күперҙе һүтәһегеҙ!..* (Д. Юлтый). *Минең тәндән түгергә хасланалар важлатып ҡанды* (Д. Юлтый). *Тимерғәле ҡарт менән Сәгиҙә әбейгә үпкәләп, кенә ҡыуып торорға ла ваҡыт ҡалманы* (Һ. Дәүләтшина). *Синфи дошман тешен ҡайрай.. Ул теләмәй ҡанһыҙ үлергә* (Ғ. Амантай).

**Үтеү, уҙыу.** 1) Урындан күсеү, хәрәкәт итеү. *Йылғыр атҡа менгән берәү үтте, Шәһибәрәк тигән ир буғай* (халыҡ йырынан). *Юлда ла матур-матур ғына ирҙәр osраштырғылап, күҙҙәрен тултырып ҡарап уҙһалар ҙа, илтифат итмәне* (И. Насыри).

2) Ниндәйҙер тәңгәлде, сикте аша сығыу. *Фронт һыҙығын үтеү. Түргә уҙыу. Зәкиә, кухня яғынан сығып, зал аша йүгереп, коридорға үтте* (Һ. Дәүләтшина). *Волость йәйләүҙән байтаҡ ер. Бер нисә саҡрымдар урман уҙырға кәрәк* (Т. Хәйбуллин).

3) Хәл-ваҡиға, ваҡыт өҙөгө, хәҙергенән артҡа күсеү. *Ҡыш үтеү. Ҡаникул уҙыу. Йәш ғүмерем заяға үтте, бәхеттәрем булмағас* (халыҡ йырынан). *Плис еләндең тегелгәненә лә күп йылдар уҙған* (Ғ. Дәүләтшин).

— Үткәреү, уҙғарыу, уҙышыу.

**Үткер, сая, үтеп сыҡҡан.** Һис юғалып ҡала торған түгел, ҡыйыу. **Сая** — бик үткер, уҫал.— *Айбулат нисек булыр икән, бик үткер бит ул* (Һ. Дәүләтшина). *Егетең бик сая күренә. Ай-һай! Гәзит баҫыусы тиһеңме?* (Р. Низамов). *Ҡурҡыуҙы белмәҫ сая разведчик булған [Шәүрә]* (Ф. Исәнғолов).

# Х

**Хакимлыҡ итеү, хөкөм һөрөү.** 1) Ҡемдәләр ҡул аҫтында тотоу, бойондороҡло итеү. *Кешелек өҫтөнән хакимлыҡ итеүсе яуыз көстәр һаман хаким булып ҡалғандар* (Ғ. Әмири). *Ҡайһы бер илдәрҙә фашистик ҡоролоштар хөкөм һөрә әле* («Совет Башк.»).

2) Өҫтөнлөк итеү. Был мәғәнәлә **хөкөм һөрөү** күберәк ҡулланыла. *Дмитриев, күкрәк һуғып, квартирала хакимлыҡ итә* («Совет Башҡ.»). *Төнө буйы кешеһеҙ торған өйҙә күңелгә әллә ниндәй шом һалған тәрән тынлыҡ хөкөм һөрә* (Ф. Исәнғолов). *Аҙнағол бар ерҙә быңдай ҡырағай йоланың хөкөм һөрөүенә ышана алмай [Зөлхизә]* (З. Биишева).

**Хис, тойғо.** Эске кисереш. **Хис** ныҡлы, тәрән кисерештә белдерә. *Ҡайнар хис. Әсәлек хисе. Хис итеү. Һөйөү хисе. Хискә бирелеү.* **Тойғо** — алмашынып торған, ваҡытлы кисереш. *Көнсөлөк тойғоһо. Ҡыҙғаныу тойғоһо. Үкенеү тойғоһо. Тойғоға бирелеү. Был аңлайышһыҙ хис май иртәһе кеүек яҡты, саф һәм йөрәкте елкендерә ине* (Ә. Вәли). *Рәүф ағайҙың ..һуңғы һүҙҙәренән биттәрем янып китте, ниндәйҙер тойғо рәхәт итеп тәндәремде зымбырҙатты* (Н. Мусин). *Әбей үҙен ҡаплап алған шатлыҡ тойғоһона сумған* (Һ. Дәүләтшина).

**Холоҡ, ҡылыҡ, ғәҙәт, характер.** Кешенең булмышына хас үҙенсәлектәр. **Холоҡ, ғәҙәт** йышыраҡ ҡулланыла. *Йомшаҡ холоҡ. Ҡаты холоҡло. Ғәҙәткә инеү. Ғәҙәт итеү. Әбей Айбулаттың былтирәләге үҙе белгән ҡорҙаштарынан айырылып торған, үҙе-*

*нә айырым холоҡло кеше икәнен һынап алды* (Һ. Дәүләтшина). *Ҡылығын белмәгән малға яҡын барма* (мәҡәл). *Был хәҡикәт менән килешмәй булмай, сөнки ҡустыларынан артҡа ҡалмаҫҡа тырышҡан ҡарттың бөтә һын-хәрәкәте, ҡылыҡ-холҡо ғәжәп бер юмор теле менән быны үҙе үк әйтеп бирә* («Совет Башҡ.»). *Уны күрергә тырышыуымдың тағы бер сәбәбе шул: ул егеттә һинең улыңдың — Аскарыңдың ғәзәттәре бар* (Һ. Дәүләтшина).

— Холоҡһоҙ, ғәҙәтһеҙ, ғәҙәти, ғәҙәтләнеү, ғәҙәтсә.

**Хөрмәт, ихтирам, ҡәҙер, почет.** Эше, хеҙмәте, яҡшылығы һ. б. өсөн күрһәтелгән олоloҡло мөнәсәбәт, маҡтау. Һүҙбәйләнештәрҙә ҡулланылышы менән айырылалар. *Ҙур х ө р м ә т. Оло х ө р м ә т. Х ө р м ә т күрһәтеү. Тәрән и х т и р а м. П о ч е т таҡтаһы. Ҡ ә ҙ е р итеү. Хеҙмәт төбө — хөрмәт* (мәҡәл). *Бына шуға ла малсылар уға хөрмәт һәм ихтирам менән ҡарай* («Совет Башҡ.»).

— Хөрмәтле, ихтирамлы, ҡәҙерле, ҡәҙерһеҙләү; почетлы.

**Хурлау, мәсхәрәләү, мыҫҡыллау, йөҙөн (битен) йыртыу, битенә ҡара яғыу, эт тиреһен битенә ҡаплау** *һөйл.*, **рисуай итеү (ҡылыу).** Кеше алдында кәмһетеп, әрләп оятҡа ҡалдырыу, оятлы итеү. **Хурлау** киңерәк мәғәнәле: оятлы итеү һәм яманлап һөйләү. **Мәсхәрәләү, мыҫҡыллау** — ныҡ оятҡа ҡалдырыу, ныҡ хурлау. **Йөҙөн (битен) йыртыу** — кеше алдында әсе көләү. **Биткә ҡара яғыу** — яла, ғәйбәт менән оятлы итеү. **Эт тиреһен битенә ҡаплау** — бик ныҡ мыҫҡыл итеп әрләү, мәсхәрә итеү. *Ә инде әрләргә, хурларға тиһәң, байбикәләрҙән дә оҫтараҡ кеше тапмаҫһың* (Х. Мохтар). *..Муйылбикә: «Ҡороғоро бала, ҡарт көнөмдә бала үҫтерҙем, тип, ҡыуанып торғанда, ҡайһылайтып йорт алдында мәсхәрә итте»,— тип иланы* (Һ. Дәүләтшина). [*Түрәләр:*] *..илде бөлгөнлөккә төшөрөп, бала-сағаларын мәсхәрәләп, ҡотон алып килделәр* (Т. Хәйбуллин). *Ләкин был сара менән генә ҡәнәғәтләнмәйенсә, бесәй уны, үсәп-үсәп, мыҫҡыллап, сайылдатып ашап ҡуйған* («Һәнәк»). *Етерлек йырттылар йөҙөңдө, сереттеләр золматта үҙеңде, һин хәҙер ватандың хөр улы, бынан һуң асыҡ тот күҙеңде* (Ш. Бабич).— *Ҡарт көнөмдә битемә ҡара яҡты, бәдбәхет ҡыҙыҡай! — тип екеренде ҡарт* (Н. Иҙелбай).

— Хурлыҡ, мәсхәрә, мыҫҡыл.

**Хушһыныу, мөрхәтһенеү.** Ҡәнәғәт булыу. *Сәй эсеп тә бына тигән итеп һөйләшеп ултырып була ла баһа. Юҡ, ҡайһы берәүҙәр быны менән хушһынмай* («Совет Башҡ.»).

**Хәжәт, кәрәклек, ихтыяж.** Барлығы, тейешлеге мотлаҡ булған нәмә. *Мыҫҡыллауға муллалыҡтың хәжәте юҡ, ғалим булһа, лаф орһон хикмәт менән* (М. Аҡмулла). *Унда эшселәргә ихтыяж ҙур икәнен һөйләнеләр* (М. Ғафури).

**Хәйер, саҙаҡа, хәйер-саҙаҡа.** Дини йола буйынса йәки ҡараулыҡ кешегә ярҙам рәүешендә бирем. **Хәйер** ваҡ-төйәк биремде лә белдерә. *Х ә й е р биреү. Х ә й е р таратыу. Х ә й е р һорау ..Уларҙың уҡырға барыу ҡайғыһы юҡ, ҡарттары, йәштәре менән аралаш булған хәлдә, күсерлек итәләр, урам һеперәләр, лимон, әфлисундар һаталар, хәйер һорап йөрөйҙәр* (М. Ғафури). *Ваҡ-төйәк саҙаҡа-фәләнен Хөснулла ағай үҙе өләшкән* (Ҡ. Мәргән). *Хәйер-саҙаҡамды, ғөшөр-фитырымды— бөтәһен дә ваҡытында түләйем* (И. Насыри).

**Хәйләһеҙ, бер ҡатлы, ауан, эсендәге тышында, шар ҙа мар** *һөйл.* Артыҡ ябай, уй-ниәте һиҙелеп торған (кеше). **Хәйләһеҙ** киңерәк мәғәнәле: хәйлә-

лəй белмəгəн, артыҡ асыҡ. **Эсендəге тышында** — һəр уйын белдереп, һөйлəп бара торған. *Хəйлəһеҙ батыр тиҙ үлер* (мəҡəл). *Хəйлəһеҙ бер сабый һымаҡ уны [Туҡайҙы] йыуатты тик яҙған юлдары* (Р. Ғарипов). *Ауыл ҡатындары уның хаҡында: «Беҙҙең Гөлназ бигерəк бер ҡатлы, мəмəй ҙə инде. Ауыҙына бармаҡ һалһаң, уны ла тешлəй белмəҫ!» — тиҙəр ине* (Ғ. Əмири). [*Ҡадир:*] *Был эштə инде, Фатима, мин ауан кеше, ул яғын үҙең ҡара* (Б. Бикбай). *Райондан килгəн кеше тип тормай, эсендəге тышында* (Р. Низамов). *Шар ҙа марҙа бер ни юҡ, тымыҡ күлдə ҡорт уйнай* (əйтем).

**Хəлле, етеш.** Материаль йəһəттəн көслө, бай. *Х ə л л е кеше. Е т е ш хужалыҡ. Күрəһең, колхоз да хəлле, ҡыҙ менəн егет данлы* (Б. Бикбай).

**Хəтер, иҫ, зиһен.** Үткəн, кисерелгəнде аңда һаҡлау һəлəте. **Хəтер** йышыраҡ ҡулланыла. *Х ə т е р ҙ ə тотоу. Х ə т е р г ə килтереү. Х ə т е р г ə төшөрөү. И ҫ т ə тотоу. И ҫ т е юғалтыу. И ҫ т ə н сығыу. З и һ е н таралыу. Минең үҙемдең хəтер бик насар* (И. Насыри). *Иҫəрҙең иҫе булмаҫ, ялҡауҙың эше булмаҫ* (мəҡəл). *Беҙ, ҡоштарға, хəбəр таратты, бөтə ҡоштарҙың зиһенен таратты* (Д. Юлтый). *Һаман булһа был хəлгə минең аҡыл-зиһенем етмəй* (С. Ҡулибай).

— Хəтерлəү, иҫлəү.

**Хəстəр, мəшəҡəт.** Борсолоу тыуҙырған, тынғыһыҙлап торған эш. *Ошондай иң тапҡыр, иң дөрөҫ, иң ғəҙел яуап табылғас, малайҙар хəстəрҙəн бушап, иркенəйеп ҡалды* (М. Кəрим).

— Хəстəрлəү, мəшəҡəтлəнеү.

## Һ

**Һағалау, аңдыу.** Арттан күҙəтеп йөрөү йəки йəшенеп ҡарап тороу. **Аңдыу** — йəшеренеп көтөп ятыу. *Бер ҡасан да, шағир, ҡара болот таралмаған һинең өҫтөңдəн, ҡайҙа барһаң, яҙмыш, йылан булып, гел һағалап йөрөгəн эҙеңдəн* (Б. Бикбай). *Яуҙа үлем, ас бүре кеүек, һине һағалап йөрөй* (С. Ҡулибай). *Баяғы бөркөт һаман мəғрур төҫтə кəйелеп оса, йəшендəй атылып, сырҡылдатып баҫып алаһы ҡорбанын аңдый ине* (Ə. Хəкимов). *Алыҫтағы дошмандан аңдып йөрөгəн дуҫ яман* (мəҡəл). *Айһыҙ төндə юлсы үтəр юлды аңдып ятмағандар урманда* (Р. Ниғмəти).

**Һағыныу, алғыһау.** Һағыш кисереү, кемделер юҡһыныу. **Алғыһау** — өҙөлөп һағыныу, зарығыу. *Яҙ етə тип, мин дə бер ҡыуанам, ибер йырлайым, өҙөлөп һағынып..* (Ш. Бабич). *Тыуған яҡтарыма оҙаҡ ҡайта алмай алғыһап бөттөм* (һөйлəтеленəн).

— Һағыш, һағышлы, һағыныслы.

1. **Һаҡ, абай.** Эш-хəлде, шарттарҙы тулыһынса иҫəпкə алып, уйлап (эш итеү). *Ил һаман тынысланмай. Уңды-һулды абайлап, бик һаҡ торорға кəрəк* (Ғ. Ибраһимов). *Ə һин Зиннəт килтереп киткəн китапты уҡы. Тик абай бул, кеше-ҡара күрмəһен* (Х. Мохтар).

2. **Һаҡ, уяу, һиҙгер.** Һəр төрлө хəлгə əҙер, иғтибары йүнəлтелгəн. **Һиҙгер** — тиҙ генə һиҙеп алыусан. *Ышанмаһаң, батшам, үҙең һынап ҡара: бөгөн төндə йоҡлаған булып ҡына ят, лəкин бик һаҡ бул* (əкиəттəн). *Лəкин — бөгөн дə беҙ уяу торҙоҡ, һис кем юғалтманы үҙ посын* (Ғ. Сəлəм). *Һыуһылыуҙың һиҙгер ҡолағы йəнə Дим яғынан сабып килгəн ат тояҡтары тауышын ишетə..* (əкиəттəн).

— Һаҡлыҡ, уяулыҡ, һиҙгерлек.

**Һалбырау, һалыныу, һалпайыу** *һөйл.*, **сосолоу, сосрау.** Аҫҡа ҡарай һуҙылып, аҫылынып тороу. **Һалбырау (һәлберәү)** — аҫылынып, болғанып тороу. **Һалпайыу (һәлпәйеү)** — бөгөлөп төшөп тороу. **Сосолоу, сосрау** — бәйләгән ерҙән ысҡынып, һүтелеп аҫылынып тороу. *Тау тишегендәге теге Иргәйелдең мең ҡарыш һаҡалынан ишелгән арҡан һаман һалбырап тора икән* (әкиәттән). *Уларҙың береһе, алпан-толпан баҫып, бер аяҡ менән генә атлап йөрөй; икенсеһенең ҡолаҡтары, һалынып төшөп, ергә тейеп тора* (әкиәттән). *Ә мин, ғүмер буйы иген иккән кеше, йөрөйөм шунда һаҡал һалпайтып..* (Б. Бикбай). *Ҡанаттары һәлпәйә, кикректәре төшә* (С. Агиш). *Фатима, мамыҡ шәле аҫтынан сосолоп сыҡҡан сәс бөртөктәрен тиҙ генә иплəп, Ҡадирҙы үҙе үк ҡултыҡланы ла тышҡа атланы* (Б. Бикбай).

**Һанау, иҫәпләү, хисаплау.** 1) Ниҙең дә булһа иҫәбенә сығыу, һанын белеү. **Һанау** — башлыса бөртөкләп иҫәпләү. **Хисаплау, иҫәпләү** күңелдән иҫәп үткәреүҙе лә белдерә. *Ә көҙ еткәс, малдарҙы ҡабат кәртәләргә туплайҙар икән дә, шунан кәртәгә һыймай ҡалғандарын ғына иҫәпләп, күпме үрсем булғанын ҡарсығы билдәләй икән, ти. «Ҡуйсәле,— тигән ул,— малды һанаһаң бәрәкәте ҡаса ла ул..»* (Б. Бикбай). *Ул, күңеленән хисаплай-хисаплай, икенсе яҡҡа атланы* (Б. Бикбай).

— Һанаулы; иҫәпле, хисаплы.

2) Берәй нәтижәгә, фекергә килеү; хис итеү. *Ҡулдарымды һелтәп китеп барам. Ҡулдарым да миңә пар ҡанат. Барам — иркем, ерем күрке менән үҙемде мин сикһеҙ бай һанап* (Н. Хәбиров). *Күптәр грипты әллә ни зыянлы булмаған, еңелсә ауырыу тип иҫәпләй* («Совет Башҡ.»). *Мин халыҡтың, бигерәк тә Хасбулат олатай кеүек ҡарттарҙың, һәр бер батырҙы үҙ тоҡомо, һис юғында, үҙ яҡташы итеп иҫәпләү ғәҙәтен яҡшы беләм* (З. Биишева).

**Һандуғас, былбыл.** Матур тауышлы, бәләкәй генә һайрар ҡош. Ҡатын-ҡыҙға ҡарата һөйөп, иркәләп өндәшеү һүҙе итеп тә ҡулланыла. **Былбыл** күберәк шиғриәттә ҡулланыла. *Йомшаҡ ҡына йылы күк томанға төрөнгән туғайҙарҙы маҡтап, һандуғастар һайраны* (И. Насыри). *Былбыл булып һайра, күңелемде йыуат, былбылым* (Я. Ҡолмой). *Йөрәгемдә янған һағыштарҙы һиҙҙеңме әллә, моңло һандуғас? Мин йырламай, былбыл, кем йырлаһын, йөрәк ялҡындарым ҡабынғас* (Ш. Бабич).

**Һаран, ҡомһоҙ, ҡарун, сығышһыҙ, һыҡмыр, бөхил, ҡаты** *күсм.*, **ҡырҡһаң ҡаны сыҡмаҫ** *һөйл.* Мал-мөлкәтен тотонорға, кешегә бирергә бик ҡыҙғана торған, ҡыҫып тотҡан (кеше). **Һаран** киң ҡулланылышлы. **Ҡомһоҙ** — байлыҡтан туя белмәгән, гел үҙенә тарта торған. **Ҡарун, һыҡмыр** — үтә һаран. **Бөхил** һирәгерәк ҡулланыла. **Ҡаты, сығышһыҙ** — нәмәһен кешегә биреп бармай торған. *Һаран байҙың күҙе уттай булып китте, ти шул саҡ* (әкиәттән). *Ул [Плахин] үтә ваҡсыл, ҡомһоҙ, һаран бер кеше ине* («Совет Башҡ.»).— *Брискин — ҡарун, уны бөтәбеҙ ҙә беләбеҙ! — тине Егор* (Х. Мохтар).— *..Ниңә һүң шунда [Мырҙағол] һинең хаҡта ла әйтмәгән?— Эй, ул һыҡмыр байҙың..* (Ғ. Ибраһимов). *Ныяҙғолға мал түгеп, ҡыҙ алыу ҡайҙа ул һыҡмырға, ҡырҡһаң ҡаны сыҡмаҫ, шундай һаран..* (Һ. Дәүләтшина). *Сергей ҡулын ғына һелтәй.— Эй, ул бөхилде. Бер эсереп, әрләндем инде мин унан* (Н. Мусин). *Ҡеше менән аралашмаҫ, хатта айыу һунарына ла йәйәү йөрөүсән, ҡырҡһаң ҡаны сыҡмаҫ һаран бәндә ине* (Н. Мусин).

**Һаҫыу, еҫләнеү, һөрһөү, һамҫыу, бурһыу, ҡаҡһыу.** Насар еҫ сығарып сереү, боҙолоу. **Һаҫыу** киңерәк ҡулланылыщлы: боҙолоп еҫ сығарған һәр нәмәгә ҡарата әйтелә. **Һөрһөү** иткә ҡарата әйтелә. **Бурһыу, һамҫыу** — нык боҙолоп күгәреп китеү. **Ҡаҡһыу** күберәк әсегән һөт, ҡатыҡ кеүек нәмәләргә ҡарата әйтелә. *Ниместәрҙе һораһағыҙ, бигерәк насар халыҡтыр. Беҙгә ашатҡан аштары һаҫып бөткән балыҡтыр* (бәйеттән). *Ит еҫләнһә, тоҙ төҙәтер, дуҫ еҫләнһә, ни төҙәтер* (мәҡәл). *Бурала ятҡан итте ҡараған юҡ ине, һөрһөгән дә ҡуйған* (һөйл. теленән). *Һеҙҙе көтөп ултырһаң, ҡаҙҙың да бурһыуы бар* (әкиәттән).

**Һау, иҫән, сәләмәт, таҙа, имен, аман, шәп.** Ауырыу-сырхауһыҙ, һаулығы яҡшы. Сәләм биреү, иҫәнләшеү формаһы булып та йөрөйҙәр. **Һау, сәләмәт, иҫән** йышыраҡ ҡулланылалар. **Таҙа** — ауырымай, ныҡлы. **Шәп** һөйләү теленә хас. *Ҡояш сыға әйләнеп, тал сыбыҡҡа бәйләнеп, иҫән булһаҡ, беҙ ҡайтырбыҙ, Тыуған илгә әйләнеп* (Ғ. Сәләм). *Урамға сығыу менән ул, былай ҡурҡынысы һуғыштан сәләмәт ҡалыуына шатланып, илап ебәрҙе* (М. Ғафури). *Ил-көндөң һаулығын, мал-йәндең аманлығын һорашып, шунда менеп ултырғас, Ҡилмәк абыҙ был йорттоң именлегенә доға ҡылды* (Ғ. Ибраһимов). *Минең кеүек һау-таҙа кешеләргә ҡотолоу юҡ,— ул үҙенең һаулығына үкенгән кеүек ҡайғылы көрһөндө* (Һ. Дәүләтшина). *Батша Ҡөмөшбайҙы уҙ иркенә ебәргән. Ул әле булһа үҙенең шул ҡатыны менән имен генә тороп ята икән, ти* (әкиәттән). [*Ниғмәт:*] — *Ҡуй, бушты һөйләмә! Кешегә үлем теләгәнсе, үҙеңдең йөрөмөңдө телә. Һауығырһың да, иҫән-аман сығырһың да* (Ҡ. Аралбаев). *Ай йөрө — аман йөрө* (мәҡәл). *Ул* [*Көләмбәт*] *һаман да йәшәр ине аман ғына, ҡыпсаҡтарҙы ҡыйратмаһа заманында* («Бабсаҡ менән Күсәк»).— *Әй раббым, кейәү, һин бит, һау ҡайттыңмы?— Бик шәп ҡайттым. Дыу һелкетеп* (Һ. Дәүләтшина).

**Һауалау, үрләү, күтәрелеү.** Күккә олғашыу, юғарыға ҡарай күсеү. **Үрләү** — әкрен, талғын күтәрелеү. *Төтөн үрләү. Ятҡан ҡуян һағалап, бөркөттәре атылған; ҡарағошо һауалап, болоттарҙан атылған* (ҡобайырҙан). *Төтөн киске тынлыҡ менән һирпелеп, яйлап йәйелде лә Ирәндек өҫтөндә аҫылынып торған ап-аҡ көмөш болоттарға үрләп барып ҡушылды* (Һ. Дәүләтшина).

**Һауығыу, төҙәлеү, шәбәйеү, рәтләнеү, сихәтләнеү, терелеү, йүнәлеү, таҙарыу** *күсм.*, **арыуланыу, аяҡҡа баҫыу.** Ауырыуҙан котолоп, иҫән-һау хәлгә ҡайтыу. **Төҙәлеү** күберәк яранан һауығыуҙы белдерә. **Арыуланыу, рәтләнеү** — бер аҙ шәбәйеү, аяҡҡа баҫыу. **Сихәтләнеү** һирәгерәк ҡулланыла. *Һин һауыҡһаң ине. Дуҫһыҙ ауыр, әҙләп килдем әсем бошҡанға* (М. Кәрим). *Ә төҙәлеп, яңынан фронтҡа киткәс тә, улар мине онотмайҙар, хаттар яҙалар, мин дә яуаптар яҙып торам* (Һ. Дәүләтшина). *Һаулығым бик ҡаҡшағайны, бер аҙ рәтләндем* (һөйл. теленән). *Фәғилә әбей, ошо тоҙҙо әсһәң, иртәгә сихәтләнерһең, тигәйне* (Ғ. Хәйри). *Ҡыйыу егет өс аҙнанан больницанан терелеп сыға* («Совет Башҡ.»). *Минең яҡын дуҫ лазареттан йүнәлеп килде бит..* (А. Таһиров). *Больницала бер аҙна ятҡас, Гөльямал таҙарҙы* (А. Ҡарнай). *Үҙем арыуландым. Тик хәл генә юҡ* (Һ. Дәүләтшина). *Һөйәк менән тирегә ҡалған Емеш аяҡҡа баҫты. Уның һауығып, тиңдәштәре араһына сығыуына иң ҡыуанған кеше Шәүрә булды* (З. Биишева).

**Һелтәнеү, киҙәнеү.** Һуғырға, бәрергә ынтылыу, йомолоу. *Уҡ үтмәҫ ергә ҡылыс менән һелтәнмә* (мәҡәл). *Йүгерә-атлай килде лә шул тиклем ныҡ киҙәнде.. [полицай]. Ләкин һуҡманы* (М. Басыров).

**Һемәйеү, ҡоро ҡалыу, ҡолаҡ ҡағыу, һәп итеү** *һөйл.* Бер-бер нәмәнән тороп ҡалыу, ниҙәләр ҡулдан ысҡындырыу (еңелсә көлөү тойғоһон бирәләр). **Һемәйеү** алданыу төҫмөрөн дә белдерә. **Ҡоро ҡалыу** — өлөштән буш ҡалыу төҫмөрөн дә аңлата. **Һәп итеү** — ныҡ алданып, буш тороп ҡалыу. *Сана шыуып түбән төшөп китә, шайтан һемәйеп тау башында ултырып ҡала* (әкиәттән). *Һауалағы торнаға ышанып, ҡулыңдағы сыпсыҡтан ҡоро ҡалма* (мәҡәл). *Ике кәмә ҡойроғон тотма, береһенән дә ҡоро ҡалырһың* (мәҡәл). *Мине һыуҙан айырһаң, бәхеттән буш ҡалырһың, барынан ҡолаҡ ҡағырһың* («Аҡбуҙат»).

**Һеңле, һылыу, ҡарындаш.** Үҙеңдән кесе ҡыҙ туған; үҙеңдән кесе булған һәр ҡатын-ҡыҙға мөрәжәғәт иткәндә лә ҡулланыла. **Һылыу** күберәк һөйләү теленә хас. *Баҫҡыста әсәйем, бисәм, ҡыҙым, һеңлем баҫып торалар* (Ғ. Әмири). *Ошо ваҡыттан алып, беҙ, әсәйем һәм ике һылыуым, олатайым Шәрәфи Аҡъюлов ҡарамағында тороп ҡалдыҡ* (Б. Бикбай). *Ағаҡайым салғы яныған-да, талмаймы ни һинең беләкәйең? Ҡарындашыңды алып киткәнгә, янмаймы ни һинең йөрәкәйең?* (сеңләүҙән).— *Ҡарағыҙ әле, ҡәрендәш,— тип начальник урынынан торғайны ла, Шәһүрә туҡтаманы* (Н. Мусин).

**Һерәйеү, сурайыу, сусайыу, тумпайыу.** Ослайып сығып тороу, ҡалҡып тороу. *Был юлы дейеү муйынынан ергә батып, туғыҙ башы туғыҙ яҡҡа ҡарап һерәйеп ҡалды, ти* (әкиәттән). *Етмәһә, аслыҡ йылдарында ашар нәмәләре булмағанлыҡтан, үлгән кешеләрҙең өй, кәртә-ҡура ҡалдыҡтары, ағасы, ташы, кирбестәре сусайышып-сусайышып сығып торалар* (Ғ. Дәүләтшин). *Сурайып сығып торған ташҡа бәке осо менән тәрән итеп соҡоп, Зиннәт икеһенең исемен йәнәшә яҙғайны* (Ф. Иҫәнғолов).

**Һикереү, ырғыу.** Ҡиҫкен генә этәреш яһап, урындан күсеү. **Һикереү** киңерәк ҡулланыла. *Һ и к е р е ү буйынса ярыш. Бейеклеккә һ и к е р е ү. «Был йөрөүҙә уңды юлым», тип, охотник шатлана, һәм үҙе ырғый-һикерә, маҡтана, тинтәкләнә* (Ш. Бабич). *..Ҡалаға барҙыниһәм, үҙем дә шунан ырғыйым әле, ҡартсәй* (Һ. Дәүләтшина).

— Һикереш, һикереүсе, һикерәнләү; ырғаңлау.

**Һил, тын(ыс).** Тауыш-тынһыҙ, шау-шыу булмаған (хәл-торош). *Туҡтаған урындары һил, ыжғыр елдәрҙән тулҡын-тулҡын убалар һаҡлап тора* (Ә. Хәкимов).

— Һиллек, тынлыҡ.

**Һимеҙ, көр.** Тәнендә майы күп булған (мал тураһында); ябыҡтың киреһе. *Һигеҙ һыйыр аҫрағансы, һимеҙ һыйыр аҫра* (мәҡәл). *Аттар көр. Оло юл менән елдереп баралар* (М. Ғафури).

— Һимеҙлек, көрлөк.

1. **Һимереү, көрәйеү.** Тәнендә майы күбәйеү (малға ҡарата); ябығыуҙың киреһе. *Эт һимерһә, эйәһен тешләй* (мәҡәл). *Йәшел үлән күтәрелеү менән малдар көрәйҙе, һөт-ҡатыҡ та, ҡорото-майы ла мул* (Ғ. Ибраһимов).

2. **Һимереү, таҙарыу.** Тәнгә ит ҡуныу, тулыланыу. *Сибек кенә кәүҙәле Флүрә таҙарып, үҫеп киткәндәй булды* («Совет Башҡ».).

**Һиңмай, ғәмһеҙ, моңһоҙ, вайымһыҙ.** Бер нигә лә артыҡ иҫе китеп бармаған, моңһоҙ. *Ниндәй бәхет яҙғандарым менән уята алһам тик бер һиң-*

*майҙы* (Б. Бикбай). *Аяуһыҙға беҙ, таш йөрәк, тибеҙ, таштай һалҡын тибеҙ ғәмһеҙгә* (Н. Нәжми).

— Ғәмһеҙлек, моңһоҙлоҡ, вайымһыҙлыҡ.

**Һөйкөмлө, яғымлы, мөләйем, өнәмле** *һөйл.* Күңелгә ятышлы, үҙенә тартып, оҡшап торған. **Һөйкөмлө** киңерәк мәғәнәле: кешегә, тәбиғәт күренештәренә ҡарата әйтелә. Башҡалары кешегә ҡарата ғына ҡулланыла. **Яғымлы** мөнәсәбәттәге нескәлеккә баҫым яһай. *Я ғ ы м л ы ҡараш. Я ғ ы м л ы тауыш.* **Мөләйем** киәфәткә ҡарата әйтелә. *М ө л ә й е м ҡараш. Ул артыҡ матур ҙа түгел, ләкин бик һөйкөмлө ине* (М. Ғафури). *Көлөү беҙҙең яҡын туған сифат, тормош үҙе яҙҙай һөйкөмлө* (М. Хәй). *Ҡыҙ үҙе аҡыллы, үҙе матур, үҙе яғымлы, үҙе бик уңған булып сыҡҡан* (әкиәттән). *Бик мөләйем күренгән был ике йәш ҡатын, килеп инеү менән, Торғашевтың боғаҙынан алдылар..* («Һәнәк»). *Һөйгән йәрҙең өнө өнәмле* (мәҡәл).

**Һөйләнеү, лығырҙау, лаҡылдау, ләпелдәү, ләңкелдәү, мығырҙау, мөңкөлдәү, сөңкөлдәү, таҡылдау, ауыҙҙа бутҡа бешереү** *һөйл.* Аңлайышһыҙ хәбәрҙе туктауһыҙ һөйләү. Яманлау, яратып етмәү тойғоһо белдерелә. **Лығырҙау** — үҙ алдына һөйләнеү. **Лаҡылдау** — ҡысҡырып һөйләнеү. **Ләңкелдәү** кемделер әрләп һөйләнеү. **Ләпелдәү** — ярамһаҡланып һөйләнеү. **Мығырҙау, мөңкөлдәү** — аңлайышһыҙ, үҙлегенән ниҙер һөйләү. **Сөңкөлдәү** — әрләп һөйләнеү. **Таҡылдау** — туктауһыҙ артыҡ ҡысҡырып һөйләү. **Ауыҙҙа бутҡа бешереү** — аңлайышһыҙ һөйләнеү. *Оҙоноҙон бүрәнә, санаға һалһам, һөйрәлә. Яратамын тигән була, әллә ысын, әллә һөйләнә* (халыҡ йырынан).— *Әллә былар ҡыҙыллана башлағандармы,— юҡһа, ҡалайҙарын ҡыҙылға буяткандар,— тип лығырҙап алды* (И. Насыри). *Ул тағы байтаҡ лаҡылданы* (Һ. Дәүләтшина). *Мөхәянов уның һүҙен тағы бүлде: «Етте, күп ләпелдәмәгеҙ!»* (Н. Мусин). [*Ҡартсәһе:*] — *Йә, нәмәкәйгә күп ләңкелдәп тораһың. Мальстук-ҡалстугыңда эшем юҡ, йөрөмә ир балалар ғошап! — тип ҡысҡырҙы* (Һ. Дәүләтшина). [*Ишбулды:*] — *Хәҙер төшөндөм инде, бына кем сарлаған икән халыҡ телен..— тип мығырҙанды* (Ғ. Әмири). *Юлдыбай өндәшмәй ятып ҡараһа ла, Рәйсә бер туҡтамай мөңкөлдәгәс: «Йә, ят инде, һөйләнеп торма!» — тине* (Һ. Дәүләтшина). [*Хәйрүш — Ғәлимйәнгә:*] *Нимә һин ауыҙ эсендә бутҡа бешереп ултыраһың?* (Х. Ибраһимов).

— Һөйләнсәк, лығырҙаҡ, ләңкелдәк, лаҡылдаҡ, ләпелдәк, сөңкөлдәк, мөңкөлдәк.

**Һөйләшеү, гәпләшеү, әңгәмәләшеү, фекер алышыу, гәп һуғыу.** Бер нисә кеше бергәләп һүҙ алып барыу, фекер уртаҡлашыу. **Гәпләшеү** — юк-бар хәбәр һөйләшеү төҫмөрөн дә бирә. **Фекер алышыу** — етди һөйләшеү. **Гәп һуғыу** — ваҡтөйәк хәбәр һөйләшеү. *Үҙҙәренә хас булған һәр бер эштә бергә һөйләшәләр, гәпләшәләр, ҡайғырһалар ҙа, шатланһалар ҙа уртаҡлашалар ине* (М. Ғафури). *Был малай менән гәпләшеп ултырыу Ҡолбаевты ла ялҡытҡан булһа кәрәк..* (Н. Мусин). *Улар менән танышырға, аҙ-маҙ фекер алышырға тура килде* (И. Насыри). *Гәп һуға ҙурҙар йыйылып, малайҙар тыңлап ята* (М. Кәрим).

**Һөйөклө, кәҙерле, ғәзиз.** Күңелгә бик яҡын, булған, өҙөлөп яратҡан. **Һөйөклө** кинерәк ҡулланылышлы. *Һ ө й ө к л ө илем. Һ ө й ө к л ө ҡыҙым* һ. б. **Кәҙерле** — яҡын, бик яратҡан (кеше). **Ғәзиз** — берҙәнбер (юғары стилгә тартым һүҙ). *Ғ ә з и з Ватан. Ғ ә з и з ер* һ. б. *Һөйөклө бала көйөклө була* (мәҡәл). *..Кәҙерле ҡустым-*

дың ҡәберенә бер генә көрәк тупраҡ булһа ла һалайым, аҙаҡҡы хөрмәтемде бирәйем.. (Т. Хәйбуллин). Уның тормош иптәше Вәлиулланы, иң ғәзиз, иң һөйөклө кешеһен, ҡара төндәрҙең береһендә аҡтар яҙалап үлтерҙе («Совет Башҡ.»). Үлмәҫ инем, һүнмәҫ инем ғәзиз халҡым йөрәгендә (Б. Бикбай).

**Һөйөү, яратыу, ғишыҡ тотоу.** 1) Күңелгә ныҡ оҡшау. *Уны күптән бирле һөйһәм дә үҙемдең һөйгәнемде уға белдермәй инем* (М. Ғафури). *Бөтәһе лә уны ярата, яҡындарына күрһәтмәгән ихтирамды күрһәтә башланылар* (И. Насыри).

2) Тоғролоҡ, бирелгәнлек тойғоһо кисереү. *Тыуған илде һ ө й ө ү. Эште я р а т ы у.*

**Һөйрәү, тартыу.** 1) Тотоп йәки эләктереп үҙеңә табан йә артыңдан алып барыу. *Һөйрәү* киңерәк ҡулланылышлы. *..Аҫтан һыҙып ятҡан ҡар ауыр тракторҙы һаман төпкә һөйрәй* (Ф. Иҫәнғолов). *Аттай егелеп, ауыр баржаларҙы улар [бурлаҡтар] үргә һөйрәп баралар* (Р. Ғарипов). *Ҡөрән ат бының кеүек йөктәрҙе генә ғүмерендә байтаҡ күргәнгә, уға егерме биш бот арышты һөйрәп барыу артыҡ ҡыйын булманы* (Ғ. Дәүләтшин). *Ул ҡатын ҡояш эҫелегенән янып ҡыҙарған, бәләкәй арбаһын тартып бара торғас, тамам арыған ине* (М. Ғафури).

2) *күсм.* Етәкселек итеп алып барыу. Был мәғәнәлә **тартыу** активыраҡ ҡулланыла. *Председателлекте т а р т ы п буламы, ҡустым?*

— Һөйрәтке, һөйрәлеү.

**Һөйәлеү, һөйкәлеү, терәлеү.** Аумаҫ өсөн нимәгәләр таянып тороу.

**Һөйәлеү, һөйкәлеү** — ауыш хәлдә ауырлыкты һалып тороу. **Терәлеү** — ауышып, таянып тороу. *Ағасҡа һөйәлеп, бүлмәлә һөйләгәндәрҙе бергә тоташтырыу өсөнмө, әллә ҡайҙа барырға тигән фекер менәнме, бер аҙ уйлап торҙо* (И. Насыри). *Болан ҡарағайға һөйкәлеп тора ине* (М. Тажи). *Әсә бахыр, әйтерһең, йөрәгенең бер киҫәген өҙөп алдылар, башҡаса бара алманы, ҡапҡа бағанаһына хәлһеҙ терәлеп, башын түбән эйҙе* (Б. Бикбай).

**Һөйәү, терәү.** Ауыш хәлдә төкәтеп ҡуйыу. *Көрәкте һ ө й ә ү. Таяҡты һ ө й ә ү.* [*Шафиҡ*] *ҡайынға иҫке кәбән тағандарын терәне, өҫтөн япраҡлы ботаҡтар менән ҡаплап, ҡыуыш эшләне* (Я. Хамматов).

**Һөрөнөү, һөрлөгөү, абыныу.** 1) Ерҙәге нәмәгә аяҡ менән яңылыш эләгеү йә төртөлөү. *Яңылышмаҫ яңаҡ булмаҫ, һөрөнмәҫ тояҡ булмаҫ* (мәҡәл). *Абындыҡ та һөрөндөк, быраҡтарға төрөндөк, таң атҡансы шунда яттыҡ, ҡуҙғалырға ирендек* (Д. Юлтый). *Бына бер мал сәстәрен туҙҙырып, бригадирша Баныу сарбайлап, бер һөрлөгөп ҡолап, бер тороп, йүгерә-йүгерә килә ул ҡарап..* (Т. Йәнәби). *Ышан, атай, һин эйәрләп биргән Аҡбуҙ атым минең абынмаҫ* (М. Кәрим). *Ат абынмай ер танымай* (мәҡәл).

2) *күсм.* Яңылышыу, хаталаныу. *Ат дүрт аяҡлы булһа ла һөрлөгә* (мәҡәл). *Абыныр өсөн түңгәк табыла* (мәҡәл).

**Һөрөү, ҡыуыу.** Берәй урындан көслөк менән ебәреү. *Быйыл бына Ҡотлоярҙың дүрт ағай-энеһен дә, унан килеп Хәммәт мулланың да бөтә нәмәләрен конфисковать итеп алып, ауылдан һөрҙөк* (Һ. Дәүләтшина). *Гәрәй — зәһәр дошманмы? Дошман. Халыҡ уны үҙ араһынан быраҡ сыбыҡ менән ҡыуҙымы? Ҡыуҙы* (Б. Бикбай).

— Һөргөн.

**Һуғыу, тондороу, ҡундырыу, тамыҙыу** *күсм.*, **эләктереү** *күсм.*, **елгәреү** *күсм.*, **маныу** *күсм.*, **кәгеү** *һөйл.*, **ороу, сәпәү, һалыу** *күсм.*, **һыртлау** *күсм.* Көс менән ниҙендер өҫтөнә ҡулды төшөрөү. **Һуғыу**

киңерәк мәғәнәле. **Тондороу, ҡундырыу** — ныҡ итеп һуғыу. **Тамыҙыу, эләктереү, маныу, кәгеү** еңелсә генә көләү тойғоһон белдерә. *Таяҡ менән килеп һуҡҡас, пленный, меҫкен, илайҙыр* (бәйеттән). *Һуҡҡан менән һуҡҡан кире ҡайтмаҫ* (мәҡәл). *Тондороуы була, эт ҡоҙғонға әйләнеп китә* (әкиәттән). *Йоҙроҡ тиһәң — Теребайҙа сукмарҙан яманыраҡ, анау тынғыһыҙ нәмәнең ҡундырҙы яңағына* (М. Кәрим). «*Әһә, һин улаймы ни әле?» — тип һалдат тегегә тағы бер тамыҙып ала* (әкиәттән). *Ә егет шул саҡта суҡмар менән аттың башына эләктергән* (әкиәттән). *Мин сыҙармын — кил, туған, балтаң менән һуҡ, ор, йәнес* (Ш. Бабич). *Ғүмерендә бер балаһына тырнаҡ менән сиртмәгән был атай ҡыҙының сикәһенә сәпәп ебәрҙе* (Һ. Дәүләтшина). *Атынан ырғып төшкән дә тегене һалған да ебәргән* (И. Насыри). «*Һаҡлан, йүләр!» — тип өтөккә бер-ике рәт мандылар* (Ш. Бабич). *Ҡараңғыла кемдер минең елкәгә бер-икене тамыҙып алды* (Ғ. Ғүмәр).— ..*Нишләгәндәрҙер, шунан һуң ҡайнаға миңә яҡын юламаҫ булды. Латибын да һыртлап алдым..— тип көлдө Гөлйөҙөм* (Ф. Иҫәнғолов).

**Һуҙыу, һоноу.** Бирергә йәки алырға ҡул менән ынтылыу. *Ҡинйә, үҙе лә һиҙмәҫтән, ҡулын һуҙҙы. Ләкин Тәвкилев уға һонор өсөн күрһәтмәгәйне паппаканы — шунда уҡ кире һалып ҡуйҙы* (Ғ. Ибраһимов). *Ҡөнбағыштар алтын табаҡтарын баҡса аша миңә һоналар. Бер үрелеп ҡулым һуҙыу була, һабаҡтары шыртлап һыналар* (Р. Ғарипов).

**Һуҡмаҡ, берләм юл, йомро юл.** Ҡеше йәки йәнлек тапаған тар ғына юл. **Һуҡмаҡ** абстракт мәғәнә лә белдерә. *Тормош һ у ҡ м а ҡ т а р ы. Боҙҙан һалҡын, көмөштән саф был шишмәгә ҡая битләп һыҡыла-бөгөлә һуҡмаҡ һуҙылған* (З. Биишева). *Яңғыҙ йөрөп һуҡмаҡ ярғансы, күп менән бергә аҙаш* (мәҡәл). ..*Ҡартә яғындағы аласыкка табан бара торған тар берләм юл ҡырау һуҡҡан ҡаҙ үләндәре араһында уҡа һымаҡ ағарып ята* (Һ. Дәүләтшина). *Бына бер ваҡыт өйөр-өйөр йылҡы йомро юл буйлап һыулауға төшә башланы, ти* (әкиәттән).

**Һулыу, шиңеү.** 1) Ҡибеп тереклек билдәләрен юғалта башлау, һурылыу (үҫемлектәргә ҡарата). **Һулыу** киңерәк мәғәнәле: сәскәһен ҡойоу, хәлһеҙләнеү. *Иртә менән тороуға, балалар тағы ла көслөрәк итеп илаша башланылар. Уларҙың нурлы йөҙҙәре күҙгә күренеп һулый* (Ғ. Дәүләтшин). *Ҡояш нуры төшмәҫ урындарҙа гөл япрағы шиңә, һарғая* (Ҡ. Даян).

2) *күсм.* Төҫ һалыу, ныҡ ябығыу.

**Һупалау, һармаҡлау, икмәктоҙлоҡ белеү.** Берәй сит телдә әҙ-мәҙ һөйләшеү. *Рауза хәҙер ике телдә лә яҡшы белә. Мин дә руссаны аҙыраҡ һармаҡлайым.*

**Һүлпән, илке-һалҡы.** Һалмаҡ хәрәкәттәр менән, иренеп кенә (низер башҡарыу). **Илке-һалҡы** — теләмәй, саҡ-саҡ. *Быларҙың өлкән ике улы, Ҡәмән менән Сәмән, һүҙгә һүрән, эшкә һүлпән, йомош ҡушһаң — елкәләрен тырнаусан.. булғандар* (әкиәттән). *Ауыр эшкә егелмәй, илке-һалҡы ғына йөрөгәнлектән, май бөргән уның эсен, һимеҙ* (Б. Бикбай).

— Һүлпәнлек, һүлпәнәйеү; илке-һалҡылыҡ, илке-һалҡыланыу.

**Һүрәт, рәсем.** Ысынбарлыҡ күренештәренең, кешеләрҙең һ. б. төшөрөлгән, яһалған һыны. *Һ ү р ә т төшөрөү. Һ ү р ә т яһау. Р ә с е м төшөрөү. Р ә с е м дәресе. Р ә с е м яһау.*

**Һүтеү, тағатыу, таратыу.** Бәйләнгән, ишелгән, уралған,

йомарланған нәмәне ысҡындырыу. **Һүтеү** киңерәк мәғәнәле: йөйҙө, ҡоролманы тағатыу. **Тағатыу, таратыу** үрелгән, йомарланған нәмәне сисеүгә ҡайтып ҡала. *Селтәрҙәрем минең сей мәрйен, килешмәгән ерен һүтәйек* (халыҡ йырынан). *Тағатмасы, зинһар, толомоңдо, ҡанатмасы йөрәк итемде* (Р. Бикбаев).

— Һүтек, һүтелмәле.

**Һыҙыу, сыйыу.** Ҡәләм йәки башҡа нәмә менән һыҙыҡ үткәреү. **Һыҙыу** активыраҡ ҡулланылышлы. **Сыйыу** күберәк арҡыс-торҡос һыҙыҡ тартыуҙы белдерә. *Архитектор өҫтәл эргәһендә күп саҡ чертеж һыҙып ултыра* (Ғ. Сәләм).

— Һыҙыҡ, һыҙма, һыҙыҡлы, һыҙмаҡлау; сыйыҡ, сыймаҡлау.

**Һыйлау** *күсм.*, **бүләк итеү.** Ҡеше ҡарамағына тапшырыу, үҙенеке итеп биреү. *Тик бер аҙна уҙғас ҡына, ҡара Йомағол һыйлаған аҡ бәрәсте эйәртеп, өйгә ҡайтып киттек* (М. Ҡәрим).

**Һыйыныу, һырыныу, һырығыу, йылышыу.** Ҡешегә йә берәй нәмәгә ныҡ яҡын килеү, терәлеү. *Беҙ барыбыҙ ҙа бөтә көсөбөҙ менән ергә ятып, баштарҙы ҡулдар менән тығыҙ итеп ҡаплап, землянка стеналарына һыйындыҡ* (Д. Юлтый). *Утарға һыйынып үҫкән ҡайын эргәһендә кемдәрҙер кәңгер-ҡаңғыр һөйләшә ине* (Н. Мусин). *Бейек моронда боролоп уттемме, һөҙәк тау ҡуйынына һырынып ултырған район үҙәге күренәсәк* (Н. Мусин). *Ҡузнецов, стенаға һырығып, тауышһыҙ тора* («Совет Башҡ.»). *Бите менән тәҙрәгә йылышҡан ҡыҙ тротуарҙағы егеткә бармағы, күҙҙәре, ирендәре менән ниндәйҙер аңлайышһыҙ ишаралар яһап өлгөрҙө* (Ф. Иҫәнғолов).

**Һынау, экзамен, имтихан** *иҫк.* Берәй фән буйынса кешенең белем кимәлен билдәләү, баһалау. **Һынау** киңерәк ҡулланылышлы: эшкә дөйөм һәләтлекте тикшереүҙе лә белдерә. *Тел буйынса* *һ ы н а у тапшырыу.* *Һ ы н а у үтеү.* **Экзамен** башлыса уҡыу йорттарында белем үҙләштереүҙе тикшереүгә ҡайтып ҡала. *Тәүге һынау урмансыға тура килгән* (әкиәттән).— *Бөгөн экзамен тапшырмағанмын икән, иртәгә тапшырырмын, иртәгә лә барып сыҡмаһа, бер аҙнанан комиссия алдына баҫырмын,— тине Пискаревский* (Ә. Бикчәнтәев). *Өфөнән имтихан биреп ҡайта-ҡайтҡандан бирле, күңеле китек булды баламдың* (Ф. Иҫәнғолов).

**Һыуһау, сарсау, анһығыу.** 1) Һыу эске килеү. **Сарсау, анһығыу** — бик ныҡ һыуһау. *Һыуһап килгән кеше, боҙҙан һыу эсәйем тип, ҡороғом менән һуҡтым — тишә алманым..* (әкиәттән). *Ҡыҙҙыр, ҡояш, яндыр, һис оялма, әүерелһен тәнем баҡырға! Ирендәрем сарсап ярылһындар, боролмамын һалҡын сатырға* (М. Ишбулатов). *Бына ҡыҙҙар йыя бесән шишмә буйында, сарсамаһа ла һыу эсә ҡыҙҙар ҡулынан* (Б. Бикбай).

2) Бик ныҡ теләү, ашҡыныу менән ынтылыу. *Йөрәгемдә — уты һүнмәҫ сарсау, йәнем һыуһауына юҡ дауа! Айырылғанда ҡауышыуға һыуһай, ҡауышып туймай — юлға уҡтала* (Р. Бикбаев).

**Һыуыҡ, һалҡын.** Һауа температураһының түбәнлеге. **Һыуыҡ** көн торошона, һыуға ҡарата ғына әйтелә. *Ҡышҡы һ ы у ы ҡ. Һ ы у ы ҡ көн. Һ ы у ы ҡ һыу.* **Һалҡын** һүҙенең күсмә мәғәнәһе лә бар: *һ а л ҡ ы н ҡараш, һ а л ҡ ы н мөғәмәлә* һ. б. *Бында ла һыуыҡ һыуыҡлығын да, шулай ҙа үрҙәге тиклем үк түгел* (И. Насыри).

— Һыуыу, һыуыҡлыҡ; һалҡынайыу, һалҡынлыҡ.

**Һәләкәт, афәт.** Ҙур бәхетһеҙлек, бәлә-ҡазалар килтерә

торған куркыныс хәл. *Һ ә л ә к ә т килеү. А ф ә т еле. Тағы ла ни һәләкәт ҡуптарырҙар икән инде былары?* (Һ. Дәүләтшина). *Эй раббым, ал шул афәттәрҙе, ал!.. Шул афәттәрҙе тыуҙырыусыларҙы ал!..* (И. Насыри).

**Һәрмәү, ҡапшау, ҡармау.** Тотоп ҡарау, тотоп алыу. **Ҡапшау** — иғтибарлап, тотоп-тотоп ҡарау. *Һәткиә ҡулдарын йәйеп, ҡырсын өҫтөнән ниҙер эҙләне. Иҫке ҡатаһының олтаны менән бергә сығып торған аяғының баш бармағын һәрмәне* (Я. Хамматов). *Иркәбай стена буйлап ҡапшанып китте* (Ғ. Әмири). *Ҡолой кантон да бик үк һанһыҙ, бер ҙә юҡка ҡылыс ҡармалай* (халыҡ йырынан).

— Һәрмәләнеү, һәрмәүес.

# Ш

**Шатлыҡ, ҡыуаныс, һөйөнөс.** Рухи ҡәнәғәтлек, йыуаныс тыуҙырған хәл һәм шунан тыуған рәхәт кисереш. *Бала шатлығы — әсә шатлығы* (әйтем). *..Бүре, тағы ниҙер иҫенә төшөп, ҡыуанысынан олоп ебәргән* (әкиәттән). *Йыр күңеллегә ҡыуаныс, күңелһеҙгә йыуаныс* (мәҡәл). *Ә бер көндә бөтә һөйөнөстәр ишелеп төшкән мейес кеүек* (Ғ. Сәләм).

— Шатланыу, ҡыуаныу, һөйөнөү.

**Шаһит, таныҡсы** *иҫк.* Булған эш-хәлде күреп, дөрөҫләй алған кеше.

**Шаян, шуҡ, шырмый** *иҫк.*, **шаталаҡ.** Мәрәкәләргә, шаяртырға яратҡан, мәрәкәсел. **Шаян** киңерәк мәғәнәле: кешенең ҡылығына ла, ҡиәфәтенә ҡарата ла әйтелә. *Ш а я н ҡараш. Ш а я н күҙҙәр. Ш а я н һүҙ.* **Шуҡ** ҡылыҡҡа ҡарата ғына әйтелә. *Ш у ҡ кеше.* **Шырмый** — артыҡ шаян, бер ҙә етдилеге булмаған (кәмһетеберәк әйтелә). *Шаян кеше — яҡшы кеше, яман кеше — шаҡшы кеше* (мәҡәл). *Йәш егеттең был үткер һәм шаян күҙҙәрҙең эйәһен белгеһе килде* (И. Насыри). *Балаң булһа, шуҡ булһын, шуҡ булмаһа, юҡ булһын* (мәҡәл).

**Шиғриәт, поэзия.** Нәфис һүҙ ижады. *Ш и ғ р и ә т к ә килеү. Ш и ғ р и ә т донъяһы. П о э з и я менән мауығыу.*

**Шик, шөбһә, шом, шик-шөбһә.** Икеләнеү хисе. **Шик** йышыраҡ ҡулланыла. *Ш и к тотоу. Ш и к төшөү. Ш и к һалыу. Шуның артынан уҡ, Усмановта тыуған шикте бөтөрөү өсөн, ул алып ингән ҡағыҙҙарын аҡтара башланы* (И. Насыри). *Был һүҙ менән мин һеҙҙең күңелегеҙҙәге шөбһәгеҙҙе бөтөрмәксе була инем* (М. Ғафури). *Зарлы көйгә һал да, дуҫым, тарт, сиҡылдат гармуның, әрселеп шик-шөбһәнән күңелең, таралһын бар моңоң* (Ш. Бабич).

— Шикләнеү, шөбһәләнеү, шомланыу.

**Шифа, сихәт** *иҫк.* Тәнгә файҙаһы булған тәьҫир. *Ш и ф а һы булыу. Ш и ф а алыу. С и х ә т е тейеү. Имеш беҙҙең һыуҙың тәме балдан да татлы була, үҙе шифа — күҙ алдарың көндән дә яҡты була.* (Ә. Атнабаев). *Улым сирләй. Алған дауалары шифа булһын сиренә.* (М. Кәрим). *Ағиҙел! ..аҡыҡтай саф һыуҙары тәнгә сихәт, йәнгә рәхәт бирә.* (Х. Зарипов). *Һөйөү зәмзәмдәрен эсһәң, йәнгә сихәт була икән..* (А. Игебаев).

— Шифалы, сихәтле, сихәтләнеү.

**Шишмә, инеш, сығанаҡ, күҙләү.** Ер аҫтынан бәреп сыҡҡан бәләкәй генә һыу. **Шишмә** актив ҡулланыла. *Мин — хәрәкәт. Минең аяҡтарым атлай таштан, атлай сирәмдән. Шишмә булып ерҙән бәреп сығам, бишек булып йортта тир-*

*бәләм* (З. Шаһбазов). *Оло Инйәргә йән индерергә теләгәндәй, тауҙар араһынан һирәк-һаяҡ инештәр, кескәй генә йылғалар ағып төшә* («Совет Башҡ.»). *Асҡар аҫҡаҡ яһап, ут яғып ебәрҙе, Ҡайбулат инештән һыу алып килде* (Ғ. Ибраһимов).

**Шыбырҙау, бышылдау.** Тауыш сығармай, әкрен генә һөйләү. *Макаров был көлөүҙән ниңәлер ҡыҙарынды ла, Хаятҡа боролоп, әллә ниҙәр шыбырҙаны* (Һ. Дәүләтшина). *Иркәбай Мораҙымдың ҡабырғаһына төрттө лә: «Ырғыт!» — тип бышылданы* (Ғ. Әмири).

**Шылдырыу, шыуҙырыу, күсереү.** Бер урындан икенсе урынға алып барыу. *Алпар ҙа элә-һала ғына ашанып туҫтаҡты туғаны алдынараҡ шылдырҙы* (Ғ. Ибраһимов).

**Шәфҡәт, мәрхәмәт(лек), рәхим(лек).** Ҡыҙғаныу хисе менән һуғарылған яҡшы мөнәсәбәт. **Шәфҡәт** йышыраҡ ҡулланыла. *Ш ә ф ҡ ә т күрһәтеү. Ш ә ф ҡ ә т туташы. Хәҙер ул үҙенең фекерһеҙлеге сәбәпле, үрмәксе тоҙағына төшкән себен кеүек, тик илап бара, үгәй бала кеүек, һис кемдән шәфҡәт һәм мәрхәмәт өмөт итә алмай ине* (М. Ғафури). *Дошман, ҡара бауыр, аяу көтмә, рәхим үйлама* (Т. Морат).

— Шәфҡәтле, мәрхәмәтле, рәхимле.

**Шәхси, персональ.** Билдәле бер кешегә бәйле булған. **Шәхси** күберәк ҡулланыла. *Ш ә х с и тормош. Ш ә х с и эш.*

# Ы

**Ыҙа, яфа, аҙап, этлек, имгәк, ауырлыҡ, ҡыйынлыҡ, ғазап, йәбер, михнәт, нужа.** Яҙмышҡа төшкән, баштан үткәрелгән ауыр хәл. Һүҙбәйләнештәрҙә ҡулланылышы менән айырылалар. **Ыҙа, яфа, аҙап** үҙ-ара ныҡ яҡын. *Ы ҙ а сигеү. Я ф а күреү. А ҙ а п сигеү.* **Ғазап** — көслө ыҙа (күңел, рухи аҙапҡа ҡарата ла әйтелә.) *Выждан ғ а з а б ы. Ғ а з а п кисереү.* **Михнәт, этлек, имгәк** үҙ-ара яҡыныраҡ. **Нужа** — ярлылыҡтан килгән ауырлыҡ, яфа. *Ул һөйләй башлаһа, тыйыла алмай, ыҙа сигеп бөтәһең* (Ә. Бикчәнтәев). *Әсәһенең маҡтауынан Сәлих бөтә яфаларын онотто ла, әсәһе эргәһенә килеп, имеп ятҡан һеңлеһенә иғтибар менән ҡараны* (Х. Мохтар). *Ялҡаулыҡ ул картлыҡ көнөң өсөн аҙап әҙерләүсе ана ул, ул анаға бала булыуҙан элек йәшәр юлың ала бел* (Д. Юлтый). *Ҡайҙа ла ярлылар ҡырыла, ҡайҙа ла ярлылар этлек күрә* (Д. Юлтый). *Донъя ауырлығы еңел күренә, арыҫландай сабыр ир булһа* (халыҡ йырынан). *Ауырлыҡ ағас башынан йөрөмәй, әҙәм башынан йөрөй* (мәҡәл). *Хатта был эш хәтерендә лә килмәне, Зәйнәп ҡыйынлыҡтар аҫтында тороп үҫте, быларҙың бөтәһен түҙемлек менән үткәреп ебәрҙе* (М. Ғафури). *Донъя бөткәнсе, хоҙай, ғүмеремде бир, барыбер мәңге ғазап, мәңге йәбер* (Ш. Бабич). *Ай хоҙайым, ниндәй яҙыҡтарыбыҙ булды һуң беҙҙең? Ниңә шул саҡлы ауыр ғазаптарға юл ҡуяһың?* (Ғ. Ибраһимов). *Тик яҙмыштың ул заманда аҙағы бер: ҡарлы Себер, мең ҡат йәбер, шул уҡ ҡәбер* (Х. Кәрим). *Атанан күреп уҡ юнған, михнәт күреп ир булған, толпар менеп ил күргән, Иҙел кисеп күп йөрөгән* (ҡобайырҙан). *Аҡбуҙ атҡайымды әйәрләһәм, аҡ сергекәйҙәрем тир була. Фәҡир кешеләрҙең балаһы нужа күрә-күрә ир була* (халыҡ йырынан).

— Ыҙаланыу, ыҙалау; яфаланыу, яфалау; аҙаплау, этләү, этләнеү; ғазаплау, ғазапланыу; йәберләү.

**Ым, ишара.** Уй-фекерҙе һүҙ-

һеҙ аңлата торған ҡул һәм баш хәрәкәте. *Ы м биреү. И ш а р а яһау. Ул артҡа, беҙгә, ҡарап һаман күҙ ҡыҫа — төктән алырға ым яһай* (А. Таһиров). *Хәким ҡул ымы менән тынысланырға өндәне* (Ф. Иҫәнғолов). *Был бейеү артистан ҙур актерлыҡ оҫталығы, төрлө ым-ишараларға бай булыуҙы, көйгә ярашлы эске темпераментты талап итә* («Совет Башҡ.»).

— Ымлау, ишаралау.

**Ыңғайлау, йүнәлеү.** Бер яҡҡа ҡарап юл тотоу. *Күп тә уҙмаҫ, ҡолан көтөүе лә йайлап-йайлап йылы яҡтарға ыңғайлар* (Ә. Хәкимов). *Шулай ҙа Ҡинйәнең көткән ваҡыты етеп килә: [ҡыҙҙар] баш күнәкәйҙәрен ҡулға элеп, йылғаға табан ыңғайланылар* (Ғ. Ибраһимов).

**Ышаныс, инабат, инаныс.** Эш-хәлдең булырына, үтәләсәгенә ыңғай ҡараш, уй. **Ышаныс** актив ҡулланыла, һүҙбәйләнештәрҙә айырылалар. *Ы ш а н ы с белдереү. Ы ш а н ы с т ы аҡлау.* **Инаныс** — ныҡлы ышаныс. *Имай атаһының был тиклем аҡылдар менән эш ҡороуына тағы ышаныс менән ҡарап, һоҡланып өлгөрмәне, Ныязғол дауам итте* (Һ. Дәүләтшина). *Өҙөлөп һөйгән Әхмүш тиклем Әхмүше алдаҡас, башҡаларға ни инабат ҡала* (Б. Бикбай).

— Ышаныслы, ышанырлыҡ.

**Ышаныу, инаныу, күҙ терәү, арҡа терәү** *һөйл.*, **күҙ тегеү, морон төртөү.** Нимәгә булһа ла өмөт тотоу; шулай уҡ кемгәлер таянып эш итеү. **Ышаныу** киңерәк мәғәнәле: кешегә ышаныу, һүҙҙең дөрөҫлөгөн билдәләү һ. б. **Инаныу** — ныҡ ышаныу, ышаныстан сикмәҫлек булыу. **Күҙ терәү, арҡа терәү, күҙ тегеү** — кемгәлер ышанып, таянып эш итеү. **Морон төртөү** — ауыр хәлгә ҡалғанда ярҙамына ышаныс тотоу. *Һиңә ышанып юлға сыҡтыҡ, ташлап китмәҫһең инде* (һөйл. теленән). *Юдин үҙ фекеренә инанған көйөнсә ҡалды* (Ф. Иҫәнғолов). *Ә был сакта Мисбах ҡарттың хәле ысындан да ҡайғырырлыҡ ине, уның күҙ терәгән берҙән-бер донъя көттөрөүсе улына ни бары биш баш ат, ун һыйыр, иллеләп һарыҡ ҡына ҡаласаҡ ине бит* (Б. Бикбай). *Ул рус Йомағолдарға ғына түгел, бүтән күҙ теккән кешеләренә лә ингеләп сыҡты, ләкин ни саҡлы йөрөһә лә, өйгә буш ҡул ҡайтты* (Ғ. Дәүләтшин). *Бәлки Гәрәйгә ул тиклем үк түбәндән эш башлап ебәрергә тура килмәҫ әле, ни тиһәң дә, уның арҡа терәрлек донъяһы, атаһының аҙмаҙ малы бар бит* (Б. Бикбай). *Шунан һағайған ҡарттар бер көндө Ҡинйәгә килеп морон төрттө* (Ғ. Ибраһимов).

# Э

**Эҙәрләү, эҙәрлекләү.** 1) Тоторға, эләктерергә тырышып артынан ҡыуыу. *Яраланған шайтан йүгерә-атлай ҡайтып киткән, Дүрмән уның артынан эҙәрлекләп барған* (әкиәттән). *Соҡорҙан сығып, дошманды эҙәрләргә бойороҡ килде* (Ғ. Аллаяров).

2) Ирек бирмәй ҡыҫырыҡлау. *Туҡтауһыҙ эҙәрләү Ленинды йәшеренергә мәжбүр итә* («Совет Башҡ.»). *Дошман Шәрифулланың туғандарын да эҙәрлекләй* («Башҡ. пионеры»).

**Эйә, хужа.** Ниҙе лә булһа ҡулында, ҡарамағында тотҡан кеше. *Ат э й ә һ е. Х у ж а булыу. Ерҙең х у ж а һ ы. Эйәһенә күрә бейәһе* (мәҡәл). *..Осоп килеп төшөүҙән балаҫтың эйәһе бер ниндәй ҙә зыян күрмәгән* (әкиәттән).

**Эйәләшеү, эйәләү, үҙләшеү, ылығыу.** Нимәгә булһа ла өйрәнеп, эҫенеп китеү. **Эйәләшеү**

киңерәк мәғәнәле. *Яңы тормошҡа әйәләшеү.* **Әйәләү** — бер урынға, кешегә күпйөрөп, эҫенеп китеү. **Үҙләшеү** — үҙ булып, яҡынайыу. **Ылығыу** — кешегә, эшкә яҡынлап китеү. *Тағы ла бер аҙ ултырһа, минең өсөн ниндәй күңелле булыр ине. Уға ғәжәп әйәләштем* (Ә. Бикчәнтәев). *Үҙең әйәләтмәйенсә яттар әйәләмәй ул* (халыҡ йырынан). *Мәрйәм миңә артыҡ үҙләшеп китте. Ул күптәнге таныш кеүек минең менән һөйләшә башланы* (Д. Юлтый). *Мин үҙемдең уға нисек әйәләшеп, ылығып китеүемде, уның тәҡдименә нисек ихласлыҡ менән ризалыҡ биреүемде аңламай ҙа ҡалдым* (З. Биишева).

**Эләктереү, ҡулға төшөрөү.** Үҙ ҡарамағыңа алыу, тотоу (кешегә, әйберҙәргә ҡарата). *Немец штабы офицерын тереләй ҡулға төшөрөп булмаһала, документтарын, йәшерен карталарын эләктерҙек* (А. Мағазов).

**Эре, тәкәббер, һауалы.** Үҙен башҡаларҙан юғары һанаған, әллә кем иткән (кеше). *Эрегә ҡуйыу. Эре тотоу.* **Тәкәббер** — бик эре. *Уларҙың эре йөрөүҙәрен күреп, мин улар янында сүп булып ҡалдым* (М. Ғафури). *Зөһрәлә был тәкәббер егетте берәй эштә еңеү теләге тыуҙы* (Н. Мусин). *Шамбазова был һорауҙы көтмәгәйне. Уның тәкәббер-һауалы ҡиәфәте әллә ҡайҙа булды* (Яр. Вәлиев). *Күптән түгел уны [тәрене] берәй фриц тағып йөрөгәндер һауалы* (Б. Бикбай).

— Эрелек, тәкәбберлек.

**Эсеү, һемереү** *һөйл.* Шыйыҡлыҡ йотоу. **Эсеү** киң ҡулланылышлы. **Һемереү** — күпләп эсеү. [*Ғарифуллин*].. *Һыуынған сәйен күтәреп эсте лә, сынаяғын шаҡ иттереп өҫтәлгә ултыртты* (С. Агиш). *Сарсаған ер ямғыр һутын һемерә, һыуға туйынып, йылға шатланған* (Р. Бикбаев).

— Эске, эсемлек, эсерлек.

**Эҫе, ҡыҙыу, ҡайнар.** Температураһы юғары булған. **Эҫе** киң мәғәнәле: көн, һыу-һауа, аш һ. б. **Ҡыҙыу** — бик эҫе (ҡоро эҫелеккә ҡарата). *Ҡыҙыу мейес. Ҡыҙыу ҡояш.* **Ҡайнар** — нығ эҫе, ҡайнарлыҡ хәлдә (ғәҙәттә шыйыҡ нәмәләр). *Ҡайнар вулкан. Ҡайнар һыу. Шундай эҫе һиҙелә ҡан тамырына, шундай утлы тойола күңелгә* (Ғ. Сәләм). *Ул ҡыҙыу табала ырғый торған борсаҡ һымаҡ ырғыны* (И. Насыри). *Улар бында алып төштө ҡайнар тормош, ҡыҙыу ҡояшты* (Ғ. Сәләм).

— Эҫелек, эҫеләнеү, эҫереү; ҡыҙыулыҡ; ҡайнарлыҡ, ҡайнарланыу.

**Эш, хеҙмәт.** Ҡул һәм аҡыл көсө һалынған эшмәкәрлек. **Эш** һәр төрлө эшмәкәрлеккә ҡарата әйтелә, актив ҡулланыла. *Аҡыл эше. Ваҡытлы эш. Эш итеү. Эш ҡырыу. Эш сығарыу. Эшкә инеү. Эштән сығыу.* **Хеҙмәт** юғары стилгә тартым. *Хеҙмәт даны. Социалистик Хеҙмәт Геройы. Фәнни хеҙмәт. Хеҙмәт итеү. Улар эш тураһында һөйләшеүгә күстеләр* (Һ. Дәүләтшина). *Күпме көрәш, күпме хеҙмәт менән яуландылар беҙҙең еңеүҙәр!* (Р. Ниғмәти).

— Эшләү, эшһеҙлек, эшсе; хеҙмәткәр, хеҙмәтсе.

## Ә

**Әҙ (аҙ), наҡыҫ, бармаҡ менән һанарлыҡ, бесәй төкөрөгө(ндәй)** *һөйл.* Билдәле бер кимәлдән, һандан кәм; күптең киреһе. **Әҙ (аҙ)** күләмгә, һанға, ваҡытҡа һ. б. ҡарата әйтелә. **Наҡыҫ** — ҡыҫан, етерлек түгел (мал-мөлкәт, хужалыҡ кәрәк-яраҡы). **Бармаҡ менән һанарлыҡ** — бик аҙ (ғәҙәттә бе-

рәмтекле нәмәләр хаҡында.)

**Бесәй төкөрөгө(ндәй)** — бик аҙ (нәмә, аҡса һ. б.). *Пленумдан ҡайтҡанда, Шакир ағай ҙур һуғышта дошмандың ҡаты һөжүмен әҙ ғәскәр менән еңеп ҡайтып барыусы командир кеүек ҡайтып бара ине* (Д. Юлтый). *Ҡөньяҡ киңлектәрҙә һыуҙың наҡыҫ булыуы арҡаһында, хужалыҡ шаҡтай ҡыйынлыҡтар кисерә* («Совет Башҡ.»). *Әҙерәк хыялланырға, күберәк эшләргә кәрәк!* (Р. Сафин). *Ишетһен ҡолағың, беҙ бында бармаҡ менән генә һанарлыҡ* (И. Насыри). *Ә ҡулға килеп ингән аҡса — бесәй төкөрөгө* («Совет Башҡ.»).

**Әйләнеү, боролоу.** Ҡәүҙә торошон үҙгәртеү. *Ҡатыны менән башҡаса һүҙ оҙайтырға теләмәйенсә, Арыҫлан йәштәргә табан боролдо* (Ғ. Ибраһимов).

— Әйләнеш, боролош.

**Әкрен (аҡрын), яй, талғын.** Хәрәкәт тиҙлеге бер саманан түбән; шәптең киреһе. **Әкрен (аҡрын)** киң ҡулланылышлы: эш, хәрәкәт, ваҡыт үтеше, ағышы һ. б. ҡарата әйтелә. **Яй** әкренгә яҡын. **Талғын** — ағыш, хәрәкәткә ҡарата ғына әйтелә. *Атың бирһәң дуҫыңа, әкрен йөрө, тип әйтмә* (мәҡәл). *Әкрен йөрөһәң, бай тиргәй, шәп йөрөһәң, ат тирләй* (мәҡәл). *Ашыҡмай яй ғына кил әкөҙ* (Б. Бикбай). *Поезд барышы бик шәп йә талғын* (Х. Кәрим). *Бер аҙҙан ат йөрөшөн әкренәйтте. Талғын ғына юртып бара башланы* (Д. Юлтый).

— Әкренәйеү, әкренләү, әкренлек; яйлау, талғынланыу.

**Әмәл, сара.** Берәй эш-хәлде үтәү, еңеп сығыу юлы, башҡарыу ысулы. *Ә м ә л е н табыу. С а р а һ ы н күреү. Ырыҫ, дәүләт шишмәһен асам тиһәң, ғилем-һөнәр берҙән-бер әмәл булыр* (М. Аҡмулла). *Бөтә йыртҡыстар ҙа ҡуяндарҙы ошо оҙон ҡойроҡтарынан эләктереп ала торған булғандар. Һис кенә лә ҡотолор әмәл юҡ икән* (әкиәттән). *Һеҙҙең ҡайһығыҙ ҡыҙымды үлемдән алып ҡалыу сараһын таба, шуны үҙемдең кейәүем итәм, ти* [*батша*] (әкиәттән).

**Әрепләшеү, ирәгәләшеү, иксәшеү, телләшеү.** Ҡаршы һүҙ әйтешеү; кәрәкмәгәнгә яуаплашыу. Яманлау һүҙҙәре. *Тиҙ генә асыуланып барыусы, гел генә әрепләшергә әҙер тороусы кешенән көлөп, мәҡәл: «Төкөшә торған тәкәгә хоҙай мөгөҙ бирмәгән», ти* («Ағиҙел»). [*Ишмырҙа:*] *Шулаймы ни әле, минең менән әрепләшә башланыңмы әле?!* (Д. Юлтый). [*Арыҫлан:*] *..Ян керешен тартып күнекмәй тороп, мәргәнлек килмәй. Тел дә телләшеп сарлана* (Ғ. Ибраһимов). *Оло кеше менән ирәгәләшеү ярамай, оят бит* (һөйл. теленән).

**Әрләү, тиргәү, орошоу, битәрләү, шелтәләү, һүгеү, быжғы(р)тыу, ҡыҙҙырыу** *күсм.*, **бешереү** *күсм.*, **эттән алып эткә һалыу** *һөйл.*, **уттан алып һыуға һалыу. Әрләү, тиргәү** — үҙ-ара бик яҡын синонимдар. **Орошоу** — тыйып, өгөт биреп әрләү. **Шелтәләү** — еңелсә генә әрләү, орошоуға яҡын. **Битәрләү, һүгеү** — оятлы итеп әрләү, хурлау. **Быжғы(р)тыу, бешереү, ҡыҙҙырыу** — бик ҡаты әрләү. **Эттән алып эткә һалыу** — хурлыҡҡа ҡалдырып әрләү, һүгеү. **Уттан алып һыуға һалыу** — ныҡ орошоу. *Балаң бик тынғыһыҙ, ала бит маҙаңды. Үҙеңә оҡшаған, әрләмә балаңды* (Р. Ғамзатов). *Инсан яуыз, нахаҡ олаҡтыра бесәйҙе, тип, тиргәнем кешене* (Ш. Бабич). *Йомай был телдәр ейәнсәренең һүҙенә тиҙ үк ышанды ла шул ыңғайы уҡ Заһитты ятлайға орошоп ташланы* (Һ. Дәүләтшина). *Һәр кем үҙенән ғәйеп эҙләп тормай, ә икенсе бер кешене битәрләй башлай* (Н. Мусин). *Шелтәләйһең һаман балалыҡты, күптән биш тиҫтәнән уҙһам да* (Б. Бикбай). *Ундайҙарҙы яҙыусы, ҡыл-*

*ған яманлыҡтарына ҡарап, йә нәфрәтләй, йә еңелсә көлөп, шелтәләү менән сикләнә* («Совет Башҡ.»). *Яҡшы менән һөйләшһәң, алтын-көмөш түгелер, яман менән һөйләшһәң, атаң-әсәң һүгелер* (мәҡәл). *Әллә антына, әллә күҙ йәштәренә ышанып, Туҡтағол уны* [*Ғизелбанатты*] *өйгә индерҙе, әммә күҙен дә астырмай битәрләп, һис көн күрһәтмәне* (Ғ. Ибраһимов). *Ылауҙар һеҙҙең йортта булыу сәбәпле, һеҙгә табан атылдым, йортҡа инеү менән икеләнеп торған крәҫтиәндәрҙе әҙерәк быжғыртып алдым* (И. Насыри). *Тик бына* [*Шәһүрәнең*] *Мөбәрәкте тышҡа быжғыртҡан шикелләрәк сығарып ебәреүе генә оҡшап етеңкерәмәне Гөлбаныуға* (Н. Мусин). *Тик әсәм ебәрмәй ауылға, мине бер балалай ҡыҙҙыра*.. (Ҡ. Аралбаев). *Атлы ҡаҙағын да, генералын да, бөтәһен дә ләғнәтләне. Эттән алып эткә һалды* (Д. Юлтый). *Ҡыҫҡаһы, мин шундай итеп бешерҙем, образлы итеп әйткәндә, уттан алып һыуға һалдым* («Совет Башҡ.»).

**Әрпеш, эшлекһеҙ, әрпетһеҙ** *һөйл.*, **шамтыр, ҡойолдороҡ, һәпрә** *һөйл.*, **шапшаҡ, йыбытҡы.** Ҡулынан йүнле эш килмәгән, йыйнаҡ түгел (яманлау һүҙҙәре). **Шапшаҡ** — йыйнаҡ түгел, таҙа тора белмәгән. *Был тиклем әрпеш булырһың икән* (Һ. Дәүләтшина). [*Ғайзулла бабай:*] — *Ҡайһы саҡта эшлекһеҙ, балаларҙы һөймәгән, команда бирергә генә ярата торған инспекторҙарҙы ла директор итеп раҫлайҙар* (Р. Низамов). *Шамтыр ҡатын булып сыҡты был* (һөйл. теленән). *Ҡойолдороҡ еңгәһе бар, бер һалмалыҡ он һорай* (халыҡ йырынан). *Ҡатының һәпрә булһа, энәңде үҙең һапларһың* (мәҡәл). *Ул Йомағолдар бөтә өй эстәре менән әрпештәр* (М. Ҡәрим). *Мин үҙем ауылда үҫһәм дә, таҙалыҡты, бөхтәлекте бик яратам. Ә бында әллә ниндәй шапшаҡ халыҡ йәшәй* [*тип зарлана Роберт*] (М. Садыкова). *Йыбытҡыраҡ ҡыҙ — телгә шәп тә, эшкә самалы* (Н. Мусин).

**Әсә, ана, инәй.** Балаһы булған ҡатын (балаһына ҡарата). **Әсә** киң ҡулланылышлы, термин булып та йөрөй. *Герой әсә.* **Ана, инәй** халыҡ ижадында һәм ерле һөйләштәрҙә «әсә» мәғәнәһендә ҡулланыла. *Ата һүҙен тотмаған, әсә һүҙен йыҡмаған яуға сабыр ир булмаҫ* (ҡобайырҙан). *Аш ҡәҙерен ана белер, һөт ҡәҙерен тана белер* (мәҡәл). *Ай Уралым, Уралым, барына ата Уралым, ай Уралым, Уралым, барына инә Уралым* (ҡобайырҙан). *Шуныһы характерлы, «әсәй һүҙен рус-са «мать» мәғәнәһендә ҡулланған һөйләштәр хайуандарға ҡарата «әсә» һүҙен түгел, ә «инәй» (инә) һүҙен ҡулланалар; мәҫәлән: көрән айғырҙың инәһе* (Ж. Кейекбаев). — *Ә әсәләр? — Юҡ, Сәйҙел, һис ҡасан улай була алмай аналар* (Ғ. Сәләм).

**Әүерелеү, әйләнеү.** Бер хәлтороштан икенсегә күсеү. *Ә паровоз топкаһында Лазо әүерелде һүнмәҫ күмергә* (Р. Ғарипов). *Бая йүгергән һалдат менән беҙ икебеҙ йәнә бер кешегә әйләнәбеҙ* (М. Ҡәрим).

**Әүрәү, албырғау.** Нимәгәлер күңел менән бирелеп китеү, мәшғүл булыу. *Туҡта, «Минең баҡсам»дағы нәфислектәргә әүрәп китеп, һабан туйын онотоп ҡуймайыҡ тағы* (Ҡ. Әхмәтйәнов). *Эй, улым, бөтөнләй албырғап киткәнмен дә баһа* (Н. Мусин).

**Әшәке, ерәнгес, хәшәрәт.** Ерәнеү тойғоһо тыуҙырған, әхлаҡ йәһәтенән насар (ҡылыҡ, һүҙ, күренеш һ. б.). **Ерәнгес, хәшәрәт** — бик насар, ҡотһоҙ. *Ул да шул, начальнигы кеүек, дәрәжә артынан ҡыуыусы кеше булғанлыҡтан, күрһәтмәгән аҙапты, әйтмәгән әшәке һүҙҙәрҙе ҡалдырманы* (И. Насыри). — *Шулайҙыр шул инде,* —

*хужа ерәнгес итеп күҙ ҡысты* (Б. Бикбай). *Етер! Етер! Ишетәһеңме, бер сик була сыҙамлыҡта. Ҡеше түгел мин — күләгә мин хәшәрәт был һаҙлыҡта!* (М. Кәрим).

— Әшәкелек, әшәкеләнеү; хәшәрәтлек.

# Ю

**Юғалыу, ғәйеп булыу.** Билдәһеҙ яҡка китеп, юҡ булыу. **Юғалыу** киңерәк ҡулланылышлы: кеше, мал һ. б. тураһында. **Ғәйеп булыу** — хәбәр-хәтерһеҙ юк булыу (кешегә ҡарата ғына әйтелә). *Шунан бирле Ғарифтан бер ҙә хәбәр юҡ. Ул хәбәрһеҙ юғалды* (М. Ғафури). *Биктимерҙең Тимербайы ғәйеп булған тиҙәр, ысынмы икән?* (И. Насыри).

**Юйыу, һөртөү.** Ниҙең дә булһа йөҙөндәге әҙҙе ышҡып бөтөрөү. **Юйыу** күберәк яҙыуһыҙыуҙы, буяуҙы һөртөп алыуға ҡайтып кала. *Таҡтаны юйыу. Һыҙманы юйыу.* **Һөртөү** — юйып алыу һәм таҙартыу. *Таҡтаны һөртөү. Иҙәнде һөртөү. Әминбәк скрипканы алған да, өҫтөнә ҡунған саңды кәзәкей салғыйы менән һөртөп, бушап бөткән ҡылдарын көйләй башлаған* (әкиәттән).

— Юйғыс, юйма.

**Юрау, күрәҙәлек итеү.** Эшхәлдең булыр-булмаҫын алдан фараз итеү. *Улар үҙҙәрен шул быуаттар буйына иҙгән тәртиптән ҡотҡарыусыны күргеләре килде! Һәр ике яҡ үҙенсә юраны* (И. Насыри). *Иҫке донъя, күрәҙәлек итеп, беҙгә үлем юрап торғанда, Ленин юлының тантанаһы булып килде был көн бөтә донъяға* (Х. Туфан).

— Юраусы, күрәҙә(се).

# Я

**Ябығыу, кибеү** *күсм.* Төҫ ташлау, хәлһеҙләнеү. *Ҡыҙ кибеп бөткәс, бөтөнләй хәлһеҙләнгән* (әкиәттән).

**Ябыҡ, арыҡ, яшыҡ, сандыр, сибек, тарамыш** *күсм.*, **ҡаҡса, ҡалдау, ҡаңғыл, тартай** *күсм.*, **янбашына күнәк элерлек, ҡаҡ һөйәк.** Тәнендә ит-майы ғәҙәттәгенән күпкә ҡайтыш, йоҡа; һимеҙҙең киреһе. **Ябыҡ** киң ҡулланылышлы: кеше, мал, ҡошҡорт. **Арыҡ** — ябыҡ һәм хәлһеҙ. **Яшыҡ** — үтә ябыҡ. **Сандыр, ҡаҡса, ҡалдау, ҡаңғыл** — йоҡа итле, ләкин үтә ябыҡ та түгел. **Тарамыш** — ябыҡ, ләкин көс-ҡарыулы. **Тартай** — бик ябыҡ (ғәҙәттә бала-сағаға ҡарата). **Янбашына күнәк элерлек** — шау һөйәк, яшыҡ (мал-тыуар). **Ҡаҡ һөйәк** — бик ябыҡ (кеше, мал-тыуар). *Уның, оҙаҡ ауырып ятҡандан һуң, яңы ғына һауыға башлаған кешенеке төҫлө ябыҡ ап-аҡ йөҙөндәге ҡыйғас ҡаштары, бәләкәс мыйығы күмерҙәй ҡап-ҡара булып күренә* (Х. Мохтар). *Икмәк һорап ауған арыҡ тәндәр ҡамсыларҙан ярылып ташланды* (Ғ. Сәләм). *Ерҙәр ҡаты, еңә алмай уны арыҡ атлы, ярлы ауылдар* (Б. Бикбай). *Юламан ҡарттың арыҡ, тарамыш ҡулдары ҡапыл үтә хәлһеҙләнеп, һалынып төштө* (З. Биишева). *Тәбәнәк буйлы, сандыр, бите йыйырсыкланып бөткән, күҙҙәре бәләкәй генә, ҡыҫынҡы* («Совет Башҡ.»). *Моталов сандыр йөҙлө, уртаса, хатта уртасанан да тәбәнәгерәк кәүҙәле, бик етеҙ, киҫкен хәрәкәтле кеше* (И. Абдуллин).— *Шәкерт халҡы сибек була ул,—*

*тип өҫтәп ҡуйҙы Баһман* (А. Таһиров). *..Икенсеһе — ҡакса битле, сандыр оҙон буйлыһы — киреһенсә, һөйләй ҙә һөйләй* (Д. Исламов). *Йөрөй торғас, ул [Ғәндәлиф] башына сал йүгергән ҡаңғыл һөйәкле бер ҡарт булып китә* (Т. Ҡилмөхәмәтов). *Атлыҡса тишек-тошоҡ, һыуыҡ ел үйнай. Аттарҙың янбаштары күнәк әлерлек* (Б. Ишемғолов).*— Ана ҡайһылай ябығып бөткәнһең ..Ҡаҡ һөйәккә ҡалғанһың бит, балаҡай!* (Ф. Иҫәнғолов). *Тоҡомдары бұталып бөткән башмаҡ кеүек кенә сибек һыйырҙарҙы, нисек кенә ашатһаң да, һөт төшмәне* («Совет Башҡ.»).

**Яҙа-йоҙа, сала-сарпы, ярты-йорто.** Унан-бынан ғына, саҡсаҡ. *Я ҙ а-й о ҙ а ғына һиҙелеү. С а л а-с а р п ы килеп етеү. [Санкт-Петербургта] Академия тип аталған йорт та бар, ти.. Былар хаҡында сала-сарпы ишетеп ҡалһа ла, унда барып уҡыуҙы.. хыялына килтерергә лә баҙнат итмәне Ҡинйә* (Ғ. Ибраһимов).

**Яҙмыш, тәҡдир** *иҫк.* Хәл-ваҡиғалар, тормош ағышының алдан билдәләнеше, ҡотолғоһоҙлоғо (боронғо фараз буйынса). *Яҙмыштан уҙмыш юҡ* (мәҡәл). *Ҡылыс бит ул ил яҙмышы менән үлсәнгән ир намыҫының асҡысы* (Ә. Вахитов). *Бының байып китеүен алланың рәхмәтенә, тәҡдирҙә шулай яҙылғанға күрә, тип фекер итәләр ине* (М. Ғафури).

**Яйлау, әкренләү, бызмырҙау** *һөйл.*, **мыштырҙау, ығышыу.** Йәһәт-йәһәт кенә эшләмәй, һуҙмаҡайланыу. **Яйлау** актив ҡулланыла, *Я й л а м а ғ ы ҙ әле, йәһәт булығыҙ! Абыстай һаман бызмырҙай, бүҫелеп-бүҫелеп торған эсен йыуып маташа* (С. Агиш). *Әкренләп һыу буйлап шыуабыҙ* (Д. Юлтый). *[Бисәләрҙең] ҡайһыныһы аяғына оло быйма кейеп, лаштырлоштор ығыша, ҡайһыныһы бөрләтәүе тулған инә өйрәктәй тайшаңлай* (Ш. Янбаев). *Шулай ығышып ҡына атлап, эңерләтеп кенә ҡайтып еттек* (Н. Мусин). *Ғимади ҡарт әлек кейенеп бөттө лә ҡарсығын ашыҡтыра башланы, ҡарсыҡ һаман мыштырҙай* (С. Ҡудаш).

**Яҡ, тараф.** Билдәле бер йүнәлеш. **Яҡ** йышыраҡ ҡулланыла. **Тараф** китап теленә тартым. *Түбән я ҡ. Үр я ҡ. Уң т а р а ф. Һул т а р а ф. Тауҙың бер яғында Һаҡмар һыуы, көн тарафта Талҡаҫ күренә* (С. Ҡулибай). *Бөтәһе ул [яугир] күрһәткән тарафҡа боролдо* (Ә. Хәкимов). *Һиҙгән һайын йөрәк түҙемерәк, һәр тарафтан иҫкән елгә боролоп, һәр тауышҡа бармай асылып* (Р. Бикбаев).

**Яҡлау, аралау, ботлау** *һөйл.*, **ҡурсалау, ҡанат аҫтына алыу** *күсм.* Ҡурҡыныстан, йәберҙән һаҡлап ҡалыу. **Яҡлау** киң ҡулланылышлы: ҡорал, эш-хәрәкәт, һүҙ һ. б. менән. **Аралау** — ғәҙәттә һүҙ менән яҡлау. **Ботлау** — кәрәкһеҙгә яҡлау (хуп күрмәүҙе белдерә). **Ҡурсалау** — һөжүмдән аралап алып ҡалыу, яҡлау. **Ҡанат аҫтына алыу** — ныҡ яҡлау, һүҙ, ҡул тейҙермәү. *Һине түгел, ҡыҙый, бөгөн мине яҡлар ине милиционерҙар* (Ғ. Сәләм). *Ҡыу Тунғатарҙа тәүге йәшеллек йыйырсыһы булып тауыш ҡына бирәләр. Шул яғы менән дә яҡлауға лайыҡлы эш ул* («Совет Башҡ.»). *Ғәзимә менән Миңлекәй уға теш ҡайрап-ҡайрап ҡуялар ҙа, Рәхимә еңгә аралай шул* (Һ. Дәүләтшина). *Баланы күп ботлаһаң, ололарға һалыша ла китә ул* (һөйл. теленән). *Ул ҡайтҡан көндө үк миңә бер-ике тапҡыр бәйләнеп алды. Тик өләсәйем генә ҡурсаланы* (Д. Юлтый). *Трест начальнигы Ф. Г. Быков ниндәй сәбәп менәндер Колесниковты үҙ ҡанаты аҫтына алған* («Совет Башҡ.»). *Абдрахман ..ырыуҙаштарын үҙ ҡанаты аҫтына алып, һәр ваҡыт яҡлап килгән* («Совет Башҡ.»).

**Яҡшы, һәйбәт, арыу, шәп, елле** *күсм.*, **берәгәйле, быны(мын) тигән, һин дә мин** *һөйл.*, **ал да гөл.** Ыңғай яғы күпкә өҫтөн; насарҙың киреһе. **Яҡшы** актив ҡулланыла; сифат, рәүеш, исем булып та килә. **Һәйбәт, шәп** — яҡшы сифатлы. **Арыу** — ярайһы уҡ яҡшы, уртасанан өҫтөн. **Берәгәйле** — бик шәп (кеше, һүҙ һ. б.). **Елле** — бик яҡшы (кеше, эш-хәл). **Быны(мын) тигән** — үтә шәп, тиңдәшһеҙ. **Һин дә мин** — арыу ғына, һәйбәтлеге уртасанан артыҡ (эш-хәл, торош). **Ал да гөл** — бик яҡшы (эш-хәл тураһында). *Яҡшы һүҙ ташты иретә* (мәҡәл). [*Салауат:*] *Бында һине яҡшы ниәт килтермәгәндер, тимен* (М. Кәрим). *Яҡшылыҡҡа яҡшы булыу — һәр кешенең эшелер, яманлыҡҡа ла яҡшы булыу — ир кешенең эшелер* (мәҡәл). *Һәйбәт эш — ҡанатлы ҡош* (мәҡәл). *Беҙҙең, иптәш, баҡсабыҙ бар, иллә һәйбәт, шәп тә һуң..* (Ш. Бабич). *Беренсе күреүҙә беҙгә ҡурҡыныс сифатлы күренгән был таҙа егет хәҙер арыу ғына күренә башланы* (М. Ғафури). *Нефтсе ташлай ҡарашын баҫыуҙар киңлегенә: — Быйыл да бит һинең эштәр күренә елле генә..* (Н. Нәжми). *Бер булһа ла берәгәйле булһын* (әйтем). *Үҙем эшләй башлағас та, бынамын тигән баян алып ебәрәм* (Ф. Исәнғолов). *Партия сафына ылыҡтырырҙай бына тигән кешеләр күренә бында* (Ғ. Әмири). *Шул ерҙә Аҡмырҙа теге күҙ дарыуын атаһының күҙенә тамыҙған. Атаһы — һин дә мин — күрә башлаған* (әкиәттән). *Беҙҙең хәлдәр ал да гөл ине әле* (Һ. Дәүләтшина). *Сынбулатов ҡыҙыл ылау менән фәләнсә йөк иген оҙаттыҡ, тип маҡтанды, колхозда эштәр ал да гөл, тип кенә әйтмәне* (М. Тажи).

**Ялағай, ҡылйыуғыс** *күсм.*, **юха, ярамһаҡ, йомаҡай** *һөйл.*, **таҫма тел, татлы тел.** Ярамһаҡланып, кемгәлер ярарға тырышҡан (кеше). Яманлау һүҙҙәре. **Юха** — хәйләле ялағай. **Таҫма тел, татлы тел** — һүҙ менән йыуып, ярарға тырышҡан кеше.— *Булды,— тине ялағай мөдирҙең күҙгә күренеп торған йүкә шынаһынан биҙәр булған Ғәләү* (Б. Бикбай). *Ай-һай, уның юхаланыуына ышанма, улмы, ул — йылан аяғын киҫкән. Шундай хәйләкәр ҡылйыуғыс* (Һ. Дәүләтшина). *Юха булғас, ул ен, пәрей кеүек булып, төрлө сифаттарға инә ала имеш, ти* (Ғ. Ибраһимов). *Торған таҫма тел ине ул, баурыңды өҙөп алырҙай булып кереп килде бит* (Р. Низамов). *Татлы тел таш ярыр* (мәҡәл).

**Ялағайланыу, юхаланыу, ярамһаҡланыу, яҡшатланыу, ҡушанланыу, ҡойроҡ болғау, тәрилкә тотоу, тәрилкә ялау, табан ялау.** Ҡемгәлер ярарға тырышыу. **Юхаланыу** — үтә ялағайланыу. **Ярамһаҡланыу** — эш-ҡылыҡ менән ярарға тырышыу. **Яҡшатланыу** — яҡшы күренергә тырышыу. *Шул саҡ эт өрөүенән туҡтай. Ялағайланып ҡойроғон болғап, һунарсы янына килә башлай* (әкиәттән). *Бөтәһе ап-асыҡ! Юхаланма ла, ялағайланма ла миңә һин, йылан!* (Ғ. Ғүмәр). *Шунан уның Маянһылыуға ярамһаҡланып, күл ситенә барып, һыу алырға әйелеүе булды — Маянһылыуҙың: «Ҡуҙыйкүрпәстең ҡоно бына шул булыр!» — тип, арҡаһына бысаҡ менән үлтерә сәнсеүе булды, ти* («Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу»). *Унда Мәскәй тора икән. Ул Ҡамыр батырҙы ишек асып, яҡшатланып ҡаршы алған* (әкиәттән). [*Арыҫлан:*] — *Уларҙың тарханлығы.. Халыҡты һатып, янаралдарға ҡушанланып ҡына ярайҙар* (Ғ. Ибраһимов). *Чек менән һыуһыны төшкән Станиславский, кенәздең алда тағы ла шундай чектарын күҙ алдында тотоп, яҡшатлы булыр өсөн ҡойроҡ болғай башланы* (И. Насыри). *Ҡем һиңә ярамһаҡлана, кем тәрилкәң-*

*де ялай — шул һиңә яраны, уны һин үҙ күрҙең* (Ғ. Әмири). *Шамбы һымаҡ шыма Плахин теләһә кем алдында ялағайланырға, тәрилкә тоторға, кешеләргә яла яғырға һис тартынманы* («Совет Башҡ.»).— *Һине мир эшенә ышанып ҡуштылар. Һин бит киреһен эшләп йөрөйһөң. Үҙеңдән көслөләрҙең табанын яларҙайһың* (Ф. Исәнғолов).

**Ялған, алдыҡ, ғәйбәт, буш** *күсм.*, **уйҙырма, туҙға яҙмаған.** Ысынбарлыҡҡа тап килмәгән, дөрөҫ булмаған. **Ялған** киң ҡулланылышлы. *Я л ғ а н дан. Я л ғ а н хәбәр.* **Алдыҡ** — ялған һүҙ, хәбәр. **Ғәйбәт** — уҫал ниәт менән сығарылған ялған хәбәр. **Буш** — ысын булмаған. **Уйҙырма** — уйлап сығарылған, дөрөҫ түгел. **Туҙға яҙмаған** — буш, булмаҫтай (хәбәр). *Эй шул «имеш-мимештәрҙең» ҡайҙа дөрөҫө? Күбеһе дөрөҫ булһа ла, ялған күбеһе* (Н. Нәжми). *Ялғандың аяғы ҡыҫҡа* (мәҡәл). *Ни ҡәҙәре оҫта алдаһаң да, ялғанлығы һиҙелә ялғандың* (Б. Вәлид). *Уйлама, Байбулат, был һөйөү комсомолса түгел, алдыҡ, тип, Гөльямалдан әлек, һин үҙең бит кирбес һәм һөйөүҙе ҡалдырҙың* (Ғ. Сәләм). *Дуҫ күҙеңә ҡарап әйтер, дошман артыңда ғәйбәт һатыр* (мәҡәл). *Ауылда һөйләгәндәрҙең барыһы ла буш булып сыҡты* (Ғ. Дәүләтшин). *Аҙыраҡ һуған һыуы һурып, каталажкала ятып ҡараһын әле. Унан һуң карарбыҙ. Ә уның, ҡатнашлығым юҡ, тип әйтеүе уйҙырма ғына ул* (И. Насыри). «*Колхоз тигәндәре лә шул туҙға яҙмаған бер әкиәттер әле*»,— *тип ҡул һелтәне* (Һ. Дәүләтшина).

**Ялғаш, тағараҡ.** Оҙонса йәйпәк һауыт. *Ҡарт ..шунда уҡ торған ҙур ялғаштағы һыуға төрәндең йөҙөн маныл-маныл алды* (Ә. Вәли). *Һыуҙан ҡурҡҡан тағараҡҡа төшөп үлгән* (мәҡәл).

**Ялҡау, иренсәк, елкәһе соҡор(ло), тиреһе йоҡа.** Эш яратмаған, эшлекһеҙ; егәрленең киреһе. **Ялҡау** киңерәк ҡулланылышлы: кешегә, малға, уларҙың эш-хәрәкәттәренә ҡарата әйтелә. *Ата я л ҡ а у. Я л ҡ а у ат. Я л ҡ а у малай.* **Иренсәк** — иренеп кенә эшләй торған, ялҡауыраҡ. **Елкәһе соҡор(ло), тиреһе йоҡа** — эшкә барымы булмаған, иренсәк. *Ялҡау егет йәр тапмаҫ, тапһа ла, тора алмаҫ* (мәҡәл). *Алйоттоң эше булмаҫ, ялҡауҙың ашы булмаҫ* (мәҡәл). *Әхмүш бәләкәйерәк сағында ла иренсәгерәк бер бала ине* (Д. Юлтый). *Иренсәк ике эшләр* (мәҡәл). *Бына шул һөргөндә инде уның ағас адвокатлығы башлана. Телгә шәп, эшкә елкә соҡор* (Б. Бикбай).
— Ялҡаулыҡ, ялҡауланыу, ялҡауҙарса; иренсәклек.

**Ялҡыу, туйыу** *күсм.*, **биҙрәү, йөҙәү.** Теңкә ҡороп бөтөү, йонсоу (кешенән, эш-хәлдән). **Биҙрәү, йөҙәү** — бик ныҡ ялҡыу, бөтөнләй туйыу. *Күңелдең дә көнө була, төнө була, гөлгөнәм! Һин үҙең дә ялҡыр инең, көлөп торһам гел генә!* (Ҡ. Даян). *Туйҙым, бугай, һеҙҙән, үҙемдән,— юғалығыҙ минең күҙемдән* (Н. Нәжми). *Артыҡ һөйләнмәһә лә, Әскәпьямал апай ҙа был тормоштан биҙрәне* (Р. Солтангәрәев). *Был тормош тамам туйҙырҙы инде. Әллә ҡайҙа алыҫҡа. Рәсәй эсенә инеп китке килә* (Д. Юлтый).

— Ялҡытыу, ялҡытҡыс; туйҙырыу, туйҙырғыс; биҙрәтеү, биҙрәткес; йөҙәтеү, йөҙәткес.

**Ялтырау, йылтырау, йымылдау, йылмылдау, йылтылдау, емелдәү, баҙлау, балҡыу.** Яҡтылыҡ һибеп тороу, яҡтыһы күҙгә күренеп тороу. **Ялтырау** киң ҡулланылышлы: яҡтыһы, нуры төшкән йәки яҡтылыҡты сағылдырған һәр бер нәмәгә ҡарата әйтелә. **Йылтырау** — бер төрлө генә яҡтылыҡ биреп тороу. **Йымылдау, емелдәү** — өҙөк-өҙөк яҡтырыу йә төрлө төҫкә инеп ялтырау. **Йылмыл-**

**дау, йылтылдау** — ялт-йолт итеп тороу. **Баҙлау** — нык яҡтырыу (ғәҙәттә ҡараңғыла). **Балкыу** — асыҡ яҡтырып, нык ялтырап тороу. *Фәхри ҡарттың Өфөләге арҡа терәктәре тураһында йылы һүҙ ишеткәс, күҙҙәрен ялтыратып, шунда уҡ күңелләнеп китте* (Б. Бикбай). *Көлмәҫлек тә түгел шул — тегеләрҙең тештәре генә йылтырап күренә, бөтә ере баштан-аяҡ көл, күмер менән бысранып бөткән, ти* (әкиәттән). *Тик йондоҙҙар ғына йымылдашып торалар* (А. Таһиров). *Күҙҙәре менән тештәре генә йылтылдай ине* (Ф. Иҫәнғолов). *Күп урында тәмәке уттары баҙлай, бөтә ерҙә һөйләшәләр* (Д. Юлтый). *Ҡаланың бөтә йорттарында ла ут һүнгән, тик бер генә йортта ут балҡып торған* (әкиәттән).

**Ямаҡ, йәмһеҙ, һөйкөмһөҙ, һөймәлекһеҙ, күрмәлекһеҙ, рәүешһеҙ, шыҡһыҙ, котһоҙ, иләмһеҙ, шөкәтһеҙ, килбәтһеҙ, майлап һалһаң эт яламаҫ** *һөйл.* Төҫ-ҡиәфәте күңелгә ятырлыҡ түгел, йәме юҡ; матурҙың киреһе. **Ямаҡ** башлыса тышҡы ҡиәфәткә ҡарата әйтелә. **Йәмһеҙ** эш-ҡылыҡҡа, һүҙгә ҡарата ла ҡулланыла. *Й ә м һ е ҙ хәрәкәт. Й ә м һ е ҙ тауыш.* **Һөйкөмһөҙ, һөймәлекһеҙ, күрмәлекһеҙ** — күрер күҙгә йәмле түгел, үҙенә тартмаған (тышҡы ҡиәфәт, ҡылыҡ). **Шыҡһыҙ, рәүешһеҙ, ҡотһоҙ, иләмһеҙ, шөкәтһеҙ** — бик йәмһеҙ, бик насар ҡиәфәтле. **Килбәтһеҙ** — килешһеҙ, бик йәмһеҙ (ғәҙәттә кәүҙә, торош, хәрәкәт, ҡыланыш). *Шулай былар икәүләп тороп яталар, ти. Был кешенең бисәһе бик матур, үҙе бик ямаҡ икән* (әкиәттән). *Был йәмһеҙ, онотолған тәҫ Ғәлиҙең үткәндәге эштәрен күҙ алдына килтереп ҡалды* (М. Ғафури). *Ишектән һөйкөмһөҙ кеше күҙгә ташланды.. Ә әнеһенең эше әллә нисегерәккә әйләнгән, ауылдың һөймәлекһеҙ кешеһе булып киткән ул* (Ә. Вахитов). *Төшөмдә әллә ниндәй шыҡһыҙ әҙәмдәр күреп бөттөм* (һөйл. теленән). *Ҡотһоҙ әҙәмгә баш күтәреп ҡарағы ла килмәй хатта* (Ә. Бикчәнтәев). *Ҡемгәләр ул йәмһеҙ, хатта шөкәтһеҙ күренәләр, серәкәйе лә талайҙыр, яңылыш баҫһа, батып, йәне лә көйәләр, ҡарғап та ҡуялыр* (Ә. Вахитов). *Ҡанаттарына ҡара тәре тамғалары һуғылған шөкәтһеҙ ҡоштар ҡайҙандыр килеп сыға ла һауала әйләнә башлай* (М. Кәрим). *Ҡармазинкай яға, ай, күк сәкмән килбәтһеҙ ҙә иргә килешмәй* (халыҡ йырынан).

— Ямаҡланыу, ямағайыу, йәмһеҙләнеү, һөйкөмһөҙләнеү, шыҡһыҙланыу, котһоҙланыу.

**Яндырыу, үртәү, ут (үрт) һалыу, ут төртөү, ҡыҙыл әтәс осороу.** Ут менән нәҙелер юҡҡа сығарыу, көлгә әйләндереү. **Яндырыу, үртәү** *нимәне?* — тотош яндырыу һәм ут ярҙамында эшкәртеү. *Урман ү р т ә ү. Күмер я н д ы р ы у. Күмер ү р т ә ү.* **Ут (үрт) һалыу, ут төртөү** *нимәгә?* — янғын сығарыу, яндырып ебәреү. **Ҡыҙыл әтәс осороу** *нимәгә?* — ут һалыу (көлөү, мыҫҡыллау төйғоһо ла белдерә). *Яндырҙылар поселканы, ҡамап ялҡынға, буяп ал ҡанға* (F. Сәләм). *Үртәй йөҙәр ауылдарҙы Тәфтиләүҙәр-карателдәр* (Р. Бикбаев). *Ә һин ишшо минең йортомдо ла үртәргә итәһең.— Быға тиклем яға инек, үртәлмәй инек бит әле* (И. Насыри). *Ут һалдыҡ, плен алманыҡ. Тынлыҡ хәҙер бар ерҙә* (F. Сәләм). *Аҙаҡ, бесәнгә ут төртөп, аты эргәһенә сығып йүгерҙе [Мораҙым]* (F. Әмири). *Совхоз баҫыуына кем ҡыҙыл әтәс осорҙо, ә?* (Б. Бикбай).

**Япһарыу, ябыу** *күсм.*, **һылтау.** Берәүҙең ғәйебен икенсе кешегә ауҙарыу. *Улар бөтәһе лә, был хәлде әйтергә оялып, һуйған бейәләренә япһарғандар, ти* (әкиәттән). *[Ҡаһымбай — Буранбайға:]— Эш хаҡыңды тотоп алып ҡалалар.*

*Үҙ ғәйептәрен ябалар. Әйҙә, намыҫың булмаһа, эшлә* (И. Ғизәтуллин).

**Яра, йәрәхәт.** 1) Тәндәге зарар күргән урын. **Яра** киңерәк ҡулланылышлы. *Тән яраһы уңалһа ла, йөрәк яраһы уңалмай* (әйтем). *Минең күкрәк аша автомат пуляһы үтеп китте. Ҡыҙыу ҡан менән ярты сәғәт буйына мин был йәрәхәтте һиҙмәгәнмен дә* (С. Ҡулибай).

2) *күсм.* Күңелгә һалынған ауыр тәьҫир. *Ярай әле йөрәкте ҡулға алып ҡарап булмай. Ярай әле берәүҙең йөрәк яраһы икенселәргә күренмәй* (З. Бишева).

— Яралау, яраланыу, яралы; йәрәхәтләү, йәрәхәтләнеү, йәрәхәтле.

**Ярлы, фәҡир, ауыҙын асһа, үпкәһе күренә.** *һөйл.* Етешһеҙ тормошта йәшәгән, ҡытлыҡ менән көн күргән (кеше). **Ярлы** телдә активыраҡ ҡулланыла. *Ярлы көнө зарлы булыр, өй түбәһе ҡарлы булыр* (әйтем). *Ниндәй фәҡир, ниндәй ярлы кеше, йыр юғалһа күңел түрендә* (Р. Ғарипов). *Яҡшы ат башын нуҡта киҫер, фәҡир башын юҡ киҫер* (әйтем). *Ә бит уларҙың барыһы ла, беҙҙең кеүек үк, иҫ киткес ярлы, ауыҙҙарын асһалар, үпкәләре күренеп торған ярлы кешеләр* («Совет Башҡ.»).

— Ярлылыҡ, фәҡирлек; ярлы-ябағай, фәҡир-фоҡара.

**Ярлыланыу, бөлөү.** Мал-мөлкәттән яҙып, етешһеҙ хәлдә ҡалыу. *Бик ярлыландылар, ауыҙҙарын асһалар, үпкәләре күренеп тора.* (Д. Юлтый). *Харам мал барыбер төртә ул, аҙаҡтан шул извозчик бөлөп барып үлде* (С. Агиш). *Илдәге буталыштар әсендерә ине уны. Ҡешеләр ҡырылыр, халыҡ бөлөр* (Ғ. Ибраһимов).

**Яуҙаш, окопташ.** Һуғышта бергә йөрөгән кеше. *Я у ҙ а ш дуҫ. Яраларым сатнап һыҙлай башлай, окопташтар төшһә иҫемә* (Ш. Бикҡол).

**Яуыз, мәкерле, эскерле, ҡаресле, ҡара йөрәк(ле).** Күңелендә асыу, уҫаллыҡ һаҡлаған; этлек уйлап йөрөгән. **Яуыз** — бик уҫал, этлекле. *Я у ы з дошман. Я у ы з кеше.* **Мәкерле** — хәйләле яуыз. **Эскерле** — яуыз ниәтле, күңелендә уҫаллыҡ йөрөткән. **Ҡаресле, ҡара йөрәкле** — бик яуыз, мәкерле (кеше). *Оялмай, шул көйөнсә ҡыҙ һоратырға ебәргән Фәскигә лә уның һүҙе менән йөрөгән был яуыз ҡарсыҡҡа ҡара!* (М. Ғафури). *Мәкерле ҡараҡтың яуыз тырнағынан ҡотолоу шатлығынан—Мораҙымды бығаса бер ваҡытта ла кисермәгән тойғо биләп алды* (Ғ. Әмири). *Талашһаң да тиҙ онота торған малай ул Ғәләү, эскерле түгел* (Б. Бикбай). *Ә батша, донъяла минән дә яҡшы йәшәүсе кеше булмаҫҡа тейеш, тип йәшәүсе, ҡаресле, көнсөл бер нәмә булған* (әкиәттән). *Онота алмайым: шаулы океандың алыҫ төңгө ярҙы йыуғанын, аҡ күңелле ҡара Робсон илен ҡара йөрәк Трумэн быуғанын* (М. Кәрим).

— Яуызлыҡ, яуызланыу; мәкерлек, эскерлелек, ҡареслелек.

## ҺҮҘЛЕККӘ АЛЫНҒАН СИНОНИМДАР КҮРҺӘТКЕСЕ

Түбәндә һүҙлеккә ингән бөтә синонимдар алфавит тәртибендә бирелә. Цифрҙар менән уларҙың мәғәнәләре, ҡалын шрифт менән төп һүҙ (доминанта), оя эсендәге синонимдарҙың төп һүҙе йәйә эсендә күрһәтелә.

### А

абай (1. һаҡ)
абайһыҙ (аңра)
**абзац**
**абруй**
абыныу (һөрөнөү)
авторитет (абруй)
ағай-эне (туған)
**ағартыу**
**ағын**
аҙайыу (кәмеү)
**аҙаҡ**
**аҙаҡҡы**
аҙап (ыҙа)
аҙапланыу (маҙаланыу)
**1. аҙашыу**
**2. аҙашыу**
аҙған-туҙған (аҙғын)
**аҙыҡ**
аҙыкланыу (ашау)
аҙыҡ-түлек (аҙыҡ)
аҙырайыу (аҡайыу)
ажар (айбар)
ажғырыу (екереү)
**азат**
азат итеү (ҡотҡарыу)
**айбар**
айкашыу (айпашыу)
айныу (бушаныу)
айпалашыу (айпашыу)
**айпашыу**
айырма (айыры)
айырса (айыры)
айыр(ы)
айырылыш (айыры)
айыу майы һөртөү (урлау)
**аҡ**
аҡ (1. саф)
**аҡайыу**
аҡбурлау (ағартыу)
аҡлау (ағартыу)
аҡтыҡҡы (аҙаҡҡы)
**аҡтарыу**
**аҡһаҡ**
аҡшайыу (аҡайыу)
аҡылға бер төрлө (ахмаҡ)
аҡылға килеү (аҡылланыу)
аҡылға теүәл түгел (ахмаҡ)
аҡылға ултырыу (аҡылланыу)
**аҡылланыу**
**аҡыллы**
аҡыл ултырыу (аҡылланыу)
аҡылһыҙ (ахмаҡ)
аҡырыу (ҡыскырыу)
алама (1. насар)
албырғау (әүрәү)
алғыһау (һағыныу)
алда (башта)
ал да гөл (яҡшы)
**алдау**
алдашыу (алдау)
алдыҡ (ялған)
**алдынғы**
алйот (ахмаҡ)
алҡынғансы (туйғансы)

алҡышлау (ҡул сабыу)
алмашыныу (алышыныу)
**алпауыт**
**алсайыу**
**алсаҡ**
алъюҫыҡҡа (бушҡа)
**алыҫ**
алыш-биреш (сауҙа)
**алышыныу**
алышыу (көрәшеү)
аман (һау)
ана (әсә)
**анһат**
анһығыу (арыу)
анһығыу (һыуһау)
**аныҡ**
аң (һунар)
аң-белем (белем)
аңғартыу (1. белдереү)
аңғарыу (аңлау)
аңдыу (һағалау)
аңды юғалтыу (иҫәңгерәү)
аңды юйыу (иҫәңгерәү)
аңҡау (аңра)
**аңҡыу**
аңлайышлы (аныҡ)
аңлайышһыҙ (билдәһеҙ)
**1. аңлау**
**2. аңлау**
**аңра**
аңыш (аңра)
аптыраныу (аптырау)
аптырарлыҡ (ғәжәп)
**аптырау**
аптырау (ғәжәпләнеү)
ара (нәҫел)
аралау (ҡурсалау)
аралау (яҡлау)
аралы (алыҫ)
арҙаҡлау (ҙурлау)
**арзан**
арҡалау (йөкмәү)
арҡа терәү (ышаныу)
**арҡыры**
арҡыры (2. кире)
арҡыры тороу (ҡамасаулау)
**арлы-бирле**
арманһыҙ булыу (арыу)
армия (ғәскәр)
**арнау**
артмаҡлау (йөкмәү)
**арттырыу**
арт һабағын уҡытыу (туҡмау)
**артыҡ**
**1. артылыу**
**2. артылыу**
**арынһыҙ**
арыҡ (ябыҡ)
**арыныу**
арыҫлан йөрәкле (батыр)
**арыу**
арыу (яҡшы)
арыуланыу (һауығыу)
аса (айыры)
аскернә (бирән)
ас күҙ (бирән)
**аслыҡ**
асман (күк)
**асығыу**
**асыҡ**
асыҡ (алсаҡ)
асыҡ (аныҡ)
асыҡ ауыҙ (мәшәү)
асырғаныу (тешләнеү)
**асыуланыу**
асыу ҡабарыу (асыуланыу)
**асыу тотоу**
аҫтын өҫкә килтереү (болартыу)
**аҫыл**
атаҡ (дан)
**атаклы**
**атау**
атҡарыу (башҡарыу)
**атланыу**
атлығыу (ашҡыныу)
атлы кеше аттан төшөп, йәйәү кеше ергә ятып ҡарарлыҡ (матур)
атыу (бәреү)
**ау**
ауан (хәйләһеҙ)
ауан (күндәм)
ауҙарыу (тәржемәләү)
аулау (тотоу)
ауыҙға йөҙөк йәшереү (өндәшмәү)
ауыҙға һыу уртлау (өндәшмәү)
ауыҙҙа бутҡа бешереү (һөйләнеү)
ауыҙҙы тығыу (өндәшмәү)
ауыҙҙы ябыу (өндәшмәү)
ауыҙ итеү (тәмләү)
ауыҙ йомоу (өндәшмәү)
ауыҙ йырыу (көлөү)
ауыҙына ҡаптырған һары майҙы ла йота алмай (мәшәү)
ауыҙын асһа, үпкәһе күренә (ярлы)
**ауыр**
ауыр (ҡыйын)
**ауырлыҡ**
ауырлыҡ (ыҙа)
**1. ауыртыу**

**2. ауыртыу**
**ауырыу** *к.*
**ауырыу** *и.*
ауыу (тәгәрәү)
ауыу (үлеү)
**ауыш**
афәт (һәләкәт)
**ахмаҡ**
ахыр (аҙаҡ)
ахырғы (аҙаҡҡы)
аһ-зар (1. ҡайғы)
аш (аҙыҡ)
аша (арҡыры)
ашамлыҡ (аҙыҡ)
**ашау**
аш көҫәү (талымлау)
ашҡа төрләнеү (талымлау)
**ашҡыныу**
**ашлыҡ**
аштырыу (арттырыу)
аш-һыу (аҙыҡ)
**ашығыу**
**ашыҡтырыу**
ашыу (артыҡ)
ашыу (1. артылыу)
ашыу (2. артылыу)
**аяҡ өҫтө**
аяҡ үрә (аяҡ өҫтө)
аяҙ (сыуаҡ)
аяҡ баҫыу (1. инеү)
аяҡҡа баҫыу (һауығыу)
аяҡҡа йығылыу (инәлеү)
аяҡ салыу (ҡамасаулау)
**аяҡсы**
аяҡ һуҙыу (үлеү)
аяныс (ҡыҙғаныс)
аяу (йәлләү)

# Б

бағымсы (күрәҙә)
бағыу (1. ҡарау)
бағышлау (арнау)
баҙлау (ялтырау)
баҙнатлы (батыр)
баҙнатсыл (батыр)
баҙыҡ (асыҡ)
баҙымсаҡ (батыр)
баҙыныу (баҙыу)
**баҙыу**
байғош (меҫкен)
байҡау (2. ҡарау)
байлыҡ (милек)
**байраҡ**
**байтаҡ**
баҡырыу (ҡысҡырыу)
**бала**
балауыҙ һығыу (илау)
балдаҡ (йөҙөк)
балҡыу (ялтырау)
балтаһы һыуға төшкән (бойоҡ)
бараман (таныш)
бармаҡ менән һанарлыҡ (әҙ)
**барлау**
барлыҡ (барыһы)
бармағы үҙенә табан кәкре (ҡулсыр)
барсаһы (барыһы)
барыу (килешеү)
**барыһы**
баҫалҡы (йыуаш)
баҫтырыу (ҡыуыу)
баҫылыу (тыныу)
баҫымсаҡ (йыуаш)
баҫынҡы (йыуаш)
**батыр**
**бау**
бахыр (меҫкен)
**баһалау**
башалтай (ойоҡбаш)
баш ватыу (уйлау)
**башкиҫәр**
**башҡа**
баш ҡалҡытмай (ныҡлап)
**башлау**
баш ороу (2. буйһоноу)
баштан үткәреү (кисереү)
баш ҡаңғыртыу (аптырау)
баш ҡатыу (аптырау)
башлы (аҡыллы)
**башта**
**баш тартыу**
баш һалыу (1. буйһоноу)
баш эйеү (2. буйһоноу)
башы йомро (аҡыллы)
башына етеү (үлтереү)
башын ашау (үлтереү)
башына тай типкән (ахмаҡ)
баяр (алпауыт)
беҙәү (сәнсеү)
белгертеү (1. белдереү)
**1. белдереү**
**2. белдереү**
белдермә (2. белдереү)
**белем**
белеш (таныш)
бер (тин)
бер алдына, бер артына сығыу (өлтөрәү)
бер бите ай, бер бите көн (матур)
бер ҡалаҡ һыуға һалып йоторлоҡ (матур)
бер ҡатлы (хәйләһеҙ)

берләм юл (һукмаҡ)
берәгәйле (яҡшы)
**бесәй төкөрөгөндәй** (әҙ)
бешереү (әрләү)
**1. бешеү**
**2. бешеү**
бешеү (туҡмау)
бешмәгән (мәшәү)
биҙгәк (тапма)
**1. биҙеү**
**2. биҙеү**
**3. биҙеү**
**биҙрә**
биҙрәү (ялҡыу)
**1. биҙәнеү**
**2. биҙәнеү**
**бик**
билбау аҫты бушау (асығыу)
бил быуып (ныҡлап)
**1. билдә**
**2. билдә**
**билдәле**
билге (1. билдә)
билге (2. билдә)
билгеле (билдәле)
билдәле (атаҡлы)
биленләү (ҡурҡыу)
билләшеү (көрәшеү)
бил яҙмай (ныҡлап)
бимазалау (борсоу)
**бирелеү**
бирем (ришүәт)
**бирән**
**бирәсәк**
бирәһе (бирәсәк)
бисә (ҡатын)
бит (йөҙ)
битенә ҡара яғыу (хурлау)
битһеҙ (оятһыҙ)
битәрләү (әрләү)
**бишек**
боҙоҡ (аҙғын)
боҙоу (1. ватыу)
**бойоғоу**
**бойоҡ**
бойомға ашырыу (башҡарыу)
бойондороҡһоҙ (азат)
**бойороҡ**
**бойороу**
болоҡһоу (бойоғоу)
болорыу (туҙыу)
**болартыу**
болғансыҡ (буталсыҡ)
борма (бөгөл)
боролма (бөгөл)
боролош (бөгөл)
боролоу (әйләнеү)
борон (башта)
борсаҡ атыу (2. маҡтаныу)
борсаҡ бөрттәреү (2. маҡтаныу)
**борсолоу**
**борсоу**
борсаланыу (ойпаланыу)
борхоу (аңҡыу)
**боҫ**
ботлау (яҡлау)
бошонҡо (бойоҡ)
бошоноу (ҡайғырыу)
бошоу (ҡайғырыу)
**бөгөл**
бөгөлөш (бөгөл)
бөгөм (бөгөл)
**1. бөгөлөү**
**2. бөгөлөү**
бөгөү (ашау)
бөжләү (ҡурҡыу)
**бөкө**
бөкрө (кәкре)
бөлөү (ярлыланыу)
**бөркөү**
бөркәү (1. ҡаплау)
бөткөһөҙ (күп)
бөткәнсе (тулыһынса)
бөтмәҫ-төкәнмәҫ (күп)
**1. бөтөнләй**
**2. бөтөнләй**
**3. бөтөнләй**
бөтөрөнөү (ҡайғырыу)
**бөтөрөү**
бөтөрөү (тамамлау)
бөтөрөү (тотоноу)
бөтөрөү (үлтереү)
бөтәрләнеү (ойпаланыу)
бөтәһе (барыһы)
бөхил (һаран)
буғай (2. кеүек)
буҙлау (илау)
буй (кәүҙә)
**1. буйһоноу**
**2. буйһоноу**
буй-һын (кәүҙә)
букет (гөлләмә)
булған (уңған)
булдыҡлы (уңған)
бур (уғры)
бурыс (бирәсәк)
бурһыу (һаҫыу)
буҫаға (тупһа)
**буталсыҡ**
буш (бушлай)
бушалағайымға (бушҡа)
буш (ялған)
**бушаныу**

**бушаныу** (арыныу)
бушаныу (тыуҙырыу)
бушау (бушаныу)
**бушҡа**
**бушлай**
бушҡа (бушлай)
**буялыу**
бүгеү (2. биҙеү)
бүккәнсе (туйғансы)
бүлгеләү (ваҡлау)
**бүлешеү**
бүләк итеү (һыйлау)
**бүрек**
бүртеү (3. ҡабарыу)
бүҫкәреү (кәмеү)
бүтән (башҡа)
быжғыртыу (әрләү)
быжыу (2. кибеү)
бызмыр (мыштыр)
бызмырҙау (яйлау)
былбыл (һандуғас)
былтылдау (ялтырау)
**былтыр**
бына тигән (яҡшы)
бырaҡтырыу (бәреү)
быран-заран килтереү (болартыу)
бырғау (бәреү)
бырғытыу (бәреү)
бысаҡлау (салыу)
бысраныу (бысрау)
**бысрау**
быу (боҫ)
быуа быуырлыҡ (күп)
**быуат**
быуынға төшөү (йөҙәтеү)
**быуыу**
бышылдау (шыбырҙау)
бәй (бау)
**бәйләнеш**
бәллеү (бишек)
**бәлә**
бәпес (бала)
**бәләкәй**
бәләкәс (бәләкәй)
**бәрелеү**
**бәреү**
**бәүетеү**
**бәхет**
**бәхәсләшеү**

# В

ваз кисеү (баш тартыу)
вайран итеү (2. ватыу)
вайымһыҙ (һиңмай)
**ваҡлау**
ваҡай (мыжыҡ)
ваҡсыл (мыжыҡ)
ваҡ һүҙле (мыжыҡ)
**1. ваҡыт**
**2. ваҡыт**
ватан (тыуған ил)
**1. ватыу**
**2. ватыу**
вафат булыу (үлеү)
взятка (ришүәт)
**врач**
**вәғәҙәләшеү**

# Г

**гел**
гелән (гел)
горизонт (офоҡ)
**гөлйемеш**
**гөлләмә**
гүзәл (матур)
**гүйә**
гүргә инеү (үлеү)
гәпләшеү (һөйләшеү)
гәп һуғыу (һөйләшеү)

# Ғ

ғазап (ыҙа)
**ғаилә**
ғасыр (быуат)
ғилем (белем)
ғәйеп булыу (юғалыу)
ғаләм (йыһан)
ғауға (талаш)
ғауға (тауыш)
**ғашиҡ булыу**
ғишыҡ тотоу (һөйөү)
**ғорур**
ғөрөф (йола)
ғөрөф-ғәҙәт (йола)
ғуж (бирән)
**ғүмер**
ғүмер итеү (йәшәү)
ғүмер кисереү (йәшәү)
ғүмер өҙөлөү (үлеү)
ғүмер һөрөү (йәшәү)
ғүмер һүнеү (үлеү)
ғәҙәт (йола)
ғәҙәт (холоҡ)
ғәҙәттән тыш (ғәжәп)
ғәжәйеп (ғәжәп)
**ғәжәп**
ғәжәпләнеү (аптырау)

ғәзиз (һөйөклө)
ғәйбәт (ялған)
ғәйрәт (1. көс)
ғәйрәт (2. көс)
ғәйрәтле (1. көслө)
ғәйәр (2. көслө)
ғәйәт (бик)
ғәм (1. ҡайғы)
ғәм (2. ҡайғы)
ғәмһеҙ (һиңмай)
ғәмәли (реаль)
ғәрип (зәғиф)
**ғәскәр**
ғәфү итеү (кисереү)

## Д

**дан**
данлы (атаҡлы)
данлыҡлы (атаҡлы)
дарман (1. көс)
дарман (2. көс)
**дарыу**
дау (талаш)
дауа (дарыу)
дерелдәү (ҡалтырау)
диҡҡәт (иғтибар)
дим (өгөт)
диуана (ахмаҡ)
донъя (йыһан)
донъяға килеү (тыуыу)
донъя ҡуйыу (үлеү)
донъяның әсеһен-сөсөһөн татыған (күпте күргән)
дөм (3. бөтөнләй)
дөмбәҫләү (туҡмау)
дөмөгөү (үлеү)
**дөрөҫ**
дүнеү (төңөлөү)
дүрт аяҡлау (имгәкләү)
дымлау (еүешләү)
дәрт (илһам)
дәрәжә (абруй)
дәү (1. ҙур)
дәүер (1. ваҡыт)
дәүер (2. ваҡыт)
дәүләт (милек)
дәһшәтле (ҡурҡыныс)

## Ҙ

**1. ҙур**
**2. ҙур**
**3. ҙур**
ҙурланыу (1. маҡтаныу)
**ҙурлау**

## Е

ебегән (мәшәү)
ейеү (ашау)
**ек**
екеренеү (екереү)
**екереү**
елгә осороу (бөтөрөү)
елгәреү (һуғыу)
елкәгә тейеү (йөҙәтеү)
ел йотоу (ел ҡыуыу)
елкенеү (ашҡыныу)
елкәһе соҡор (ялҡау)
**ел ҡыуыу**
елле (яҡшы)
елләү (1. кибеү)
еләтеү (йөҙәтеү)
еләү (2. биҙеү)
емелдәү (ялтырау)
**емереклек**
емереү (1. ватыу)
емереү (2. ватыу)
**емтек**
ене һөймәү (күрә алмау)
еңел (анһат)
еңел һөйәкле (етеҙ)
**еңмеш**
еӊ һыҙғанып (ныҡлап)
ер аяғы ер башы (алыҫ)
еренә еткереү (башҡарыу)
ереү (3. биҙеү)
**ерле**
**ерләү**
ерәнгес (әшәке)
**ерәнеү**
еҫләнеү (һаҫыу)
**етеҙ**
**етер-етмәҫ**
етеү (1. өлгөрөү)
етеү (1. бешеү)
**етеү**
етеш (хәлле)
**етешеү**
етешеү (етеү)
етешеү (1. бешеү)
етешеү (1. өлгөрөү)
етешеү (2. өлгөрөү)
етлегеү (етеү)
етлегеү (1. өлгөрөү)
етлегеү (1. бешеү)
**еүешләү**
ефет (ҡатын)

## З

заман (1. ваҡыт)
замана (2. ваҡыт)

**зарар**
зат (нәҫел)
затлы (аҫыл)
заяға (бушҡа)
**зирәк**
зифа (матур)
зиһенле (зирәк)
зиһен (хәтер)
зыян (зарар)
**зыярат**
**1. зәғиф**
**2. зәғиф**
зәхмәт (рәнйеү)
зәһәр (бик)

# И

иген (ашлыҡ)
иғлан (белдереү)
иғлан итеү (2. белдереү)
**1. иғтибар**
**2. иғтибар**
иҙмәһен иҙеү (туҡмау)
изерәйеү (екереү)
ике күҙ дүрт булыу (ғәжәпләнеү)
**икмәк**
иксәшеү (әрепләшеү)
икһеҙ-сикһеҙ
ил (тыуған ил)
**илау**
илтифат (2. иғтибар)
илһам
иләк менән һыу ташыу (ел ҡыуыу)
иләмһеҙ (ямаҡ)
имгәк (ыҙа)
**имгәкләү**
имен (һау)
имза (ҡултамға)
имтихан (һынау)
ин (2. билдә)
инабат (ышаныс)
инаныс (ышаныс)
инаныу (ышаныу)
**1. инеү**
**2. инеү**
инеш (шишмә)
инкар итеү (кире ҡағыу)
инсан (кеше)
инсафлы (тыйнаҡ)
инәй (әсә)
**инәлеү**
инәү (2. билдә)
иңкеү (ауыш)
иңкәйеү (1. бөгөлөү)
иңле (киң)
иңрәү (илау)
ипле (тыйнаҡлы)
ирекле (азат)
ирекһеҙҙән (сараһыҙҙан)
иренеү (йыбаныу)
иренсәк (ялкау)
ирештереү (үсекләү)
иркен (2. киң)
**иркә**
ирмәк (ҡыҙыҡ)
ирәгәләшеү (әрепләшеү)
ирәүәнлек (кинәнес)
исем кушыу (атау)
исемләү (атау)
исраф итеү (бөтөрөү)
иҫ (хәтер)
иҫ китеү (иҫәңгерәү)
иҫ китеү (ғәжәпләнеү)
иҫ киткес (матур)
**иҫкәртеү**
иҫте юғалтыу (иҫәңгерәү)
**иҫтәлек**
иҫтән ауыу (иҫәңгерәү)
иҫтән тайыу (иҫәңгерәү)
иҫтән яҙыу (иҫәңгерәү)
иҫән (һау)
**иҫәңгерәү**
иҫәпләү (һанау)
иҫәпһеҙ-хисапһыҙ (күп)
иҫәр (ахмаҡ)
иҫәүән (ахмаҡ)
итәғәтле (күндәм)
**итәк**
итәк тулы (күп)
ифрат (бик)
**ихлас**
ихтирам (хөрмәт)
ихтыяж (хәжәт)
иһаһайлау (көлөү)
иш (пар)
ишара (ым)
ише (1. кеүек)
ишәйеү (артыу)

# Й

йоғолоу (буялыу)
йоғоноу (1. тейеү)
**йоғонто**
йоғоу (2. йәбешеү)
**йоҡлау**
йоҡоға китеү (йоҡлау)
йоҡоға талыу (йоҡлау)
**йоҡомһорау**
**йола**

йолом (ришүәт)
йолоу (ҡотҡарыу)
йомаҡай (ялағай)
йомғаҡ (2. нәтижә)
йомро (тумалаҡ)
йомро юл (һуҡмаҡ)
**йомортҡа**
йомшаҡ ауыҙ (мәшәү)
йот (аслыҡ)
йотлоҡ (аслыҡ)
йотоғоу (асығыу)
**йөҙ**
йөҙгә берәү тулмаған (ахмаҡ)
**йөҙөк**
йөҙөн йыртыу (хурлау)
**йөҙәтеү**
йөҙәү (ялҡыу)
**йөкмәтке**
**йөкмәү**
йөн тибеү (ел ҡыуыу)
**йөпләү**
йөрәк кубыу (ҡурҡыу)
йөрәкле (батыр)
йөрәк өҙөлөү (ҡайғырыу)
йөрәкһеү (ашҡыныу)
йүләр (ахмаҡ)
йүн (рәт)
йүнәлеү (һауығыу)
йүнәлеү (ыңғайлау)
**йүнәтеү**
**йыбаныу**
йыбырҙау (ҡыбырҙау)
йыбытҡы (әрпеш)
йыйналыу (йыйылыу)
**йыйылыу**
йыйыу (туплау)
йылғыр (етеҙ)
йылдам (етеҙ)
йылдам (тиҙ)
йылмылдау (ялтырау)
йылышыу (һыйыныу)
йылтырау (ялтырау)
йымылдау (ялтырау)
йыраҡ (алыҫ)
йыраҡа (йырғанаҡ)
**йырғанаҡ**
йырын (йырғанаҡ)
йырынты (йырғанаҡ)
**йыуатыу**
**йыуаш**
йыфырыу (ашау)
**йыһан**
йәбер (ыҙа)
**йәберләү**
**1. йәбешеү**
**2. йәбешеү**
**йәйғор**
**1. йәйелеү**
**2. йәйелеү**
йәйеү (түшәү)
йәйрәү (1. йәйелеү)
йәл (ҡыҙғаныс)
**йәлләү**
йәлсеү (1. уңыу)
йәм (ҡот)
йәм (2. төҫ)
йәмәғәт (ҡатын)
**йән**
йән алҡымға килеү (ҡурҡыу)
йән атыу (ашҡыныу)
йән биреү (үлеү)
йәнгә тейеү (йөҙәтеү)
йәнде уста тотоу (ҡурҡыу)
йәнен алыу (үлтереү)
йәнен ҡыйыу (үлтереү)
йән көйөү (ҡайғырыу)
йәнле (тере)
йән тир сығыу (арыу)
йән-фарман (тиҙ)
йән әсеү (ҡайғырыу)
**йәнәшә**
йәпле (уңай)
йәһәннәм тишеге (алыҫ)
**йәһәт** (тиҙ)
йәш ағыҙыу (илау)
йәш түгеү (илау)
**йәштәш**
йәшәйеш (тормош)
**йәшәү**

# К

**кейек**
**кейем**
кейем-һалым (кейем)
келәймә (2. билдә)
кенә ҡыуыу (үсләшеү)
кереү (1. инеү)
керешеү (башлау)
керләнеү (бысрау)
керпек ҡаҡҡансы (ҡапыл)
керһеҙ (1. саф)
кеселекле (түбәнселекле)
кесе бәйелле (түбәнселекле)
кескәй (бәләкәй)
**1. кеүек**
**2. кеүек**
**кеше**
**1. кибеү**
**2. кибеү**
кибеү (ябығыу)
киҙеү (ауырыу *и.*)
киҙәнеү (һелтәнеү)

килбәтһеҙ (ямаҡ)
килеш (көйөнсә)
**1. килешеү**
**2. килешеү**
**кимереү**
**киндер**
**кинәнес**
кинәт (ҡапыл)
**1. киң**
**2. киң**
кипсәү (1. тар)
**1. кире**
**2. кире**
**кире ҡағыу**
киреләнеү (ҡарышыу)
киренән (тағы)
**1. кисереү**
**2. кисереү**
көйәҙ (ҡупшы)
**көлкөлө (ҡыҙыҡлы)**
көллөһө (барыһы)
күреү (кисереү)
**1. көс**
**2. көс**
**3. көс**
көскә (саҡ)
**1. көслө**
**2. көслө**
көс-хәл менән (саҡ)
**көтөүлек**
көтәсәк (бирәсәк)
күбенеү (асыуланыу)
күбенеү (1. ҡабарыу)
күбенеү (2. ҡабарыу)
күбеү (1. ҡабарыу)
күбеү (2. ҡабарыу)
күбәйеү (артыу)
күҙ асҡыһыҙ (2. көслө)
күҙ асып йомғансы (ҡапыл)
күҙ бәйләнеү (ҡараңғыланыу)
**күҙгәнәк**
күҙгә салыныу (күренеү)
күҙгә ташланыу (күренеү)
күҙҙән кисереү (2. ҡарау)
күҙҙән үткәреү (2. ҡарау)
күҙ йөрөтөү (2. ҡарау)
күҙ йүгертеү (2. ҡарау)
күҙ күргән (таныш)
күҙ ташлау (1. ҡарау)
күҙ тегеү (1. ҡарау)
күҙ тегеү (ышаныу)
күҙ терәү (ышаныу)
күҙ төшөрөү (1. ҡарау)
күҙ төшөү (ғашиҡ булыу)
күҙ һирпеү (1. ҡарау)
күҙ һытыу (илау)
күҙәтеү (2. ҡарау)
күҙәтсе (күреүсе)
**күк**
күккә күтәреү (маҡтау)
күкрәк ҡағыу (1. маҡтаныу)
күкәй (йомортҡа)
күмеү (ҡуйыу)
күмәгәйеү (артыу)
күн бит (оятһыҙ)
**күндәм**
күндәм (арынһыҙ)
күнегеү (2. өйрәнеү)
**күнеү**
күнәк (биҙрә)
күңел төшөү (ғашиҡ булыу)
күңел төшөү (бойоғоу)
күңел һүрелеү (1. биҙеү)
күңел һыҙлау (ҡайғырыу)
күңелһеҙ (бойоҡ)
күңелһеҙләнеү (бойоғоу)
**күп**
күпереү (1. ҡабарыу)
**1. күпме**
**2. күпме**
күпсеү (1. ҡабарыу)
**күпте күргән**
күренекле (атаҡлы)
**күренеү**
**күреүсе**
күрк (2. төҫ)
күркәм (матур)
күрмәгәнен күрһәтеү (туҡмау)
күрмәлекһеҙ (ямаҡ)
**күрәҙә**
күрәҙәлек итеү (юрау)
**күрә алмау**
күрә-бага (күрәләтә)
**күрәләтә**
күсереү (шылдырыу)
**1. күтәрелеү**
**2. күтәрелеү**
күтәрелеү (1. артылыу)
күтәрелеү (һауалау)
күтәрелеү (ҡуҙғалыу)
кәгеү (урлау)
кәгеү (һуғыу)
кәзәләнеү (ҡарышыу)
кәзәһе артынан ҡалмай (үсегеү)
кәйегеү (3. биҙеү)
**кәкре**
кәкре ҡайынға терәтеү (алдау)
кәләш (ҡатын)
**кәм**
**кәмеү**
**кәмһетеү**
кәпәйеү (4. ҡабарыу)
**кәпәренеү** (1. маҡтаныу)
кәпәренеү (2. маҡтаныу)

кәпәс (бүрек)
кәрлә (тәпәш)
**кәртәләү**
кәрәген биреү (тукмау)
кәрәклек (хәжәт)
**кәүҙә**

## Ҡ

ҡабаландырыу (ашыҡтырыу)
ҡабаланыу (ашығыу)
ҡабартыу (арттырыу)
ҡабарыныу (асыуланыу)
**1. ҡабарыу**
**2. ҡабарыу**
**3. ҡабарыу**
**4. ҡабарыу**
ҡабат (мәртәбә)
ҡабат (тағы)
ҡабыҡ ҡағыу (маҡтаныу)
ҡабыныу (тоҡаныу)
ҡағылыу (бәрелеү)
ҡағылыу (тейеү)
**1. ҡағыу**
**2. ҡағыу**
ҡаҙаҡ (сөй)
ҡаҙалыу (ҡанығыу)
ҡаҙау (сөй)
ҡаҙау (сәнсеү)
**ҡаҙыу**
ҡаза (бәлә)
**1. ҡайғы**
**2. ҡайғы**
ҡайғы-хәсрәт (1. ҡайғы)
**ҡайғыртыу**
**ҡайғырыу**
ҡайнау (мыжғыу)
ҡайнар (эҫе)
ҡайтанан (тағы)
ҡайтыш (кәм)
ҡайһылай (насар)
ҡайыҙлау (туҡмау)
**ҡайырыу**
**ҡаҡ**
ҡаҡашыу (бысрау)
ҡаҡланыу (1. кибеү)
ҡаҡһыу (һаҫыу)
ҡаҡ һөйәк (ябыҡ)
ҡалай (нисек)
ҡаҡса (ябыҡ)
ҡалғыу (йоҡомһорау)
ҡалдау (ябыҡ)
ҡалҡыу (1. артылыу)
ҡалҡыу (ҡуҙғалыу)
ҡалҡыу (2. күтәрелеү)
ҡалҡыу (2. күтәрелеү)
ҡалтағай (саңғы)
**ҡалтырау**
**ҡамасау**
**ҡамасаулау**
ҡамау (кәртәләү)
ҡанат аҫтына алыу (яҡлау)
ҡан ҡайнау (асыуланыу)
ҡан ҡыҙыу (асыуланыу)
ҡанса (1. күпме)
**ҡанығыу**
ҡаңғыл (ябыҡ)
ҡаңғырыу (аптырау)
ҡап ҡорһаҡ (бирән)
**1. ҡаплау**
**2. ҡаплау**
**3. ҡаплау**
**ҡапшау**
**ҡапыл**
ҡарай (табан)
ҡара йөрәкле (яуыз)
ҡараҡ (уғры)
**ҡараңғыланыу**
ҡараңғы төшөү (ҡараңғыланыу)
ҡарап туймаҫлыҡ (матур)
ҡара тиргә төшөү (арыу)
**1. ҡарау**
**2. ҡарау**
ҡараш ташлау (1. ҡарау)
ҡарғыш (ләғнәт)
ҡармау (ҡапшау)
**ҡарсыҡ**
**ҡартайыу**
ҡарун (һаран)
ҡарын асыу (асығыу)
ҡарындаш (һылыу)
ҡарыу (1. көс)
**ҡарышыу**
ҡаресле (яуыз)
**ҡасыу**
ҡат (мәртәбә)
ҡатар (йәнәшә)
ҡатҡаҡланыу (туңаҙыу)
ҡатҡыл (ҡатынҡы)
**ҡатлам**
ҡатлау (ҡатлам)
ҡаты (һаран)
**ҡатын**
**ҡатынҡы**
ҡатыу (өшөү)
ҡатыу (бысрау)
**ҡатышыу**
ҡауғалау (ҡысҡырыу)
**ҡауышыу**
ҡафтау арты (алыҫ)
ҡаһарман (батыр)
ҡиммәт (ҡыйбат)
ҡиәфәт (1. төҫ)

ҡойолдороҡ (әрпеш)
ҡойолоп төшөү (ҡурҡыу)
ҡойолоп төшөү (ҡаушау)
ҡойолоу (түгелеү)
**ҡойон**
ҡойоу (ҡушылыу)
ҡойоу (түгеү)
ҡойроҡ болғау (ялағайланыу)
ҡойроҡто төрөү (ҡасыу)
ҡойроҡто һыртҡа һалыу (ҡасыу)
ҡолаҡ ҡағыу (һемәйеү)
ҡолаҡсын (бүрек)
ҡолаҡты ослайтыу (тыңлау)
ҡолаҡты торғоҙоу (тыңлау)
ҡолаҡ һалыу (тыңлау)
ҡолау (тәгәрәү)
**ҡоллоҡ**
ҡомағай (бирән)
ҡомалаҡ ҡыштырҙау (1. көнләшеү)
ҡомдан арҡан ишеү (ел ҡыуыу)
ҡомһоҙ (һаран)
ҡон (үс)
ҡорғаҡһыу (1. кибеү)
ҡоро ҡалыу (һемәйеү)
ҡороу (1. кибеү)
ҡороу (2. кибеү)
ҡортҡа (ҡарсыҡ)
**ҡортлау**
ҡорһаҡ асыу (асығыу)
ҡушылыу (ҡауышыу)
ҡобара осоу (ҡурҡыу)
ҡорҙаш (йәштәш)
ҡороу (1. төҙөү)
ҡороу (2. төҙөү)
**ҡот**
ҡот (бәхет)
ҡотайыу (1. уңыу)
ҡот оскос (ҡурҡыныс)
ҡот осоу (ҡурҡыу)
**ҡотҡарыу**
ҡотко (отко)
**ҡотлау**
ҡотолдороу (ҡотҡарыу)
ҡотолоу (тыуҙырыу)
ҡотолоу (арыныу)
ҡотһоҙ (ямаҡ)
ҡояшлы (сыуаҡ)
ҡөҙрәт (1. көс)
ҡубыу (ҡуҙғалыу)
**ҡуҙғалыу**
ҡуҙыу (ҡуҙғалыу)
ҡуйында йылан аҫрау (асыу тотоу)
ҡуйында таш йөрөтөү (асыу тотоу)
ҡуйыу (ерләү)
ҡуҡыр (маҡтансыҡ)
ҡуҡырайыу (маҡтаныу)
ҡулай (уңай)
**ҡул сабыу**
ҡулға төшөрөү (эләктереү)
**ҡулсыр**
**ҡултамға**
ҡундырыу (һуғыу)
ҡупайыу (1. маҡтаныу)
**ҡупшы**
ҡупырайыу (1. маҡтаныу)
**ҡурҡаҡ**
**ҡурҡыныс**
**ҡурҡыу**
**ҡурсалау**
ҡурсалау (яҡлау)
**ҡурыу**
ҡурышыу (2. кибеү)
**ҡусты**
ҡутарыу (аҡтарыу)
ҡуш (пар)
ҡуш йөрәкле (батыр)
ҡуштанланыу (ялағайланыу)
**ҡушылыу**
ҡушыу (бойороу)
ҡуян йөрәкле (ҡурҡаҡ)
**ҡыбырҙау**
**ҡыҙғаныс**
ҡыҙғаныу (1. көнләшеү)
ҡыҙғаныу (йәлләү)
ҡыҙҙырыу (әрләү)
ҡыҙҙырыу (ҡурыу)
**ҡыҙыҡ**
ҡыҙыҡ (ғәжәп)
ҡыҙыл этәс осороу (яндырыу)
ҡыҙыу (эҫе)
ҡыҙыл юл (абзац)
ҡыҙыулау (ашығыу)
ҡыҙыулатыу (ашыҡтырыу)
**ҡый**
ҡый-ҡыпыр (ҡый)
ҡыймылдау (ҡыбырҙау)
**ҡыйбат**
ҡыйратыу (1. ватыу)
ҡыйшайыу (үсегеү)
**ҡыйын**
ҡыйынлыҡ (ауырлыҡ)
ҡыйынлыҡ (ыҙа)
ҡыйыҡ (ҡыйыш)
ҡыйырһытыу (1. ҡағыу)
**ҡыйыш**
ҡыйыу *к.* (баҙыу)
ҡыйыу *с.* (батыр)
**ҡыйышыу**
ҡылйыуғыс (ялағай)
ҡылтайыу (үсегеү)

ҡылтымбай (үсексән)
ҡылыҡ (холоҡ)
ҡымйыу (мыжғыу)
ҡымшаныу (ҡыбырҙау)
ҡытыҡ килеү (1. көнләшеү)
**ҡырҡа**
ҡырҡһаң ҡаны сыҡмаç (һаран)
**1. ҡырҡыу**
**2. ҡырҡыу**
**ҡырыç**
ҡырылыу (үлеү)
ҡырыу (үлтереү)
**ҡысҡырыу**
**ҡыçылыу**
ҡыуаныс (шатлыҡ)
**ҡыуаныу**
ҡыуарыу (2. кибеү)
**ҡыуыу**
ҡыуыу (сабыу)
ҡырҡҡа бирәү тулмаған (ахмаҡ)
ҡыçан (2. тар)
ҡыçтау (1. тар)
ҡыçҡа (тоҡор)
ҡыçтау (2. тар)
ҡыçыҡ (1. тар)
ҡыçыҡ (2. тар)
ҡыçынҡы (1. тар)
ҡыçынҡы (2. тар)
ҡыуыу (һөрөү)
ҡәберлек (зыярат)
ҡәбер эйәһе булыу (үлеү)
ҡәҙер (хөрмәт)
ҡәҙерле (һөйөклө)
ҡәрҙәш (туған)
ҡәҙәрле (тикле)
ҡәһәр (ләғнәт)

## Л

лаҡылдау (һөйләнеү)
ларылдау (ҡысҡырыу)
лауылдау (ҡысҡырыу)
лығырҙау (һөйләнеү)
**ләғнәт**
ләззәт (кинәнес)
ләм-мим (өндәшмәү)
ләңкелдәү (һөйләнеү)
ләпелдәү (һөйләнеү)
ләстит һатыу

## М

маҙаға тейеү (борсоу)
маҙаны алыу (борсоу)
маҙаны боҙоу (борсоу)
**маҙаланыу**
маҙаһыҙлау (борсоу)
майлап һалһаң эт ашамаç (ямаҡ)
маҡау (аңра)
**маҡсат**
**маҡтансыҡ**
**1. маҡтаныу**
**2. маҡтаныу**
**маҡтау**
мал (милек)
малахай (бүрек)
мандыу (1. уңыу)
мансыу (еүешләү)
маныу (һуғыу)
**матур**
маһайыу (1. маҡтаныу)
маһайыу (2. маҡтаныу)
менеү (1. артылыу)
менеү (атланыу)
мең бәлә менән (саҡ)
**меçкен**
миҙгел (1. ваҡыт)
**милек**
минән киткәнсе, эйәһенә еткән-
се (арлы-бирле)
мин-минләнеү (маҡтаныу)
миңрәү (аңра)
миçал (1. өлгө)
михнәт (ыҙа)
моңайыу (бойоғоу)
моңһоҙ (һиңмай)
моңһоу (бойоҡ)
морат (маҡсат)
морон (танау)
морон күтәреү (1. маҡтаныу)
мороно һуҙылған (бойоҡ)
морон төртөү (ышаныу)
мөғәллим (уҡытыусы)
мөкиббән китеү (бирелеү)
мөлкәт (милек)
мөләйем (һөйкөмлө)
мөнйөү (кимереү)
мөңкөлдәү (һөйләнеү)
мөрхәтһенеү (хушһыныу)
мөрәжәғәт итеү (өндәшеү)
мөхит (тирә-яҡ)
мөшкөл (2. насар)
мүкәйләү (имгәкләү)
мығырҙау (һөйләнеү)
**мыжғыу**
мыжлау (мыжғыу)
**мыжыҡ**
**мыҡты**
мырҙа (ҡусты)
мыçҡыллау (хурлау)
**мыштыр**
мыштырҙау (яйлау)

мәғлүм (билдәле)
мәғрур (ғорур)
мәҙәк (ҡыҙыҡ)
мәкерле (яуыз)
мәл (ваҡыт)
мәңге (гел)
мәңгелек йоҡоға китеү (үлеү)
мәңгелеккә китеү (үлеү)
**мәртәбә**
мәмәй (мәшәү)
мәмәй ауыҙ (мәшәү)
мәртәбә (абруй)
мәрхүм булыу (үлеү)
мәрхәмәт (шәфҡәт)
мәрәкә (ҡыҙыҡ)
мәсекәй (бирән)
мәсхәрәләү (хурлау)
мәшһүр (атаҡлы)
**мәшәү**
мәтәлләү (тәгәрәү)
мәшәкәт (хәстәр)

# Н

**наҙан**
наҙлы (иркә)
наҡыҫ (əҙ)
нарыҡлау (баһалау)
**1. насар**
**2. насар**
ниғмәт (аҙыҡ)
ни рәүешле (нисек)
**нисек**
нисек етте шулай (арлы-бирле)
нисә (2. күпме)
нисәмә (2. күпме)
нисәү (1. күпме)
нишан (сәп)
**ниәт**
ниәт (маҡсат)
нотоҡ (телмәр)
нужа (ыҙа)
**нығыныу**
**ныҡлап**
**ныҡышыу**
**нәжәғәй**
нәзәкәтле (матур)
нәҡ (тас)
нәсәп (нәҫел)
**нәҫел**
**1. нәтижә**
**2. нәтижә**
**нәүбәт**
нәфис (матур)

# О

оҙайлы (оҙаҡ)
**оҙаҡ**
оҙаҡламай (тиҙҙән)
оҙон (оҙаҡ)
**оҙон**
оҙон ҡуллы (ҡулсыр)
**ойоҡбаш**
ойоу (йоҡомһорау)
**ойпаланыу**
окопташ (яуҙаш)
олаҡтырыу (бәреү)
оло (1. ҙур)
оло (2. ҙур)
оло (3. ҙур)
олоғайыу (ҡартайыу)
ололау (ҙурлау)
ололоҡлау (ҙурлау)
онтау (ваҡлау)
**оран**
ором (нәҫел)
ороноу (1. тейеү)
оронсаҡ (ҡулсыр)
оронсоҡ (ҡамасау)
оронсоҡлау (ҡамасаулау)
ороу (бәреү)
ороу (һуғыу)
орошоу (әрләү)
осҡолоҡ тотоу (тамаҡ сағырыу)
**оскон**
оскор (етеҙ)
ослау (тамамлау)
осона сығыу (тамамлау)
осоноу (1. маҡтаныу)
осор (1. ваҡыт)
**осрау**
остоҡ (бәләкәй)
осһоҙ (арзан)
осһоҙ-ҡырыйһыҙ (икһеҙ-сикһеҙ)
оҫол (таҫыл)
**отко**
откор (зирәк)
**офоҡ**
официаль (рәсми)
**оялыу**
**оятһыҙ**
оятһыныу (оялыу)

# Ө

**өгөт**
өгөт-нәсихәт (өгөт)
өҙгөләнеү (ҡайғырыу)
өҙгөләнеү (өлтөрәү)
**өҙлөкһөҙ**

өҙөшөү (ҡыйышыу)
өйкөләү (йыйылыу)
өйлә (төш)
өйөрмә (ҡойон)
**өйөрөләү**
**1. өйрәнеү**
**2. өйрәнеү**
өй эсе (ғаилә)
**1. өлгө**
**2. өлгө**
өлгө (күҙгәнәк)
өлгөр (етеҙ)
**1. өлгөрөү**
**2. өлгөрөү**
өлгөрөү (1. бешеү)
өлгөрөү (етеү)
өлгөрөш (өлгәш)
**өлгәш**
өлкән (1. ҙур)
өлкән (2. ҙур)
өлкән (3. ҙур)
өлкәнәйеү (картайыу)
**өлтөрәү**
**өләшеү**
**өндәү**
**өндәшеү**
**өндәшмәү**
өркөү (ҡурҡыу)
өнәмле (һөйкөмлө)
өрөләү (4. ҡабарыу)
өрөү (иҫеү)
өҫ-баш (кейем)
**өҫтөн**
өҫтәлеү (артыу)
өҫтән-мөҫтән (арлы-бирле)
өтәләнеү (ашығыу)
өтәләү (ашыктырыу)
өтәҫләү (ашыктырыу)
өшкәмә (отҡо)
**өшөү**

## П

пак (1. саф)
палач (башкиҫәр)
**пар**
пар (боҫ)
парадоксаль (ғәжәп)
педагог (уҡытыусы)
персональ (шәхси)
почёт (хөрмәт)
**политика**
помещик (алпауыт)
поэзия (шиғриәт)
приказ (бойороҡ)
пробка (бөкө)
прогрессив (алдынғы)
продукт (аҙыҡ)

## Р

раҫ (дөрөҫ)
**реаль**
ризалашыу (күнеү)
риза булыу (күнеү)
ризыҡ (аҙыҡ)
рисуай итеү (хурлау)
**ришүәт**
рух (йән)
рәнйетеү (йәберләү)
**рәнйеү**
рәнйеү (ауырыу *и.*)
рәсем (һүрәт)
**рәсми**
рәт (мәртәбә)
**рәт**
рәт (саф *и.*)
рәткә һалыу (рәтләү)
рәтләнеү (һауығыу)
**рәтләү**
рәтләү (йүнәтеү)
рәттән (йәнәшә)
рәүешһеҙ (ямаҡ)
рәхимлек (шәфҡәт)
рәхәтлек (кинәнес)

## С

сабарман (сапҡын)
сабый (бала)
сабыр (сыҙамлы)
**сабыу**
сабыу (итәк)
сағыу (асыҡ)
саҙака (хәйер)
**сайкалыу**
**сайкау**
**саҡ**
саҡ (1. ваҡыт)
саҡлы (тикле)
сакырыу (өндәү)
сал (аҡ)
сала-сарпы (яҙа-йоҙа)
салауат күпере (йәйғор)
салҡыу (алсайыу)
салт (асыҡ)
салыҡлау (сайҡау)
**салыу**
салыш (ҡыйыш)
сама (ниәт)
**самалау**

сандыр (ябыҡ)
**саң**
**саңғы**
**сапҡын**
сапсан (етеҙ)
сапыҡ (етеҙ)
сара (әмәл)
**сараһыҙҙан**
сарбайлау (ҡысҡырыу)
**сарға**
сарсау (һыуһау)
сарыҡ бит (оятһыҙ)
сарылдаҡ (сарға)
сат (айыры)
сатан (аҡһаҡ)
сатҡы (оскон)
**сауҙа**
**1. саф** *с.*
**2. саф** *с.*
**саф** *и.*
сая (үткер)
селпәрәмә килтереү (2. ватыу)
семья (ғаилә)
серем итеү (йоҡомһорау)
сереү (ҡортлау)
серәнеү (тешләнеү)
серәшеү (ныҡышыу)
сибек (ябыҡ)
сибәр (матур)
**сигенеү**
сигеү (сигенеү)
сикәләү (туҡмау)
сикәнеү (ерәнеү)
сиҡаҡлау (тамаҡ саҡырыу)
сир (ауырыу *и.*)
сират (нәүбәт)
сиреү (ғәскәр)
сирканыу (ерәнеү)
сирләү (ауырыу *ҡ.*)
**сисеү**
**сит**
ситкә тибеү (1. ҡағыу)
ситләтеү (1. ҡағыу)
сихәт (шифа)
сихәтләнеү (һауығыу)
сокоу (ҡаҙыу)
солох (ярашыу)
сосолоу (һалбырау)
сосрау (һалбырау)
**сөй**
сөйөү (бәреү)
сөмбәй (сөмөкәй)
**сөмөкәй**
сөңгөл (сөмөкәй)
сөрләү (асығыу)
сөңкөлдәү (һөйләнеү)
суҡыныу (үлеү)
сурытыу (арттырыу)
**сүгеү**
сүгәләү (сүгеү)
сүкәйеү (сүгеү)
сүп (ҡый)
сүп-сар (ҡый)
сурайыу (һерәйеү)
сусайыу (һерәйеү)
сығанаҡ (шишмә)
сығынсылау (ҡарышыу)
сығыш (телмәр)
сығышһыҙ (һаран)
**сыҙамлы**
сыҙау (түҙеү)
сыйыу (һыҙыу)
сылатыу (еүешләү)
сырай (йөҙ)
**сырамытыу**
сыр-сыу (тауыш)
сырхау (ауырыу *и.*)
сырхау (ауырыу *ҡ.*)
**сыуаҡ**
сыуалсыҡ (буталсыҡ)
сыусыу (тертләү)
сәйен (тикле)
сәйер (ғәжәп)
сәйәсәт (политика)
сәлдереү (урлау)
сәләмәт (һау)
сәнселеү (үлеү)
**сәнсеү**
сәңгелдәк (бишек)
**сәп**
сәпәү (һуғыу)
сәркәш (еңмеш)
сәселеү (түгелеү)
сәсрәү (үлеү)
сәс үрә тороу (ҡурҡыу)

# Т

**табан**
табан ялау (ялағайланыу)
табан ялтыратыу (ҡасыу)
табиб (врач)
табынсы (аяҡсы)
табыу (тыуҙырыу)
**тағы**
тағатыу (һүтеү)
тағараҡ (ялғаш)
таҙа (1. саф)
таҙа (2. саф)
таҙа (мыҡты)
таҙа (һау)
таҙарыу (һауығыу)
таҙарыу (һимереү)
тайҙырыу (урлау)

**тайпылыу**
тайшаныу (тайпылыу)
тайыу (ҡасыу)
таҡылдау (һөйләнеү)
таҡыр (ҡаҡ)
таҡы-тоҡо (етер-етмәҫ)
талай (байтаҡ)
талаҡ ташыу (асыуланыу)
**талаш**
талғын (әкрен)
талпыныу (ашҡыныу)
талсығыу (арыу)
талыу (арыу)
**талымлау**
тамаҡ (аҙыҡ)
тамаҡланыу (ашау)
**тамаҡ саҡырыу**
тамаҡ туйҙырыу (ашау)
тамаҡ ялғау (ашау)
тамаҡ ярыу (ҡысҡырыу)
тамам (1. бөтөнләй)
**тамамлау**
тамаша ҡылыу (2. ҡарау)
тамашасы (күреүсе)
тамға (2. билдә)
тамсылау (тамыу)
тамыҙыу (һуғыу)
тамыр (нәҫел)
**тамыу**
тамыу (3. тейеү)
**танау**
танау сөйөү (1. маҡтаныу)
танау төшөү (бойоғоу)
танылған (атаҡлы)
таныу (кире ҡағыу)
**таныш**
таныш-белеш (таныш)
**таң беленеү**
таң ҡалыу (ғәжәпләнеү)
таң ҡыйылыу (таң беленеү)
таң һыҙылыу (таң беленеү)
тап (тас)
тап булыу (осрау)
тапҡыр (тәңгәл)
тапҡыр (мәртәбә)
**тапма**
**1. тар**
**2. тар**
тарамыш (ябыҡ)
таралыу (2. йәйелеү)
таратыу (өләшеү)
таратыу (һүтеү)
тараф (яҡ)
тарма (киндер)
тартай (ябыҡ)
тартҡылашыу (ҡыйышыу)
тартыу (һөйрәү)
тартыш (талаш)
тарыу (осрау)
**тас**
таҫма тел (ялағай)
**таҫыл**
таҫырайыу (ағайыу)
тат (тәм)
татлы (тәмле)
татлы тел (ялағай)
татыу (тәмләү)
тауыҡ суплаһә лә бөтөрлөк
түгел (күп)
**тауыш**
ташлау (бәреү)
ташыу (2. артылыу)
таш ҡорһаҡ (бирән)
таяныс (терәк)
таяу (терәк)
теге донъяға китеү (үлеү)
теҙ (тубыҡ)
теҙ сүгеү (2. буйһоноу)
**1. тейеү**
**2. тейеү**
**3. тейеү**
тейешеү (етешеү)
телде арҡыры тешләрҙәй булыу
(арыу)
телде йотоу (өндәшмәү)
текләү (2. ҡарау)
текәү (2. төҙәү)
телеңде йоторлоҡ (тәмле)
телеү (1. киҫеү)
телләшеү (әрепләшеү)
**телмәр**
тел сарлау (ләстит һатыу)
теләк (ниәт)
**теләнеү**
теңкәгә тейеү (йөҙәтеү)
теңкәне ҡоротоу (йөҙәтеү)
**тере**
терелеү (һауығыу)
теремек (етеҙ)
**тертләү**
**терәк**
терәлеү (һөйәлеү)
терәпес (еңмеш)
терәү (һөйәү)
тетелеү (1. туҙыу)
тетмәһен тетеү (туҡмау)
тетрәү (ҡалтырау)
теүәлләү (барлау)
теүәлләү (тамамлау)
тешегеү (өндәшмәү)
теш ҡайрау (асыу тотоу)
**тешләнеү**
теште ҡыҫыу (өндәшмәү)
теш тешкә теймәү (өшөү)

тибеү (1. ҡағыу)
тибеү (урлау)
тигеҙ (тиң)
тигенгә (бушҡа)
тигенгә (бушлай)
**тиҙ**
**тиҙҙән**
**тикле**
тиккә (бушҡа)
тиккә (бушлай)
тикмәгә (бушҡа)
тиктәҫкә (бушҡа)
тиктомалға (бушҡа)
тилбер (етеҙ)
тиле (ахмаҡ)
тинтәк (ахмаҡ)
тиң (йәштәш)
**тиң**
тиңдәш (йәштәш)
тиң-тош (йәштәш)
типһә тимер өҙөрлөк (1. көслө)
тирбәлеү (сайҡалыу)
тирбәтеү (бәүетеү)
тиргәү(әрләү)
тиреһе йоҡа (ялҡау)
тирә-йүн (тирә-яҡ)
**тирә-яҡ**
тиҫкәре (1. кире)
тиҫкәре (2. кире)
тиҫтер (йәштәш)
**тиҫтә**
тишек (ек)
тишек кәмәгә ултыртыу (алдау)
тойғо (хис)
тойҙороу (ашау)
**тойоу**
**тоҡаныу**
тоҡойоу (ҡасыу)
тоҡом (нәҫел)
**тоҡор**
тоҡос (тоҡор)
толҡа (ҡот)
**толом**
тома (3. бөтөнләй)
томана (наҙан)
томанлы (билдәһеҙ)
томра (бөркөү)
**томһарыу**
томшоҡ (танау)
тондороу (һуғыу)
топос (тоҡор)
**тормош**
тормош (ғүмер)
тормошҡа ашырыу (башҡарыу)
тормоштан китеү (үлеү)
тороу (йәшәү)
тороу (1. күтәрелеү)
тоҫҡау (1. төҙәү)
тоҫҡау (2. төҙәү)
тотҡарлау (ҡамасаулау)
**тотҡон**
**тотоноу**
тотоноу (2. йәбешеү)
тотоноу (башлау)
**тотоу**
тотоу (тотоноу)
тотош (тулыһынса)
тотошо (барыһы)
тотошлай (тулыһынса)
төбәлеү (2. ҡарау)
төбәү (тоҫҡау)
**төҙ**
**1. төҙөү**
**2. төҙөү**
төҙәлеү (уңалыу)
төҙәлеү (һауығыу)
төҙәнеү (1. биҙәнеү)
төҙәнеү (2. биҙәнеү)
төҙәтеү (йүнәтеү)
**1. төҙәү**
**2. төҙәү**
төймәләйҙе дөйәләй итеү (арт-
тырыу)
төйөү (ашау)
төйөү (туҡмау)
төкәлеү (бәрелеү)
төмһәйеү (томһарыу)
**төңөлөү**
төп башына ултыртыу (алдау)
төпләнеү (нығыныу)
төптө (2. бөтөнләй)
төрнәү (төрөү)
**төрөү**
төртөлөү (бәрелеү)
**1. төҫ**
**2. төҫ**
төҫ ҡасыу (ҡурҡыу)
төҫлө (1. кеүек)
төҫлө (2. кеүек)
төҫмөрләү (сырамытыу)
төҫһөҙләнеү (2. уңыу)
**төш**
төшөнөү (2. аңлау)
төшөп ҡалған (мәшәү)
**тубыҡ**
туҙан (саң)
туҙға яҙмаған (ялған)
туҙҙырыу (болартыу)
туҙҙырыу (бөтөрөү)
туҙыныу (2. туҙыу)
**1. туҙыу**
**2. туҙыу**
**туған**
туған-ҡәрҙәш (туған)

туған-тыумаса (туған)
туған-ырыу (туған)
**туйғансы**
туйҙырыу (йөҙәтеү)
туймаҫ күҙ (бирән)
туймаҫ тамаҡ (бирән)
туйымлыҡ (азыҡ)
туйыныу (ашау)
туйыу (2. биҙеү)
туйыу (ялҡыу)
туҡланыу (ашау)
**туҡмау**
туҡтау (1. тыныу)
туҡтауһыҙ (өҙлөкһөҙ)
туҡыу (тылҡыу)
тулҡыныу (сайҡалыу)
**тулыһынса**
**тумалаҡ**
тумпайыу (һерәйеү)
тура (тәңгәл)
түбәләү (туҡмау)
түбәнһетеү (кәмһетеү)
**туңаҙыу**
туңғаҡланыу (туңаҙыу)
туңыу (өшөү)
тупланыу (йыйылыу)
**туплау**
**тупһа**
**тура**
турау (ваҡлау)
турҫайыу (томһарыу)
түбә күккә тейеү (ҡыуаныу)
**түбәнселекле**
түгелеү (2. артылыу)
түтә (тура)
**түгелеү**
**түгеү**
түҙемле (сыҙамлы)
**түҙеү**
түңкәреү (3. ҡаплау)
**түшәү**
тығыҙ (2. тар)
тығылыу (ҡыҫылыу)
тығын (бөкө)
тығыныу (ашау)
**тыйнаҡ**
тыйыулы (тыйнаҡ)
**тылҡыу**
тымыу (1. тыныу)
тынсыу (бөркөү)
тыныс (һил)
тынысландырыу (йыуатыу)
тыныһыҙланыу (борсолоу)
тынысһыҙлау (борсоу)
**1. тыныу**
**2. тыныу**
**тыңлау**
тыңлаулы (күндәм)
тыңлаусан (арынһыҙ)
тыңлаусан (күндәм)
**тыуған ил**
тыу (байраҡ)
**тыуҙырыу**
**1. тыуыу**
**2. тыуыу**
тәртипле (тыйнаҡ)
тәбрикләү (ҡотлау)
тәбәнәк (тәпәш)
тәгәрмәскә таяҡ тығыу (камасаулау)
тәгәрәп йөрөп (ныҡлап)
тәҡдир (яҙмыш)
тәртипкә һалыу (рәтләү)
тәкәтте коротоу (йөҙәтеү)
**тәгәрәү**
тәкмәсеү (тәгәрәү)
тәкәббер (эре)
тәләфләү (бөтөрөү)
тәм итеү (тәмләү)
**тәмле**
**тәмләү**
**тәңгәл**
тәпәләнеү (ойпаланыу)
**тәпәш**
тәржемә итеү (тәржемәләү)
**тәржемәләү**
тәртәһе ерек (үсексән)
тәтеү (3. тейеү)
тәүҙә (башта)
тәүәккәл (батыр)
тәүәккәлләү (баҙыу)
тәрилкә тотоу (ялағайланыу)
тәрилкә ялау (ялағайланыу)
тәүфиҡлы (тыйнаҡ)
**тәьҫир**

# У

убыр (бирән)
уғата (бик)
**уғры**
уҙаҡ (пар)
уҙған йыл (былтыр)
уҙыу (үтеү)
уйҙырма (ялған)
уйпат (уйһыу)
**уйһыу**
**уҡытыусы**
ун (тиҫтә)
унан-бынан (арлы-бирле)
**уңай**
**уңалыу**
**уңған**
**1. уңыу**

**2. уңыу**
**уңыш**
урам тапау (ел ҡыуыу)
урау (төрөү)
**урлау**
урожай (уңыш)
уртаҡлашыу (бүлешеү)
уртаҡ тел табыу (2. килешеү)
**уҫал**
уҫлаптай (1. ҙур)
ут йотоу (ҡайғырыу)
утҡа баҫҡан бесәйҙәй булыу (ашығыу)
утлауыҡ (көтөүлек)
уттан алып һыуға һалыу (әрләү)
ут төртөү (яндырыу)
ут һалыу (яндырыу)
ут-һыу кискән (күпте күргән)
утыҙ туғыҙлы (ахмаҡ)
уяу (2. һаҡ)

## Ү

үгәйһетеү (1. ҡағыу)
үҙләшеү (эйәләшеү)
үҙ һүҙле (еңмеш)
үҙәк ялғау (ашау)
үҙәккә үтеү (йөҙәтеү)
үксә күтәреү (ҡасыу)
үкһеү (илау)
үлемесле булыу (арыу)
**үлеү**
**үлтереү**
үләкһә (емтек)
үпкә йөҙгәнсе (туйғансы)
**үпкәләү**
үрем (толом)
үреш (көтөүлек)
үрләү (һауалау)
үрләү (1. артылыу)
үрнәк (1. өлгө)
үрнәк (өлгө)
үртәнеү (асыуланыу)
үртәү (яндырыу)
үртәү (үсекләү)
үрәпсеү (алсайыу)
**үс**
**үсегеү**
үтенеү (инәлеү)
**үсекләү**
**үсексән**
**үсләшеү**
үтеп сыҡҡан (үткер)
үтес (бирәсәк)
**үтеү**
**үткер**
үтә (арҡыры)
үтә (бик)
үтәү (башҡарыу)

## Ф

фарман (бойороҡ)
фекер алышыу (һөйләшеү)
фекер йөрөтөү (уйлау)
фекерләү (уйлау)
флаг (байраҡ)
фырт (ҡупшы)
фәҡир (ярлы)
фәстереү (арттырыу)

## Х

хайран (бик)
хайран ҡалыу (ғәжәпләнеү)
хакимлыҡ итеү
хаҡ (дөрөҫ)
хаҡһыҙ (бушлай)
хараба (емереклек)
характер (холоҡ)
харап (бик)
харап булыу (үлеү)
хасланыу (үсләшеү)
хатта (бик)
хафаланыу (борсолоу)
хаяһыҙ (оятһыҙ)
хеҙмәт (эш)
**хис**
хисаплау (иҫәпләү)
хозурлыҡ (кинәнес)
**холоҡ**
хөкөм көтөү (хакимлыҡ итеү)
хөр (азат)
**хөрмәт**
хөрт (1. насар)
хөрт (2. насар)
хужа (эйә)
**хурлау**
**хушһыныу**
**хәжәт**
**хәйер**
хәйерселәү (теләнеү)
хәйер-саҙаҡа (хәйер)
**хәйләһеҙ**
хәл (1. көс)
хәлдә (көйөнсә)
хәлдән тайыу (арыу)
**хәлле**
хәл өҫтөндә ятыу (ауыры *ҡ.*)
хәлһеҙ (2. зәғиф)
хәлһеҙләнеү (арыу)
хәс (тап)
хәсрәт (1. ҡайғы)

хәсрәт (2. ҡайғы)
хәсрәтләнеү (ҡайғырыу)
**хәстәр**
хәстәрлек күреү (ҡайғырыу)
**хәтер**
хәтер ҡалыу (үсегеү)
хәтирә (иҫтәлек)
хәтле (тиклем)
хәтһеҙ (байтаҡ)
хәтәр (ҡурҡыныс)
хәүефләнеү (борсолоу)
хәшәрәт (әшәке)

## Һ

**һағалау**
һағыныу
**1. һаҡ**
**2. һаҡ**
**һалбырау**
һалҡын (һыуыҡ)
һалҡын ҡанлы (йыуаш)
һалпайыу (һалбырау)
һалыныу (һалбырау)
һалыу (сисеү)
һалыу (1. төҙөү)
һалыу (һуғыу)
һанап бөткөһөҙ (күп)
**һанау**
**һандуғас**
һантый (ахмаҡ)
һанһыҙ (күп)
һапалы (йыуаш)
**һаран**
һарҡыу (ауыш)
һармаҡлау (һупалау)
һарыу ҡайнау (асыуланыу)
һаҫыу (ҡортлау)
**һаҫыу**
**һау**
һауаланыу (1. маҡтаныу)
**һауалау**
һауалы (маҡтансыҡ)
һауалы (эре)
**һауығыу**
һелкеү (сайҡау)
**һелтәнеү**
һемереү (эсеү)
**һемәйеү**
**һеңле**
һеркәһе һыу күтәрмәү (үсегеү)
**һерәйеү**
һибелеү (түгелеү)
һиҙгер (1. һаҡ)
һиҙеү (тойоу)
һиҙҙереү (1. белдереү)
**һикереү**
**һил**
һил булыу (1. тыныу)
**1. һимереү**
**2. һимереү**
һин дә мин (яҡшы)
**һиңмай**
һирпелеү (түгелеү)
һис (2. бөтөнләй)
һоҡланғыс (матур)
һоҡланып туймаҫлыҡ (матур)
һоҡһор (бирән)
һомғол (матур)
һоноу (һуҙыу)
һонтор (оҙон)
һораныу (теләнеү)
һөҙөмтә (1. нәтижә)
һөҙөмтә (2. нәтижә)
**һөйкөмлө**
һөйкөмһөҙ (ямаҡ)
һөйкәлеү (һөйәлеү)
**һөйләнеү**
**һөйләшеү**
һөймәлекһеҙ (ямаҡ)
**һөйөклө**
**һөйөнөс**
**һөйөнөү**
**һөйөү**
**һөйрәү**
**һөйәлеү**
**һөйәү**
һөмһөҙ (оятһыҙ)
һөрлөгөү (һөрөнөү)
**һөрөнөү**
**һөртөү**
һөртөү (урлау)
һөртөү (юйыу)
һөрһөү (һаҫыу)
һөрәнләү (ҡысҡырыу)
һөрән һалыу (ҡысҡырыу)
һуғылыу (2. тейеү)
һуғылыу (бәрелеү)
**һуғыу**
**һуҙыу**
**һуҡмаҡ**
һулҡылдау (илау)
**һулыу**
һумпайыу (бойоғоу)
һунар (ау)
**һупалау**
һуң (аҙаҡ)
һуңғы (аҙаҡҡы)
һуш алыныу (иҫәңгерәү)
һүгеү (әрләү)
һүҙ беркетеү (вәғәҙәләшеү)
һүҙ бирешеү (вәғәҙәләшеү)
һүҙ көрәштереү (бәхәсләшеү)
һүҙ ҡатыу (өндәшеү)

һүҙ ҡуйышыу (вәғәҙәләшеү)
һүҙ кушыу (өндәшеү)
**һүрәт**
һүтеү (туҡмау)
**һүтеү**
һығылыу (1. бөгөлөү)
һығылыу (2. бөгөлөү)
һығымта (2. нәтижә)
һығыу (быуыу)
һыҙлау (1. ауыртыу)
һыҙлау (2. ауыртыу)
һыҙырыу (туҡмау)
**һыҙыу**
һыҙыу (ҡасыу)
һыҡмыр (һаран)
**һыйлау**
һыйпаныу (1. биҙәнеү)
**һыйыныу**
һыҡтау (2. ауыртыу)
һыланыу (1. биҙәнеү)
һылтыҡ (сатан)
һыпыртыу (ҡасыу)
һыу һөлөгө кеүек (матур)
һыуыныу (1. биҙеү)
һыҡтау (илау)
һыланыу (2. йәбешеү)
һылыу (матур)
һылыу (һеңле)
һымаҡ (1. кеүек)
һымаҡ (2. кеүек)
һын (кәүҙә)
**һынау**
һыптырыу (туҡмау)
һырығыу (һыйыныу)
һырыныу (һыйыныу)
һырт ҡайышын алыу (туҡмау)
һылау (еүешләү)
һылтау (япһарыу)
**һыуһау**
һыу эскеһеҙ булыу (арыу)
һыу эскеһеҙ итеү (туҡмау)
**һыуыҡ**
һыуыныу (1. биҙеү)
һәбеү (3. тейеү)
һәйбәт (яҡшы)
һәләк (бик)
һәләк булыу (үлеү)
һәләк итеү (үлтереү)
**һәләкәт**
һә тигәнсе (ҡапыл)
һәммәһе (барыһы)
һәп итеп (һемәйеү)
һәр ваҡыт (гел)
һәпрә (әрпеш)
**һәрмәү**
һәр саҡ (гел)
һәтәү (ахмаҡ)

# Ш

шаҡарыу (ҡайырыу)
шаҡ ҡатыу (ғәжәпләнеү)
шаҡтай (байтаҡ)
шаҡылдатыу (2. ҡағыу)
шаҡыу (2. ҡағыу)
шанлы (атаҡлы)
шамтыр (әрпеш)
шапшаҡ (әрпеш)
шапырыныу (арттырыу)
шапырыныу (2. маҡтаныу)
шар ҙа мар (хәйләһеҙ)
шаршы (ағын)
шаталаҡ (шаян)
шатланыу (ҡыуаныу)
**шатлыҡ**
шаукым (тәьҫир)
шау-шыу (тауыш)
шаһит (күреүсе)
**шаян**
шаштырыу (арттырыу)
шелтәләү (әрләү)
шешенеү (2. ҡабарыу)
шешенеү (3. ҡабарыу)
**шиғриәт**
**шик**
шик-шөбһә (шик)
шикелле (1. кеүек)
шикелле (2. кеүек)
шиңеү (һулыу)
**шифа**
**шишмә**
шойҡан (тәьҫир)
шом (шик)
шомло (ҡурҡыныс)
шөбһә (шик)
шөйлә (бик)
шөкәтһеҙ (яман)
шөр ебәреү (ҡурҡыу)
шөрләү (ҡурҡыу)
шөһрәт (дан)
шөһрәтле (атаҡлы)
шуҡ (шаян)
шуҡ ҡуллы (ҡулсыр)
шул ике арала (ҡапыл)
шунда уҡ (ҡапыл)
**шыбырҙау**
шыҡһыҙ (ямаҡ)
шыҡырайыу (өшөү)
**шылдырыу**
шылдырыу (урлау)
шылтайыу (ҡасыу)
шылыу (ҡасыу)
шымтайыу (2. тыныу)
шымыу (2. тыныу)
шыпа (2. бөтөнләй)

шыпа (3. бөтөнләй)
шырмай (шаян)
шыртлау (ҡурҡыу)
шыуҙырыу (шылдырыу)
шәбәйеү (һауығыу)
шәйләү (һағалау)
шәп (тиҙ)
шәп (һау)
шәп (яҡшы)
шәрбәтле (тәмле)
шәрә (ҡаҡ)
**шәфҡәт**
**шәхси**

# Ы

ығыш (мыштыр)
ығышыу (яйлау)
**ыҙа**
ыҙғыш (талаш)
ылаң (оран)
ылйырау (1. туҙыу)
ылығыу (эйәләшеү)
**ым**
ыңғайлау
ыңғайына тороу (йөпләү)
ыңғайына һыпырыу (йөпләү)
ырғытыу (бәреү)
ырғыу (һикереү)
ырыҫ (бәхет)
ырыу (нәҫел)
ысҡыныу (ҡасыу)
ысын (дөрөҫ)
ытырғаныу (ерәнеү)
ышыҡлау (2. ҡаплау)
ышаныс (инабат)
**ышаныу**

# Э

эҙәрлекләү (эҙәрләү)
**эҙәрләү**
эйелеү (1. бөгөлөү)
эйелеү (2. бөгөлөү)
**эйә**
эйәләү (эйәләшеү)
**эйәләшеү**
эйәләшеү (2. өйрәнеү)
экзамен (һынау)
элек (башта)
элемтә (бәйләнеш)
эләгеү (3. тейеү)
эләктереү (һуғыу)
**эләктереү**
эне (ҡусты)
эпоха (ваҡыт)

**эре**
эре (1. ҙур)
эреләнеү (1. маҡтаныу)
эркелеү (йыйылыу)
эрәүеү (ҡасыу)
эс-бауыр өҙөлөү (ҡайғырыу)
эс бошоу (ҡайғырыу)
**эсеү**
эскерле (яуыз)
эс көтөрҙәү (2. көнләшеү)
эсте ҡырыу (борсоу)
эстә ас бүре олоу (асығыу)
эстәлек (йөкмәтке)
**эҫе**
эҫенеү (2. өйрәнеү)
этлек (ыҙа)
эт тиреһен битенә ҡаплаған (оятһыҙ)
эт тиреһен битенә ҡаплау (хурлау)
эттән алып эткә һалыу (әрләү)
эт һуғарыу (ел ҡыуыу)
**эш**
эшлекле (уңған)
эшлекһеҙ (әрпеш)

# Ә

әбей (ҡарсыҡ)
**әҙ**
әҙәм (кеше)
әҙәпле (тыйнаҡ)
әзмәүерҙәй (1. ҙур)
әйҙәү (өндәү)
әйләнгән һайын (гел)
**әйләнеү**
әйләнеү (өйрөлөү)
әйләнә-тирә (тирә-яҡ)
әйтерһең (гүйә)
**әкрен**
әкренләү (яйлау)
әкәмәт (ғәжәп)
әлморон (гөлйемеш)
әләм (байраҡ)
әллә кем булыу (1. маҡтаныу)
әлһерәү (арыу)
әләкләү (үсекләү)
әмер (бойороҡ)
әмер биреү (бойороу)
**әмәл**
әңгәмәләшеү (һөйләшеү)
әпәй (икмәк)
**әрепләшеү**
**әрләү**
әрнеү (1. ауыртыу)
әрнеү (2. ауыртыу)
әрпетһеҙ (әрпеш)

**әрпеш**
әрәмгә (бушҡа)
әрәм-шәрәм итеү (бөтөрөү)
әсенеү (ҡайғырыу)
әсир (готҡон)
әсирлек (ҡоллоҡ)
**әсә**
әүен баҙарына китеү (йоҡлау)
**әүерелеү**
әүрәтеү (йыуатыу)
**әүрәү**
әүһәләнеү (ойпаланыу)
әүәл (башта)
әүәҫ (ихлас)
әшкәртеү (1. белдереү)
әшәке (1. насар)
**әшәке**

# Ю

юғалып ҡалыу (ҡаушау)
**юғалыу**
юғары (өҫтөн)
**юйыу**
юҡ итеү (үлтереү)
юҡҡа (бушҡа)
юҡҡа сығарыу (бөтөрөү)
юкты бушҡа ауҙарыу (ел ҡыуыу)
юл (мәртәбә)
юлға һалыу (рәтләү)
юлдан яҙған (аҙған)
юлдан яҙыу (2. аҙашыу)
юлығыу (1. аҙашыу)
**юрау**
юха (ялағай)
юхаланыу (ялағайланыу)

# Я

**ябығыу**
**ябыҡ**
ябыу (1. ҡаплау)
ябыу (2. ҡаплау)
ябыу (япһарыу)
яғалашыу (айпашыу)
яғылыу (буялыу)
яғымлы (һөйкөмлө)
**яҙа-йоҙа**
**яҙлығыу** (1. аҙашыу)
**яҙмыш**
яй (әкрен)
яйлау (рәтләү)
**яйлау**
яйлы (уңай)
яйман (мыштыр)
**яҡ**
**яҡлау**
яҡты донъянан китеү (үлеү)
яҡшатланыу (ялағайланыу)
**яҡшы**
ялағай (нәжәгәй)
**ялағай**
яланғас (ҡаҡ)
**ялағайланыу**
ялбарыу (инәлеү)
**ялған**
ялғанлау (алдау)
**ялғаш**
**ялҡау**
ялҡауланыу (йыбаныу)
ялҡытыу (йөҙәтеү)
**ялҡыу**
ялпашыу (тәгәрәү)
ялтаныу (тайпылыу)
**ялтырау**
ялыныу (инәлеү)
**ямаҡ**
яман (1. насар)
яманһыулау (бойоғоу)
янбашына күнәк элерлек (ябыҡ)
**яндырыу**
янтайыу (тайпылыу)
януар (кейек)
янъял (талаш)
яныу (ҡайғырыу)
яңынан (тағы)
**япһарыу**
ярайһы (байтаҡ)
яралыу (1. тыуыу)
яралыу (2. тыуыу)
ярамһаҡ (ялағай)
ярамһаҡланыу (ялағайланыу)
яратыу (һөйөү)
ярашыу (2. килешеү)
**ярлы**
ярлыҡау (кисереү)
**ярлыланыу**
ярма ярыу (2. маҡтаныу)
ярташыл (ахмаҡ)
ярты (йорто) яҙа (йоҙа)
яр һалыу (ҡысҡырыу)
ярыҡ (ек)
ярыу (туҡмау)
**яуҙаш**
ят (сит)
ят бауырлы (ҡырыҫ)
ятһытыу (ҡағыу)
яҫы (1. киң)
**яуыз**
яфа (ыҙа)
яһаныу (1. биҙәнеү)
яһил (уҫал)
яшыҡ (ябыҡ)

Зиннур Газизович Урак̡син

СЛОВАРЬ СИНОНИМОВ БАШКИРСКОГО ЯЗЫКА

Рецензенты Э. Ф. Ишбирҙин
Редакторы Ф. Х. Ғималова
Художество редакторы С. П. Ковалев
Техник редакторы Н. Г. Пятаева
Корректоры С. Ғ. Тулыбаева

ИБ № 2781

Наборға бирелде 25.01.85. Баҫырға к̡ул к̡уйылды 25.06.85. К̡ағыҙ форматы 84×108¹/₃₂. Әҙәби гарнитура. К̡алк̡ыу ысул менән баҫылды. Тип. к̡ағыҙы № 1. Шартлы баҫма таб. 8,61. Шартлы буяу отт. 8,77. Учет-изд. таб. 11,78. Тиражы 3500 экз. Заказ 200. Хак̡ы 60 тин.

Башк̡ортостан китап нәшриәте. Өфө-25, Совет урамы, 18.

Башкирское книжное издательство. Уфа-25, ул. Советская, 18.

Башк̡орт АССР-ы Нәшриәттәр, полиграфия һәм китап сауҙаһы эштәре буйынса дәүләт комитетының Өфө полиграфия комбинаты. Өфө-1, Октябрь проспекты, 2.